# ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ ТУҒАН

## ӘҪӘРҘӘР



# ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ ТУҒАН

# ӘҪӘРҘӘР

1917 йылға ҡәҙәр яҙылған әҫәрҙәре

ӨФӨ
«КИТАП»
1996

ББК 9
В 96

Тәржемәсеһе, аңлатмалар биреүсе,
библиографияны төҙөүсе һәм инеш һүҙ авторы
**Әхәт Сәлихов**

Фәнни мөхәррире
филология фәндәре докторы
**Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов**

**Әхмәтзәки Вәлиди Туған.**

В 96 Әҫәрҙәр: 1917 йылға ҡәҙәр яҙылған әҫәрҙәре / иҫке төрки теленән тәржемә. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996.— 216 бит.

ISBN 5-295-01541-6

Китапҡа танылған тарихсы, шәрҡиәтсе Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың илебеҙҙә һаҡта яҙған әҫәрҙәренең бер өлөшө тупланған. Йыйынтыҡҡа авторҙың «Йырҙарыбыҙ хаҡында», «Бөрйән башҡорттары араһында», «Ҡайһы милләттәнһең?», «Рус тарихи әҙәбиәтендә Мәрджәни», «Башҡорттарға ғаид яңы әҫәр», «Хәлфиндәр» исемле һәм башҡа хеҙмәттәре ингән. Улар ғалимдың киләсәктәге күп яҡлы эшмәкәрлегенең башланғыс осорон күҙ алдына килтерергә ярҙам итә.

Китаптың аҙағында әҫәрҙәргә аңлатмалар, Ә. Вәлиди хеҙмәттәренең библиографияһы бирелә.

Йыйынтыҡ төрки халыҡтарҙың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүселәргә һәм Ә. Вәлидиҙең ижады менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

В $\frac{0503020901-134}{М\ 121\ (03)-96}$ 9—96 ББК 9

ISBN 5-295-01541-6

Башҡортсаға тәржемә.
© Сәлихов Ә. Ғ., 1996

## ЙЫЛҒА ШИШМӘНӘН БАШЛАНА

*(Баш һүҙ урынына)*

Һәр ҙур йылға бәләкәй шишмәнән башлана, йыш ҡына исемен дә ул тәү башлап шунда ала. Артабан уға бәләкәй йылғалар ағып төшә һәм, ниһәйәт, үҙе лә, төрлө ерҙәр һәм илдәр аша ағып, берәй күлгә йәки диңгеҙгә барып ҡоя...

Әхмәтзәки Вәлидиҙең тормошо ла борма-борма юлдар үтеп аҡҡан һыу кеүек. Донъяға танылған мәшһүр ғалимдың тормош юлы Башҡортостандың Ишембай районы Көҙән ауылынан башлана. Атаһы Әхмәтшаһтан, олатаһы Үтәкиҙән, Ҡазанда «Ҡасимиә» мәҙрәсәһендә белем ала, төрки халыҡтар азатлығы өсөн көрәшеп, Башҡортостан, Урта Азия ерҙәрендә йөрөй. Һуңынан ул сит мәмләкәткә сығып китеп, Вена университетын тамамлап, башҡа заттарға ҡушылып китмәй, сит йоғонтоға бирелмәй, һәр ваҡыт үҙе булып ҡалып, белем, ғилем шишмәһен Төркиәгә алып барып «ҡоя».

Тотош бер ғилми институт эшен башҡарған һәм ул эште тикшереү өсөн тағы бер институт талап ителгән Әхмәтзәки Вәлидиҙең бөтә ғүмер юлы, уның фәнни ҡаҙаныштары, шишмәнән башланған ҙур йылға кеүек, Башҡортостандағы тормошо һәм эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйләнгән. Бөйөк шәхескә тейешле баһа биреү өсөн беҙ иң тәүҙә уның «йылға башын» ентекләп өйрәнергә бурыслыбыҙ. Шунда ғына ул беҙҙең алға тулы һыны менән килеп баҫасаҡ.

Әхмәтзәки Вәлиди илебеҙҙә саҡта уҡ илленән ашыу хеҙмәт яҙып ҡалдырған. Шуларҙың егерме бере ошо йыйынтыҡҡа инде. Уларҙың күбеһе, хәҙерге әҙәби телебеҙгә яраҡлаштырылып, тәү тапҡыр баҫыла. Йыйынтыҡҡа ингән әҫәрҙәр киң ҡарашлы, талантлы ғалимдың үҫеп килеүе тураһында һөйләп торалар.

Билдәле булыуынса, ҡомартҡыларҙың ҡиммәте һәм һиммәте — уларҙың төп нөсхәгә тура килеүендә. Бында ла әҫәр телен артыҡ башҡортлаштырыу маҡсат итеп ҡуйылманы, киреһенсә, авторҙың тел үҙенсәлектәрен мөмкин тиклем һаҡлап ҡалырға тырышылды. Шуға күрә текста ғәрәп, фарсы һүҙҙәре күп осрай, һөйләм төҙөлөштәре лә хәҙерге телебеҙҙән башҡасараҡ.

Был йыйынтыҡты төҙөгән, мәҡәләләрҙе иҫке төрки теленән хәҙерге телгә тәржемә итеп, уларға аңлатмалар биргән, Әхмәтзәки Вәлиди хеҙмәттәренең библиографияһын төҙөгән һәм ошо китапҡа инеш һүҙ яҙған

шәкертем Әхәт Сәлихов тураһында ла бер нисә һүҙ әйтеп китеү урынлы булыр, тип уйлайым.

Әхәт был тема өҫтөндә студент йылдарында уҡ эшләй башланы һәм уны, диплом эше итеп алып, бик уңышлы яҡланы. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә килгәс, был эште дауам иттерҙе. Һөҙөмтәлә ошо йыйынтыҡ хасил булды. Был уның тәүге ҙур хеҙмәте.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғилми мираҫын артабан өйрәнеү ниәте менән Әхәт Сәлихов хәҙерге көндә Төркиәлә белемен камиллаштыра. Яҙмыш уға ла оҙайлы һәм емешле фәнни эшмәкәрлек бүләк итһен ине!

Ә был китапты, ҡәҙерле уҡыусы, ҡуш ҡуллап тотоп: «Сыҡҡан ере шишмә булһын!» — тип һөйөнөп, ҙур кинәнес менән уҡып сығыуыңды теләйем.

Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов,
филология фәндәре докторы.

## ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИҘЕҢ ИЖАДИ МИРАҪЫ ҺӘМ УНЫ ӨЙРӘНЕҮ

Һәр халыҡта уның йөҙөн сағылдырған айырым шәхестәр була. Уларҙың тырыш, фиҙәкәр эшмәкәрлеге ул халыҡтың сәйәси һәм мәҙәни тормошонда юйылмаҫлыҡ тәрән эҙ ҡалдыра. Милләттең талантлы вәкилдәре уның үҫешенә ҙур йоғонто яһай. Башҡорт халҡының тарихында ҙур роль уйнаған шәхестәрҙең береһе — Әхмәтзәки Вәлиди. Тик беҙҙең илдә һуңғы йылдарға тиклем уның тормошона, фәнни һәм сәйәси эшмәкәрлегенә тейешле иғтибар бирелмәне. Совет власы хөкөм һөргән 70 йыл эсендә Ә. Вәлидиҙең исеме кире яҡтан ғына иҫкә алынды. Бындай рәсми ҡарашҡа нигеҙ тәү башлап 1922 йылдың 16—22 ғинуарында Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙған Башҡортостан РКП(б)-һының V конференцияһында һалынды[1].

Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы Вәлидов 1890 йылдың 10 декабрендә (иҫке стиль менән) Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең Көҙән ауылында тыуа (хәҙерге административ бүленеш буйынса был ауыл Башҡортостандың Ишембай районына ҡарай). Уның атаһы Әхмәтшаһ хәҙрәт мәҙрәсә тота. Ә. Вәлиди ғәрәп, төрки, рус телдәренең тәүге һабаҡтарын шунда ала. Фарсы телен ул әсәһе Өммөлхаят абыстайҙан өйрәнә. Һуңынан Ә. Вәлиди күренекле татар ғалимы Шиһабетдин Мәрйәниҙең шәкерте, әсәһе яғынан олатаһы Хәбибназар Үтәкиҙең мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә. Х. Үтәкиҙең ижады башҡорт әҙәбиәте тарихына ингән[2].

Артабан уҡыу теләге менән янған Әхмәтзәки 1908 йылдың йәйендә ата-әсәһенән йәшерен рәүештә ауылынан сығып китә. Тәүҙә ул Ырымбурға килә, унан Ҡазанға юллана. Бында Ә. Вәлиди «Ҡасимиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Бер йылдан «Ҡасимиә» мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң, уны төрки халыҡтарының тарихы һәм ғәрәп әҙәбиәте мөғәллиме сифатында ошо мәҙрәсәлә ҡалдыралар. Ошо йылдарҙан алып уның мәҡәләләре төрлө төрки газета һәм журналдарҙа донъя күрә башлай. «Хәтирәләр»енән күренеүенсә, ул 1907 йылда атаһының мәҙрәсәһендә астрономиянан дәрес бирә. Дәрестәрен Әхмәт һәм Сәйет

[1] Нурғәлин З. Билдәлелек яҡтыһында. Өфө, 1992. 24-се бит.
[2] Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда, 2-се том. XIX—XX быуат башы. Өфө, 137, 138-се, 140, 150, 158, 160-сы биттәр.

исемле икәүҙең һорау-яуабы кеүек итеп яҙа. Ошо эшен Ә. Вәлиди «минең иң тәүге яҙған хеҙмәтем» тип баһалай[1]. Һүҙ ыңғайында уның ололар һөйләгән төрлө булған хәлдәрҙе, хикәйәттәрҙе яҙып ала торған гәҙәте булыуын әйтеп үтәйек[2]. Оҙаҡ йылдарҙан һуң яҙылған автобиографик әҫәре «Хәтирәләр»ҙә ул үҙенең иң тәүге баҫылған хеҙмәттәре хаҡында ла мәғлүмәт бирә. Ә. Вәлиди уларҙы Әстрханда сыҡҡан «Иҙел» газетаһында баҫтыра. Мәҡәләләре хаҡында ул: «Улар газета мәҡәләләре булһа ла, минең беренсе ғилми әҫәрҙәрем ине. Иң әүәл Морат Рәмзиҙең иҫкә алынған әҫәрен [Тәлфиҡ әл-әхбәр] тикшереп һәм тәнҡит итәрәк бер мәҡәлә баҫтырып сығарҙым»,— тип яҙа[3].

Артабан Ә. Вәлидиҙең хеҙмәттәре Ырымбурҙа нәшер ителгән «Шура» журналында һәм «Ваҡыт» газетаһында, Ҡазанда сыҡҡан «Сөйөмбикә» һәм «Мәктәп» журналдарында, Өфөлә донъя күргән «Тормош» газетаһында баҫыла башлай.

1912 йылда уның «Төрк вә татар тарихы» исемле тәүге китабы сыға. Бер йылдан һуң Ә. Вәлидиҙе, тарих өлкәһендәге хеҙмәттәр авторы буларак, Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең ысын ағзаһы итеп һайлайҙар[4]. 1913—1914 йылдарҙа ул ике мәртәбә Урта Азияға боронғо көнсығыш ҡулъяҙмаларын өйрәнеү өсөн командировкаға бара. Уңышлы үткән был сәйәхәттәрҙең һөҙөмтәләре төрки телле матбуғатта һәм рус фәнни баҫмаларында яҡтыртыла.

1916 йылдан алып Ә. Вәлиди илебеҙҙең сәйәси тормошонда ҡатнаша башлай. Тик был эшмәкәрлек уның фәнгә ынтылышын һүндермәй. Шаулы революция йылдарында ул күренекле дәүләт эшмәкәре булып китә, В. И. Ленин, Троцкий, Керенский кеүек сәйәсмәндәр менән осраша һәм хеҙмәттәшлек итә. Ул төрки халыҡтарҙың, бигерәк тә башҡорт халҡының артабанғы яҙмышы хаҡында уйлана, Башҡортостандың үҙаллылығы өсөн ныҡлы көрәш байрағын күтәрә. Совет власы еңеп, илдә большевиктар диктатураһы нығына башлағас, Вәлиди көрәште ситтән тороп алып барыу өсөн Төркөстанға юллана, һуңынан сит илгә сығып китергә мәжбүр була. Илдә ҡалған туғандары һәм көрәштәш дуҫтары репрессияға эләгә.

Сит илдә йәшәгән дәүерҙә Ә. Вәлиди төрки халыҡтарҙың тарихын өйрәнеүҙе дауам итә. Эмиграцияла нәшер иткән хеҙмәттәренең географияһы тағы ла киңәйә, һәм улар донъяның төрлө илдәрендә баҫылып сыға. Мәҫәлән, Әхмәтзәки Вәлиди 1950 йылдан алып 1970 йылға тиклем Төркиәлә үткәрелгән ғилми конференцияларҙан тыш башҡа ил-

---

[1] Туған Ә. З. В. Хәтирәләр // Ағиҙел. 1991. № 2, 168-се бит.
[2] Был хаҡта Ә. Вәлиди 1915 йылда «Сөйөмбикә» журналында «Мәрҗәни хаҡында кескенәлегемдә яҙған бәғзе нәмәләр мөнәсәбәте менән» исемле мәҡәләһендә яҙа.
[3] Туған Ә. З. В. Хәтирәләр // Ағиҙел. 1991. № 2, 168-се бит.
[4] Известия общества Археологии, истории и этнографии при императорском Казанском университете. Т. 29. Вып. 1—3. Казань, 1915.

дәрҙә булып үткән 28 ғилми конференцияла ҡатнаша[1]. Уның ошо конференция материалдарын ғына ла айырым китап итеп баҫтырып булыр ине.

Тормош юлында осраған ҡаршылыҡтарҙы үтеп, Ә. Вәлиди донъя күләмендә танылыу яулай. Ул 1970 йылдың 26 июлендә Төркиәлә вафат була.

* * *

Ә. Вәлидиҙең тормошон һәм фәнни мираҫын өйрәнеүҙе сит ил ғалимдары башланы. 1951 йылда Истанбулда Ә. Вәлиди Туғандың 60 йәше тулыу айҡанлы Көнсығышты өйрәнеүселәрҙең халыҡ-ара конференцияһы үтә. 30 йылдан һуң Берлинда Клаус Шварц нәшриәтендә Фридрих Бергдольттың «Төрөк тарихсыһы Әхмәт Зәки Вәлиди Туғандың рухи нигеҙҙәре: уның «Хәтирәләр»е буйынса» исемле китабы донъя күрә. Төркиәлә Вәлидиҙең историографияһына уның уҡыусыһы, Измир ҡалаһындағы Эгей университетының профессоры Тунжер Байҡара ҙур өлөш индерә. Ул үҙенең остазы хаҡында күп мәҡәләләр яҙа. 1989 йылда «Бөйөк төрөктәр» серияһында уның «Зәки Вәлиди Туған» исемле китабы сыға. Был автор хеҙмәттәрендә Ә. Вәлидиҙең «Хәтирәләр»ен киң файҙалана, уны «бай сығанаҡ» тип баһалай[2].

Ә. В. Туғандың исеме үҙенең Тыуған илендә тиҫтәләгән йылдар буйы тыйылып килеү сәбәпле, уның исеме баҫма биттәрҙә тик һуңғы йылдарҙа ғына күренә башланы. Уның тормошон һәм ижадын өйрәнеү эше Башҡортостан, ғөмүмән Рәсәй фәне өсөн яңы башланды, тиһәк тә, яңылышмабыҙ.

Беҙҙең илдә Ә. Вәлидиҙең эшмәкәрлеген, тәүгеләрҙән булып, филология фәндәре докторы Ғайса Хөсәйенов яҡтыртты. 1990 йылда «Ағиҙел» журналының 3-сө һанында уның «Тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди Туған» исемле мәҡәләһе баҫылды.

Әмир Юлдашбаев та — ошо тема буйынса тәү башлап эҙләнеүҙәр башлаған ғалимдарҙың береһе. Республикабыҙ газета-журналдарында, фәнни баҫмаларҙа уның байтаҡ мәҡәләһе донъя күрҙе. Ул Ә. Вәлидиҙең быға тиклем бер ҡайҙа ла баҫылмаған «Башҡорттарҙың тарихы» исемле ҡулъяҙмаһын башҡортсаға әйләндерҙе. Был хеҙмәт авторҙың Әхәт Вилданов тарафынан тәржемә ителгән тәүге ҙур әҫәре — «Төрк һәм татар тарихы» (Ҡазан, 1912) менән бергә 1994 йылда айырым китап булып сыҡты. Ә. Юлдашбаев Әхмәтзәки Вәлидиҙең «Хәтирәләр»-ен тәржемә итеүҙе лә үҙ өҫтөнә алды.

Ә. Вәлиди ижадын өйрәнеү йәһәтенән Өфөлә 1990 йылдың 20—21 декабрендә Ә. Вәлидиҙең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара фәнни конференцияның да әһәмиәте ҙур булды. Бында сығыш

[1] Туғ Салих. Бөйөк ғалим Туған / Ислам тикшеренеүҙәре институты журналы. IV том. 3—4-се сығ., 1971. 5-се бит.

[2] Ҡарағыҙ: Байҡара Т. Зәки Вәлиди Туған. Анкара, 1989. 66-сы бит.

яһаған ғалимдар Әхмәтзәки Вәлидиҙең ижади мираҫын өйрәнеү буйынса күп тәкдимдәр индерҙеләр[1]. Өфөлә 1992 йылдың сентябрендә үткәрелгән «Беренсе Вәлиди уҡыуҙары» ла иғтибарға лайыҡ. Үрҙә ҡыҫҡа ғына әйтелгәндәрҙән тыш, республикабыҙ һәм Рәсәй матбуғатында, төрлө китаптарҙа Әхмәтзәки Вәлиди хаҡында бик күп материал баҫылды. Уларҙың авторҙары мәшһүр ғалимдың тормошон һәм ижадын өйрәнеүгә үҙ өлөшөн индерә.

Ә. Вәлидиҙең әҙәби мираҫын һәм тормош юлын өйрәнеүгә ныҡ иғтибар бирелһә лә, был өлкәлә күп эшләйһе бар әле. Төрлө ил ғалимдарының һуңғы йылдарҙа башланған бергәләшеп эшләүе был мәсьәләне хәл итеүҙә ҙур файҙа килтерер, тип ышанабыҙ.

* * *

Әхмәтзәки Вәлиди хеҙмәттәренең дөйөм һаны 400-гә яҡын. Уларҙың күләмдәре лә төрлөсә. Араларында бәләкәй генә мәҡәлә лә, 600 битлек китап та бар. Ә. Вәлиди әҫәрҙәренең иң тәүге исемлеге (библиографияһы) 1934 йылда Истанбулда донъя күргән «Ҡом аҫтындағы 17 ҡала һәм Саҙри Мәҡсүди бей» тигән китабына ҡушымта рәүешендә «Яҙыусының ҡыҫҡаса библиографияһы» тигән мәҡәләлә бирелгән. Бында баҫылған — 64 һәм баҫылырға әҙерләнгән 11 әҫәренең исеме күрһәтелгән.

Ә. Вәлидиҙең тыуыуына 60 йыл тулыу айҡанлы уға арнап Истанбулда «Зәки Вәлиди Туғанға бағышланған» тигән 500 битлек йыйынтыҡ донъя күрә. (Һүҙ ыңғайында шуны әйтеп үтергә кәрәк, Төркиәлә ғалимдарға бағышлап махсус йыйынтыҡтар, журналдарҙың айырым һандары сығарыла. Ә. Вәлиди ижадына арналған бер нисә журнал да донъя күргән). Телгә алынған баҫманың үҙенсәлеге шунда: ул Ә. Вәлиди иҫән саҡта донъя күргән. Был йыйынтыҡта Герберт Янскиҙың ғалимдың тормошо һәм ғилми эшмәкәрлеге хаҡында мәҡәләһе һәм Чағатай Улучай менән Мартин Диксон тарафынан әҙерләнгән Ә. Вәлиди әҫәрҙәренең исемлеге баҫылған. Библиографияла ғалимдың донъя күргән — 160 һәм баҫылмаған 36 хеҙмәте тураһында мәғлүмәт килтерелгән. Ошо библиографияға һәм Мартин Диксондың яҙмаларына таянып, күренекле ғалим Әбделҡадир Инан «Профессор, доктор Зәки Вәлиди Туғандың фәнни эшмәкәрлеге» тип исемләнгән бер мәҡәлә яҙа. Ул мәҡәлә Ә. Инан һәм М. Диксон имзалары менән 1956—1957 йылдарҙа «Төрөк йорто» журналында (262—264-се һандарҙа) баҫылған.

Быларҙан тыш, ғалимдың Төркиәлә 1969 йылда донъя күргән «Хәтирәләр»енән уның 1925 йылға тиклем яҙған әҫәрҙәре тураһында байтаҡ мәғлүмәт алып була. Вәлидиҙең тормош юлын һәм ижадын

---

[1] Ураҡсин З. Ғ. Ҡайтыуың менән: (профессор Ә. В. Туғандың тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышланған фәнни конференция) // Ағиҙел. 1991. № 3. 110—113-сө биттәр. Һуңынан конференция материалдары «Востоковедение в Башкортостане. История. Культура» исемле йыйынтыҡта (Өфө, 1992) баҫылды.

өйрәнеүселәр бик йыш уның «Хәтирәләр»енә мөрәжәғәт итә. Уларҙың араһынан бер нисәһен айырып күрһәтеп киткебеҙ килә.

1. Эсин Сәйфулла. Мәрхүм профессор, доктор Зәки Вәлиди Туғандың «Хәтирәләр» исемле әҫәре // Ислам тикшеренеүҙәре институты журналы. IV том. 1971, 3—4-се сығарылыш, 7—17-се биттәр.

2. Бергдольт Фридрих. Төрөк тарихсыһы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың рухи нигеҙҙәре: уның «Хәтирәләр»е буйынса. Берлин. 1981, 139 бит.

3. Юлдашбаев А. М. Воспоминания Валидова как источник изучения истории и культуры башкирского народа // Востоковедение в Башкортостане: История. Культура. Часть I.— Уфа, 1992, с. 54—60.

4. Касимов С. Ф. «Хатиралар» («Воспоминания») Ахметзаки Валиди Тугана как ценнейший источник по истории национально-государственного строительства в Башкортостане // Востоковедение в Башкортостане: История. Культура. Часть II.— Уфа, 1992, с. 22—24.

Был исемлеккте Ә. Вәлиди «Хәтирәләр»енең мөһимлеген күрһәтер өсөн килтерҙек. Уларҙың араһында, әлбиттә, Фридрих Бергдольттың докторлыҡ диссертацияһы булған китабы иң мөһимелер.

Ә. Вәлидиҙең уҡыусыһы Тунжер Байҡара үҙенең остазы хаҡында байтаҡ хеҙмәттәр яҙған. Уның тарафынан төҙөлгән һәм Туғандың 337 әҫәрен (ҡайһы бер номерҙар хәрефле тамғалар аша ҡабатлана) үҙ эсенә алған библиография Ататөрк университетының (Эрзурум ҡалаһында урынлашҡан) Фән-әҙәбиәт факультеты тикшеренеүҙәр журналының Вәлидигә бағышланған һанында баҫылған, «Ә. Зәки Вәлиди Туғандың тормошо һәм әҫәрҙәре» тип исемләнә. Был хеҙмәт Ә. Вәлидиҙең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы 1990 йылда Өфөлә рус телендә һәм оригиналдағыса донъя күрҙе. Ул Р. М. Булгаков тәржемәһе, баш һүҙе, аңлатмалары менән З. Ғ. Ураҡсин редакторлығында сыҡҡан. Йыйынтыҡ «Ахмет Заки Валиди Туган. 1890—1990. Материалы к изучению жизни и творчества» тип атала.

Ошо баҫманы һәм 1917 йылға тиклем сыҡҡан ваҡытлы матбуғат материалдарын, фәнни китапханаларҙағы каталогтарҙы файҙаланып, татар тарихсыһы Рауил Әмирханов татар телендә Ә. Вәлидиҙең библиографияһын төҙөгән. Был библиографияла 362 әҫәр теркәлгән. Ул Ә. Вәлидиҙең, Р. Әмирханов тарафынан әҙерләнеп, 1992 йылда Ҡазанда донъя күргән «Ҡыҫҡаса төрөк-татар тарихы» исемле китабында бирелгән.

Үрҙә телгә алынған Ататөрк университеты журналында «Ә. Зәки Вәлиди Туғандың үҙенең классификацияһына күрә архивы» һәм «Туғандың баҫылмаған әҫәрҙәре хаҡында мәғлүмәттәр» бирелгән. Улар ғалимдың ҡатыны Нәзмиә ханым, ҡыҙы Иҫәнбикә Туған һәм уҡыусыһы Тунжер Байҡара тарафынан әҙерләнгән. Ә. Вәлидиҙең баҫылмаған әҫәрҙәре тураһында «Бөгөнгө Төркөстан һәм яҡын тарихы» китабында ла ҡайһы бер мәғлүмәттәр килтерелгән (1981, 2-се баҫма, 210-сы бит).

Бынан тыш, Тунжер Байҡара тарафынан яҙылып, «Бөйөк төрөктәр» серияһында баҫылған «Зәки Вәлиди Туған» (Анкара, 1989) исем-

ле китапта ла ғалим әçәрҙәренең библиографияһы бирелгән. Был китабы өсөн Т. Байҡара Башҡортостандың фәнни, ижтимағи һәм эшҡыуарҙар ойошмалары тарафынан булдырылған Ә. В. Туған исемендәге премияның беренсе лауреаты исеменә лайыҡ булды.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең библиографияһы менән миңә лә шөғөлләнергә тура килде. Тәүҙә уның илдәге дәүерҙә яҙған әçәрҙәренең исемлеге өçтөндә эшләнем. Сөнки үрҙә телгә алынған хеҙмәттәрҙә был исемлек тулы түгел ине. Күп кенә әçәрҙәрҙең исемдәре һәм баçылған йылдары дөрөç күрһәтелмәгәйне. Был әйтелгәндәр, әлбиттә, Р. Әмирханов библиографияһына бик үк ҡағылмай. Ул төҙөгән библиографияла Ә. Вәлидиҙең Октябргә тиклем яҙылған әçәрҙәренең исемдәре бер аҙ төҙәтелеп, унда күберәк әçәрҙәр ингән. Әммә был библиография ла тулы түгел. Шуның өсөн булһа кәрәк, уны төҙөүсеһе «Зәки Вәлиди хеҙмәттәренең ҡыçҡаса библиографияһы» тип атаған. Артабан, Р. Әмирхановтыҡынан тыш бөтә булған библиографияларҙы ҡулланып, яңы материалдар өçтәп төрөк телендә бер библиография төҙөнөм. Ул 1994 йылдың декабрендә Төркиәлә баçылып сыҡты. Шулай итеп, Ә. Вәлидиҙең библиографияһы өçтөндә эштәр дауам итә. Киләсәктә уның тормошо, эшмәкәрлеге һәм библиографияһы хаҡында бер тос ҡына хеҙмәт барлыҡҡа килһә, бик тә файҙалы булыр ине.

Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең әçәрҙәрен баçтырғанда төрлөсә имзалаған. Илдә саҡта яҙышҡан осорҙа ул төрки телендәге хеҙмәттәре аçтына ҡултамғаны **Ә. Вәлиди, Әхмәтзәки Вәлиди, Әхмәтзәки Вәлидов, Әхмәтзәки** тип ҡуйған. Русса сыҡҡан хеҙмәттәрен **А.-З. Валидов** тип тамғалаған. Ә бына 1913 йылда «Мәктәп» журналында баçылған «Ҡайһы милләттәнһең?» исемле мәҡәләһе имзаһыҙ донъя күргән. Мәҡәләнең Ә. Вәлидиҙеке булыуын беҙ уның «Ҡазан татарҙарының ҡара һүҙҙәренә ғаид яңы әçәр» исемле мәҡәләһен уҡып беләбеҙ. Ә. В. Туған Төркиәлә «Яңы Төркөстан» журналында баçылған материалдары аçтына «Суҡлыҡай улы» тип тә ҡул ҡуйғылаған. Был псевдонимдың аңлатмаһын беҙ уның «Хәтирәләр»ендә табабыҙ. Бөйөк ғалим тыуған Көҙән ауылының төп халҡы башҡорттарҙың Суҡлыҡай һәм Унғут ырыуына ҡараған[1]. Һәм Ә. Вәлиди, үҙен Суҡлыҡай ырыуы нәçеленән тип иçәпләп, «Суҡлыҡай улы» псевдонимын ҡулланған. Ҡайһы бер мәҡәләләре Төркиәлә лә имзаһыҙ сыҡҡан.

1935 йылда Ә. Вәлиди Төркиә Республикаһының фамилиялар тураһындағы законы буйынса **Туған** фамилияһын һайлай. Был фамилия уның ата-бабаһы Иштуғандың исеменә барып тоташа. Ошо хаҡта ул «Хәтирәләр»ҙә: «Көҙән улдарынан һуң бишенсе быуын булған Иштуған бабабыҙ рустарға ҡаршы һуғышта беҙҙең яҡтан бик алыçта ятҡан Ҡәмәлек йылғаһы буйында шәһит булған»,[2] — тип яҙа.

Европала баçылған әçәрҙәрендә ул үҙенең фамилияһын «Валиди»

[1] Тоган Заки Валиди. Воспоминания: борьба народов Туркестана и других восточных мусульман-тюрков за национальное бытие и сохранение культуры. Книга I.—Уфа: «Китап». 1994. с. 7—9, 13.

[2] Шунда уҡ, 11-се бит.

тип яҙа. Ошо хаҡта уның бер аңлатмаһы ла бар. Унда ул: «Исемем Рәсәй һәм Европала баҫылған әҫәрҙәремдә «А. Заки Валиди» рәүешендә яҙылыуы һәм ҡайһы бер энциклопедияларға ла ошо шәкелдә инеүе арҡаһында төрөксә әҫәрҙәремдә лә ошо шәкелде ҡулландым. Фәҡәт ҡәрҙәштәремдең бер өлөшө Төркиә төрөксәһендәге әйтелешкә күрә «Зәки Вәлиди» тип яҙыуымды ҡабат-ҡабат тәҡдим итеүҙәре өсөн был әҫәремдән башлап исемемде «Ә. Зәки Вәлиди» рәүешендә яҙыуҙы ҡабул иттем. Асылда «Ислам энциклопедияһы»ның ойоштороу комитеты ла ошо шәкелде ҡабул иткән»,— тип хәбәр итә. Уның был һүҙҙәре 1941 йылда Истанбулда баҫылған «Монголдар. Сыңғыҙ һәм төрклөк» исемле әҫәренең аҙағында теркәлгән. Әйтергә кәрәк, Ә. Вәлидиҙең фамилияһы «Туған» төрөксә «Тоган» рәүешендә яҙыла. Шунын өсөн русса сыҡҡан Көнсығыш тураһындағы китаптарҙа уның фамилияһы «Тоган» булараҡ ҡулланыла. Һуңғы йылдарҙа башҡорт интеллигенцияһының рус телендә сыҡҡан әҫәрҙәрендә был фамилия «Туган» рәүешендә ҡабул ителгән. Бынан тыш, уның исемен ҡыҫҡартып. **Зәки** тип тә йөрөткәндәр.

* * *

Әлеге көндә беҙгә билдәле булыуынса, Әхмәтзәки Вәлидиҙең илдә саҡта яҙған хеҙмәттәренең һаны 50-нән артыҡ. Был исемлеккә беҙ уның бөтә яҙма ҡомарҡыларын (бәләкәй генә мәҡәләләрен, хаттарын, ғаризаһын да) индерәбеҙ. Ә Вәлиди мираҫын тикшереүсе ғалимдар (Т. Байҡара, Г. Янски) уның киң эрудициялы, һәләтенең төрлө яҡлы булыуын билдәләйҙәр. Ысынлап та, Ә. Вәлидиҙең революцияға тиклем яҙылған әҫәрҙәре уның шул заманда уҡ ошо сифаттарға эйә булыуын асыҡ күрһәтә.

Ул осорҙа йәш мөғәллим күп уҡый, эҙләнә, танылған Европа һәм Көнсығыш авторҙарының хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итә. Тиҙҙән уның үҙ әҫәрҙәре лә барлыҡҡа килә башлай. Ә. Вәлидиҙең тәүге күләмле хеҙмәте — «Төрк вә татар тарихы»ның баҫылып сығыуы төрки донъяла үҙе бер ҙур ваҡиға була. Әхмәтзәки Вәлиди был ваҡытта ғилем донъяһына яңы ғына аяҡ баҫҡан йәш кеше булһа ла, әҫәрендә тарихты һүрәтләүҙә яңы ысул ҡуллана. Уның тарихи тикшеренеү ысулының үҙенсәлеге шунда: «ул был ваҡытта Рәсәйҙә лә, Европала ла киң билдәле булған, нәшер ителгән фарсы, иҫке төрки телендәге фундаменталь сығанаҡтар менән бер рәттән бөтә төрки халыҡтарға билдәле булған һәм шулай уҡ айырым халыҡтар хәтерендә йәшәгән мифтарҙы, риүәйәттәрҙе, легендаларҙы, фольклор һәм этнографик мәғлүмәттәрҙе оҫта ҡулланып, тарихи хикәйәләү туҡымаһына индерә»[1].

Революцияға тиклем Ә. Вәлидигә университет тамамларға тура килмәй. Әммә ул белемен үҙ тырышлығы менән даими камиллаштыра, әҫәрҙәрен һәр саҡ фәнни нигеҙҙә яҙырға тырыша. Шуға ла ул илдә

[1] Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы. (Р. Ғ. Кузеевтың инеш һүҙе). Өфө, 1994, 6-сы бит.

бик тиҙ танылыу таба. Тәүҙә уны газета-журналдарҙа «йәш тарихсыбыҙ» тип атайҙар, ә 1917 йылда инде Ә. Вәлиди «мәшһүр ғалим, тарихсы, мосолманса, русса күп фәнни әҫәрҙәр авторы» булып таныла [1].

XX быуат башындағы төрки матбуғат менән танышҡанда, Ә. Вәлидигә ҡағылышлы байтаҡ материал осратып була. Уҡытыусылар, ғалимдар, газета уҡыусылар уның хеҙмәттәренә төрлөсә баһа биреп, хаттар, мәҡәләләр яҙғандар. Уларҙың маҡтау хаттары, тәнҡит һүҙҙәре, хаталарын төҙәтеп, объектив баһа биреп яҙған мәҡәләләре Ә. Вәлидиҙең шул ваҡытта уҡ Рәсәй төркиҙәренең мәҙәни һәм ижтимағи фекер үҫешенә йоғонтоһо булыуын күрһәтә. Мәҫәлән, 1913 йылда Ә. Вәлиди, Ҡазанда ҡатын-ҡыҙҙар мәҙрәсәһе асыу хәҙерге көндәрҙәге хәлдәрҙә файҙа килтермәйәсәк, тип мосолмандар йыйылышында сығыш яһай. Уның был фекерен әсе тәнҡитләп, Фәтих Әмирхан «Ҡояш» газетаһы биттәрендә мәҡәләләр баҫтыра. Муса Ярулла Бигиев, Фуат Туҡтаров һәм бер төркөм йәштәр Ә. Вәлидиҙе яҡлап сығалар. Шулай итеп, уның исеме тирәһендә бер ҙур дискуссия булып үтә. Ә. Вәлидиҙең был фекере Ырымбур, Ҡазан һәм Пермь жандарм управлениеларын ҡыҙыҡһындыра[2].

Ә. Вәлидиҙең революцияға тиклемге әҫәрҙәренең бер үҙенсәлеге шунда: ул төрлө телдәрҙән миҫалдар килтереп яҙа. Мәҫәлән, 1911 йылда «Шура» журналында баҫылған «Йырҙарыбыҙ хаҡында» исемле мәҡәләһендә Вәлиди рус, ғәрәп, монгол, себер төркиҙәренең йыр өлгөләренән файҙалана. Үҙе белмәгән телдәрҙәге үрнәктәрҙе ул русса тәржемәләре аша төшөнгән, йәғни Әхмәтзәки Вәлиди үҙенән алда башҡарылған тикшеренеүҙәр тәжрибәһенә таянған. Бынан тыш, күренекле шәхестәргә бағышланған ҡайһы бер мәҡәләләрендә әҫәрҙәренән өҙөктәр килтерә. Бындайҙар рәтенә «Мәржәниҙең бер әҫәре тураһында Ҡәйүм Насыри», «Хәлфиндәр» исемле мәҡәләләрҙе индерергә мөмкин. 1913 йылда Ә. Вәлиди «Шура» журналының бер нисә һанында танылған мәғрифәтселәр Ибраһим, Исхаҡ, Сәғит Хәлфиндәр хаҡында ҙур мәҡәлә баҫтыра. Уны яҙыр өсөн материалдар эҙләгәндә, Ибраһим Хәлфиндең 1818 йылда Йена ҡалаһында немец телендә сыҡҡан бер мәҡәләһенә юлыға. Тик «һәр ни ҡәҙәр Хәлфиндең был мәҡәләһен ҡулымда тоттом иһә лә, немецсә белмәгәнемдән ни һөйләгәнен белә алмаҡым»,— ти[3]. Г. Вамбери, Мәхтүмҡолой тураһындағы хеҙмәттәрендә ул немец телендә баҫылған китаптарға һылтана. «Вамбери» исемле мәҡәләһендә Ә. Вәлиди, уларҙы «бөтөн таныуым фәҡәт руссаға тәржемә иткән әҫәрҙәр арҡаһында ғына» мөмкин булды, «бәғзе берҙәрен немецсә белгән заттарҙың ярҙамы илә генә өйрәнгеләй алдым», ти[4]. Шунда уҡ бер тәржемәсенең исемен күрһәтә. Ул Ҡазандағы немец теле мөғәллиме Рклитский була[5].

---

[1] Научный архив УНЦ РАН. Ф. 3, оп. 47, д. 70, л. 26.
[2] РГА ОР. Ф. 102, д. 74, ч. 28, л. 1, 2.
[3] Вәлиди Ә. Хәлфиндәр // Шура. 1913. № 4. 107-се бит.
[4] Вәлиди Ә. Вамбери // Мәктәп. 1913. № 10, 245-се бит.
[5] Шунда уҡ.

Ә. Вәлидиҙең беҙ тикшергән осорҙағы әҫәрҙәре төрлө журналдарҙа, газеталарҙа, йыйынтыҡтарҙа баҫыла. Уларҙың теле бер-береһенән айырыла. Был сыбарлыҡ Вәлидиҙең үҙенән дә, уның редакторҙарынан да килеүе мөмкин. Әҫәрҙәр баҫылып сыҡҡандан һуң, уларға ҡарата яҙылған тәнҡит мәҡәләләрендә башҡа мәсьәләләр рәтендә уларҙың теленә лә иғтибар иткәндәр. Мәҫәлән, 1913 йылда «Ваҡыт» газетаһы «Төрк вә татар тарихы»н тәнҡитләгәндә: «Өйәҙ ауылында зыярат тирәһенә ултыртылған текмә бағанаһы төҫлө бер рәттән теҙелеп тороусы «лар» хәрефелер. Беҙҙең телдә ғәләмәте «лр» хәрефе булып, «лар» бик аҙ ғына ерҙә истиғмал ителгән хәлдә, «Сөйөмбикә» илә «Аҡ юл» журналында булған кеүек, был китапта ла һис урынһыҙ «лар»ҙар теҙелгән», — тиелә[1]. «Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы» китабына Ғәлимйән Шәрәф, фәнни этикетты һаҡлап, көслө рецензия яҙа. Уның мәҡәләһендә авторҙың теле хаҡында ла әйтелә. Рецензент әйтеүенсә: «яңы әҙәбиәтебеҙҙә мәҡбул (ҡабул ителгән) вә мәғруф (танылған) «минем» һүҙе урынына «минең» истиғмал ителеүен (ҡулланылыуын) сағатайсаға эйәреүме (архаизммы), башҡортсаға эйәреүме (провинциализммы) тиергә аптырап ҡалдыҡ», ти[2]. Уның был фекере шул йылдарҙа барған «тел ярышын» сағылдыра булһа кәрәк. Ул заманда ҡайһы берәүҙәр төрөк телен, икенселәр — ғәрәп телен, өсөнсөләр — төрки телен, дүртенселәр татар телен бөтә Рәсәй төрки халыҡтары өсөн әҙәби тел сифатында ҡабул итеүҙе талап иткәндәр[3]. Күренеүенсә, Ғ. Шәрәф татар теле яҡлы булған. Бынан тыш, ул рецензияһында Ә. Вәлиди китабының телен яҡшыртыу буйынса файҙалы кәңәштәр биргән.

Вәлидиҙең башҡорт теленә мөнәсәбәте хаҡында һөйләгәндә, беренсенән, уның башҡорт теленең татарлашыуын таныуын әйтергә кәрәк. Был хаҡта В. Филоненконың «Башкиры» исемле китабына яҙған рецензияһында Ә. Вәлиди: «Башҡорттарҙың хәҙерге хаяттары, татарлашыуҙары хаҡында әйткән [Филоненконың.— *(Ә. С.)*] һүҙҙәре лә бер ҙә үлсәүҙән тыш түгел», — тип үҙ мөнәсәбәтен белдерә[4]. Икенсенән, «Бөрйән башҡорттары араһында» тигән мәҡәләһендә ул башҡорт лексикаһын ҡуллана һәм улар башҡа төркиҙәргә аңлашылһын өсөн йәйә эсендә аңлатма бирә. Мәҫәлән: **ҡарағай (нарат), өпсөн (сбруй).** Ошо мәҡәләһендә Ә. Вәлиди бөрйән башҡорттарының тел үҙенсәлектәрен дә күрһәтеп үтә: **«Барыһ йылы — барыҫ, юлбарыҫ** тимәктер»[5]. Өсөнсөнән, «Ҡазан татарҙарының ҡара һүҙҙәренә ғаид яңы әҫәрҙәр» мәҡәләһендә ул башҡорттарҙың «сәнкем, сәнкем, сәнкем йылан, сәнкем башлы ҡара

---

[1] Матбуғат: Төрк-татар тарихы // Ваҡыт. 1913. № 1711.

[2] Шәрәф Ғ. Төрк-татар тарихы. Зәки Вәлиди әҫәре. 1915 йылда Ҡазанда баҫылған // Шура. 1916. № 14, 341-се бит.

[3] Галяутдинов И. Г. История башкирского литературного языка (XIX — начало XX века): Автореф. дис. докт. фил. наук // ИЯ РАН. М. 1992.

[4] Вәлиди Ә. Башҡорттарға ғаид яңы әҫәр // Тормош. 1915. № 248.

[5] Вәлиди Ә. Бөрйән башҡорттары араһында // Шура. 1913. № 22. 518-се бит.

йылан» тип башланған арбауҙарын яҙып алыуы, ләкин әлегә бер ҡайҙа ла баҫтырмауы хаҡында хәбәр итә[1]. Тимәк, Әхмәтзәки Вәлидиҙең туған телендә яҙылған хеҙмәттәре лә булған, тип фараз итергә мөмкин. Хәҙергә уның башҡорт телендә баҫылған фольклор материалдары табылғаны юҡ.

Ә. Вәлидиҙең 1917 йылға тиклем баҫылған хеҙмәттәренең күпселек өлөшө төркисә яҙылған. Автор үҙе ҡулланған телдең тарихы менән таныш булған. «Хәлфиндәр» мәҡәләһендә ул яҙма төрки теленең халыҡ аралашҡан телдән айырылып тороуы хаҡында әйтә. Ғалим бындай хәл рус яҙмаһының билдәле этабында ла булыуын билдәләп, был ике яҙма телдәрҙең үҫешен сағыштырып үтә[2]. Боронғо, һирәк осраған сығанаҡтарҙы файҙаланған башҡа мәҡәләләрендә ул яҙма ҡомартҡыларҙың теленә баһа бирә. Уның фекеренсә, «Тауарихе Болғариә»нең «һәммә нөсхәләре лә тел хосусиәте менән үткән ғасыр башындағы телдән айырылмай»[3].

Әхмәтзәки Вәлиди 1913 йылда Урта Азияға сәйәхәткә китешләй Ырымбурҙа туҡтала. Бында уға Риза Фәхретдинов «Сыңғыҙ-намә» ҡулъяҙмаһын бирә. Был нөсхә менән танышып сыҡҡас, йәш тикшеренеүсе, текст төрлө ваҡытта яҙылған, тигән һығымтаға килә. Ул ҡулъяҙманың тәүге өлөшө сағатайса, һуңғыһы — ғосманса яҙылыуына ҡарап нигеҙләй[4]. Октябрь революцияһына тиклем Ә. Вәлиди телсе булып түгел, ә тарихсы булып таныла.

Мәҡәләбеҙҙең аҙағында тағы бер мөһим мәғлүмәтте килтерәбеҙ. 1914 йылда «Йондоҙ» газетаһында Ә. Вәлидиҙең «Лотфи һәм уның диуаны» исемле мәҡәләһе донъя күрә. Һуңынан ул айырым китап булып та баҫыла. Хеҙмәттең тел үҙенсәлеге шунда: ул авторҙың үҙ орфографияһы менән бирелгән. Был турала мәҡәлә исеме аҫтында әйтелгән, ләкин ни өсөн икәнлеге күрһәтелмәгән. Бәлки, «Ваҡыт» газетаһында юғарыла әйтеп үтелгән тәнҡит, йә мәҡәләлә Урта Азия төркиендә һәм фарсыса миҫалдарҙың күплеге быға сәбәп булғандыр, йәки әлегә асыҡланмаған бүтән бер сәбәбе барҙыр. Тик ошо бер материал нигеҙендә Ә. Вәлидиҙең революцияға тиклемге хеҙмәттәренең теле шулай булған, тигән һығымта яһай алмайбыҙ.

* * *

Ә. Вәлидиҙең хеҙмәттәрен, шул иҫәптән илдәге дәүерҙә яҙғандарын, ҡайтанан баҫтырыу — Башҡортостан фәненең мөһим бурыстарының береһе. Әйтеп үтелгәнсә, улар ғәрәп шрифты менән төркисә баҫылған һәм шунан һуң, һирәк осраҡтарҙан тыш, ҡабат бер ҙә баҫыл-

---

[1] Вәлиди Ә. Ҡазан татарҙарының ҡара һүҙҙәренә ғаид яңы әҫәрҙәр // Сөйөмбикә. 1915. № 22. 10-сы бит.

[2] Вәлиди Ә. Хәлфиндәр // Шура. 1913. № 4. 109-сы бит.

[3] Вәлиди Ә. Мәржәниҙең бер әҫәре тураһында Ҡәйүм Насыри // Шиһабетдин Мәржәниҙең тәржемәи хәле. Ҡазан. 1915. 588-се бит.

[4] Вәлиди Ә. Мөхәррирҙең үҙ исеменә яҙылған бер мәктүб // Шура. 1913. № 23.

маған. 1917 йылға тиклем сыҡҡан китап, журнал, газеталар хәҙер үҙ-ҙәре һирәк баҫмаларға әйләнде. Бынан тыш, халҡыбыҙҙың бөйөк шә-хескә ҡыҙыҡһыныуы көслө булыуын да иғтибарға алырға кәрәк. Ошо сәбәптәр Ә. Вәлидиҙең илдә саҡта яҙған хеҙмәттәрен йыйып баҫтырыр-ға әҙерләү теләген тыуҙырҙы, һәм һөҙөмтәлә ошо йыйынтыҡ барлыҡ-ҡа килде.

Китапта әҫәрҙәрҙең тексы стиль һәм тел үҙенсәлектәрен һаҡлаған көйө хәҙерге башҡорт орфографияһында бирелә. Ул ваҡытта яҙма телдә ҡулланылған **кеби, дәхи, илә, белә, нәрсә, ғасыр** кеүек һүҙҙәр хәҙерге заманға ярашлы эквиваленттары менән алмаштырылды. Ҡайһы бер урындарҙа киткән хаталар (етешмәгән өтөрҙәр, ҡуш тырнаҡтар, һүҙҙәр һ. б.) төҙәтелде. Һәр биттең аҫағында ғәрәп-фарсы һүҙҙәренә аңлатмалар бирелде. Уларҙы икенсе осраҡта ҡабатламаҫҡа тырыштыҡ.

Ә. Вәлиди «Төрк вә татар тарихы»нда «Европа ғалимдары ғөмү-мән төрки халыҡтарына исем булған «төрк» исемен «тюрк» тип, Истан-бул төрктәренә исем булған «төрөк» һүҙен «турок» тип айырып яҙа. Беҙ ҙә, ошоно риғая итеп, ғөмүми исемдә «төрк» тип, истанбулдарға ҡарата булғанда, «төрөк» һәм «Төркиә» тип яҙабыҙ», ти. Йыйынтыҡты әҙерләгәндә, беҙ ҙә уның был һүҙҙәрен иҫәпкә алып эш иттек.

Ә. Вәлиди бер әҫәрендә «Хәлфиндәр» хаҡында етди тикшеренергә ҙур урын бар, ләкин быларҙы мин эшләй алманым; бәлки яҙыласаҡ биографиялары өсөн материалдар биреү менән генә ҡәнәғәтләндем», ти[1]. Ә икенсеһендә ул, «Шура» журналында мөхтәрәм шағир Мәхтүм-ҡолойҙоң бөтә шиғырҙарын йыйып бөтөрөрбөҙ һәм ул ваҡытта, ғәзәл-дәрҙең, риүәйәттәрҙең нөсхәләрен татбиҡ итеп, хәҡиҡи бер «Мәхтүм-ҡолойҙоң тулы әҫәрҙәре»н барлыҡҡа килтерә алырбыҙ», ти [2].

Беҙ ҙә, уға эйәреп, ошо йыйынтыҡ хаҡында: ул Ә. Вәлиди Туған-дың яҙыласаҡ биографиялары өсөн материалдар ғына, киләсәктә Ә. Вәлиди әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы донъя күрер, тип ышанып һү-ҙебеҙҙе тамамлайбыҙ.

Әхәт Сәлихов.

---

[1] Вәлиди Ә. Хәлфиндәр // Шура, 1913. № 4. 105-се бит.

[2] Вәлиди Ә. Диуани Мәхтүмҡолой // Шура, 1913. № 17. 524-се бит.

## ЙЫРҘАРЫБЫҘ ХАҠЫНДА

### I

Шағир Ғабдулла әфәнде Туҡаевтың «Халыҡ әҙәбиәте» тигән китабында йырҙарыбыҙға ҡараштарына ҡаршы мин бәғзе бер мөләхәзәләр[1] яҙған инем. Үткән көҙ яҙылған был мәҡәлә өҫтәл аҫтында бер аҙ ғүмер итте. Инде «Шура»ның 8-се номерында йырҙар хаҡында Ғәбдерәшит әфәнде Юлдаш тарафынан яҙылған бер мәҡәлә лә баҫылды. Мин иң әүәл Ғабдулла әфәнде Туҡайҙың беҙҙең йырҙарыбыҙҙағы мисрағтар[2] араһында мөнәсәбәттәр юҡ тигән һүҙенә ҡаршы яҙмыш инем. Ғәбдерәшит әфәнде «Халыҡ әҙәбиәте»нән бәғзе һүҙҙәр килтергәненең һуңында былай булмаҫҡа, бәлки мөнәсәбәт булырға кәрәк, тип бәғзе һүҙҙәр яҙа. Унан һуң: «Татар йырҙарындағы мисрағтар хаҡындағы мәсьәләләргә яуап биреү өсөн халыҡтың иң иҫке йырҙарын табырға кәрәк. Ләкин уларҙы хәҙер табыу һис мөмкин түгел. Улар онотолған»,— тип әйтә. Ләкин был һүҙҙәрҙең һәммәһе лә дөрөҫ түгел. Татар теле төрк теленең[3] бер шөғбәһе[4].

Татар теленә ҡараған мәсьәләләр төрк халҡының теленә ашналыҡ[5] менән сиселәләр. Әммә татар телен белеү менән, тар вә мәхдүд[6] фекер менән ғөмүм төрктәрҙең теленә ғаид мәсьәләләрҙе түгел, бәлки фәҡәт татар ләһжәһенә ҡараған бик күп мәсьәләләрҙе хәл итеү ҙә мөмкин түгелдер. Татар ләһжәһенең мазыйы ла[7] төрк телен киңерәк белгәндә, бер ни ҡәҙәр сиселер. Ошоноң өсөн беҙ татар йырҙарының мисрағтары хаҡында һүҙ һөйләмәҫтән элгәре ғөмүм төрктәрҙең «ике ят мисрағтарҙан ҡушылған йырҙары»

---

[1] мөләхәзәләр — фекерҙәр

[2] мисрағтар — шиғыр юлдары

[3] Был урында **төрк теле, төрк халҡы** тигәндә Истанбул (ғосманлы) төрөктәре морат түгел; бәлки донъяның һәр тарафындағы төрк нәҫелендәге халыҡ мораттыр. *(Ә. В.)*

[4] шөғбәһе — тармағы

[5] ашналыҡ — танышлыҡ

[6] мәхдүд — сикләнгән

[7] мазыйы ла — үткән заманы

хаҡында бер-ике һүҙ әйтәбеҙ. Һәм бынан һуң башҡа мәсьәләләрҙә лә, иншалла, шулай итербеҙ.

Шулай: беҙҙең йырҙарыбыҙ бар. Улар бер-беренә башҡа булған мисрағтарҙан ҡушылалар. Ул мисрағтар хаҡында Ғабдулла әфәндененең «мисрағтар араһында мөнәсәбәт юҡтыр. Ул бер мәртәбә скрипка ҡылы тартып ҡуйыу ҡәбиленән[1] бер нәмә. Уның әһәмиәте «юҡ» тигән һүҙе хаталыр. Бәлки ғәйәт әһәмиәтлелер. Һәм мисрағтары араһында мөнәсәбәт булыуы тейешлелер. Хәҙер ҙә беҙҙә мисрағтары мөтәнасип булған[2] йырҙар күп. Улар боронғо заманда мөтәнасип булғандар. Ғабдулла әфәндененең «беҙҙең йырҙар етлекһеҙ» тигәне лә хата. Беҙҙең йырҙар бер етлеккәндең һуңында зәвәлгә[3] йөҙ тотҡан. Уға Азияның бөтөн нисыф шималиһы[4] шәһәҙәт бирә.

## II

Төрк йырҙарының бер ҡыҫым ғәзимендә[5] мәҡсуд мотлаҡан[6] йырҙың аҙаҡҡы мисрағтарында һөйләнә.

Йырҙың әүәлге мисрағы нисыф ахыр менән мөтәнасип булған ят йөмләләрҙән тора. Әүәлге мисрағтың ахырғы мисрағ менән мөтәнасип булыуы шунан ғибәрәттер ки: бер-береһенә әкҫәриән[7] тамам башҡа был йөмләләрҙе яңғыҙ булған бер мәғәнә йыя. Әүәлге мисрағтан башҡа уҡ ахырғы мисрағ истиҡлалиәт менән[8] мәҡсуд булған мәғәнәне аңлата, ләкин ике мисрағтың бергә ҡушылыуында аңлашылған мәғәнә, фәҡәт ахырғы мисрағтан ғына аңланған мәғәнәнән ҡиммәте әҙәбиә[9] менән бик асыҡ айырыла. Сөнки йырҙың бөтөн (мисрағтары тамам) булғандарында мәҡсуд булған мәғәнә аңлашылғандың өҫтөнә ул бер-бер тәлкин[10] менән йәнләндерелер ҡәлепкә[11] тәьҫир итә белмәк хөссәһенә[12] малик булған була. Ошоноң өсөн дә төрк халыҡтарындағы был нәүғтәге[13] йырҙар әҙәптә[14] бер ғәли урын

---

[1] ҡ ә б и л е н ә н — төркөмөнән

[2] м ө т а н а с и п б у л ғ а н — тура килгән

[3] з ә в ә л г ә — юҡҡа, сығыуға, бөтөүгә

[4] н и с ы ф ш и м а л и һ ы — ярты төньяғы

[5] ҡ ы ҫ ы м ғ ә з и м е н д ә — күпселек өләшөндә

[6] м о т л а ҡ а н — шикһеҙ

[7] ә к ҫ ә р и ә н — күп ваҡытта

[8] и с т и ҡ л а л и ә т м е н ә н — бәйләнмәгән

[9] ҡ и м м ә т е ә ҙ ә б и ә — ысын әҙәбиәт

[10] т ә л к и н — аңлатма

[11] ҡ ә л е п к ә — йөрәккә

[12] х ө с с ә һ е н ә — тойғоһона

[13] н ә ү ғ т ә г е — төрҙәге

[14] ә ҙ ә п т ә — әҙәбиәттә

тоталар. Әүәлге мисрағтар хикми[1] һүҙҙәрҙән, мәҡәлдәрҙән генә ғибәрәт булмаҡ ләзим[2] түгелдер. Бәлки бик күп ваҡытта хикмәт вә тәжрибә менән аслан[3] мөнәсәбәте булмаған бик сәдә[4] һүҙҙәрҙән торалар.

Йырлаусының эсендәге ҡайғы, шатлыҡ, мөхәббәт тигән кеүек төрлө хәләттәренең[5] һәр бере үҙҙәренә махсус булған әүәлге мисрағтары йәнә тамам башҡа бер ҡалыпта булалар. Хәлбуки төрктәрҙә быңдай йырлау, йырҙың бер ҡыҫым вә нәүғеһе булып һаналғаны өсөн, төрк йырсылары быңдай йырҙарҙы бер мәжлестә, бер мәсьәлә хаҡында бер ауыҙҙан вә бер стопала (вәзендә) ғади һүҙҙәр һүрәтендә һөйләп йырлап ултыралар.

Был ҡәҙәр ҙур булған сәнғәт әҙәбиә[6] үҙенең сафлыҡ вә нәфәсәте[7] менән төрк шағирының ауыҙынан шишмә ҡәбиленән аға ла тора. Ул хасиятты уларға Аллаһы тәғәлә биргән[8].

Башҡа халыҡтарҙа ла бер-береһенә ят булған йөмләләрҙән ҡушылған йырҙар бар. Мәҫәлән, рус халҡы йырлай:

Пела, пела пташечка, да замолкала,
Знало сердце радости, да забыло.
Ах, сгубили пташечку злые вьюги;
Забыли молодца злые люди.
Одна гора высока, а другая низка,
Одна мила далекая, а другая близка.

Ғәрәптәр йырлайҙар:

فان تكن تغلب العلباء عنصرها
فان فى الخمر معنى ليس فى العنب
ماكل مايتمنى المرء يدركه
تجرى الرياح بما لا تشتهى السفن

---

[1] хикми — хикмәт
[2] ләзим — тейеш
[3] аслан — һис
[4] сәдә — ябай
[5] хәләттәренең — хәлдәренең
[6] сәнғәт әҙәбиә — әҙәбиәт
[7] нәфәсәте — матурлығы, гүзәллеге
[8] Радловтың «Төрк халҡының әҙәбиәте» исемендәге китабының 4-се жилденең (томының) башындағы мөҡәддәмәгә (баш һүҙ) мөрәжәғәт ителһен. *(Ә. В.)*

ان يقبح الحسن الاعنى طلعته

فالعبر يقبح الا عنر سيره

فان تكن تعلب العلبا عنصرها

فانك ماء الوردان ذهب الورد

Ләкин уларҙағы быҡдай йырҙар йырҙың айырым бер ҡыҫымын тәшкил итмәйҙәр. Йәғни быҡдай йырҙар уларҙа айырым бер сәнғәт әҙәбиә була алмай. Ошоноң өсөн дә уларҙы төрктәрҙә бер нәфис сәнғәт булған быҡдай йырҙарға тиңләштерергә тура килмәй. Быңың өҫтөнә төрк йырҙары үҙҙәренең айырым хасияттары вә фазилаттары менән уларҙан бик асыҡ айырылалар. Шуның өсөн дә беҙ быҡдай рәүештә йырлауҙы «Төрктәрҙең үҙҙәренә хас сәнғәт әҙәбиә» тип атайбыҙ.

Быҡдай йырҙар төрк халҡы әҙәбиәтенең һәм хәҙерге һәм боронғо ваҡыттарында булған. Уларҙы (ғосманлы, Ҡырым, Ҡавказ, Һарт төрктәренән башҡа) донъяның һәммә тарафында булған төрктәр йырлайҙар. Беҙҙең татар төрктәре йырҙарын фәҡәт ошо тариҡ[1] менән генә йырлайҙар (бик аҙ иҫтиҫнаи[2]). Быны күрһәтер өсөн мәҡәләнең ахырына Радловтың «Төрк халҡының әҙәбиәте» тигән әҫәрҙән һәм Позднеев әҫәренән нәмүнәләр[3] күсерербеҙ. Беҙҙең төрк халҡының хас милке булған был ҡыҫым йырҙарҙа тағын бер нәмә бар әле, беҙ уны был көнгә ҡәҙәр һөйләмәгән инек. Ул быҡа шул: әүәлге мисрағтар, түбәндәгеләргә йәки һүҙҙең әүәлге ахырына баяғы нисбәттәрҙе тотҡандың яны-на, ундағы мәддәләр мотлаҡан[4] төрк халҡының ҡәлебенә бик ныҡ бағланыуы булған нәмәләрҙән торалар.

Төрк халҡы әүәлге мисрағтарҙа, йырҙарҙа ватан, ер, һыу, ҡош, ҡорт, аттар һәм башҡа хайуандарҙы килтерәләр. Сөнки төрк халҡы ғөмүмән тәбиғәтте, үҙенең ата-анаһын, ғаилә, ҡәрҙәш-ырыуҙы ғәйәт һөйәлер[5]. Вә уларҙың күңел-

---

[1] тариҡ — ысул

[2] иҫтиҫнаи — быҡдай булмаған, был иҫәпкә инмәгән

[3] нәмүнәләр — өлгөләр, үрнәктәр

[4] мотлаҡан — шикһеҙ

[5] Сөнки беҙ быларҙың әҙәбиәттәренә ғаид китаптар уҡый алманыҡ. *(Ә. В.)*

дәре мотлаҡан шул уҡ нәмәләргә бағлайҙыр[1]. Төрк халҡы тәбиғәтте һөйәлер. Улар элек ғөмүмән тәбиғәткә (ағас, һыу, тимер, ер, күктәргә) табынырҙар ине. Һәм хәҙер ҙә бәғзе берҙәре табыналар[2]. Мәддә төрктөң илаһы ине, тиҙәр. Дөрөҫ, тәбиғәтте, мәддәне ярата ине. Унын йыры һәм мәддә вә тәбиғәт менән бәйләнгән һәм ошо юл менән төрк халҡы хистәре һәм сәнғәттәре нөктәһенән башҡа ҡәүемдәрҙән бик асыҡ айырылырҙар. Тәбиғәттәр, хистәр, берберенә башҡа булғанлығы өсөн дә, төрк булмаған кешеләр өсөн төрктәрҙең үҙҙәренең ғәли һәм бик хөрмәтле булған хистәрен ағас йәки таш кеүек нәмәләргә ҡушып йырлауҙары, йәки ер, күк, һыу, таш һөйләнгән урында бер-бер төрктөң (мәҫәлән, хәҙерге сирмештәрҙең) күҙенән мөлдөрәп йәштәр ағыуы ҡыҙыҡ булып күренәләр. Мәҫәлән, минең үҙемдең бер-бер татар ауыҙынан Ағиҙел һәм ерәнме, тура аттарҙың исемдәрен ҡушып йыр йырлауынан ятһыныуым үҙемдең төрклөк-татарлыҡ хисемде юғалтҡанлығымдан килер.

## III

Себерҙәге төрктәрҙең ике ят мисрағтарҙан ҡушылған йырҙарынан бәғзе нәмүнәләр. Беҙ быны йырҙарҙың яҡшыһын яманынан айырмайынса ғына туранан-тура күсерәбеҙ:

| | |
|---|---|
| Аҡташ пайылдым, пайылдым | Яңыдан теккән бу туным |
| Аҡташтың сызыҡ таппадым. | Ямғурлы көндә нә түзә? |
| Аймаҡ илғадым, илғадым | Яйнаб тапҡан малымның |
| Ай, синдән сылу таппадым. | Йәдәр көндә нә түзә? |
| Күк таш пайылдым, пайылдым | Искидән теккән пу туным |
| Күк таштан сызыҡ таппадым, | Арған көндә нә түзә? |
| Күпте улғадым, улғадым | Инәлеп тапҡан малымнан |
| Күгесте сәндән таппадым. | Артыр күндә нә түзә? |
| | |
| Ҡабырчаҡты ҡара күл | Адаң аҡ чәчәк вә аҡ чәчәк |
| Ҡажның кәче пәрәрбы? | Аңар бәс ергә чыгубсың. |
| Ҡалығы йүнгә ялынсам | Ады баласы бер туған |
| Ҡарындаш пулур пармы ни? | Едешпәс ергә барып сың. |
| Томға яҡты тойоҡ күл | Күрүмез иле күк чәчкә |
| Тужунең кәче парарпы? | Күләгә ергә чығубсың. |
| Төшма нинәк сорасам | Күкшен баласы бер туған |
| Туғанаҡ пулур пармы ни? | Күрүшбәс ергә барыпсың. |

---

[1] Позднеевтың «Образцы литературы монгольских племен» тигән әҫәренең беренсе жилд, 62-се бите ҡаралһын. *(Ә. В.)*

[2] Нәжиб Ғасим. 1-се жилд, 284-се бит. *(Ә. В.)*

Ай чығар яңы пүс пулур,
Алтынды туткан ус булур.
Аданың йортон паҡ туткан,
Аймағы йүнгә шаҡ булур.
Көн чығар яңы пүс пулур,
Көмөштө тоткан ус пулур.
Күкшуның йортон паҡ тоткан
Күп халыҡҡа маҡ пулур.

---

Айдың алдында чулмундай
Айға салдым ярыкнын.
Ада баласы ҡодамды
Алтунға салдым ағлын.
Тиресдән салҡун ҡаҡҡанда
Теремнәт ҡамыш баштары
Та кеше туғаным санадым,
Та жылаған күздән йәш киләт,
Унынан салҡын ҡаҡҡанда,
Уяжат ҡамыш баштары,
Унчы туғаным санадым,
Уялған күздән йәш киләт.

---

Ҡарчыға ҡоштоң нәсе артыҡ?
Ҡанатағ бөткән йүне артыҡ.
Ҡарындаштың нәсе артыҡ?
Ҡаҡышып әйткән сүзе артыҡ.

---

Баструй ҡоштоң нәсе артыҡ?
Пуйынә бөткән йөмө артыҡ,
Бу йөм туғаным нәсе артыҡ?
Бостоп әйткән сүзе артыҡ.

---

Ҡазаҡ яланына ҡаразам,
Ҡаратал башы күрүнәт.
Ҡарындашым санасам,
Ҡабырғам тозо ҡайыжат.

---

Яҡазы алтын мандиҡ тун,
Яҡалашса йыртылбаз.
Яттың эчендә ҡодалар,
Яман әйдешсә айырылбаз.

---

Йәдәге алтын тимер тун,
Йәдәктән төссә йыртылбаз.
Илдең эчендә ҡодалар,
Йәрмәктәшсә, айырылбаз.
Йәш ҡода ҡаҡҡан салҡынға
Ярғаҡты тороп чылдабас,
Яттың эчендә йөргәндә,
Яман әйтерзә чылдабас

Ҡуш ҡода ҡаҡҡан салҡынға
Күнекчен тороп чылдабас,
Күптең эчендә йөргәндә,
Күп яман әйтерсә чылдабас.

---

Порма ялды пурыл ат
Пудалба сәсем пудас.
Пуре башҡа пу йортҡа
Пудалба сәсем пуд албас.

---

Ярмы ялды яман ат
Яратба сәсем яртасын.

---

Яңы пашҡа пу йортҡа
Ялынба сәсем ялынсам.

---

Ике ағаш йоморот
Илем кеспәсен төзөнөң
Илдең эчендә йөргәндә,
Илем әйтпәсен кинемнең
Яҡшы ағаш йоморот.
Ядым кеспәсен тозоноң
Яттың эчендә йөргәндә,
Ядым әйтпәссен кенемнең.
Томанды көндә киштәзә,
Толбарым әүне таяулы.
Тушман ярында йөргәндә,
Туғаным әүне танылы(у).
Ҡарачҡы төндә киштәзә,
Ҡалтарым төнө танылы(у).
Халыҡ ярында йөргәндә,
Ҡарында уны танылу.

---

Сандуғач очат саз сайын,
Сасҡа поткән тал сайын.
Санаған туған киләт тип,
Саҡтап күрдем юл сайын.
Көйкәнәк очат күле сайын,
Күлгә поткән талы сайын.
Күргән туған киләт тип,
Күрергә чыҡтым юл сайын.

---

Ярға поткан ҡайынның
Күләткәзе суда турат.
Аданың улу булғузу
Сүнүзе пәйдә турат.
Ҡурғаҡ потҡаҡ ҡайынның
Күләткәзе ердә турат.
Анадан чыҡкан улдың
Санары илдә турат.

## IV

Төрк халыҡтарының һәммәһендә бер-береһенә ят йөмләләрҙән ҡушылған йырҙар бар. Быларҙың һәммәһендә бындай йырҙарҙың мисрағтары бер-береһе менән мөнәсәбәт булалар. Быны инде һөйләп үткәрҙек.

Башҡа төрлө ҡәүемдәрҙә булған кеүек, беҙҙә лә бындай йырҙар бар, бар ғына түгел, бәлки күп ваҡытта беҙҙең йырҙарыбыҙҙы ошо юл (йырҙы бер-береһенә мәғәнә мөнәсәбәт булынып заһирҙа[1] бер-береһенә ят булған йөмләләр, мисрағтарҙан ҡушмаҡ юлы) менән йырлайҙар. Ләкин беҙҙә төрк халҡының халыҡ йырының мисрағтары араһында мөнәсәбәт булыу-булмауға иғтибар итмәйҙәр. Ләкин бының (йырҙың мисрағтары араһында мөнәсәбәт булыу-булмауҙың) йырҙарыбыҙҙың ҡиммәте менән ҙур мөнәсәбәте бар. Ошоноң өсөн дә йырҙарыбыҙға ҡарау, иғтибар башланғас та, иң әүәл йырҙың ошо нөктәһенә күҙ төштө.

Шағирыбыҙ Ғабдулла әфәнде Туҡаев «Халыҡ әҙәбиәте» исемле китабында һәм быға, йәғни мисрағтар араһында мөнәсәбәт иғтибар итмәй йырлауға, бер хәҡиҡилек төҫө биреп, уны йырлауҙа тәбиғи һәм муаффиҡиәт[2] менән һайланған матур юл, тип ҡараған. Был фекерҙең, төрк халҡының йырҙарынан ғафләт[3] сәбәбенән генә һөйләнгән хатаи фекер итеүе асыҡ күренһен өсөн беҙ төрк халҡының йырҙары хаҡында бер-ике һүҙ һөйләп үткәрҙек. Йырҙарҙың мисрағтары араһында мөнәсәбәтте риғая итмәк[4], төрк халҡының телендә, әҙәбиәтендә һәр ваҡыт риғая ителеп торған бер ҡанун итеүе мәғлүм булыуы хәлдә, уға бер беҙҙең халыҡтың иғтибар итмәүенә нисек итеп хаҡиҡилек, ысынлыҡ төҫө бирмәк кәрәк! Ғөмүм төрк халҡы алдында бер татар халҡын танымаҡ өсөн, ғөмүм татар халҡынан бер фәрдте[5] алып һүрәтләргә кәрәк. Мәҫәлән, бер ғөмүм татар халҡы барыбыҙ йырҙарының мисрағтары араһында мөнәсәбәтте мөләхәҙә менән татлы итеп йырлағаныбыҙ хәлдә, арабыҙҙан беҙгә кеше бындай мөнәсәбәтте риғая итмәй, йырын алъяған кешенең һүҙҙәре кеүек мәғәнәһеҙ итеп йырлаһа, беҙ уға һәм уның йырына ни тип әйтер инек, бына бөтөн төрк халҡы алдында бер беҙҙең халыҡтың үҙенә башҡа бер йәмһеҙ юл йөрөтөүенә шуны әйтәбеҙ.

Беҙҙең халыҡтың йырҙарының бер мисрағында үҙенең һуҡаһын, икенсеһендә йәнкәйенең ҡалпағындағы уҡаһын,

---

[1] заһирҙа — күренеп торған
[2] муаффиҡиәт — уңыш, тура килтереп
[3] ғафләт — иғтибарһыҙлыҡ
[4] риғая итмәк — иғтибар итмәк
[5] фәрдте — айырым затты

бер мисрағында һөйкөмһөҙ пәрейҙе, икенсе мисрағында һөйгән йәрен... һөйләүе һис бер матурлыҡ түгел. Ул һис бер хәҡиҡи тәбиғи юл түгел, «ул яңылышҡан, үҙенең теленең ҡанунын, ҡағиҙәһен онотҡан халыҡтың һөйләгән йырылыр».

Бына беҙҙең ошо сәғәткә ҡәҙәр әйтергә теләгәнебеҙ шулдыр.

## V

Беҙ татар (йәғни болғар) халҡы, хәҡиҡи төрктәр булыуыбыҙ хәлдә үҙебеҙҙең төрклөгөбөҙҙән күп нәрҫәләребеҙҙе юғалттыҡ йәки күп нәрҫәләребеҙҙе үҙгәрттек. Был йөмләнән иң ҙуры тел һәм әҙәбиәттер. Былар бер нисә сәбәптәрҙән тора:

1) Татарҙарҙың (болғарҙарҙың), иң асыл төрк ғәләменән айырылып, төрк еренең бер яҡ ситендә йәшәй башлауына инде бик күп ғасырҙар үтте. Оҙон ғасырҙар эсендә әҙәм түгел, ер ҙә ғәйәт ҙур инҡилап ала[1]. Фин халҡы төрк халыҡтарынан булыуҙары хәлдә уларҙа төрклөктән бик аҙ әҫәр ҡалған, хатта әһле тарих[2] уларҙы төрк итеп һанарға ҡурҡып торалар. Беҙҙең халыҡтың теле күп үҙгәргән, бының ҙур сәбәбе лә ошолор.

2) Беҙҙең халыҡ мәҙәниәтте бик иҫке заманда, хатта тарих белмәгән ваҡытта ҡабул иткән. Уларға мәҙәниәттең һуҡа вә һабандары, аршын вә бизмәндәре бәдәүи[3] ваҡытта эшләй торған эштәрҙе эшләргә, йырлай торған йырҙарҙы иркенләп көрәгә тирәһендә ҡымыҙ аяҡтары күтәреп ултырып йырларға ирек бирмәне. Ошоноң өсөн улар башҡа төрктәр йырлап йөрөгәндә һыҙғырыбыраҡ йөрөргә, сәнғәт әҙәбиәлә үҙҙәренең хас милектәрен һаҡлауҙа кәмселек итергә мәжбүр булғандар.

3) Мәҙәнилектәре өҫтөнә улар бик иртә ислам мәҙәниәтен ҡабул итеп мәҙәни мосолмандар булдылар. Ул (оседлые магометане) тигән һүҙ уларҙа йыр-музыка кеүек нәрҫәләр булмаҫҡа тейешле булған халыҡ тигән һүҙҙер. Халыҡ башына, ғөмүм тарафтан, матур аңлашылған ислам мәҙәниәтен бер ҙә аңламай торған муллалар менеп ултырғандарҙыр; халыҡҡа йырларға, музыкалар уйнарға, хороводтар яһарға, бейергә, өләң әйтешергә бер ҙә ирек бирмәгәндәр. Йыр йырлама, мулла күрә, орошор. Бейемә, уйнама! Мулла күрер, алла мөахәҙә итер. «Йософ китабы», «Ҫәбәтел ғажизин» уҡыһаң ярай.

---

[1] инҡилап ала — үҙгәреш кисерә
[2] әһле тарих — тарихсылар
[3] бәдәүи — күсмә

Хәҙерге башҡорттар һаман күсеп йөрөйҙәр, мал әйҙәйҙәр, ҡымыҙ яһайҙар, йырҙар һаман зәғиф. Мәжлестәрҙә, халыҡтың хозур таба торған ҡәҙерле урындарында «Мөхәммәдиәләр», «Ҡамал Өммиләр» генә уҡыла. Хатта һуң көндәрҙә муллаларҙың иркен ҡаҙаҡтарҙы ниҙә ҡыҫа башлағандарын Радлов хикәйә итә. Шулай итеп, йыр беҙҙең халыҡ араһында нәфи ителде[1]. Фасиҡ вә фәсад[2] урындарҙан башҡа ерҙәрҙә йыр йырлауға тәнәззел иткән[3] кешеләр күп ҡылынды.

Бына шундай тауҙар кеүек ҙур сәбәптәр менән беҙҙең халыҡ тел вә әҙәп йәһәтенән ҙур инҡилап алды. Ҡайҙа ул йырҙың мисрағтары араһында нисбәттәр[4] эҙләп тороу, нисбәте булғанды мөләхәзә итергә[5] лә мөмкин түгел.

VI

Был ергә саҡлы йырҙарыбыҙҙың мисрағтары араһында мөнәсәбәт булмауын, беҙҙең халыҡтың ундай мөнәсәбәттәргә иғтибар итеүҙе ташлағанын һөйләнек. Инде, әфәнделәр! Әгәр һеҙ муллалар юҡ ваҡытта йәки бер көлкө-ҡыҙыҡ өсөн генә бер насарлыҡ(!) булһа ла ошо күсергән йырҙарҙы уҡып сығырға тәнәззел итһәгеҙ, мин һеҙгә йәнә берике һүҙ әйтмәк булам.

Тау буйында тимер бүкән,
Типкеләмә, Ғәйнетдин.
Беҙ сығарған бәйет түгел,
Үпкәләмә, Ғәйнетдин.

Һары атым һаҙ буйында,
Еҙ ҡамыты муйынында.
Һинең менән даным сыҡты,
Йәнем сыҡһын ҡуйынында.

Сәғәтләмә бауың булһа алтын,
Ташлағың да килмәй муйыныңдан,
Һөйгән генә йәрең булһа ҡоштан,
Сығараһың килмәй ҡуйыныңдан.

Ағиҙелдәр һалҡын, һыуы тулҡын,
Тулҡындары килеп ҡаҡмаһын.
Бер бите лә ҡояш, бер бите ай,
Яман күҙҙән хоҙайым һаҡлаһын.

---

[1] нәфи ителде — ситкә тибелде
[2] фасиҡ вә фәсад — боҙоҡ кеше һәм боҙоҡ
[3] тәнәззел иткән — түбән төшкән, түбәнселек иткән
[4] нисбәттәр — бәйләнештәр
[5] мөләхәзә итергә — ныҡлап уйлап ҡарарға

Бейек тә генә тауға менгән саҡта,
Таймаҫ та ғына итек булһасы.
Уйнап ҡына, көләп ултырғанда
Таң атмаҫлыҡ көндәр булһасы.

Аҡ сәсәккәй менән аҡ миләүшә
Гөл сәсәге менән сеңләшә.
Үҙем генә бында булған менән,
Күңелем йәнкәй менән һөйләшә.

Селтәрле лә күпер һикһән таҡта,
Кемләр йөрөй икән был саҡта,
Һау бул да ғына, һау бул тигән саҡта,
Һулҡ-һулҡ итеп илай ҡосаҡта.

Етен генә сәстем, ай, уңманы,
Бураҙнаһы унын тулманы.
Һис кемгә лә генә үпкәләмәм,
Үҙ бәхетем минең булманы.

Аҡ сатырҡай менән, ай, күк сатыр,
Эстәрендә матур ҡыҙ ятыр.
Һурып үпһәң, ауыҙы балдар татыр,
Билдәренән ҡосһаң, тик ятыр.

Алма нурланалыр ҡыҙарғас,
Егет тәүфиҡ алалыр ҡыҙ алғас.

---

Әйтә торған һүҙем шул: беҙҙә бик күп йырҙар бар, уларҙың мисрағтарындағы мөнәсәбәт бик асыҡ күренеп тора. Әгәр бындай йырҙарҙы ғына интихаб итеп[1] йыйыу мәшәҡәтен берәрһе ихтыяр итһә, ул кемсә халыҡ араһынан бик һәйбәт бер коллекция яһап алыр ине. Сөнки бындай йырҙар бик күп. Мин шағир Ғабдулла әфәнденең бындай йырҙарға ғәфләтенә[2] аптырамайым. Һәм хәйрәтемде[3] күрһәтеү өсөн ошо йырҙарҙы Ғабдулла әфәнде Туҡаевтың үҙе тарафынан йыйылып нәшер ителгән «Халыҡ моңдары» исемендәге кескенә мәжмуғанан алдым. Мин был йырҙарҙың мисрағтары араһындағы мөнәсәбәтте бында яҙып маташыуҙы ла ошо йырҙарҙың үҙҙәрен күсереү менән өҫтөмдән төшөрҙөм, тип беләм. Былар хаҡында шуны әйткем килә: һуң был йырҙарҙың мисрағтары араһындағы мөнәсәбәт ҡайҙан килгән?

Әллә ул шундай бер тәсәдефи[4] генә эш булып бер ҡайҙан да килмәнеме? Ҡыҫҡа ғына ваҡытта ошо һуңғыһы менән, йәғни тәсәдефи генә тип хөкөм итеп тә ҡуйырға

---

[1] интихаб итеп — һайлап
[2] ғәфләтенә — иғтибарһыҙлығына
[3] хәйрәтемде — дөрөҫ һөйләүемде
[4] тәсәдефи — осраҡлы

мөмкин. Ләкин был тәсәдефи булыуҙарҙың күп булыуы мөмкин түгел.

Халыҡ үҙе бер ҙә мисрағтар араһында мөнәсәбәттәрҙе эҙләмәй. Шуның өсөн быға башҡа бер сәбәп эҙләргә тура килә. Мин был хаҡта һүҙҙе үҙ итмәй үҙемдең заңымды ғына әйтеп китәм. Минеңсә: беҙ үҙебеҙ намаҙҙа ваҡытта уйҙарыбыҙ әллә ҡайһы ерҙәрҙә йөрөй. Шәкерт мәсьәлә сығара, сауҙагәр һатыу итә, мосафир сәфәр итә. Ә тел һаман фатиханы, тәсбихте уҡып тора. Был да шуның кеүек булырға кәрәк. Вөжуд[1] төрктәрҙе эсенә ала һәм шулай итеп үҙенең тәбиғи юлына кереп сығалар.

## VII

Бер ваҡыт мин йырҙар хаҡында булған бер мөләхәзәмдең ахырына ошо түбәндәге һүҙҙәрҙе яҙып ҡуймыш инем. Төрк һуғышында булған ирен өмөтһөҙ хәлдә һағынып көтөп тора торған бер ҡытай ҡатыны моңайып әйтә ине: «Һары туҙан болоттар ихата иткән шәһәргә яҡын ҡарғалар кис үткәрмәк өсөн бергә йыйылалар. Ғаҡ-ғаҡ!! тип өтөшөп, бер-беренә ҡарап ҡысҡырышып, осоп китәләр. Ҡоҙғондар, ҡур, ҡур!! итеп, шул ҡарғалар яғына осалар...»

(Гаммерҙан)

Бер монгол йыры:

Буртахтайын ундыр дабанды
Бу бхимур шуби сусархай.
Бу ләжеми хулага зарту,
Буләз уртан яжи хурхыби.

Далбаҡтайын ундыр дабанды
Дал бирнә шуби сусархай.
Данған хулағазар ту,
Нәмәзәт яжи хурхыби.

Йәғни: Буртахтайын йылғаһының кисеүендә арыған хәлһеҙләнгән ҡарсығалар: билдәләнгән йыраҡ ергә нисек мин билдәләнгән ваҡытта барып етермен. Далбаҡтайын йылғаһының кисеүендә яңы ғына йөнө сыҡҡан һәм арыған, бик талған ҡоштар: ысындан да бик йыраҡ булған ергә мин нисек барып етермен. (Позднеевтың «Монгол халыҡтарының әҙәбиәте» тигән китабынан.)

Төнгө сәғәттәр булһын. Төн ғәйәт тын, һис бер тауышфәлән юҡ. Татар егетенә үҙенең йәнкәйенән айырылыр ваҡыт етеп бара. «Айырылыр ваҡыт етә!» Быны уның йөрәге, теле, бөтөн вөжүде һөйләй. Ул яҡынан йәнкәйенән мәң-

---

[1] вөжуд — йәшәйеш

ге айырылмаç ине. Ана теге стенала эленеп торған оҙон телле, иҫке, йәнһеҙ сәғәт уны йәнкәйенән айырылырға өҫтөрәйҙер. Ул келт итте, йәнә бер келт итте, йәнә келт итә Шулай итеп егетте төн уртаһына килтереп еткерә.

Сәғәт келт-келт итәлер,
Төн уртаһы етәлер.
Егет меҫкен ник моңаймаç.
Айырылыр ваҡыт етәлер.

## VIII

Йырҙарыбыҙға һәр ваҡыт шундай мәғәнә бирергә, шулай мөләхәзә итергә һәм уның тәрән һәм матур мәғәнәләрен сығарырға мөмкин. Мин бында шуны әйтеп үтәмен: йырҙар хаҡында фекер йөрөтөүселәргә уларҙың ваҡиғда[1] ул һүрәттә булыуын-булмауын уйлап яфаланырға кәрәкмәй, тик йырҙың һәр яғына мөштәрәк[2] булған мәғәнәләрен генә мөләхәзә итергә кәрәк. Мәҫәлән, ошо һуңғы: «Сәғәт келт-келт итәлер» тигән йырҙа мисрағтар араһында мөнәсәбәт барлығын күрҙек. Беҙ бында төн уртаһында бер егеттең моңайып ултырып һәм унда бер сәғәттең яйлап сыҡылдап тороуын, шуларға ҡарап тороп егеттең үҙ йырын йырлап ебәреүен ваҡиғда бер булған нәрçә тип уйламаныҡ. Әгәр беҙ быны уйлаған булһаҡ, һүҙебеҙ бер ҡотһоҙ дәғүә булыр ҙа ҡалыр ине. Бәлки беҙ был урында йырҙың ике мисрағы араһында йәшеренеп ятҡан мөштәрәк мәғәнәне генә күрһәттек. Бындай назар[3] хосуси[4] беҙҙең халыҡтың йырҙарын ҡарағанда ғына булырға тейешле. Сөнки беҙҙең халыҡ юғарыла тәкрар иткәнсә мисрағтар араһында мөнәсәбәт булыу-булмауға иғтибар итмәй. Бүтән төрктәр кеүек түгел.

## IX

«Халыҡ әҙәбиәте» китабының икенсе ерҙәренә, йырҙарҙың башҡа йәһәттәренә, буҙйегеттәргә ҡайтарып һүҙ һөйләүебеҙҙән элгәре, йыр хаҡындағы мәҡәлдәрҙе тәнәззел итеп, уҡыусыларға «Буҙйегет» китабынан мисрағтары мөнәсәбәт булған бер-ике бәйет тәкдим итеү ҡайғыһы менән һаман ҡәләмде ҡулымдан төшөргәнем юҡ:

---

[1] ваҡиғда — ысынбарлыҡта
[2] мөштәрәк — уртаҡ
[3] назар — ҡараш
[4] хосуси — айырып

Ҡош ҡоткармаҫ ҡарсыға
Бер үк төргә төшөп һин.
Бәйләп уны булмаҫ, ти.
Бик хурлыҡҡа төшөп һин.
Ҡарлуғас ҡарлуғасҡа ем бирә, ти.
Ҡарындаш ҡарындашҡа дим бирә, ти.
Яңғыҙлыҡҡа төшөптөр яңғыҙ башым
Мин бөтөп йөрөгәнемде кем белә, ти.
Ағастың башы киҫелһә — төбө ҡалыр,
Икәүҙең бере үлһә — бере ҡалыр.
Яңғыҙҙың үҙе үлһә — ниһе ҡалыр?
Менәр ат, кейгән кейем яуға ҡалыр.
Ҡарсыға ҡоштоң ҡанаты ҡайырылыр көн булып, ти:
Амандашып, ҡауышып айырылар көн булып, ти.

Һәнүзәнең, бер мәжлескә барып, Буҙйегетте һорап әйткән йырҙары вә бер егеттең уға биргән яуабы был йөмләнәндер:

Тимер алтын булмаҫ, ти.
Баҡыр көмөш булмаҫ, ти.
Һинең һөйгән Зәйтүндең
Һыртын алтын ҡылһаң да,
Эсен гәүһәр ҡылһаң да,
Буҙйегеттәй булмаҫ, ти.
Һөйәктәрем һынған һуң,
Һылаһаң да булмаҫ, ти.
Йөрәгем янып булған һуң,
Һыуға һалһаң булмаҫ, ти.

## ТӨРҠ ВӘ ТАТАР ТАРИХЫ

## МӘДХӘЛ[1]

### Төрк халыҡтары

Төрк тигән һүҙ, был көндә Азияның төнгө яҡ яртыһында һәм ғарбендә[2], Европаның шәреҡ ҡыҫымында тереклек итә, бер тел менән һөйләшә торған ҙур бер милләттең исемелер. Төрк халҡы был көндә төрлө идара аҫтында төрлө рәүешсә (күсмә һәм ултырма) мәғишәт итәләр. Быларҙың иң күбеһе ҙур Россия хөкүмәте тәсаррыфында[3], бер ҡыҫымы Ҡытай хөкүмәте тәсаррыфында тереклек итәләр; өсөнсө бер ҡыҫымы ғарб тарафында (Европа вә Азияла) Төркиә (Ғосманлы) хөкүмәтенең эйәләре булған төрктәрҙе тәшкил итәләр.

Россия тәсаррыфындағы төрктәр: Ҡазан халҡы, мишәр, башҡорт, нуғай, Ҡырым, ҡумыҡ, Ҡавказ (Әзербайжан) төрктәре һәм Урта Азиялағы һарт, үзбәк, ҡүлжә, тарансы халыҡтары. Былар мәҙәни мәғишәт итәләр.

Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ, төркмән, ғөмүмән Себер татарҙары тип атала торған алтай, тәләүет, шор, сағай, ҡарағас, абаҡан, сулым, ҡыҙыл, яҡут төрктәре. Былар күсмә мәғишәт итәләр.

Ҡытайҙағылар: Шәрҡи Төркөстандағы Ҡашғар төрктәре һәм Шәрҡи Монголистандағы үрәнхай (саян) төрктәре.

Төркиә хөкүмәтен тәшкил иткән төрктәр үҙҙәрен ғосманлы тип атайҙар һәм төрөк[4] исеме менән генә лә йөрөйҙәр. Мәҙәни тереклек итәләр.

---

[1] мәдхәл — инеш

[2] ғарбендә — көнбайышында

[3] тәсаррыфында — ҡулы аҫтында

[4] Европа ғөләмәһе ғөмүмән төрк халыҡтарына исем булған «төрк» исемен «тюрк» тип, Истанбул төрктәренә исем булған «төрк» һүҙен «турок» тип айырып яҙа. Беҙ ҙә, ошоно риғая итеп, ғөмүми исемде «төрк» тип, истанбулдарға ҡарата булғанда, «төрөк» һәм «Төркиә» тип яҙабыҙ. Был ике «төрк» һәм «төрөк» һүҙҙәренең асылы һаман да бер, шул уҡ «төрк» һүҙелер. Тик яңылыштан һаҡланып айырылған. *(Ә. В.)*

Төрк халыҡтарының һәммәһе лә (тиерлек) ислам дinендә, тик Себериәләге бәғзе ҡәбиләләр үҙҙәренең иҫке ғәҙәттәрен, мәжүсилектәрен һаҡлайҙар вә бәғзеләре һуңғы ваҡыттарҙа рәсмән христиан дinендә иғтибар итәләр.

Төрк халыҡтарының ҙур бер милләт, ҙур бер хөкүмәт тәшкил итеп, бер-береһе менән ҡатнашып, бер үк әҙәби тел менән яҙып бергә тереклек итеүҙәренә бик күптән түгел (ҙур төрк хөкүмәте[1] бынан алты йөҙ йылдар ғына элгәре бөттө), ошоноң өсөн дә төрк халыҡтары ни ҡәҙәр күп вә ни ҡәҙәр тарау, бер-береһенән йыраҡ тереклек итә торған булһалар ҙа һаман бер үк тел менән һөйләшәләр. Ҡытай сигендә тереклек итә торған төрктәр Бәхре сәфид ярҙарындағы төрктәр менән тиҙ арала танышып үҙ-ара тәржеманһыҙ һөйләшә ала.

Бик иҫке заманда һаман төрк була тороп хәҙер ҙә төрксә һөйләшмәгән, төрк тип йөрөтөлмәгән бәғзе ҡәүемдәр бар. Улар: 1) йә бик иҫке замандан бирле мәркәздән (йәғни төрк мәмләкәтенең уртаһынан) бик йыраҡ вә айырым торғандар, башҡа төрк ҡәүемдәр менән ҡатышмағандар ҙа бара-бара телдәре тамам үҙгәргән халыҡтар. 2) Йәки икенсе бер ят халыҡтар араһында тороп үҙ телдәрен, ҡәүмиәттәрен оноткан халыҡтар. 3) Йәки сит халыҡтарға күрше булып тороуҙары сәбәпле үҙ телдәре тамам үҙгәргән ҡәүемдәрҙер.

Беренселәре: фин, сирмеш, ар, вогул, карел, эст, пермяк, мордва, зырян, лопарь, самоед халыҡтарылыр. Былар ғөмүмән фин тип атала.

Икенселәре: Иран халыҡтарына ҡатышып иранлашҡан, ҡытайҙарға ҡатышып ҡытайлашҡан, һиндта һиндлашҡан халыҡтар. һәм ғарб тарафындағы славян ҡәүемдәренә ҡатышып славянлашҡан болғарҙар.

Өсөнсөләре: Ҡытай мәмләкәте менән сиктәш булып, телдә ниҙә тамам башҡа бер юл алған монгол халыҡтары һәм уларҙың бурят, тунгус, ҡалмыҡ, остяк, чукча, гиләк тигән кеүек ҡәбиләләре, Ҡытайҙың һәм япондарҙың күршеләре булған Корея ярымутрауы татарҙары, манжурҙар һәм финдар менән күрше торған сыуаштар, ғарбтәге славяндар, тарихта бергә ҡайнап бер төрк халҡы булып йөрөһәләр ҙә, бөгөн телдә, диндә, мәғишәттә башҡа төрктәрҙән айырым булғандары өсөн, төрк тип аталмайынса, үҙҙәренең исемдәре менән фин, монгол, манжур, кореец, болғар, мажар (венгр) тип атала.

[1] Йәғни Сыңғыҙ хан төҙөгән дәүләт.

## I

## Боронғо заманда төрк халыҡтары

**Төрк халыҡтарының мәғишәт иткән урындары.** Төрк халҡы, донъяның иң иҫке халыҡтарынан булып, иң шөһрәтлеләрелер. Төрктәрҙең иң әүәл донъяла тереклек итә башлаған урындары Шимали Азияның Алтай тауҙары вә Ысыҡ күл тирәләрендәге ерҙәр. Замандарҙың үтеүе менән улар күбәйеп ошо урындарҙан таралдылар. Ғарб тарафынан Балтик вә Ҡара диңгеҙ, шәреҡ тарафында Олуғ мөхит һәм Охот диңгеҙҙәре, йәнүб тарафынан Кавказ вә Һималай вә Һиндугуш тауҙары, Монголистан сүлдәре төрктәрҙең бик иҫке заманда таралып ултырған ерҙәренең сиктәрелер.

Төрктәрҙән элгәре ошо киң ергә һис кемдең хужалыҡ итеүе мәғлүм түгелдер. Был мәмләкәттең бер осонан икенсе осона төрктәр нисә йылдарҙа ғына сыға алған. Ул ниһайәһеҙ мәмләкәттең ғарб тарафындағы һаҙлыҡтарында Петербург, Мәскәү тигән кеүек, шәреҡтәге ниһайәһеҙ сәхрәләр уртаһында Томск, Иркутск, Хабаровск, Семипалатинск тигән кеүек хисапһыҙ ҡалалары, ҙур ҡалаларҙың төҙөлеүе вә был шәһәрҙәр араһында донъялар тимер юл силсиләләре ҡоролоуы, рус, немец, француз, инглиз тигән кеүек ул ваҡыттарҙа әле булмаған халыҡтарҙың ул ҡоштар осоп осона етә алмай торған мәмләкәттең бер осонан икенсе осона тимер сыбыҡтар тартып, ауыҙға ауыҙ ҡуйған кеүек һөйләшеп тороуҙары, бәлки, ул ваҡыттағы төрктәрҙән һис береһенең дә хәтеренә лә, хыялына ла, төшөнә лә килмәгәндер. Ул замандарҙа төн шикелле ҡараңғы урмандар араһында вәхши хайуандар ғына, асыҡ урындарҙа, ниһайәһеҙ сәхрәләрҙә, болондарҙа, һыу буйында төрк халыҡтарының кибеттәр төҫлө булған тирмәләре (кейеҙ өйҙәре) генә күренә ине. Ғарбтә Днепр, Дон, Иҙел буйында, шәреҡтә Тянь-Шань тауҙары, Байкал күле, Орхон, Амур йылғалары тирәләрендә киң болонлоҡтарҙың оҙон үҫкән үләндәре араһында беҙҙең бабаларыбыҙ булған төрк халыҡтарының хайуандары ғына йөрөй ине.

**Иҫке заманда төрк йәмғиәттәре**[1]. Төрктәр иң әүәлге быуаттарҙан бире үк, башҡа ҡәүемдәр кеүек, төрлө атабабалары булып, төрлө ҡәбиләләргә бүленде. Төрктәр ҙә, башҡа халыҡтар кеүек, төрлө ғаширәттәргә[2], ҡәбилә һы-

---

[1] Был баб хаҡында мсье Леон Каэн китабының 9—10-сы биттәрендә; Нәжип Ғасимдың тарихында 38—43-сө сәхифәләрҙәге мәҡәләләрҙән һәм В. Д. Смирновтың «История турецкой литературы» тигән китабындағы һүҙҙәрҙән файҙаландыҡ. *(Ә. В.)*

[2] ғаширәттәргә — ырыуҙарға

маҡ йәмғиәттәргә бүленеп төрлө исемдәр ала ине, ләкин был исемдәр уларҙа, башҡа ҡәүемдәрҙә булған кеүек, бер атаның балаларынан яһалған ҡәбиләләрҙе күрһәтмәне. Төрктәрҙәге төрлө йәмғиәттәр төрлө ваҡыттарҙа, төрлө исемдәр менән ошо юлдар менән аталып килде: 1) Бер-бер түрә, хан, ҡаан кеүек рәйестәр, командандар ҡулы аҫтына йыйылған йәмғиәттәр шул рәйестәрҙең исеме менән аталалар. Боронғо вә бөгөнгө төрктәрҙән уғыҙ, монгол, жужи, сығатай, сәлжуҡ, ғосманлы, нуғай тигәндәре фәҡәт үҙҙәренең электәге рәйестәре исеме менән аталған. 2) Йәки төрктәр үҙҙәренең йыйылып ултырған урындары, ерҙәре, һыуҙары менән атала. Мәҫәлән, иҫке вә яңы төрктәрҙән ҡыпсаҡ, болғар, ҡашғар, ҡырым, алтай, ҡыҙыл, саян, ҡарағас, тубыл, ниһайәт себер тигән кеүек исемдәр барыһы ла һыу вә ер исемелер.

Ҡыпсаҡ беҙҙең иҫке телдә бушлыҡ, сәхрә тигән һүҙ. Дон сәхрәләрендә һәм Хазар диңгеҙенең шәреҡ тарафындағы сәхрәләрҙә, бушлыҡтарҙа тереклек иткән төрктәр һәр ваҡыт ҡыпсаҡ тип аталған[1]. Оло һыу буйында торған төрктәр болғар тип, Иҙел, Ҡама болғарҙары, Дунай болғарҙары, Ҡубан болғарҙары тип аталған[2], Ҡырымдағылар ҡырым тип аталған. Йәки бәғзе ҡәүемдәр үҙҙәренең мәғишәттәренең рәүештәренә, үҙҙәренең хәлдәренә ҡарап исем алған. Мәҫәлән, иҫке төрктәрҙә бер ергә ойошоп шәһәрҙәр ҡороп тереклек иткән төрктәр уйғырҙар тип аталған. Әгәр төрлө йәмғиәттәр араһынан бер-бер сәбәп менән ҡасып киткән, һис ханға, ҡаанға буйһонмай йөрөгән ҡәбиләләр ҡасаҡ-ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ тип аталған. Төрк йәмғиәттәренә элеккенән ҡотлораҡ бер командан, ҡаан зоһур итһә, улар элекке исемен ташлап яңы командан исеме менән аталған. Мәҫәлән, бер ҡәүем башта жужы тип, һуңынан йәнә үзбәк тип аталған. Икенсе берҙәре башта сәлжуҡ тип, һуңынан ғосманлы тип атала. Йәки торған урындарының, мәғишәттәренең үҙгәреүе менән уйғырҙар ҡаҙаҡ, ҡаҙаҡтар уйғыр, ҡыпсаҡтар болғар, болғарҙар ҡыпсаҡ атала. Ошо хәлдәр осраған ваҡытта сит халыҡтарға, фәлән төрк ҡәбиләһе бар ине, ул мөнҡариз[3] булды, бөттө тигән кеүек күренә. Хәлбуки, йәмғиәттәр исемдәрен генә алмаштырған була. Ошоноң өсөн дә төрктәр тарихта төрлө ҡәбиләләргә бүленеп, һәр

[1] Төркөстанда Амударъя һәм Иле йылғалары араһындағы урындарҙы ҡытайҙар Һ у и н ғ н у, ирандар Т у р а н тиҙәр ине. Был урын ғарбендәге бушлыҡ Ҡ ы п с а ҡ тип, шәрҡендәге бушлыҡ Ҡ о б и, Ғ о б и тип аталырҙар ине. Һәр икеһе бушлыҡ мәғәнәһендә. *(Ә. В.)*

[2] Был һүҙ Н. Ф. Ҡатановтыҡылыр. *(Ә. В.)*

[3] м ө н ҡ а р и з — һәләк

ҡәбилә үҙ башына тәфтиш ителмәй, бәлки йөмләһе бер юлы бер үк «төрк» исеме аҫтында зикер ителә.

**Боронғо төрктәрҙең мәғишәттәре.** Төрк халыҡтары тарихтың белмәгән ваҡыттарынан бире үк мәғишәттә икенсе баҫҡыс булған[1]: күсмә-бәдәүи тереклек итеп килгәндәр. Хатта харижи сәбәптәр тәсаррыфына кермәгән төрк ҡәбиләләре был көндә лә ғәйне шул мәғишәтте итә. Бөгөн дә ҡаҙаҡтарҙың, ҡалмыҡтарҙың тереклектәре бынан 4—5 мең йыл элгәрге төрк халыҡтарының мәғишәттәрен күрһәтә[2]. Бик тәбиғи, төрк халыҡтары харижи сәбәптәргә осрамағанда[3] бынан һуң тағы нисә быуаттар һәмишә шул мәғишәттәрендә дауам итер ине. Ул ер төрктәрҙе шул күсмә мәғишәттән юғарыға мәҙәни тереклеккә сығырға, ҡалалар, ауылдар, ҡасабалар бина итеп ғилем вә мәғариф вә мәҙәниәттә тәрәҡҡи итергә[4] ирек бирмәгән.

Халыҡтарҙы ерҙәре тәрбиә итә. Европа халыҡтарын үҙҙәренең ерҙәре, диңгеҙҙәре, йылғалары сауҙа итергә, төрлө халыҡтар менән ҡатышып, төрлө мәғишәтте танып, мәҙәниәттә, ғилемдә, мәғарифта тәрәҡҡи итергә көсләне.

Ерҙәрҙең тарлығы европалыларға бәдәүи тереклек итергә ирек бирмәне. Барған һайын, халыҡ күбәйеп, мәғишәт өсөн ул кескенә ерҙәргә сәселгән игендәрҙең етешмәүе, ул халыҡтарға мәғишәттә тағы ниндәй уңайлы юлдар булһа, шуларҙы эҙләргә мәжбүр итте. Шунлыҡтан ул ерҙең халҡы ла, мәғишәте лә, ғилем дә тәрәҡҡи итте. Ул замандарҙа бик мәҙәни һаналған Иран вә Ҡытай мәмләкәттәре йәнә ғәйре ерҙәренең һәм донъяларының тәрбиәһе арҡаһында мәҙәни булған. Төрктәрҙең урындары, ерҙәре, мөхиттәре бөтөнләй башҡа: уларҙың ерҙәрендә бер сикһеҙ ҡоролоҡ диңгеҙе, шәреҡтә Тымыҡ океандан ғарбтә Ҡарпат тауҙары, Балтик вә Ҡара диңгеҙҙәренә ҡәҙәр тик кешеһеҙ боҙ диңгеҙҙәренә аға торған йылғалар һәм күп булмаған дахили[5] күлдәрҙән башҡа һис бер рәтле юл юҡ. Сауҙа, тәжәрәт[6], мәҙәниәт, ғилем юлһыҙ йөрөмәй.

---

[1] Мәғишәт өс баҫҡыс итеп иғтибар ителә: беренсе — вәхши тереклек, икенсе — бәдәүи, өсөнсө — мәҙәни тереклек. *(Ә. В.)*

[2] Ҡытай мөәрриxтәре миләди Ғайсанан 24 ғасырҙар мөҡәддәм төрк халыҡтарының күсмә хәлдә мәғишәт иткәндәрен яҙалар. *(Ә. В.)*

[3] Харижи сәбәптәр тип был урында мәҙәни ҡәүемдәрҙең бәдәүи ҡәүемдәрҙе ул мәғишәттән сығарырға көсләүҙәре, мәҙәниәт вә ғөмүмән эштәренең, мәҫәлән, ҡалалар, тимер юлдарҙың бәдәүиәт ғәләменә таралыуҙарына әйтеләләр. Мәҫ., рустар Себериәгә тимер юл һалдылар, ҡалалар бина иттеләр, инде Себерҙәге бәдәүи халыҡтарҙы мәҙәниәткә сығырға өндәйҙәр. Ҡаҙаҡтарҙы ауылдарға ултыртып, мәҙәни итергә теләйҙәр. Былар һәммәһе харижи (тышҡы) сәбәптәр булыр. *(Ә. В.)*

[4] тәрәҡҡи итергә — алға барырға

[5] дахили — эске

[6] тәжәрәт — сауҙа

Улар бер мәртәбә күсмә мәғишәт башланы, ул уларға етте. Мәмләкәт күк шикелле киң, хайуандары уларға ит, ҡымыҙ, һөт, ҡаймаҡ, май бирә. Аяҡлы хайуандар уларҙың барлыҡ мәмләкәте, уларға хайуандарҙың кәйефе өсөн урындан-урынға күсеп йөрөргә кәрәк булған, йәй көнө ҡарҙың күп булып ятҡан урындарына, йәғни үләндең яҡшы урындарына шималға табан күсергә кәрәк булһа, ҡыш көнө ҡар булмай йә аҙ була һәм хайуандарға тибен[1] өсөн уңайлы урындарға күсергә тура килә. Йәй көнө Урал тауҙарында тереклек иткән төрктәр ҡыш көнө Һырдарья буйында булырҙар ине[2]. Обь, Иртыш буйҙарындағылар ҡыш көнө Тянь-Шань тауҙары, Тарым йылғалары яғына китерҙәр ине[3]. Шулай итеп ауыл, ҡалалар бина итеп мәғишәт итергә уңайлыҡ таба алманылар. Төрктәрҙең бәғзе ҡаандары төрктәрҙе мәҙәни тереклек итергә кертер өсөн сәғи итеп[4] ҡараһалар ҙа булманы.

Төрктәр араһында төрлө ваҡыттарҙа төрк теле өсөн төрлө яҙыуҙар сыҡты. Төрлө ҡаандар ваҡытында төрлө әҙәби ғилми эштәргә шөрүғ итеп[5] ҡарау ҙа булды, ләкин һәммәһе лә вөжүд ғәләмендә оҙаҡ дауам итмәне. Фәҡәт ҡалын таш диуарҙар васитаһы[6] менән генә һаҡлана торған мәҙәниәт вә ғилем әҫәрҙәре төрктәрҙең кейеҙ тирмәләре эсендә тиҙ ваҡыт эсендә юғалып бөтә ине.

Төрктәрҙе күсмә мәғишәткә көсләй торған ерҙәрҙең тағы бер хасияты уның бәғзе урындарының ғына иген өсөн уңайлы булып халыҡтың йыйылыуына иң муафиҡ булған урындарының иген игергә уңайһыҙ, махсулһыҙ[7] булыуылыр. Мәҙәни тереклек итергә муафиҡ урындар тапҡан төрктәр бик рәхәтләнеп тарансы[8] булырҙар ине. Ашлыҡ сәсерҙәр ҙә сауҙаға, тәжәрәткә керешерҙәр ине. Ошоноң өсөн дә иген өсөн, сауҙа өсөн уңайлы булған Урал — Иҙел тарафында тереклек иткән болғар төрктәре, Тянь-Шань тауҙары, хәҙерге Ҡашғар тирәләрендәге тереклек иткән уйғыр төрктәре бик иртә мәҙәни тереклек башланылар. Нисек тә

---

[1] Тибен тип төрктәр хайуандарҙың ҡыш көнөндә йоҡа ҡарҙы тибеп үлән ашай торған урындарын һәм хайуандарҙың тибеп ашауҙарын атайҙар.

[2] Мөстәфадел-әхбәр, сәх. 151 вә 157. Жилд I (1897 йылғы баҫмаһы) ҡаралһын.

[3] Тянь-Шань — Азияла мәшһүр тау. Тарым — Төркөстанда мәшһүр йылға.

[4] сәғи итеп — тырышып

[5] шөрүғ итеп — башлап

[6] диуарҙар васитаһы — стеналар ярҙамы

[7] махсулһыҙ — уңышһыҙ

[8] тарансы — игенсе тигән һүҙ *(Ә. В.)*

ғилемгә, мәғарифҡа, мәҙәниәткә ҙур истиғдатҡа[1] малик булған төрктәрҙең күсмә тереклектәре үҙ ихтыярҙары менән түгел ине[2], бәлки ерҙәре, донъялары, мөхиттәре мәжбүр иткәндән ине[3].

Төрктәр һәр ни ҡәҙәр күсмә булһалар ҙа, уларҙың ул күсмәлектәре эсендә мәҙәниәттең һәр нәмәһе тиерлек бар ине. Улар йөмләһенән бына ошо нәмәләр булыр: милли әҙәбиәт, мәҙәни ҡәүемдәрҙә булмай торған хөкүмәт вә фазиләттәре[4] шамил булған халыҡ әҙәбиәте; милли вә фәҡәт үҙ телдәренең хасияттарына ҡарап төҙөлгән хәрефтәр, әлифба, яҙыу, милләткә, ватанға мөхәббәт, донъяла торорға оҫталыҡ, тәдбир[5].

---

[1] истиғдатҡа — булдыҡлылыҡҡа

[2,3] Леон Каэн, сәх. 12.

[4] фазиләттәре — сифаты

[5] тәдбир — эште уйлап эшләү һәләте

## БӨРИӘН БАШҠОРТТАРЫ АРАҺЫНДА

Ағиҙелдең Стәрлетамаҡ тураһындағы ағымының уң тарафында ҡымыҙ эсеп ятҡан башҡорт ауылы Урал тауҙарының ауыҙында ине. Олуғ юл буйында ултырған был ауылдың халҡы күп ваҡыттан бирле рус һәм татарҙар кеүек мәҙәниәтендә үҙҙәренә ҡарағанда алдыныраҡ ҡәүемдәр илә нык ҡатышҡанлыҡтан башҡортлоҡтарын саф көйөнсә һаҡлап килә алмағандар, эштән сығып боҙолғандар ғына. Тел, ғоруф вә ғәҙәттәрендә юғары ике күрше ҡәүемдәренең тәьҫире күренеп тора. Бынан зыян да юҡ кеүек: әммә уларҙың эске һәм тышҡы культураларына (әхләҡ вә мәғишәттәренә) тәьҫирҙәре быларҙы был көн тамам аянысхәлгә килтергән; башҡорттар иркен күсмә тормош ләззәттәрен онотмағандар, уҡыу-яҙыуҙың юҡлығы, сиктән сыҡҡан ялҡаулыҡ тамам боронғоса, әммә кешеләр илә мөғәмәләлә, тормошта тәҡлиф[1] булырға йоҡҡан: риялана[2], алдай, хыянат итә беләләр һәм матурыраҡ кейем кейергә, тәтәй арбалар тоторға, баҙарҙарын да көтмәйенсә эсеп иҫерек хәлдә йөрөргә яраталар. Бына ошо хәлдәр менән был башҡорттар боронғо һөйкөмлө садалыҡтарынан[3], иркен тормоштарынан айырылып, кеше алдында мөхәббәтһеҙ, боҙоҡ, фәүҡелғада[4] ярлы бәндәләр булып ҡалғандар. Быларҙың ауылдарынан тамам үлем еҫе килеп тора һәм араларына килгән кешенең дә дәртен һүндерә, рухын төшөрә. Был ауылда торғаныбыҙ саҡта мин ысындан ялҡауландым һәм гел йоҡлаусан булдым. Быға иптәшем студент аптырай ине. Мин дә уға был ғәләмдә башҡа бер төрлө эш итергә мөмкин булмағанын һөйләп биреп йәнә йоҡлай инем.

Ауыл Урал тауҙарының ауыҙында ине тигән инем. Беҙҙең ауылдың ҡояш байышы яғында ниһайәһе[5] беҙгә мәғ-

---

[1] тәҡлиф — көс ҡулланыусы
[2] риялана — ике йөҙләнә
[3] садалыҡтарынан — ябайлыҡтарынан
[4] фәүҡелғада — ғәҙәттән тыш
[5] ниһайәһе — сиге

лүм булмаған сәхрә ялан китә. Ҡояш сығышы яғында тағы ла шундай уҡ осһоҙ-ҡырыйһыҙ тигән кеүек бейек таулыҡ, ташлыҡ, ҡара урман башлана. Урал тауҙарының уң яҡ сиктәре. Бында урмандар яҡшы уҡ йоҡарған, әммә һыу мөнтабәғтәре[1], ҡая таштар, матур мәнзәрәләргә[2] байҙыр. Беҙ бында ун биш саҡрым эскәрәк кереп йөрөштөрҙөк, эскә кергән һайын яҡшырғандай була. Ҡымыҙ эсергә килеүсе халыҡ араһында беҙгә күңел күтәрерлек күңелле кешеләр булыуға ҡарамайса, беҙҙең ошо ауылдан киткебеҙҙе килтереп, теге матур тауҙар, эстәрендә тәбиғирәк, сафыраҡ башҡорттары булғанын күрһәтеп, беҙҙе тарта инеләр. Ахыры аттар ялланыҡ та эйәрләп менеп киттек. Ҡайһы ергә барып етәрҙе, нисә көн йөрөүҙе билгеләмәнек. Шулай ҙа көндәр яҡшы булып башҡорттар араһында күҙ ҡыҙыҡтырырлыҡ нәмәләр табылһа, Уралды аша сығырбыҙ һәм ун биш көнләп ҡалырбыҙ тип уйлай инек.

Торған ауылдан утыҙ-ҡырҡ саҡрым ҡәҙәре эскә кергәс тә «бөрйән» башҡорттары араһында булдыҡ. «Ялтыран» исемендә ҙур йәйләүҙә ике (олуғ һәм кесег) «Ҡәпәс» ауылдары һәм бер «Ҡолғона» ауылы. Йәғни өс ауыл халҡы бергә йәйләйҙәр. Был «Ялтыран» уларҙың яҙғы йәйләүҙәре, бесән еткәс улар бынан төрлө йәйләүҙәргә таралышалар.

Бөрйән был көндә Орск өйәҙендә дүрт волость. Был Үҫәргән башҡорттарынан ҡала иң күп ғадәдле[3] ыруғ[4]. Небольсин үҙенең «Оренбург һәм Әстрхан тарафына сәйәхәтемдең хисабы» тигән әҫәрендә (Вестник Имп. Рус. Геогр. общ. за 1852 г., часть 4) «башҡорт халҡының сәсәге үҫәргән, түнгәүер, бөрйән халыҡтарылыр. Былар араһында иң сафы бөрйәндәрҙер» тигән.

Хаҡиҡәтән, башҡорттар менән яҡын танышлыҡ күрһәтә ки, бөрйәндәр кәрәк мәғишәт, тел вә ғәйр хосустарҙа башҡорттарҙың иң саф булғандарын тәшкил итәләр. Әле беҙ булған был ауылдар мәғишәт тарафынан ҡыҫылып, икенсенән күрше башҡорт вә татарҙар тәьҫиренә бирелә төшөп бер аҙ үҙгәргәндәр. Тәбиғәт вә әхләҡ боҙолоуы, ярлылыҡ былар араһына ла килеп еткән. Был ерҙә бынан ете йылдар элгәре тиклем булған инем, шул көндән бирле кәрәк быларҙың үҙҙәрен дә, кәрәк мәғишәттәрҙе һәм ултырған ер вә урмандарын да күп үҙгәртеүҙәр булған. Боронғо саф тәбиғәтле, алдау-нитеү белмәй торған тоғро,

[1] м ө н т а б ә ғ т ә р е — күренештәре

[2] м ә н з ә р ә л ә р г ә — күренештәргә

[3] ғ а д ә д л е — һанлы

[4] Юл ыңғайында шуны әйтеп китәйек: Төрк илендә «р» хәрефе илә башланған һүҙ юҡ. Ошонон өсөн төрк һүҙе булған ы р у ғ һүҙен ғәҙәтенсә «р» илә башлап р у ғ яҙмаҡ хаталыр. *(Ә. В.)*

баhадир башкорттар инде карт кешеләр булып башкорттоң ябык урманы араhында ултырған боронғо ҙур-ҙур карағай (нарат) ағастары кеүек аҙайып калғандар. Мал аҙайған, элек ун биш колонло бейә бәйләгән башкорттар ике-өс бейә бәйләйҙәр, кайhыларында ул да юк. Элекке таҙа, hәйбәт кымыҙ урынына яртыhы йәки өстән ике өлөшө hыу булған бейә айраны эсәләр. Халыкты алдында торған тормошка әҙерлектәре булмау иҙә. Былар рәтле бер мәғишәткә кергәнсе, йә бөтөнләй бөтөп өлгөрөрҙәр, йәки калhалар ҙа аҙ калырҙар. Кәпәс, Ямаш, Бикташ ауылдары 1858 йылғы унынсы ревизия вакытынан бирле hис артмағандар, был көн бөтөнләй кәмейҙәр. Ерле мәэмүр[1] быны асык хисаптар менән күрhәттеләр.

Беҙ торған ауылыбыҙҙан йөҙ егерме сакрым кәҙәре эскә керҙек, мәғишәт, хаят эштәрендә алға барған hис бер башкорт ауылы юк. Бөтөн өсөнсө бөрйән волосында русса бер школа, мосолманса бер мәктәп, ауырыуҙар өсөн бер больница юк. Ауырыуҙар шул көйө тыныс кына үлә, доктор-фәлән килмәй. Бөтөн волоска рәтле бер мулла юк. Булғандары сиктән тыш наҙан hәм халык кашында бер ҙә иғтибарҙары юк. Бөтөн волоска бер газета алынмай. Әhәлиҙең иктисад[2] хәлдәрен йүнәтер өсөн төҙөлгән йәмғиәттәр был урындарҙы бөтөнләй белмәйҙәрҙер ҙә. Бөтөн дәүләттәрен юк хакка урыҫ кулактарына hатып бөтөрәләр.

«Миңдеғол» тигән ауылдан йырак китергә тура килмәне, көндәр бик ямғырлы булды, кире әйләндек. Бәлки, арырак башкорттарҙың боронғо эске культураларын якшы hаклап килгәндәре аҙырак калғандыр ҙа. Сөнки эскә кергән hайын был йәhәт йүнәлә барған кеүек күренә. Эскә керә биргән hайын башкорт әҙерәк алдаусан, ғәлиерәк тәбиғәтле, үҙ-ара иттифаклы булған кеүек күренә бара. Ләкин беҙ ары китә алманык. Был башкорттар үҙҙәре лә, уларҙың кәүми хосусияттары ла бөтөп бара. Ләкин шуныhы кыҙғаныс ки, Русияла этнография ғалимдары бөрйән, бигерәк тә ошо урман бөрйәндәренең мәғишәт, әхләк, тәбиғәт вә рухиәләрен, музыка, халык әҙәбиәтен өйрәнергә, киәфәт йәhәттән ысындан тәфтиш итергә тарихи ядлыктарын (исторические памятники) йыйырға өлгөрә алмағандар, эшләгән кәҙәре hис тә кәнәғәтләндерерлек түгелдер.

1899 йыл «Этнографическое обозрение» журналының 43-сө битендә Никольский рус вә ғәйре телдәрҙә башкорт хакында яҙылған әҫәрҙәрҙең фиhрисын[3] нәшер итте hәм

---

[1] мәэмүр — чиновник
[2] әhәлиҙең иктисад — кешеләрҙең экономик
[3] фиhрист — эстәлек, каталог

шулайтып башҡорттар хаҡындағы әҙәбиәтте уҡыуҙы еңеләйтте. Ләкин беҙ бында бөрйән башҡорттары хаҡында бер ҙә рәтле нәмә тапмайбыҙ, ҡыҙғаныс, башҡорттарҙың иң сафы булған бөрйән һәм уның самобытносы бөтөп бара. Ә ғоләмә[1] һәм ғилми йәмғиәттәр шуны иғтибарға алмайҙар. Беҙҙең ғоләмә һәм ғилми йәмғиәттәр Себерҙең әллә ҡай соҡорҙарындағы: бөтөн халҡы ике меңдән ғибәрәт булған ваҡ таифаләрҙе өйрәнеү юлында байтаҡ ҡына аҡса сарыф итәләр. Әммә күҙ төбөндәге ошо башҡорттарҙы өйрәнеү хосусында эште эшләмәйҙәр. Беҙҙең үҙебеҙҙә инде бер нәмә лә юҡ тиһәк тә ярай ине. Тик һуңғы көндәрҙә бер-ике мәҡәлә илә бер китап сығып ҡалды. Һаҙый әфәнде Атласиҙың ошо йылғы 9—10-сы номер «Шура»ларҙа яҙылған мәҡәләләре менән башта «Шура»ла баҫылып инде ошо йыл «Башҡорт тарихы» менән Ҡазанда «Өмөт» матбағаһында баҫылып сыҡҡан китап һәм «Башҡорттар бөтәрме?» тигән бер кескенә рисаләне әйтәмен. Тағы мәрхүм Өмөтбаевтың «Ядкәр»е бар икән.

«Башҡорт тарихы» тигән китап үҙе бер сатхи[2] вә өстәден[3] яҙылған бер әҫәр булғанлыҡтан мәузуғты[4] бик аҙ ғына аса ала. Мөәллиф был китапты Игнатьев менән Гурьевичтың 1883 йылғы «Справочная книга Уфимской губернии» тигән китабынан, хатта бабтарының тәртиптәрен дә рәтләп үҙгәртмәйенсә тәржемә иткән. Тик араға «Мөстәфад әл-әхбәр», «Ҡамус-әл-әғләм» кеүек китаптар һәм Хвольсон, Бүкәйханов кеүектәрҙең әҫәрҙәренән бәғзе һүҙҙәрен һәм беҙ мосолмандар тигән кеүек ғибәрәләр керткеләүенә ҡарап мөхәррире мулла Мөнир Һадиев тип ҡуйған. Мөнир әфәнде башҡорт тарихын илә ижтимағи итеп бик яҡшы итә. Ләкин уға былай бер сатхи яҙылған әҫәрҙе тәржемә иткәнсе арыуыраҡ китаптарҙан истифада итеп мөстәҡил эшләргә кәрәк ине. Был китапта башҡорттарҙың асылдары хаҡында яҙылған фекерҙәр бик иҫкергәндәр. Бының өҫтөнә китап та тик шул справочный книгаларҙа ғына булырға тейешле бер һүрәттә яҙылған. Фәнни бер нәмә лә юҡ. Башҡорттарҙың ырыуғлары вә уларҙың ҡулға төшкән хәтле шәжәрәләре вә халыҡ араһындағы хикәйәләре тәфтиш ителеп иҫке Европаның һәм ғәрәп тарих, география ғалимдарының хәбәрҙәре менән тәтбик ителергә, уларҙың асылдары, этнический составтары хаҡында шул ваҡытта ғына бер ҡарарға килергә кәрәк ине. Был китапта иһә ғалимдарҙың

---

[1] ғоләмә — ғалимдар

[2] сатхи — өҫтән

[3] өстәден — өйрәтеү кеүек

[4] мәузуғты — теманы

һүҙҙәрен күсереү илә эш бөткән. «Башҡорт тарихы» тип яҙылған әҫәрҙе мөәллифтең (әлбиттә, Мөнир Һади әфәнденең түгел) ҡыҙыҡ булһын өсөн тигән кеүек ихтилалсы Ғабдулла мулланың (1756 йыл) вафаты илә бөтөрөп ҡуйыуына ҡарап тамам итеү бер ҙә мәғҡүл түгел ине. Был эш «Башҡорт тарихына ғаид»[1] булған бер мәҡәләлә булғанда килешә. Әммә «Башҡорт тарихы» булһа, унда ул ҡәүемдең Русия ҡулына кереүҙән элгәре хәлдәре, мәғлүм булған ҡәҙәре хандары вә Русия ҡул аҫтына кергәндәре һуңынан хөкүмәттең, мәҫәлән, уларҙың ерҙәргә вә идара хосустарына ҡарап төҙөгән тәдбирҙәре вә ул тәдбирҙәрҙең вә мәғишәтенең ошо һуңғы заманғы башҡортто нисек килтереп сығарыуы һөйләнергә кәрәк ине. Ошбуның өсөн беҙ Мөнир әфәнденең был хеҙмәте илә генә ҡәнәғәтләнмәйбеҙ. «Башҡорт тарихы» яҙмаҡ кеүек олуғ эшкә керешкәс уға тағы бер аҙыраҡ һиммәт сарыф итергә тура килһен тип өмөт итәбеҙ.

Мәшһүр ғалим Ҡиппин 1861 йыл «Европа һәм Русиялағы инородецтарҙың тарихтарына ғаид әйберҙәргә (материалдарға) тарихи тәртиптә күрһәткес» тип яҙған әҫәрендә башҡорт тарихына ғаид летопистарҙы вә ғәйре урындарҙағы хәбәрҙәрҙе күрһәткән. Юғарыла фекер ителгән Никольский әҫәре бар. Башҡорт фетнәләренә ғаид әтрафлы мәғлүмәт Фирсовтың 1864 һәм 1866 йылдарҙа «Ученые записки Ҡазан. ун-та» мәжмуғаһында баҫтырған олуғ вә бик ҡәҙерле әҫәрҙәрендә һәм Уральскийҙа ғилүм тәбиғиә мөхибтәре йәмғиәте тарафынан сығарылған запискаларҙың XIII жилдендә (1892 йыл) профессор Сомьеның «Башҡорттар хаҡында» тигән әҫәре бар. Бында бигерәк антропология йәһәттәре хаҡында тәфтиштәр яҙылған. Бының һуңында Оренбург тарихына ғаид төрлө ваҡытта төрлө кешеләр тарафынан яҙылған әҫәрҙәр вә Оренбург архивный комиссия мәжмуғалары бар. Рычков, Черемшанов, Вишнецкий, Небольсин, Галкин вә ғәйреләрҙең әҫәрҙәре лә файҙа итер ине.

Һади әфәнде Атласов башҡорттарҙың боронғо урындары вә асылдары хаҡында ғына яҙған. Өмөтбаев башҡорт этнографияһына ғаид фәҡәт бәғзе әйберҙәр (материалдар) ғына биргән «Башҡорттар бөтәләрме?» тигән китабы бер фекерҙән ғибәрәт тиерлек. Ошо рәүешсә беҙҙең башҡорттар вә уларҙың тарихтары, мәғишәттәре, халыҡ әҙәбиәттәре хаҡында бер нәмәбеҙ ҙә юҡ тиергә мөмкин. Был ғомум башҡорттар хаҡында булды. Әммә беҙҙең алға алған бөрйән башҡорттары хаҡында бер ҙә, исмаһам баяғы тарих

[1] ғаид — ҡарата

китаптарында ғына «Мөстәфадел-әхбәр», «Тарих ҡәүме төрки»ләрҙә булһын бер ауыҙ вә бер кәлимә лә әйтелгән юҡ. Шулай итеп, бөрйәндәр — башҡорттарҙың саф булғандары — үҙлектәрен тамам юғалтып баралар. Инде Европа кешеләренең, урыҫтарҙың эстәре бошмай икән, беҙ ҙә быға шулай һалҡын ҡан менән генә ҡарап торорбоҙмы? Быларҙың мәғишәт, хаят эштәрен йүнәтешергә, ярҙамлашырға бер аҙ кешеләребеҙ керешһәләр, был әле бөтмәгән музыка, халыҡ әҙәбиәте, боронғоноң ҡалдыҡтарын тәфтиш итәрлек, өйрәнерлек кешеләребеҙ ҙә табылыр ине, тип уйлайым.

## II

Бөрйән башҡорттары, тинек. Былар ниндәй халыҡ? Быға яуап бирер өсөн башҡорттарҙың үҙен белергә кәрәк булыр. Башҡорттарҙың асылдары хаҡында ғоләмә һәмишә бер фекергә килеп етмәгән. Башҡорт тарихы китабында ла бәғзе фекерҙәр һөйләгән Һади Атласи ҙа быларҙың саф төрк булыуҙарын дәғүә итә. Был хаҡта һуңғы заманда иң мәғҡул булған фекер «башҡорттар ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ һәм Иҙел буйы татарҙарының асылы булған ҡыпсаҡ кеүек ҙур ырыуғтарҙың бәғзе фин ҡәбиләләре илә ҡатнашыуҙан тәшкил иткән ҡәүем» булыуылыр. 1862 йыл Рычков («Топография Оренбургская» китабында) һанаған башҡорт волостарынан мең, табын, ҡыпсаҡ, найман, миркет, ҡатай, гәрәй, таҙлар, ҡырғыҙ кеүектәр шөбһәһеҙ төрки ҡәбиләләр. Әммә бынан башҡалары арҙар, һарайлы, ҡыуаҡан, ыванишь, ҡаршын былар кеүек волостары фин, уғыр нәҫеленән булһалар кәрәк. Ҡатанов башҡорттарҙы төркләшкән финдар, ти[1].

Ләкин, минеңсә, быларҙы бер аҙ финдар менән ҡатнашҡаны өсөн фин тәьҫире күргән төрктәр тиергә кәрәк ине. Сөнки быларҙа финлыҡ ғәйәт аҙ, тәбиғәт вә әхлаҡтарына ул асла[2] тәьҫир итә алмаған. Бөрйән халҡын Аристов, фин булырға кәрәк, ти[3].

Европа ғоләмәһе бөрйәндәр хаҡында һис бер тарихи хәбәр күсермәйҙәр. Былар хаҡындағы тарихи хәбәрҙәрҙе донъяға сығарыу шәрәфе Морат әфәнде Рәмзигә ҡайта. Ул «Тәлфиҡ әл-әхбәр»енең 1-се жилдендә бөрйәндәр хаҡында ғәрәп мөхәррирҙәренең та[4] 5-се ғасырҙан башлап

---

[1] Уның Бәләбәй өйәҙенә 1867 йылғы сәйәхәтенең хисабын ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[2] а с л а — һис

[3] Этнический состав тюркских племен. 1869. СПб. С. 132. *(Ә. В.)*

[4] т а — алдағы сикте белдерә

яҙған хәбәрҙәрен йыйған. Уларҙың һүҙҙәре буйынса, бөрйәндәр ошо көнгә Хива ханлығы янында Манғышлаҡ тирәһендә торғандар. Ибн Әл-Әсир ҡайҙан алыптыр, быларҙың Нәүширван илә мөхарибәләрен[1] зиҡер итә. Әбү Ғәбит Әл-Бакири хәҙрәте Ғосман хәләфәте ваҡытында сәхәбәләрҙең был бөрйәндәр менән һуғышҡандары булғанын һөйләй һәм шул ваҡыттағы шағир Әбү Нәхил Әл-Тамими тигән кемсә: Фәғәдү Әхүәле бәйен Рум вә Бержана, тип бөрйәндәрҙе шиғырында зикер иткән. Бөрйәндәр ул ваҡыт һаман башҡорттар илә бергә йәки башҡорттарҙың бер ҡәбиләһе һүрәтендә булған булырға кәрәк. Сөнки башҡорттар ун алтынсы ғасырға ҡәҙәре Иртыш илә Арал күле араһының шималында бәжәнәк вә кимәк халыҡтары илә күрше йәшәгәндәр[2].

Һуңынан ҡаҙаҡтарҙың ҡыҫтауы илә генә шималға (төньяҡҡа) хәҙерге урындарына күскәндәр һәм шунда бәғзе фин ҡәбиләләре илә ҡатышҡандар[3]. Был бөрйәндәр ҙә хәҙерге урындарына шул ваҡытта килгән булһалар кәрәк. Хандары Ҡазан фәтехе һуңында Русияға ғарыз иткәндәр, һәм 17—18-се ғасырҙа башҡорт фетнәләрендә бөрйәндәр иң алдынғы урында булғандар. Шул рәүешсә беҙ араларында булған бөрйән халҡы ла пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәләйһиссәләмдең тыуыуынан элгәре үк тарих битенә кереп ҡалған һәм был көнгә ҡәҙәре онотолмай килгән бер ҡәүем. Быларҙың араһында йөрөгәндә лә ҡәҙерен белеп йөрөр кәрәк әле, тип уйланыҡ.

## III

Беҙ бөрйән араһында фәнни бер маҡсат илә кермәнек. Ошоноң өсөн дә йөрөүебеҙ фәнни бер төҫ ала башламай ине тип, ишеткән ҡурайҙар, йырҙар, хикәйәләрен һәммәһен дә ҡыҙыҡ өсөн генә тыңлаштырҙыҡ. Иҫке яҙыу фәлән йыйманыҡ. Йыр һәм хикәйәләрҙе яҙып маташманыҡ. Ҡымыҙ эсеп торған ауылыбыҙҙа рәтләп ҡурай уйнай белгән баш-

---

[1] мөхарибәләрен — һуғыштарын

[2] Академия науктың тарих һәм ғилми лисан (тел) шөғбәһенең запискаларында 1897 йыл 1-се жилд, № 4, с. 109-ҙы ҡарағыҙ. Һаҙый Атласи был йылғы 9—10-сы «Шура»ларҙа башҡорттарҙың хатта Ибн Фадлан ваҡыттарында (IV ғасыр һижри башында) үк ошо урындарында булыуын һөйләгән. Ләкин Ғардиҙиҙың «Зәйнел әхбәр» исемендә 442 һижрилә таәлиф иткән әҫәре уға мәғлүм булмаған һәм ул бәжәнәк халҡының ҡайҙа торғандары хаҡында ла яңылышҡан. Ошоноң өсөн ул йәнүб шәреҡҡә һуғылырға тейеш булған 20 мәрхәлә төньяҡҡа һуҙған. *(Ә. В.)*

[3] «Живая старина», 1896. Вып. III—IV һәм «Мөстәфад әл-әхбәр», жилд I. С. 102. *(Ә. В.)*

ҡорт юҡ ине. Бер ҡарт уйнап ҡараһа ла, булдыра алманы. Эске бөрйән башҡорттары белерҙәр әле тинек һәм юлда барғанда ла ҡурай тауышы ишетелмәҫме тип ҡолаҡ һала-һала барҙыҡ. Ялтыран йәйләүенә барғас, төшкән хужабыҙҙан ул тирәлә ҡурайға оҫта кешеләрҙең исемдәрен яҙып алдыҡ, шул ауылдан бер-ике ҡурайсыны уйнарға саҡырҙыҡ. Зыяетдин һәм Хәйрулла исемендәге егеттәр ине. Ҡурайҙа ауыл араһында йыйылып уйнарға уңайһыҙланалар икән. Ғәҙәттәренсә, кис булғас йәйләүҙең ситендә тау башына мендереп ут (костер) яҡтылар һәм әкертен генә уйнай башланылар. Беҙ барҙыҡ. Уйнаусылар зарурһыҙ ғына уйнайҙар. Беҙ боронғо көйҙәрҙе һораныҡ. Уйнаштырҙылар. Ләкин аҙ беләләр икән. Боронғо шағирана тормошо йыраҡлашҡан һайын халыҡ уның йырҙарын да, көйҙәрен дә оното баралар, уның урынына йәнә мәғнишерәк булған татар таҡмаҡтарын, частушкаларҙы ҡабул итә баралар. Хәҙер башҡортта ысын инҡилап ваҡыты. Боронғоноң ҡалдыҡтары инде уларҙа бик ғәзиз һаналырға, тейеш. Оҙаҡ үтмәҫ, ул оҙон моңло көйҙәр кереп ҡалһалар, нота дәфтәрендә генә ҡалырҙар. Уларҙың урынын ишғал итеп бөтөрөр. Был йәш егеттәр беҙгә «Юлтый», «Ҡаҙаҡ», «Ишмырҙа», «Ашҡаҙар», «Циолковский», «Ҡарабаев», «Йософ майор» көйҙәрен уйнанылар. «Перовский», «Суҡ муйыл», «Заһира» тигән көйҙәргә бейенеләр. Икенсе көн икенсе ауылда йәнә шундай уҡ костер янында йыйылып ултырҙыҡ. Бында Бәхтиәр тигән егет туғыҙҙан ун икегә ҡәҙәре «Айыу майор», «Ҡалматай» кеүек көйҙәрҙе уйнаны һәм береһе яҡшы ғына тенор тауыш илә ҡушылып йырланы. Беҙ был уйнаусыларға егермешәр тин аҡса биргән инек, ахыры быларҙа был аҡса күп күренәлер, тағы күңелләнеп тағы уйнайҙар ине. Беҙгә бер бөрйән, шул урындан йөҙ саҡрым ҡәҙәре ерҙә Темәс һәм Күсәй ауылында бер кеше «Мораҙым» тигән көйҙө уйнаны, тип һөйләне. Мин быны ишетергә бик теләнем. Сөнки ул ғәйәт ҡыҙыҡлы тарихи бер йырҙың көйөлөр. Алтын Урҙа ханы Туҡтамыштың вәзире Иҙеүкәй үҙенең балаһы Нуреттин (Мораҙым) менән боҙолошҡан. Ошо хәдисә хаҡында бөтөн шимали төрктәрендә әллә ни ҡәҙәре хикәйәләр вә йырҙар һөйләнелә. Радлов, Потанин, Мелиоранский, Вәлиханов вә ғәйреләр был хаҡтағы хикәйә вә йырҙарҙы яҙып алғандар. Башҡорт араһындағы «Мораҙым» йыры «Йәдкәр» сәхибе Өмөтбаев тарафынан яҙып алынып шул китабында баҫылған. Әммә уның йырын, көйөн башҡорт ауыҙынан, ҡурайҙан ишетеп яҙып алғанда ул хоҙа тарафынан бирелгән донъя баһалы бер ниғмәт булыр ине. Хоҙа насип итерме шуны ишетергә вә яҙып алырға? Тик был юлы насип булманы; ямғырҙар ул ергә барып етергә ирек бирмә-

неләр. Алланан һораным, шуны ишетһәм икән, тинем. Сөнки ул беҙҙең шимали урта төрктәрҙең мәңгелек бер тарихи романсылар. Халыҡ уны хәҙер биш йөҙ йылдан бирле һаҡлап килә. Әгәр бөтөп юғалып китһә, ҙур бәхетһеҙлек булыр. Башҡорт көйҙәре вә йырҙары йыйыу хосусында рус ғоләмәһе бик аҙ иғтинаи[1] иткәндәр. Игнатьев кеүектәр 1870 йылдар тирәһендә Императорский географический йәмғиәттең Оренбург шөғбәһенең мәжмуғаларында башҡорт йырҙары баҫтырғандар. Профессор Березиндың төрки хрестоматияһында III жилдендә башҡорт йырҙары баҫылған. Башҡорт көйҙәрен йыйыу хосусында нығыраҡ тырышҡан кемсә Рыбаковтыр. Ул башта 1894 йыл «Живая старина» журналының III—IV һандарында башҡорт, типтәр, татар йыр вә көйҙәре хаҡында тип бер әҫәр яҙҙы /(ҙур күләмдә, 40 сәхифә[2]). Бында байтаҡ ҡына типтәр, башҡорт, татар көйҙәренең ноталарын яҙған. Икенсе 1896 йылда Императорский музыкальный общество мәжмуғаһында ҡурай хаҡында бер әҫәр яҙҙы. 1898 йыл Академия наук запискаларында һәм айырым һүрәттә «Урал мосолмандарының музыка һәм йырҙары» тигән олуғ әҫәрендә нәшер иттерҙе. (Был һуңғыһын Академия нәшер иткән). Ул һуңғы әҫәрендә байтаҡ башҡорт көйҙәрен вә йырҙарын дәрж иткән[3] һәм башҡорттарҙың тормоштарынан байтаҡ нәмә яҙған. Ҡурайсыларҙың рәсемдәрен алған. Уның был яҙыуҙары 1893—95 йылдарҙа Верхнеуральск өйәҙендә ошо башҡорт музыкаһы йыйыу ниәте менән сәйәхәтенән һуң сыҡтылар. Бынан башҡа Лейпцигта вә Петербургта бәғзе бер башҡорт көйҙәренең ноталары нәшер ителделәр. Ләкин уларҙың баштарына уҡ Рыбаковтан алғандарын яҙып ҡуйғандар. Рыбаков Верхнеуральск өйәҙендә Төңгәүер волостары тирәһендә генә йөрөгәне өсөн иң күп, хатта көйҙөң иң саф ерҙәрендә булмаған тийергә мөмкин. Бының өҫтөнә Рыбаков үҙе үк Европа кешеһенең ҡолағы башҡорт көйҙәренә тиҙ эйәләшә алмай тип иғтираф итә[4]. Башҡорт музыкаһы менән яҡшы ашна булған бер зат: Рыбаков әҫәре сүп араһына ырғытылырға кәрәк, ул башҡорт көйөн һис аңламаған, һис белмәгән тигән ине. Ҡазанда башҡорт көйҙәре тип уйнаған «Һаҡмар» менән «Ашҡаҙар» бында бөтөнләй башҡа. Йәғни башҡорт көйҙәре татар уйынсылары тарафынан да рәтләп өйрәнелмәгән. Ошоноң өсөн был инде башҡорт көйҙәрен башҡорттарҙың үҙҙәренән башҡа халыҡ рәтләп белмәй һәм ул ҡағыҙға яҙылмаған тип әйтергә

---

[1] и ғ т и н а и — иғтибар
[2] с ә х и ф ә — бит
[3] д ә р ж и т к ә н — индергән
[4] и ғ т и р а ф и т ә — таный

мөмкин. Шулай итеп, башҡорттарҙың музыкаһы ла тәҡрибә ҡул теймәгән көйө тора. Шимали төрктәрҙең эсендә башҡорт халҡы үҙенең музыкаға ғына шәплеге менән айырыла. Ҡырғыҙ, татар вә ғәйреләрҙә бындай байлыҡ юҡ[1]. Беҙ үҙебеҙҙең милли музыкабыҙҙы заиғ итһәк[2], истиҡбалыбыҙ[3] өсөн ҙур енәйәт яһаған булырбыҙ. Башҡорт көйҙәрен тыңлап ултырғанда нисек тәьҫир итә алғанлығы хаҡында берәй һүҙ әйтеү нейәтендә түгелмен. Ошондай музыкант булмағаным өсөн был көйҙәрҙең музыка ғилеме йәһәтенән әһәмиәте, төрлө музыка араһындағы урыны хаҡында ла бер һүҙ әйтә алмаймын. Тик был хаҡта мәҙкүр Рыбаковтың ғына бәғзе бер һүҙҙәрен күсерһәм, бер ҡәҙәре файҙа булыр тип уйлаймын. Ул әйтә:

«Башҡорт йырҙары араһында иң күбеһе бик күтәренке тауышлы баритон булалар. Теноруар тағы күберәк була. Бындай йырсылар ауыр фәүҡылғадә йәһәтенән балалар тауышына яҡынлашалар. «Бас» булған йырсылар бик һирәк. Йырлаған ваҡытта һуңғы нотаны бик оҙон итеп, бик иғтибар менән тауыштарын һелкетеп һуҙалар. Был хосусиәткә бигерәк оҙон йырҙарҙы йырлағанда диҡҡәт итәләр.

Был башҡорттарҙың йырҙарында, көйҙәрендә, мәҫәлән, рус йырҙарында булған кеүек тәрәҡҡи иткән[4] һәм тәрән хасиәт һәм ҙур лиризм әҫәрҙәре юҡ. Бында йырлаусы бөтөнләй бер ситтә битараф тора. Һәм тәбиғи музыканы тыш яҡтан ғына ҡуҙғатҡан кеүек күренә. Йәғни, ул йырҙарҙың үҙҙәрендә лә әллә ниндәй тәрән хасиәт күренмәгән кеүек, йырлаусылары ла тәрән хасиәт аҫтында йырламайҙар. Быларҙа әле ныҡлап, ысынлап рухтан сыға торған тауыштар юҡ, йәки булһа ла беҙ аңлай алмайбыҙ булһа кәрәк.

Башҡорт йырҙары артыҡ шиғриәттәре һәм йәнгә артыҡ үтә торған көйҙәре менән айырылалар. Башҡорттарҙың музыкантлыҡ һәм шағирлыҡтары татарҙар менән ҡыяс[5] ҡабул итмәҫ дәрәжәлә юғарылыр. Уларҙың шағирлыҡтары Уралдың ғәжәйеп тәбиғәтенә артыҡ яҡынлыҡтары сәбәпле булһа кәрәк. Уларҙың әле тәбиғәттең ысын балалары булыуҙары, әхләҡ йәһәтенән икенселәр тәьҫиренән боҙолмаған, тирә-яҡ мөхиттәренең киң, иркен булыуы сәбәпле араларына шәхси дошманлыҡтар әле кермәгән таҙа, саф бу-

---

[1] М. М. Готовитский һәм Пфеннингтарҙың ҡырғыҙ һәм һарт йыр вә көйҙәре хаҡында «Этнографическое обозрение» журналының 1889 йылғы 3-сө китапта яҙған мәҡәләләрен һәм Миллерҙың 1903 йыл Мәскәүҙә нәшер ителгән ғосманлы төрктәрҙең көйҙәрен ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[2] заиғ итһәк — юғалтһаҡ

[3] истиҡбалыбыҙ — киләсәгебеҙ

[4] тәрәҡҡи иткән — алға барған

[5] ҡыяс — сағыштырыу

лыуҙары уларҙың артыҡ дәрәжәлә садә һәм хыялпәрәст (уйсан) булыуҙарына сәбәп булған. Уларҙың әҙәби ҡаттары әле бик таҙа: араларында шағирҙар йырҙар сығарып, шуға махсус көйҙәр сығарыусы һәм шағирлыҡ һәм композиторлыҡ хасиәттәренә малик булған кешеләр бар. Улар ҡурай һәм думбырала уйнайҙар. Ҡурайҙың ваҡ тишектәре ярҙамы менән килеп сыҡҡан тауыштар йомшаҡ һәм ҡурай шул тиклем йәнгә ныҡ тәьҫир итә торған йомшаҡ вә аҡрын ғына тауышлы булыуы менән башҡорт көйҙәре бик артыҡ дәрәжәлә киң һәм матур. Шул матур көйҙәрҙе юғары (нәҙек) тауышлы булған башҡорт йырсыһы аҡрын ғына һуҙып оҙонайтып ебәрһә, тыңлап ултырыусылар ниһайәтһеҙ бер юғарылыҡта аҡыртын ғына юғалып киткән кеүек булалар. Әммә татар йырҙары иһә фәҡәт бер урында ғына тыпырҙап торған йәки бер урынға бәйләтеп ҡуйылған кеүек торалар. Башҡорт көйҙәренең үҙҙәренә махсус булған бер матурлыҡ (прелесть)тары, бер серҙәре бар. Уларҙа ниндәйҙер бер билдәһеҙ нөктәгә тәүжа итеү[1], ынтылыу һиҙелә. Башҡорт көйҙәрендә башҡа шәреҡ көйҙәрендә булған кеүек юҡ-бар хосусиәттәр сығарып, биҙәкләп маташыу юҡ. Быларҙы ритм (бер тигеҙ ағым) тота. Татар вә ғәйреләрҙең йырҙарындағы кеүек шылтыр-мылтырҙары юҡ. Һәм улар Европа көйҙәренең ритмдарынан айырылһа ла бик аҙ айырылалар. Быларҙы ишеткән ваҡытта инсан әҙәм быларҙың тәрәҡҡиһе менән килеп сыҡҡан һуңғы заман (Европа) гармонизацияһын уйлай башлай. Һәм ошо йәһәттән уларҙа айырым бер яңылыҡ, бер тәрәҡҡи әҫәре һиҙелә. Бының илә мин был көйҙәрҙә Европа тәьҫире бар тип әйтмәймен. Нисек тә быларҙа бер яңылыҡ бар, тәрәҡҡи бар тип кенә әйтәмен. Был ҡәүемдең (башҡорттоң) мәғишәттәге тәрәҡҡи аҙымын уның шағирлыҡтағы эшлеклелеге (поэтическая деятельность) менән тиңләгән ваҡытта уның беренсе хосуста бик артта ҡалғанлығы, әммә икенсе шағирлыҡ йәһәтенән тиңәлмәҫлек дәрәжәлә алға киткәнлеге күренә. Уның музыкантлығы өҫтөнә араларындағы мәҡәлдәр, мәҫәлдәр, хикәйәләргә байлыҡтарын ҡушһаҡ, беҙҙең был дәғүәбеҙ иҫбат ителгән булыр. Бөтөн тәфтишебеҙҙең[2] нәтижәһе шул ки: был ҡәүем мәғишәт донъя әһеле булырға ҡарағанда артығыраҡ художник. Ул үҙен ихата ҡылып алған Уралдың тәбиғәтендәге шағирлыҡ менән иҫергән. Ул донъяла мәғишәттә ҙур эш башҡара ла алмаҫ һәм уға истиғдатлы ла түгел. Ул һиҙеүсе һәм һәр ваҡыт уйлаусы шағир[3].

---

[1] тәужа итеү — йүнәлтеү
[2] тәфтишебеҙҙең — тикшереүебеҙҙең
[3] «Живая старина», 1894. Вып. III—IV. С. 354—364.

Музыка бабында ихатаһының киңлеге менән булған Рыбаков йәнәптәре көйҙәре хаҡында ошо фекерҙе әйтәм. Улар башҡорт музыкаһында яҡшы уҡ ҙур тәрәҡҡи әҫәре таба. Ләкин ундағы матурлыҡты фәҡәт бер тәбиғи генә матурлыҡ тип атай һәм асыл көйҙә ҙур лиризм һәм тәрәҡҡи иткән хасиәт әҫәре тапмай йәки булһа ла быны «беҙ һиҙеп бөтөрә алмайбыҙҙыр» ти. Рыбаков йәнәптәренең ошо һүҙҙәренән һәр икеһе ихтимал дөрөҫ булһа кәрәк, ләкин һуңғыһы тағы ла дөрөҫөрәк булыр. Башҡортта хасиәттең музыкаларында инғиҡас[1] итәрлек ысын тәрәҡҡи булмаҫ. Бәлки тышҡы культура йәһәтенән түбән булыуы эске бер яҡтан ҙур тәрәҡҡи итеүенә ирек бирмәйҙер. Ләкин вә ниһәйәтһеҙ оҙон ғүмерендә үҙенә күрә бер кимәл тапҡан булыуы ла шөбһәһеҙҙер. Һуңғы өс-дүрт ғасыр эсендә башҡорт үҙенең иркен матур тормошондағы ләззәтенең янына ҡайғы һәм хәсрәттәрҙе лә башҡа төрки ҡәүемдәрҙә күрелмәгән бер һүрәттә күрҙе. Хасиәттең иң ҡаты хөкөмө аҫтында кисергән ошо ғасырҙар эсендә «Урал» уларҙы үҙенең ямалы[2] менән тәрбиә итте. Һәм шағирлыҡтарын һүндермәй һаҡларға өлгөрҙө. Тарихтың, Уралдың тәрбиәләре арҡаһында башҡорт, тышҡы культураһының бүтән булыуы сәбәпле ысындан тәрәҡҡи иткән хасиәткә малик була алмаһа ла, тәбиғи шағирлыҡ, тәбиғи лириклыҡтың өҫ кимәленә етә алған. Европа мәҙәниәтенә һис мөнәсәбәте булмаған тәбиғи ҡурайҙарының тишектәренән аҡрын ғына сыҡҡан моңло, тәьҫирле тауыштарҙың серҙәрен төрки телен, төрки ҡәүеменең әхүәле рухиәһен бер ҙә белмәгән Рыбаков йәнәптәре аңламаһа ла бик хаҡлы булыр. Йәнәб ғалиҙәре бик белеп иғтираф итәләр.

Рыбаков йәнәптәре был көйҙәрҙә боронғо башҡорттарҙа булмаған тигән кеүек бер мәғәнә менән — яңылыҡ таба. Европа тәьҫире арҡаһында килеп сыҡҡан тиергә оялһа ла, яңылыҡ бар тигәнен ҡалдырмай. Мин иһә быға мөслим булмаҫ инем.

Ҡытай мөәррихе[3] Мин Хун һәм Плано Карпини татар хандарының һәм халыҡтарының музыкаға ни дәрәжәлә бирелгәнлектәре хаҡында күп хәбәрҙәр яҙғандар. Мин Хун татар халҡы мәжлестәрен йыр һәм музыканан башҡа булмаған, тип һөйләй[4].

---

[1] инғиҡас — сағылыу

[2] ямалы — матурлығы

[3] мөәррихе — тарихсыһы

[4] Труды Восточного отд. Имп. Рус. Арх. общ. СПб. 1856, т. IV. Бында Васильевтың Урта Азия тарихына ғаид ҡытайсанан тәржемә иткән әҫәренең һәм Кулибаевтың монгол-татарҙарҙың ғәҙәттәре хосусында яҙғанының музыка бабтарын ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

Бату хан янына килгән ғарбе Европа илселәре лә быны хикәйә итәләр. 960-сы йылда Урумчи тирәһендә тороусы уйғырҙарға килгән ҡытай илсеһе Ван-Ян уйғырҙарҙың музыка һәм йырын бик ҡотло булғанлыҡтан хикәйә итә. Уйын мәжлестәре яһайҙар, ғади мәжлестәрендә лә һәр ваҡыт музыка була; быларҙа мандолина һәм 20 ҡыллы (струналы) гитаралар бар, ти[1].

Иакинф тәржемә иткән ҡытай тарихтары төрктәрҙең таһундар, Тукиулар дәүерендә музыка бик ҡотло булғанын һөйләйҙәр. Урта Азияла уйғыр ханы Ҡәҙер хан, сығатай ханы Туҡлыҡ хан, Тимер бабаларынан Бабыр Солтан, Әбү Сәғиттәр һәм Ғалишир Навои, Панаи кеүектәр музыкаға күп оҫталыҡтары менән мәшһүр булдылар. Бабыр менән Ғалиширҙың музыка һәм прасодия фәненә ғаид әҫәрҙәре булған. Мәшһүр «Ҡотадғу белек» вә уға оҡшатылып яҙылған «Мәхбүб-әл-ҡәлеб» китаптарында уйын вә музыка хеҙмәттәре һаналған. Шәйбани хан үҙенең бик яҡшы музыканты Ғәлләм Шадины Ҡазан ханы Мөхәммәт Әмингә һәҙиә иткән. Хандар вә вәзирҙәр янында вә башҡа халыҡ араһында, һуң заманда муллалар фекере ҡеүәт тапмаҫлыҡтан элгәре, шул дәрәжәлә мәшһүр һәм ҡеүәтле булған ки, уны һанап торорға өлгөрөп булмаҫ. Иҫке заманда музыканың беҙҙең халыҡҡа шул дәрәжәлә таралған булыуы төрки араһында ошо көн музыка йәһәтенән ҡәрҙәшлек булыуға һәм араларынан, мәҫәлән, башҡорттар кеүек яҡшы условиялы булғандарында уның яҡшы тәрәҡҡи иткән бер һүрәтен һаҡлап алып килеүенә сәбәп булған. А. Д. Руднев 1910 йыл мөстәшәрҡ[2] Потаниндың етмеш йыллыҡ юбилей шәрәфенә төҙөлгән мәжмуғала «Монгол ҡәбиләләренең көйҙәре» тип бер әҫәр нәшер итте. Ҡаҙаҡ һәм һарттарҙың көйҙәре Готовитский һәм Пфеннингтар, ғосманлы төрөктәрҙең көйҙәре (1903 йыл «Труды по востоковедению»ның III жилде) Миллер тарафынан нәшер ителгәнен әйткән инем. Яграфия йәмғиәтенең этнография шөғбәһенең[3] записқаларында 90-сы йыл (17-се жилд, 1-се жөзьә) Подносов тарансы көйҙәрен нәшер итте. Йәнә шул уҡ Подносов 90-сы йыл Ҡазан археология йәмғиәте мәжмуғаһында (13-сө жилд, 1—6 жөзьәләр) шундай уҡ тарансы көйҙәрен нәшер итте. В. Мушков йәнәптәре шул уҡ Ҡазан тарих йәмғиәте мәжмуғаларының 11, 12, 14, 17-се жилдтәрендә «Материалы для характеристики музыкаль-

---

[1] **В. Григорьев. Восточный Туркестан. СПб. 1863, т. II. С. 267—270.** *(Ә. В.)*

[2] **мөстәшәрҡ — шәреҡте өйрәнеүсе ғалим**

[3] **шөғбәһенең — бүлегенең**

ного творчества инородцев Волжско-Камского края» тип татар, башҡорт, фин көйҙәрен баҫтырҙы. Бынан башҡа Себериә, Кавказ, Ҡырым татар көйҙәре лә төрлө ерҙәрҙә аҙыраҡ баҫылғылаған. Бына ошо мәжмуғаларҙағы көйҙәрҙе бер-береһе менән сағыштырып ҡараған, ентекләгән ваҡытта араларындағы ҡәрҙәшлек ап-асыҡ күренеп тора. Фәүҡылғадә киң интервал: секста, шпетим, нондарҙы истиғмал итеү[1], традицияларға ҡарамайынса, звукорядтарҙы бик киң итеү, ете тактлы йырҙарҙың күплеге бөтөн был көйҙәр араһында аҙмы-күпме уртаҡ бер һүрәттә бар. Музыка йәһәтенән һарттар, татарҙар байтаҡ түбән һаналалар. Шуның менән бергә Русиялағы татарҙар араһында Шәрҡи Төркөстан һарттарының көйҙәре бар[2].

Төрки ҡәбиләләр һис бер урында музыканы назыри белмәйҙәр. Быларҙың араһында музыка, көй берлектәренең булыуы мотлаҡ рух берлеге, традиция арҡаһында ғына килә алған. Бөтә тарихтарынан ағып килгән һәм милли хосусияттары менән айырылған музыка быларҙың йөрәктәренә 3—4 ғасыр эсендә эҙен юғалтмаҫлыҡ дәрәжәлә ныҡ урынлашҡан. Ошоноң өсөн дә беҙ башҡорт музыкаһындағы көстө Рыбаков йәнәптәре кеүек яңы бер эш тип ҡарамайынса, төрк милләтенең тамырынан килгән милли гармония, көйҙәренең музыканы һаҡларға истиғдаттары[3] булған башҡорттар араһында зөһүри[4] тип кенә ҡарайбыҙ. Академияның Ф. Корш йәнәптәре З.В.О.И.Р.А.О. мәжмуғаһының XIX жилдендә (1909) «Төрки халыҡтарының иҫке милли көйҙәре» тип яҙған ҡиммәтле әҫәрендә был әллә ни ҡәҙәре төрки ҡәбиләләренең һәммәһенең дә йырҙары ритм йәһәтенән бер тыума булғанлыҡтарын иҫбат итте. Был да беҙҙең дәғүәбеҙгә дәлил булырға ярай.

Төрки ҡәбиләләр (әлбиттә, Иран вә ғәрәптәр тәьҫирендә булған йәнүби төрөктәр — ғосманлылар, Иран төрөктәре түгел, шәрҡи вә урта төрөктәр) араһында ни ҡәҙәре көйҙәр булһа, һис шөбһәһеҙ быларҙың барыһының да асылы бер һәм былар кәлсе[5] бер целое тәшкил итәләр. Әгәр беҙҙең арабыҙҙа ысын композиторҙар һәм ошо ҡул теймәгән йәки бик аҙ ғына ҡул тейгән көйҙәрҙе йыйып бер эштәр эшләй башлаһалар, беҙҙә башҡа халыҡтар алдында маҡтанырға ярарлыҡ бер милли музыка килеп сығыр ине. Ике мең ҡәҙәре йылдарҙан бирле дауам итеп килгән милли төрөк музыкаһы аяҡҡа баҫһа, ул үҙенең ҡаты ҡулы

---

1 истиғмал итеү — ҡулланыу
2 «Этнографическое обозрение», 1899. Книга 3-я. С. 91. *(Ә. В.)*
3 истиғдаттары — һәләтлектәре
4 зөһүри — барлыҡҡа килгән
5 кәлсе — кеүек

менән беҙҙе икенсе милләттәрҙең мәғнәүи тәьҫирҙәренә кереп китеүҙән тотоп торор ине.

Июлдең 13 көнө инө. Юғары Ямаш ауылында ҡурай тыңланыҡ. Ҡурайсы башҡорт Бәхтиәр әллә ни ҡәҙәре башҡорттар араһында костер алдында ултырып уйнаны. Уйнауы һәр ни ҡәҙәре бик шәп булмаһа ла, ярарлыҡ ине. Сәғәт 12-ләрҙә ҡайтып яттыҡ. Башыма Рыбаковтың әйткән һүҙҙәре вә бындай байтаҡ күп заттарҙың «беҙ мәҙәни кешеләр» тип ғорурланып ҡына беҙҙең өҫкә хөкөм яһаған ваҡыттарында яңылышыуҙары, бөтөн ҡәбиләләрҙең көйҙәре нисек бер ергә йыйыла алғандары килделәр, йоҡларға ирек бирмәнеләр. Иптәшемдең рәхәтләнеп ғырылдап мине ҡыҙыҡтырып йоҡлап киткән ерендә мине ни ҡәҙәре уйҙар борсоғанын күрһәтер өсөн был урында юғары һүҙҙәрҙе яҙҙым. Волостың старшинаһы вә башҡа мәэмүрҙәры бергә инек. Халыҡтың күп кенә йыйылған урынында старшинаға әйттем: «Һин старшина, ишан хәҙрәттәре кеүек халыҡҡа тәҡүәлек[1] вә диндарлыҡ тарафың менән генә күренергә теләйһең, боронғо кантондар кеүек ҡурайсыларҙы артыңдан эйәртеп гөрләтеп йөрөһәң ярамаҫ инеме?» — тинем. Юҡ, беҙгә ул кантондар кеүек булырға тура килмәй шул, тине. Исемдәрен яҙып алған мәшһүр ҡурайсыларҙан Ғиссам тигәнен осраттыҡ. Ҡурай уйнауын һораныҡ. Тәүбә иткән тинеләр. Үҙе лә: «Мин инде ҡурайымды һындырып ташланым»,— тине, уйнаманы. Мин старшинаға ла, Ғиссам ағайға ла эсемдән көйҙөм, асыуландым. Ләкин йәнәнән бер һүҙ ҙә әйтмәнем; сөнки муллаларҙың музыкаға ҡаршы тәғлимәте менән зәһәрләнгән[2] был кемсәләргә әйтеп аңлатып була торған хәл юҡ.

## IV

Ун өсөнсө ғасыр аҙағында татар хандары янына сәйәхәт иткән Европа сәйәхәтселәренән береһе ул ваҡыттағы бабайҙарҙы ошо һүҙҙәр менән тәғриф итә: «Был халыҡ кәйеф-сафа мәжлестәрендә илаша, әммә һуғыш майҙандарында көләшә торған халыҡтыр. Улар (төрк-татарҙар) үҙҙәренең башлыҡтарына бөтөнләй күҙ йомоп эйәрәләр. Һалҡынлыҡ һәм аслыҡ былар өсөн бер нәмә лә түгел. Һуғыш урындарында фәүҡылғадә ғәйрәтле, ҡыйыулыҡ урындарында түҙемдәр. Тыныслыҡ, рәхәт тигән нәмәләрҙе белгеләре лә килмәй. Ашау өсөн, кейем-һалымда тәклифтәре бер ҙә юҡ. Үҙ араларында бик иттифаҡ[3], барыһының күҫе-

[1] тәҡүәлек — дин ҡушҡан
[2] зәһәрләнгән — ағыуланған
[3] иттифаҡ — берҙәм

ле бирәү генәлер икән тип уйлайһың; һис ҡысҡырышмаҫтар, һуғышмаҫтар. Әммә дошман өсөн шәфҡәт тигән нәмәне белмәйҙәр. Шул дәрәжәлә ки, йөклө ҡатындарҙың ҡорһағынан хатта балаһын ярып алалар. Әммә биттәрендә ҡыҙғаныс әҫәре лә күренмәй...»

Бөрйән башҡорттары араһында сәйәхәттең ошо ғибәрәһе хәтергә килде. Мин ул боронғо тәбиғәттең былар ҙа бик әҙ әҫәрҙәре ҡалғанын белә инем. Башҡорт фетнәләренең туҡтағанына инде йөҙ илле йылдар булып китте. Һуғыш вә һуғышсанлыҡҡа ғаид иҫке йырҙар тарих биттәрендә генә ҡалалар. Иң һуңғы һөнәр күрһәтеүҙәре Наполеон һуғышында булды. Һуңғы һуғыштар инде боронғолағы кеүек айырым полк һүрәтен тотмағанлыҡтан, уларҙың һөнәрҙәрен күрһәтмәйҙәр. Башҡорт, рус, татар ғәскәрҙәре бергә булғас, айырым хөкөм сығарып булмай. Күрше ҡәүемдәрҙең тәьҫире уларҙың иске культураларына зыян иткәнен һөйләп үткәрҙек. Боронғо иттифаҡ ҡалмаған. Башҡорттарҙың кескенә ауылдарында ла халыҡ бер фекергә, бер ҡарарға килә алмай йөрөйҙәр. Күп ауылдар сабын өсөн ҡалдырылған яландарҙы сәләмәт ала алмайҙар, иғтибар итмәйҙәр, ашау-эсеү, кейем хосустарында тәклифһеҙлектәре, тормошоноң ни ҡәҙәре ауыр, уңайһыҙ булыуына бер ҙә иғтибар итмәй, зарланмай торған (беспечный) булыуы сәйәхтең һүҙҙәрен иҫкә төшөрә.

Волостың старшинаһы беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Унда барғансы юлда ике-өс ауылда туҡтаныҡ. Волостың бөтә мәэмүрҙәре бергә инеләр. Башҡорттар мәэмүрҙәренең килерен ишетеп торған һәм тәкә һуйып әҙерләнеп көткән була инеләр. Старшиналар менән бергә беҙ ҙә береһе артынан береһенә тәкә ашарға йөрөнөк. Бында старшина-губернатор, урядник, полицмейстер урынына. Халыҡтың ихтирамы бик ҙур, хатта үҙҙәренең покорностарын күрһәтеүгә зәләт[1] дәрәжәһенә етәләр.

Беҙ, төрк халҡы, ғәскәр булып тыуҙыҡ, ғәскәр булып үҫтек, ғәскәр булып ғүмер итәбеҙ. Ғәскәрлек низамы (дисциплинаһы) беҙҙең ҡаныбыҙға, итебеҙгә һеңеп бөткән. Беҙҙең бөтә тарихыбыҙ был йәһәттән бер һалдаттың тарихылыр. Беҙҙең тарихыбыҙҙы ошо йәһәттән иң оҫта итеп тасуир иткән зат Леон Ҡаэн булыр. Ул үҙенең беҙҙең тарихыбыҙға ғаид әҫәрҙәрендә бик күп тарихи факттарҙы теҙеп алып китә лә шуларҙың сәбәптәрен эҙләй һәм, ниһәйәт, иң күбеһен төрктөң ғәскәрлегенән килгән тип бөтөрөп ҡуя. Беҙҙең был ғәскәрлегебеҙ бөгөн бер нәмәгә лә ярамаҫ бу-

---

[1] зәләт — түбәнлек

лып ҡалды. Инде беҙ унан яфа ғына сигәбеҙ. Беҙ һәр эштә үҙебеҙгә юлбашсы (предводитель) көтәбеҙ. Ғаяз әфәнде: «Беҙҙә егермеләп кеше бер ергә йыйылырға кеше юҡ бит, тип әйтәләр ҙә торалар»,— ти ине. Һәм шулай, беҙҙә йөҙ кеше йыйылһа ла, бер башлығы булмаһа, бер эш башҡара алмайҙар. Беҙ һәр эштә бер башыраҡ, тәьҫирлерәк кешегә ҡарап эш башҡарабыҙ. Беҙҙең халыҡ иҫке заманда башлыҡтарының насари[1] диненә кереүе менән насари, мосолман булыуына ҡарап, мосолман була ине. Кирәйәт ханлығының хандарына ҡарап насари булыуҙары, Бағдад янында ун мең сатыр төрктөң бәктәренә ҡарап мосолман булыуҙары был йөмләнәндер. Башҡорт, нуғай, ҡаҙаҡ хандары Русия тәбәғаһына бирелделәр. Сөнки Ҡазан, Әстрхан, Себер хандары быны ҡабул иткәндәр ине. Үҙҙәренең милләтенән назирҙары ла фәҡәт ғәскәрилек күҙе менән генә булғаны өсөн төрөктәрҙең икенсе милләт тәьҫиренә бирелеп китеүҙәре йәки бөтөнләй милләт алмаштырыуҙары бик еңел була ине. Һуңғы заманда беҙҙең ижтимағи, әҙәби эштәребеҙ өҫтөнән фәлсәфәирәк итеп ҡарап торғанда шул боронғоноң тәьҫире асыҡ күренеп тора. Мәсьәләләргә әсаслы[2] итеп ҡарай алмау, һәр эштә кешегә ҡарап эш ҡылыу (посредственность), әлбиттә, шул иҫке тарихи ғәскәрилектең эҙҙәре инде.

V

«Миндеғол» ауылы. Беҙ бында волосной правлениеның өйөндә, ул ҙур ғына, матур ғына булмаһа ла, ике көн ҡалдыҡ. Туҡтауһыҙ ямғыр булды. Ағиҙелдең буйында бик матур мәнзәрәле (күренешле) тауҙар араһында ултырған бер ауылдың етешлеге менән файҙалана алманыҡ. 17 июль ине, киттек. Был ауылдан ун биш саҡрым мәсафәлә[3] «Мәсем» тигән бейек тауға менергә, шунан тирә-яҡты ҡарарға булдыҡ. Шул 15 саҡрым беҙгә тотош көйө тау булды. Менә-менә йөҙәп бөттөк. Минең ат насарыраҡ ине, йонсой төштө. Тауҙың башына менеп еттек, йәйләүҙәге башҡорттар менән тауҙың иң бейек ерендәге ташына менергә киттек. Башҡорт ағайҙарының менгән аттары бик таҙа, һимеҙ, йөрөргә бик шәп, өпсөндәре (сбруйҙары) бик яҡшы — күн әйәр, күн мендәр, көмөшлө өҙәңгеләр. Тауҙың иң өҫтөндә ултырған ҙур йәйләүҙән оҙон ялан һуҙылып китә. Үлән бик шәп үҫкән. «Быны сабаһығыҙмы?» — тинек. «Юҡ»,— тинеләр.

---

[1] насари — христиан
[2] әсаслы — нигеҙле
[3] мәсафәлә — алыҫлыҡта

Ни ҡәҙәре күп яҡшы үҫкән үләндәр шул көйө ултырып ҡалалар. «Әйҙә!» — тип ҡысҡырҙылар. Беҙ ҙә арттарынан киттек. Сабыша инек. Ат өҫтөндәге башҡорт ағайҙары аттары, эйәрҙәре менән бергә яратылған тотош бер нәмә һүрәтен алдылар. Һәм оҫта үткен сабышыуҙары менән боронғо төрк-татар ғәскәренең һөжүмдәрен иҫкә төшөрҙөләр. Ташҡа килеп еттек. Яланғас олуғ ҡая. Аттарҙы төбөнә бәйләнек тә үрмәләп менеп киттек. Әтрафты[1] ҡараныҡ. Көн бик асыҡ түгел ине. Бик йыраҡ ерҙәр асыҡ күренмәй, ләкин горизонт сикһеҙ киң. Ҡояш сығышы тарафында йөҙ егерме саҡрым мәсафәләге «Ирәндек» тауҙары тинеләр. Улар күренә. Башҡа йәһәттәрҙә тағы шундай тауҙар. Был тау — Мәсем, Уралдың был тирәһендә иң бейек ере тинеләр. Ҡулыбыҙҙа Урал географияһына ғаид бер нәмә лә юҡ ине. Бейеклеге ни ҡәҙәре икәнен белмәнек. Ҡарап торҙоҡ, торҙоҡ. Менгән кешеләр исемдәрен-ниҙәрен яҙып ҡалдырыр өсөн бер бағана ҡаҙағандар, беҙ ҙә бында яҙҙыҡ. Беҙ таштан төшкәндә тауға болот килеп етте. Болот булһа, бында, томан булып, донъя ҡаплана ла китә. Юл илә йәйләүгә саҡ барып еттек. Алағуян тамағы йәйләүе. Бындағы бөрйәндәр икенсе йәйләүгә күсеү мәсьәләһе менән шөғөлләнәләр. Мулла Ғабдрахман ағайға төштөк. Һаман томан, бер нәмә лә күренмәй. Сәй эсергә ултырған урында яныбыҙға бер ағай килде. Хужабыҙ менән бергә Стәрлетамаҡтан мәрхүм ҡарый Бәҙретдиндең ошо йәйләүгә таштарҙы ҡарарға ни ваҡыт килгәнен һөйләштеләр. Килгән кеше «Барыһ» йылында ине тинеләр. Шуның менән һүҙ бөттө. Ул заманды һағынып һөйләп ҡуйҙылар. Барыһ йылы — барыҫ, юлбарыҫ тимәктер. Был 1902 йыл йәки 1890 йыл була. Бындағы кешеләрҙә әле йылды боронғо тәртип менән хисаплау бар икән. Урыны килгәс, шуны ла әйтеп китәйек: мөғәллим Хәсән Ғәли әфәнде 1912 йылғы «Шура» номерында «Көндәр, айҙар, йылдар исемдәре» тип мәҡәләләр яҙған ине. Бында ул төрк халҡында тарих тәртиптәрен яҙған һәм йыл, ай исемдәренең мәғәнәләрен һөйләгән. Хәсән Ғәли әфәнде мәҡәләләрендә беҙ байтаҡ ҡыҙыҡлы, ләкин беҙ белгән ваҡиғаларға хилаф фекерҙәр, һүҙҙәр табабыҙ. Уның шуныһы ғәжәп, ул яҙыуҙарында һис бер ваҡыт мәәхәзәләрен[2] күрһәтмәй мотлаҡан[3] үҙ ижтиһаты[4] менән табылған, беленгән нәмәләрҙең нимәләр икәнен дә әйтмәй. Уҡыусы бөтөнләй аптырап тора ла ҡала, быларға ышанырғамы,

---

[1] әтрафты — тирә-яҡты
[2] мәәхәзәләрен — сығанаҡтарын
[3] мотлаҡан — шикһеҙ
[4] ижтиһаты — тырышлығы

юҡмы. Ошо йылдың башында микән «Шура»ла ул зат «Төрктәрҙә заң вә яһаҡтар» тип бер мәҡәлә яҙҙы. Бында ул төрк телендә ғөрөф-ғәҙәт мәғәнәһендә булған «заң»ды бер ҡанун нәмә кеүек әйтеп күрһәтә. Беҙ, төрктәргә ҡарап, заң вә яһаҡтар нисек булғаны хаҡында иң һуңғы хаслы тәфтиштәрҙән беләбеҙ. Быларҙың береһе профессор Березин 61-се йылда «Труды Вост. Отд. И. Р. А. общ.»ның VIII жилдендә «Внутреннее устройство улуса Джучиева» исеме менән баҫтырған яҡшы тәхҡиҡәтле мәғлүмәт бирҙе. А. Ай. Бурманд йәнәптәре 1904 йыл Ҡазан тарих йәмғиәте мәжмуғаһының егерменсе жилдендә «Степное законодательство древних времен» тип мөһим әҫәр баҫтырҙы һәм 1907 йыл З.В.О.И.Р.А.О. мәжмуғаһында Сыңғыҙҙың Ҡытайҙағы тороно, Ҡоблай хандан ҡалған уложениенан Сыңғыҙҙың яһағы табылып бер бик мөһим әҫәр баҫылды. Яһаҡ вә төрөк халҡының низамдары хаҡында сыҡҡан барлыҡ төплө әҫәрҙәр шулар. Хәсән Ғәли әфәнденең яҙғандары бындағы ғилми тәфтиштәрҙең һис береһенә лә тура килмәй. «Заң» тигән бер ҡанундың барлығын ҡай ерҙән алған икән? Хәсән Ғәли әфәнде бындағы дәғүәләрен иҫбат итһә лә яҡшы булыр ине. Ошондай йылдың айҙары вә тарих тәртибе хосусындағы фекерҙәре лә шулай. Профессор Катанов үҙенең әҫәрҙәрендә (мәҫәлән: «Записки геогр. общ. по отд. этногр. 1819. т. XVII әҫәрендә) төрки телдәрендәге ун ике ҡояш айҙары хаҡында, академик Шефер 1857 йыл Академия «Melanges Russes» журналында төрөк халыҡтарындағы ун өс ҡәмәри айҙар хаҡында яҙғандар. Бының өҫтөнә Катанов йәнәптәре хосуси сәхибәтебеҙҙә был хаҡта йәнә мәғлүмәт бирҙе. Быларҙан алған мәғлүмәтебеҙ Хәсән Ғәли әфәнде фекерҙәре менән бер ҙә ҡушыла алмай. Көн исемдәре хаҡында Хәсән Ғәли әфәнде мәғлүмәте бик һай. Шаршамбы көнөнөң исемен белмәгәнен үҙе үк иғтираф итә. Айҙар тураһындағы фекерҙәр ҙә шундай уҡ. Хәсән Ғәли әфәнде хәҙерге матбуғатта бик ҡыҙыҡ булған шул фекерҙәрҙе ҡайҙан алған йәки тапҡан булһа, нисек тапҡан икәнен бәйән итһә, яҡшы булыр ине.

Татар араһында йылды әүәл боронғо ун ике исем менән һанау инде онотолоп истиғмалдан сыҡҡан буғай. Булған ҡәҙәре лә китап тирәһендә генә ҡалған кеүек күренә. Әммә башҡорт һәм типтәрҙәр араһында был әле һаман истиғмалдан сығып бөтмәгән һәм ҡайһы ағайҙар был йылдарҙы милади хисапҡа ҡайтарып әйтә белмәйҙәр. Был хәл ҡаҙаҡ араһында тағы ҡеүәтлерәк, тип уйлаймын.

Мәсем тауы вә йәйләүҙәрҙән беҙ, ямғыр көн ине, 17 июлдә киттек.

Иғтизар[1]: юғарылағы яҙыуҙарымда бәғзе бер китаптарҙың баҫылған йыл йәки жилд вә жөзьә хисаптарын күрһәтеүҙә яңылышҡандарым да булғандыр. Ҡымыҙ ерендә китапһыҙ урында булыуымды иғтибар итеп уҡыусыларҙың кисереүҙәрен үтенәм.

[1] иғтизар — бер эште эшләүҙең сәбәбен аңлатыу

## РОМАНОВ СӨЛӘЛӘҺЕ[1] БАТШАҺЛЫҠ ИТКӘН ДӘҮЕРҘӘ РОССИЯ ДӘҮЛӘТЕ ҺӘМ МОСОЛМАНДАР

Инсан бәғзе ваҡыт шундай була — ауырыуҙарға мөбтәлә[2] ки, ул инде был ваҡыт үҙенең сәләмәтләнеүенән, донъянан вә йүндән тамам өмөтөн өҙә. Тик бәғзе бер әсбаб килеп йыйыла ла ул үҙенең шул ауырыуынан ҡотола — һәм әүәлгенән тағы артығыраҡ таҙарып китә. Ғади инсан башына килгән шундай хәлдәр мәмләкәттәр башына ла килә. Ошо көн өс йөҙ йыллыҡ таҙа ғүмерен байрам иткән Романов сөләләһенең башы булған Михаил Федорович тәхеткә ултырыр алдынан да Россия дәүләтенең башына ла шундай ҡурҡыныс бер ауырыу — бәлә килде ки, ул үҙенең йәнә сәләмәтләнеп китеүенән өмөтөн өҙгән ине. Тарихтың ағымына мотабиҡ[3] күп сәбәптәрҙең нәтижәһе булып килеп сыҡҡан был бәлә ундан артыҡ йылдар ғәйәт күңелһеҙ бер һүрәттә дауам итте (1603—1613). Фетнә Россияның иң уңайһыҙ ваҡытында сыҡты. Бер ҡайҙан ҡеүәтле Польша, Швед короллектәре кеүек яҡшы уҡ көслө харижи[4] дошмандар Россияла бер-бер эш сығыуын көтөп кенә торалар ине. Икенсенән, Россия ул ваҡыт бер генә төрлө ҡәүем — рустарҙан ғына ғибәрәт булмайса үҙ ҡосағына тел, дин, ҡан йәһәтенән бер-береһенә башҡа булған әллә ни ҡәҙәр халыҡтарҙы алда тыныс ҡалдырыр өсөн ҙур ихтыяж барлығын ғына аңлаған ине.

Был фетнә ваҡытында Россия тәхетенә бер нисә кешеләр ултырҙы. Ахырҙан өс йыл ҡәҙәр мөддәт[5] Мәскәү тәхете бөтөнләй хужаһыҙ торҙо. Мәмләкәткә швед һәм поляк королдәренең ғәскәрҙәре керҙе. Мәмләкәтте төрлө яҡтан өҙгөләй башланылар. Мәмләкәттәге рустан башҡа нәселдәрҙе ул ваҡытҡы хөкүмәттең сәйәсәте һәм үҙҙәренең мәм-

---

[1] сөләләһе — династияһы
[2] мөбтәлә — дусар була
[3] мотабиҡ — тура килгән
[4] харижи — тышҡы
[5] мөддәт — ваҡыт

ләкәттәге хәлдәре (положениелары) ризаландырған ине. Ошоноң өсөн улар фетнәне баҫыу эшенә ярҙам иттеләр. Әммә мәмләкәттең эсендәге башһыҙ рус казактары һәм төрлө хужаларынан ҡасҡан ҡолдар, талаусылар харижи дошмандар менән бер сафта бөтөн мәмләкәтте аҡтарып боҙоп йөрөнөләр, мәмләкәт был оҙон ҡурҡынäслы ихтилал[1] арҡаһында тамам ярҙың ситенә килеп етте.

Эш боғаҙға килеп еткәс, мәмләкәттең хәмитле халҡы, урыҫы, мосолманы был һәләкәтте дәфғи итергә[2] йыйылдылар. Һәм беҙҙең Иҙел буйынан, Нижнийҙан йыйылған ғәскәр Мәскәүгә барып, бөтә Россияны ҡулдарына алырға килгән һәм инде Мәскәүгә кереп ултырған поляктарҙы ҡыуып ебәрҙеләр. Һәм бөтә Россияның һәммә виләйәтенән рустар һәм мосолмандарҙан вәкилдәр йыйып мәжлес яһап Михаил Федоровичты батшаһ итеп ҡуйҙылар. Олуғ мәмләкәттең ҡаты ауырыуы, бәләһе ошо хәйерле заттың һайланыуы менән бөттө. Һәм дәүләт тағы сәләмәт, тағы таҙа бер юлға керҙе.

Инде ул ҡурҡынäслы дәүерҙең үткәненә өс йөҙ йыл булды. Хәҙер ул батшаһыҙлыҡтың ҡараңғы көндәре мазыйҙың[3] ҡараңғы бәғиде (темная даль) эсендә тороп ҡалдылар, улар гүйә бер ҡурҡынäслы төштәр ине, ки уларҙы күргәнгә инде күп ваҡыттар үтте. Ләкин Россия тарихында иң ҡурҡынäслы был хәдисә унан һуңғы рәхәтлектәр эсендә бәғзе бер ваҡыт хәтерҙән сығып торһа ла, үҙенең күңелһеҙ мәнзәрәләре менән мазыйға күҙ һалыусыларҙың күңелдәрен өшөтөүен дә һаман дауам итәләр. Был ҡурҡынäс фетнәнең олуғ ҡыйынлыҡ менән бөтөүе мәмләкәтте яңы тупраҡҡа һалған яңы сөләләнең бәхетенә ҙур тәьҫир итте. Сөнки олуғ хәдисә кәрәк яңы сөләләгә, кәрәк мәмләкәттең халҡына мәмләкәтте ниндәй юлдан алып барғанда сәләмәт китереп булыуын яҡшы килтереп күрһәтте...

Михаил Федоровичтың тәхеткә ултырыуынан бирле үткән был өс быуатта Романов нәҫеленән 18 батша килеп китте (5-һе ҡатын, ҡалғандары ирҙәр). Романов нәҫеленән элгәре Россия хөкүмәте 7 быуаттан артыҡ мөддәт дауам итеп килгән ине. Ул замандағы иҫке Рюрик сөләләһенән тағы күберәк ғәдәд[4] батшалар килеп үттеләр. Ләкин был һуңғылар ғәдәдтәре аҙ булһа ла үҙҙәренең Россия мәмләкәтенә мәҙәниәт вә мәғарифтә, сәйәси хосуста юғары күтәреү, кеше итеү өсөн иткән хеҙмәттәре менән ғәдәдкә ҡарағанда ғәмәлдең артыҡ икәнен күрһәттеләр.

---

[1] ихтилал — фетнә
[2] дәфғи итергә — бөтөрөргә
[3] мазыйҙың — үткәндең
[4] ғәдәд — һан

Михаил Федорович, ғарб[1] менән танышыуҙың кәрәклеген белеп, унан оҫталар, фабрикасылар кеүектәрҙе китерткеләй ине һәм был халыҡтар Мәскәүҙә айырым льготалар менән файҙаланып торалар ине. Ул ваҡыт Россия арҡылы Ирандан ҡайтып килеүсе Голландия ғалимы Адам Альхриға уны үҙе янында хеҙмәткә ҡалырға саҡырып яҙған мәктүбендә Михаил: «Беҙгә һин бик ғалим, һәйәт[2], география, нәжүм[3], һәндәсә[4] ғилемләрендә вә башҡа быға оҡшаш һөнәрләрҙә бик тәжрибәле күренәһең; беҙ олуғ батшаһҡа бындай кеше кәрәк»,— тип яҙған ине. Һәм бының менән үҙенең өлкән Россияны ғилем менән яҡтыртырға иткәнен күрһәткән ине. Ләкин был күрһәтеү генә булып, рәтләп эш башланған ниткән юҡ ине. Инде Михаилдың хәйерле хәлифтәре булған Петрҙар, Екатерина, Александрҙар һәм иң һуңғы батшаһыбыҙҙың олуғ һиммәттәре арҡаһында Россия шундай дәрәжәгә етте ки, ул түгел башҡа милләттәр мәмләкәттәргә мөғәллимдәр бирә алалыр, һәм ошо һуңғы батшаһыбыҙҙың ҡулында был мәмләкәт бөтә идараһы, сәйәсәте, төҙөлөшө хосустарындағы олуғ ислахат[5] менән Европалағы олуғ мәҙәни дәүләттәр араһына керҙе. Михаил Федорович ваҡыттарында Европа тарафынан вәхшиҙәр (варвар) йорто тип атала торған Россия, инде донъяның мәҙәниәтендә яҡшы уҡ юғары урынды ишғәл иткән[6] олуғ державалары йөмләһенән булды. Был өс быуат батшаһтар алдан барҙылар. Уларҙың артынан киң дәрйә кеүек булып халыҡ барҙы. Был нәҫелдең химаяһында[7] ни ҡәҙәр фән, әҙәбиәт, санаиғ нәфисә[8] хадимдары[9], вә башҡа һәр бер майҙанда ниндәй күп эшлекле заттар килделәр.

Олуғ Россияның өс йөҙ йыллыҡ тарихында эшләнгән был ҡәҙәре олуғ хеҙмәттәрҙең емеше, батшалыҡҡа иң яҡын булған ҡәүем хакимда күренде. Бының менән бергә беҙ мосолмандар ҙа был өс йөҙ йыллыҡ тәрбиәнән мәхрүм ҡалманыҡ. Беҙҙең был әллә ни ҡәҙәр быуаттарҙан бирле оҙон йоҡоларында дауам иткән һәм үҙенә махсус (своеобразный), ләкин заманаға муафиҡ булмаған[10] бер тормошта иҫереп килә торған шәреҡ халыҡтарын был яҡты ғарб

[1] ғ а р б — көнбайыш
[2] һ ә й ә т — астрономия
[3] н ә ж ү м — астрология, астрономия
[4] һ ә н д ә с ә — геометрия
[5] и с л а х а т — реформалар
[6] и ш ғ ә л и т к ә н — биләгән
[7] х и м а я һ ы н д а — ҡул аҫтында
[8] с а н а и ғ н ә ф и с ә — матур сәнғәт
[9] х а д и м д а р ы — хеҙмәткәрҙәре
[10] м у а ф и ҡ б у л м а ғ а н — ярамаған

мәҙәниәтенә үҫтереп килтереп сығарыр өсөн ғәйәт ҙур көс кәрәк ине. Был һуңғы олуғ батшаһыбыҙҙың иткән олуғ, ҡеүәтле тереге илебеҙҙе елкәнендә этеп алға алып китте. Был императорыбыҙҙың жулусынан элгәре һәм уның әүәл ваҡытында дауам итеп килгән беҙҙең аҡрын ғына терегебеҙ, әгәр 1905 йылғы олуғ ҡеүәткә (толчокка) осрамаһа ине, ошо ете йылдар эсендә генә күп нәмә эшләй алыр ине. Әгәр олуғ рус ҡәүеменең, дәүләтенең мәҙәниәткә табан иткән ҡеүәтле хәрәкәте беҙгә етмәһә ине, беҙҙе был көндәге Бохара халҡының хәленән (положениеһынан) һикереп сығырға нимә ашыҡтырыр ине?

Был көн рус ҡәүеме донъяла сәйәси тормошта башҡа халыҡтарҙың күңелдәрен өркөтөрлөк бер һүрәткә килһәләр, мәҙәни мәғишәттә мөһим урынды ишғәл итһәләр, беҙ, мосолман татарҙар ҙа[1], ошо һуңғы сәнәләрҙә мәҙәниәткә табан иткән ныҡлы аҙымдарыбыҙ менән шәрҡи ҡәүемдәр араһында күп хосуста беренсе урынды алабыҙ.

Былар барыһы ла Романовтар сөләләһе батшаһлыҡ иткән дәүерҙә вөжүткә[2] килделәр.

---

[1] мосолман татарҙар ҙа — ислам динен ҡабул иткән төрки халыҡтар ҙа

[2] вөжүткә — барлыҡҡа

## МӘҘРӘСӘЛӘРЕБЕҘ ХАҠЫНДА

Беҙҙең төрк-татар ғәләмендә генә түгел, ғөмүмән әһле ислам[1] ғәләмендә тәхсил итә[2] торған урын улмаҡ үҙрә хәҙергә ҡәҙәр мәктәп, мәҙрәсә исемендә ике дәрес мөәсәсәһе[3] булып килде. Европала ғилемдең тәрәҡҡиһе менән дәрес мөәсәсәләре күбәйеп, күп ботаҡтарға айырылыуы хәлдә, беҙҙең ислам ғәләме ғилемдә тәрәҡҡи йәки тәдәнни[4] итһә лә, һәмишә[5] шул мәктәп менән мәҙрәсәләрҙән башҡа бер нәмә лә арттырманы. Мәктәп менән мәҙрәсә беҙҙең был тарафтарҙа ла, башҡа мосолман ғәләмдәрендә лә айырым-айырым ике мөәсәсә итеп иғтибар иткән хәлдә, бәғзе ваҡыттар бер үк мөәсәсә итеп тә йөрөтөлдөләр. Бер ерҙә ҙур шәкерттәр уҡый торған йорт-мәҙрәсә улмайса, ваҡ балалар уҡый торған урын ғына булһа, «мәҙрәсәләре юҡ, мәктәпләре генә бар» тиелә ине. Әгәр шул мәктәп йәки халыҡ әйтеүенсә «мәстек» ҙурайып китеп мәҙрәсә булһа һәм балаларҙы шул мәҙрәсәләге хәлфәләр уҡыта башлаһалар, мәҙрәсә мәктәпкә лә, мәҙрәсәгә лә яуап бирә, ике мөәсәсә бергә ҡушыла ине. Һәм башҡа мәмләкәттәрҙә лә күп ваҡыт мәктәп вә мәҙрәсә тигән исемдәр ике айырым мөәсәсәләрҙе күрһәтмәй инеләр. Европала ни ҡәҙәр күп дәрес мөәсәсәләре, хатта тәрбиә мөәсәсәләре, приюттар фәләндәр булһа, беҙҙә быларҙың барыһына ла, та ун туғыҙынсы ғасырҙың ахырына ҡәҙәр[6], шул ике бер-береһенән ныҡ айырылмаған мөәсәсә — мәктәп менән мәҙрәсә яуап бирә ине.

Һуң замандарҙа, Европа мәҙәниәте беҙҙең ислам ғәләменең дә бәғзе бер ҡыҫымдарын үҙ тәьҫире аҫтына ала башлағас, беҙҙең мосолмандар ҙа, теләр-теләмәҫ, яңы мәҙәниәт-

---

[1] әһле ислам — мосолмандар
[2] тәхсил итә — ғилем ала
[3] мөәсәсәһе — ойошмаһы. Бында: уҡыу йорто
[4] тәрәҡҡи йәки тәдәнни — прогресс йәки регресс
[5] һәмишә — һаман
[6] та ун туғыҙынсы ғасырҙың ахырына ҡәҙәр — баштан алып ун туғыҙынсы быуат аҙағына тиклем

кә, яңы тормошҡа бер аҙ яҡынайырға мәжбүр булдылар. Ләкин улар был яҡынлауҙы үҙҙәренсә генә аңлап, үҙҙәренең иҫке тормоштарының әсбабын яңы тормошҡа яраҡлаштырырға, әгәр ярап етмәһә, нисек тә бәғзе тышҡы буяуҙар менән булһа ла уның төҫөнә әйләндерергә керештеләр.

Халыҡтар ултырғыстарға аяҡ бөкләп ултырһалар ҙа, уйҙарына өҫтәлдәр кертҡәндәр ине. Сауҙа халҡы эште элекке тәртип менән йөрөтһәләр ҙә, кибеттәрҙең элекке төҫ формаларын боҙмаһалар ҙа, конторщиктар, кассалар кереткәндәр ине; муллалар, хәлфәләр, шәкерттәр теҙләнеп иҙәнгә ултырып боронғо Тәфтазани, «Мишкәт»тәр, «Һидая»ларҙы[1] уҡыһалар ҙа, парталар, ҡара таҡталар кереткәндәр ине... Сөнки боронғоно ҡалдыраһылары килмәһә лә яңыға ҡушылырға теләйҙәр ине.

Әле яңы ғына бәғзе мөәллифтәр «Әлфө ләйлә»[2] хикәйәттәре һүрәтендә театр рисаләләре яҙып халыҡ тарафынан «уршу» ишеткәндәре, бай балалары бишмәттәре эсенән аҡ яға ҡуйыуҙары сәбәпле ата-аналары тарафынан һүгелгәндәре ваҡытта, беҙҙең мәҙрәсә шәкерттәребеҙ ниндәйҙер ислах[3] тигән нәмәләр һорап хәҙрәттәренең, аталарының бәддоғаларын алалар ине. Былар барыһы ла ниндәйҙер көслө бер ихтыяж (потребность) арҡаһында ғына килеп сыҡҡандар ине. Бөтөн халыҡ үҙҙәренең ни өсөн бындай эштәрҙе эшләгәндәрен бер ҙә белмәйҙәр ине; шәкерттәр иһә был хосуста бигерәк йәйәүле инеләр. Халыҡ «заманаһы шул инде» тип яуап биргән ваҡытта шәкерттәр, үҙҙәренең мәҙрәсәләрҙән сығарылырға хөкөм ителгән иптәштәрен мөдәфиғә итеп[4] яңы бәғзе бер китаптарына асыу итеп ихтилал[5] сығарғандарын әйтәләр ине. Былар барыһы ла үҙҙәренең тәбиғи бер ҡанун алдында буйын һуҙып эшләгәнлектәрен аңлап етмәйҙәр ине. Сөнки Европа мәҙәниәтенең мөхит диңгеҙе дәрәжәһендә ҡеүәтле булғанын һиҙеү, уның аҫтында һәләк улмаҫ өсөн уның талап иткән бар нәмәләрен ҡабул итмәй ярамағанын аңлау өсөн дә байтаҡ ҙур әҙерлек кәрәк ине.

Инде беҙ һуңғы ваҡыттағы йәдиди хәрәкәтебеҙ менән үҙебеҙҙең был яңы мәҙәниәткә ҡушылыу юлында «аңлай торған хәл»гә килгәнебеҙҙе күрһәттек. Төрлө ҡалаларҙа-

---

[1] Тәфтазани, «Мишкәт», «Һидая» — беренсеһе — XIV быуат авторының исеме; ҡалғандары — китаптар исеме.

[2] «Әлфө ләйлә» — «Әлфө ләйлә вә ләйлә» — «Мең дә бер кисә» — ғәрәп әкиәттәре йыйынтығының исеме.

[3] ислах — реформа, үҙгәреш

[4] мөдәфиғә итеп — яҡлап

[5] ихтилал — баш күтәреү, фетнә

ғы мосолман татарҙарҙың[1] дар-ел-мөғәллимин[2] дар-ел-мөғәллимәт[3], һөнәр мәктәптәре, иң һуңғы көндәрҙә хатта гимназия, приют тип етди һүрәтендә эшкә керешеүҙәре һәм ибтидаи тәғлим[4] хосусында Думаға үткәргән докладтары, мәхәллә идаралары, земстволар менән мәғариф эше хосусында (мәҫәлән, Өфөләге кеүек) ҡулға-ҡул тотоношоп барыуҙары инде эште аңламаҡ тимәктер. Хәҙер инде беҙҙең матбуғат вә башҡа күп ижтимағи эштәребеҙ, яңы мәҙәниәт ул элекке эшебеҙ аңһыҙ (несознательное) хәлдән (состояниенан) үтеп олуғ мәҙәниәтте аңлағанлығыбыҙҙы, «Европа мәғәнәһе менән мәҙәни булған мосолман татарҙар» булырға ҡәтғи аҙымды башлағанлығыбыҙҙы күрһәтәләр.

Ләкин беҙ үҙебеҙҙең мәғишәттең иң төйөнлө нөктәһе булған мәҙрәсәләргә килһәк, был хосуста бөтөнләй башҡа бер хәлдәбеҙ. Беҙ бында үҙебеҙ әле бынан ун биш йылғы хәлебеҙҙән бер ҙә алға киткәнебеҙ юҡ тиерлек.

1906 йылғы Нижнийҙа булып үткән йәмғиәттә был хаҡта айырым комиссияның эшләгән эштәре, Сәйетгәрәй әфәнде Алкин, Йософ әфәнде Аҡчуриндарҙың һөйләгән һүҙҙәре[5] был хаҡта заманында бәлки мәҙрәсә әһелдәренә яҡшы уҡ өмөттәр биргәндер; ләкин мәжлестең башҡа эштәре кеүек был хосустағы эштәре лә бер нәмәгә аша алмай ҡалды. Сәйәсәт ғәләме, халҡыбыҙҙың наҙанлығы эсендә ул эштәр диңгеҙҙәге сатҡы кеүек юғалып киттеләр. Дөрөҫ, мәҙрәсәләр 1890 йылдарҙа рус ғалимдарының тасуир иткән мәҙрәсәләре түгел. Ул инде ул замандағы кеүек һәм ғилем йорто һәм һуҡырҙар, ғәриптәргә мәлжәәләр (приют, богодельня) булыу дәүеренән уҙҙы һәм мәктәп менән мәҙрәсә лә бер-береһенән айырылдылар; уларҙа шәкерттәр ҙә, дәрестәр ҙә, тәғмир[6], тәртип эштәре лә көндән-көн йүнәлә баралар, инде тамам Европа формаһында «Хөсәиниә», «Ғалиә» мәҙрәсәләре вөжүдкә сыҡты, «Мөхәммәдиә», «Ҡасимиә»ләр[7] һәмишә шундай бер һүрәткә әйләнеп баралар. Мәҙрәсә эсендәге кешеләр гүйә мәҙрәсәләрҙе көн бикөн[8] алға алып баралар. Әммә ҡайһы тарафҡа? Быны уйлап осона сыҡҡан кешеләр юҡ. Ул алтынсы йылдарҙа был хаҡ-

---

[1] мосолман татарҙарҙың — ислам динен ҡабул иткән төркиҙәр

[2] дар-ел-мөғәллимин — егеттәр өсөн уҡыу йорто

[3] дар-ел-мөғәллимәт — ҡатын-ҡыҙҙар өсөн уҡыу йорто

[4] ибтидаи тәғлим — башланғыс уҡыу

[5] Ғөмүм Россия мосолмандарының 3-сө рәсми нәдеүәләре (съезы). Муса Бигиев. С. 61—86. *(Ә. В.)*

[6] тәғмир — төҙөкләндереү, яңыртыу

[7] «Хөсәиниә» — Ырымбурҙа, «Ғалиә» — Өфөлә, һуңғы икеһе Ҡазанда урынлашҡан.

[8] көн бикөн — көндән-көн

та уйлаған кешеләр гүйә төшөп юғалдылар; майҙанға мәҙрәсә хосусында ҡайғыртыусы бәғзе көсһөҙ кешеләр, үҙҙәре юлбашсыларға мохтаж булған халыҡтар ғына ҡалды; ләкин былар был хаҡта һис бер ҡәтғи эш күрһәтә, ниһәйәт итә алмайҙар; бәғзе мөғәллимдәр беҙ мәҙрәсә программаһын гимназия программаһына ҡарап яһаныҡ тиҙәр; бәғзеләр Мысыр, Истанбул мәктәптәре тәрәҙенә[1] әйләндерәбеҙ тиҙәр. Мөғәллим Нияз әфәнде Мәҡсуди мәҙрәсәләренең төрлө ҡыҫымдарға (факультеттарға) бүлеп яһалған программаларын («Бәйәнел хаҡ» һәм «Шура»ла) нәшер итте. Былар вә быға оҡшаған башҡа эштәребеҙ менән күрһәтәбеҙ ки, беҙ мәҙрәсәләргә нисбәттә бөтөнләй түбән баҫкыста һәм шул әлекке «мәҙәниәт алдындағы аңһыҙ хәл»дә (несознательное состояниела), шул боронғо бишмәткә аҡ яҡа ҡуйыу дәүерендә торабыҙ. Беҙ мәҙрәсәне, Европалағы бер белекле мөәсәсә һүрәтенә нисек итеп әйләндереүҙе түгел, хатта уның урта йәки ғәли мәктәп булыуын да айырмайбыҙ. Биналар тәғмир итә, тышҡы төҫөн үҙгәртәбеҙ, үҙен билгеле бер хәлгә ҡуйғаныбыҙ юҡ. Шәкерттәр хатта иң һуң көндә һаман шул боронғо мәғәнә менән үк, ни өсөн икәнен асыҡ белмәйсә, ихтилал итәләр, улар белмәгән кеүек мәҙрәсәнең шундай хәлен (положениеһын) мәҙрәсә башындағы кешеләр ҙә белеп етмәйҙәр. Мәҙрәсәнең бындай билдәһеҙ (неопределенное) хәлдә тороуы инде етәрлек булды. Әгәр беҙ үҙебеҙҙең шул дар-ел-мөғәллимин, гимназиялар дәүеренә еткән һәм «Европа мәғәнәһе менән мәҙәни мосолман татарҙар» булырға әҙер икәнлегебеҙҙе асыҡ күрһәтәйек тиһәк, әлбиттә, беҙгә мәҙрәсәнең Европа мөәсәсәләре араһынан ҡайһыһы булырға тейешлеген билдәләргә, билдәләнеп етһә, ул ваҡыт шул алынған мөәсәсәнең уставы, программаһы беҙҙең мәҙрәсәләргә динебеҙ, милләтебеҙ нөктәһенән нисек итеп ҡабул ителергә кәрәк икәнен асыҡ белергә һәм белеү генә түгел, был хаҡта ғөмүмән ҡәтғи тәдбирҙәргә[2] керешергә тейештер. Ошо хаҡта беренсе аҙым булһын тип, беҙ «Мәктәп»тә 1) мәҙрәсә ниндәй мөәсәсә (учреждение.— *Ә. С.*), 2) рустар өсөн яһалған программа беҙгә нисек ярар тип бәғзе нәмәләрҙе яҙырға теләйбеҙ.

Ләкин бында бер нәмә бар: мәҙрәсәбеҙҙе ҡабул итергә керешкәнбеҙ, мәҙәниәттең ниндәй генә мәктәбе һүрәтенә кертеп ҡуймайыҡ, бының менән беҙ «йәмиг ғәләмдәрҙең мәҙәниәте» һаналған үҙебеҙҙең берҙән-бер мөәсәсәбеҙҙе бөтөргән булабыҙ. Сөнки шәрҡтең мәҙрәсәһе менән ғарб-

---

[1] тәрәҙенә — кимәленә
[2] ҡәтғи тәдбирҙәргә — ентекләп алдан уйларға

тың[1] мөәсәсәләре һәр ни ҡәҙәр ғилем — уҡыу йорттары иһәләрҙә, бер-береһенә тамам башҡаларҙыр. Быларҙың һәр икеһе үҙҙәренең мәнсуб булғандары[2] ҡәүемдәрҙең рухтарына, мәғишәттәренә ҡарап килеп сығыуҙары, тәрәҡҡиҙәре, тарихтары менән бер-береһенән тамам айырылалар. Беҙҙең мең йыллыҡ был иитәшебеҙ, мөрәббибыҙ[3] хәҙер үҙенең үҙлеген (самобытность) юғалта, бөтә. Инде ул хәҡиҡәтән бер ғарбе мөәсәсә булғансы үткәргән мең йыллыҡ мөддәт[4] нииндәй хәлдә булғанын күрһәтеп, «Мәктәп»тең киләһе һанында ҡыҫҡа ғына һүрәттә мәҙрәсәләребеҙгә бер тарихи ҡараш яҙырбыҙ һәм мәҡсүткә унан һуң күсербеҙ.

---

[1] ғарбтың — көнбайыштың
[2] үҙҙәренең мәнсуб булғандары — үҙҙәренә ҡараған
[3] мөрәббибыҙ — тәрбиәсебеҙ
[4] мөддәт — ваҡыт, дәүер

# МӘҘРӘСӘЛӘРЕБЕҘҘЕҢ ТАРИХЫНА БЕР НАЗАР

## I

Үткән мәҡәләбеҙҙә ислам ғәләмендәге ике дәрес мөәсәсәһе — мәктәп менән мәҙрәсәнең бәғзе ваҡыт бер-береһенән айырылмай йөрөгәнен яҙған инек. Инде беҙ был урында ул «бәғзе ваҡыт»ты ҡалдырып быларҙы тамам айырым ике мөәсәсә улмаҡ үҙрә ҡабул итәбеҙ. Һәм ошо «мәҙрәсәләребеҙҙең тарихына бер назар»ыбыҙҙы мотлаҡан балалар уҡый торған урын — мәктәптән юғары булған мөәсәсәгә билдәләйбеҙ. Беҙҙең былай билдәләүебеҙ үҙебеҙ тарафына ғына булған бер эш түгел, сөнки мәктәп менән мәҙрәсә үҙҙәренең бөтөн тарихтары менән бер-береһенән айырылалар. Уларҙың «бәғзе ваҡыт» ҡатнашып йөрөүҙәре бәғзе бер әсбаб вә эхүәлгә ҡарап ҡына килгән эш.

Мәктәптең дә, мәҙрәсәнең дә тарихтары беҙҙең ислам ғәләмендә генә түгел, бәлки бөтөн мәҙәниәт ғәләмендә ҡул теймәгән бер маузуғтыр. Был ике мөәсәсәнең тарихы улмаҡ үҙрә яҙылған бер нәмә булһа ул да мәшһүр Н. Остроумовтың мәғариф назараты журналында 1906—1907 йылдарҙа яҙған мәҡәләләре булыр. Был кемсә, мәктәп вә уның тарихына ғаид итеберәк яҙған бер мәҡәләһендә (Ж.М.Н.П., 1906. № 2, отд. III. С. 113—116) әйтә:

«Мосолман мәктәп-мәҙрәсәһе түгел Азияла, бәлки Европаның мәҙәни тәрәҡҡиендә мөһим урынды ишғәл итә. Ошо сәбәптән мосолман мәҙәниәтенең оялы булған бер мөәсәсәләрҙең инде тарихы тәфтиш ителгән, эшләнгәндер тиергә мөмкин, ләкин ваҡиғда, түгел Европа, хатта Азияла мосолман әҙәбиәтендә лә төплө тарихи бер әҫәр, мосолман мәғарифы, мәҙрәсәһенең нисек зоһүр итеп нисек тәрәҡҡи иткәне хаҡында төплө бер мәҡәлә фәлән юҡтыр. К. Шмидттың Европала иң мәшһүр вә олуғ хеҙмәт һаналған «Педагогия тарихы»нда мосолман мәғарифы, мәктәбе хаҡындағы ҡыҫымы күп урында яңылыш, аңламау менән яҙылған. Мадзилевский үҙенең «Тәрбиә вә тәғлим тарихы» исеме менән яҙған әҫәрендә (Петербург, 1892, с. 208—209) мосолман педагогияһы тураһында бары бер бит кенә яҙыу ме-

нән ҡәнәғәтләнгән. Европалағы ғөмүми тарих китаптарында (мәҫәлән, Шлецер, Вебер кеүектәр) мосолман мәғарифы тураһында тик мәҙәниәт йәһәтенән генә һөйләнә. Мосолман мәктәбе тарихы факт итеп кенә зикер ителә. Тик һуңғы йылдағы бәғзе бер мөстәшәрҡтәр (мәҫәлән, Делфин, Харгония, Миллер, Ҡрымский, Наливкин вә ғәйреләр) бәғзе бер махсус мосолман мәктәптәренең дахили[1] хәлдәрен өйрәнделәр. Ләкин уларҙа ғөмүми мосолман мәғарифының тарихы вә уның Европа мәктәптәренә ғаләҡә[2] вә мөнәсәбәтен яҙманылар».

Һәм хәҡиҡәтән был дөрөҫ, ислам ғәләмендә был хаҡта бер әҫәр улмаҡ үҙрә Кәшфеҙҙөнүндә (1274 һижри Мисыр тәбағы, жилд I, сәх. 49) Тажетдин Ғәли бин Әнжәб бин әлсағи әл-Бағдади исемдә 674 һижрилә вафат иткән бер ғалимдың «Әхбәрел рабат вәл мөдәррис» исемендә был мауzуғта бер китабы бар икәне зикер ителгән, ләкин быны беҙ күрмәгәнебеҙ кеүек Остроумов та күрмәгән, бөгөн барлығы ла мәғлүм түгел. Мисырҙа Әл-әҙһәр мәҙрәсәһе тарихына ғаид «Хаттат тәүфиҡиә» һәм «Хаттат мәҡриза» китаптарында бәғзе мәғлүмәт бар, ләкин улар ғөмүми түгел. Ғөмүмиерәк булған бер нәмә булһа улар Жыржы Зәйдандың «Тарихел тәмданел ислами»һының 3-сө жилдендә сәх. 199—208-ҙә «Әлмөдәррис фил ислам» тигән мәҡәләһе булһа кәрәк. Ләкин ул ғәйәт ҡыҫҡа, был хаҡта төплө бер нәмә лә бирә алмай. Беҙҙә мәҙрәсә тарихына ғаид барлыҡ нәмә шулдыр. (Бынан башҡа әҫәрҙәр була ҡалһа ул ваҡыт мосолман библиографияһынан тамам хәбәрҙар булған Ризаитдин хәҙрәт менән Ғалимйән хәҙрәттәренән күрһәтеүҙәрен үтендек.) Әгәр был күрһәтелгән китаптар янына Европа ғалимдарының бәғзе бер тәфтиштәре булмаһа, ул ваҡыт беҙ мәҙрәсә тарихы хаҡында ихтимал ки бер нәмә лә эшләй алмаҫ инек.

Европала төрлө дәрес мөәсәсәләренең ғөмүми тарихтары айырым әҙәбиәт тәшкил итә; түгел ғөмүми тарихтар, хатта махсус шәһәрҙәрҙәге айырым мөәсәсәләренең тарихтары мөкәммәл яҙылған. Мәҫәлән, бер Ҡазанда ғына дарелфәнүндең бер нисә тарихы бар. Былар араһынан Н. Буличтың әҫәре ике ҡалын жилд (Ҡазан, 1880 йыл), Ҡазан беренсе гимназияһының тарихтарынан Владимиров тәэлифе 3 жилд, Ҡазан духовный семинарияһының тарихы ҡалын бер жилд. Алынған бер мөәсәсәнең нисек тәэсис итеп[3], нисек тәрәҡҡи иткән[4], йәмғиәткә ниндәй файҙалар килтер-

---

[1] дахили — эске
[2] ғаләҡә — бәйләнеш, аралашыу
[3] тәэсис итеп — төҙөп, ойошоп
[4] тәрәҡҡи иткән — алға барған, үҫкән

гән, унда кемдәр уҡытҡандар һәм нимәләр, идара йәһәттәре нисек булған. Быларҙы тәфсил менән һөйләү айырым тарихтарҙың жилдтәрен ҡалынайталар. Инде беҙҙә 12 ғасыр дауам итеп килгән мәктәп менән мәҙрәсәләребеҙ нисек килеп сығып, нисек тәрәҡҡи иткәндәр? Быларға йәмғиәттең, йәмғиәткә быларҙың мөнәсәбәте вә тәьҫирҙәре нисек булған? Ғәрәп, фарсы, һинд, төрөк ғәләмдәрендә был мөәсәсәләр ниндәй тәэсистәргә осрағандар. Был хаҡта беҙҙә бер әҫәр булмауы йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерә торған эштер. Әле һаман быларҙы тәфтиш итеү киләсәккә ҡала. Быларҙы тейешенсә тәфтиш итеп эшләп сығарыу ҙур мәшәҡәттәр һәм олуғ хеҙмәт тора. Алла насип итеп бер ҡул тейһә, тейешле мәғлүмәт йыйылып етһә, киләсәктә беҙ ҙә был хосуста бер-бер эш итеп ҡарарбыҙ.

Хәҙер беҙ был «назар»ыбыҙҙа мәҙрәсәнең ул ауыр тарихына ҡул тигеҙмәйбеҙ, тик үткән мәҡәләлә әйткәнебеҙсә, «мәҙрәсәләребеҙ Европа мәктәптәренең береһе менән алмашынып бөткән ваҡыттарында үҙҙәренең нимәләрен юғалталар» икәнен күрһәтеү һәм уның 12 ғасырлыҡ ғүмеренә тиҙ генә әйләндереп бер күҙ һалыу менән ҡәнәғәтләнәбеҙ.

Ошоноң өсөн минең был яҙғаным мәҙрәсә тарихына ғаид бер мәдхәл[1] хөкөмөндә генә булыр. Был мәҡәләне яҙыр өсөн файҙаланған әҫәрҙәр (юғарыла «Тарихел тәмданел ислами» мәҡәләһенән башҡа) ошо әҫәрҙәрҙер:

1) Крымский. «Мосолман халыҡтарының тарихы». Мәскәү. 1902.

2) Крымский. «Мосолманлыҡ тарихы». Мәскәү. 1903.

3) Харгония тәэлифе[2], Бартольд тәржемәһе булған «Мәккәлә мосолман ғилеме» Ташкентта «Туркестанские ведомости»ла баҫылған. 1905—1906.

4) «Шәреҡкә ғаид иҫке әҫәрҙәр» мәжмуғаһының 2 жилд III жөзьәһендә баҫылған. Ғөмүми мосолман университеты «Әзһәр» исемендә Крымский менән Миллер тәэлифе булған әҫәр. Мәскәү. 1903.

5) «Төркөстанда мосолман мәҙрәсәләре» мәҡәләһе (Ж.М.Н.П., 1874, ч. 176, декабрь, отд. III. С. 23—24).

6) Шул уҡ исемдә шул уҡ мәғариф назараты журналында Ф. М. Керенскийҙың мәҡәләһе (1892, ч. 284, ноябрь, отд. III. С. 18—52).

7) Остроумовтың мәҙкүр журналдағы мәҡәләләре. «Мосолман ғәли мәктәбе — мәҙрәсә» (1906, ч. 5, октябрь, отд. III. С. 113—163) йәнә «Төркөстанда мосолман ғәли мәк-

---

[1] мәдхәл — инеш

[2] тәэлифе — яҙыусыһы

тәптәре» (1907, ч. 13, январь, отд. III. С. 1—58). Был мәҡәләләр һәр ни ҡәҙәр Остроумовса яҙылған булһалар ҙа — үҙ бабтарында башҡа әҫәрҙәр булмағанлыҡтан ҡәҙерләләрҙер.

Быларҙан башҡа йәнә Вамбери, Ханыков сәйәхәтнамәләренән файҙаландыҡ.

## II

Ислам зоһур итмәҫтән[1] элек Ғәрәбстанда гәрәптәрҙең барлыҡ ғилемдәрен, даирәи фикриәләрен (мировоззрениеларын) күрһәтеүсе ике синыф — ҡаһандар менән шағирҙар бар ине. Беренселәре мәжүсиәттең айындарына (языческий культҡа) ғанд барлыҡ эштәрҙе ҡарайҙар; икенселәре — шағирҙар халыҡтың рухын, мәғәнәһен күрһәтәләр, әҙәби ҡотон һаҡлайҙар ине. Быларҙан башҡа мәғишәткә ғанд белектәре барыһы ла ғәмәли[2] генә ине. Өйрәнеп торолаҫаҡ бер нәмә лә юҡ ине. Бинаән ғәләйһи[3] уҡыу, уҡытыу вә уға ғанд әсбаб һис береһе лә булманы.

Ғөмүмән инсаниәттең мәғәнәүи, рухани файҙаларын яңы бер төҫтә күрһәткән, барлыҡ ғаили, мәғиши, ижтимағи эштәргә ғанд күп ислахат килтергән Ҡөрьән Ҡәрим зоһур иткәс тә үҙенең бөтөн донъяға килтерәсәк тәьҫиренең башын күрһәтергә кәрәк ине. Һәм күрһәтте лә. Ул мосолман мәғарифының, мосолман ғилми мөәсәсәләренең барыһына ла әсәс булды. Ошо ғасырҙарға ҡәҙәр дауам итеп килгән һәм үҙенең зоһурында вә тәрәҡҡиһендә ни Европа мәктәптәренә, ни Ҡытай «Тату»[4] һарайҙарына мөнәсәбәте булмаған мосолман мәктәп, мәҙрәсәләре мотлаҡан Ҡөрьән Ҡәрим эше булды. Ҡөрьән Ҡәрим үҙенә башҡа бер төҫтәге мосолман мәғариф мөәсәсәләрен тәшкил итеүҙе ошо рәүештә башланы.

Башта Ҡөрьән Ҡәрим үҙе өйрәнеү әйбере (предмет изучения) ине. Сөнки ул яңы фекер, яңы мосолман ғилеменең шәхесе (объекты) ине. Шуның өсөн Ҡөрьән Ҡәримдең «Ләратбун уә лә бисун иллә фи китабен мубин»[5] булыуына ышанған әһле ислам, үҙҙәренең донъя һәм әхирәттәре өсөн хәжәт булған ғилемдәрҙе, йомоштарын, барлыҡ ижтиһадтарын сарыф итеп, унан эҙләргә башланылар. Ҡәрәк пәй-

---

[1] зоһур итмәҫтән — барлыҡҡа килмәҫтән
[2] гәмәли — практиканан
[3] бинаән ғәләйһи — шуның өсөн
[4] Ҡытайҙа ғилми бер мөәсәсә. *(Ә. В.)*
[5] «Ләратбун уәләбисун иллә фи китабен мубин» — «Һыуҙа һәм ерҙә булған әйберҙәрҙең мосолмандарҙың алла биргән китабына инмәгәне юҡтыр» (Ҡөрьән Кәрим. Сүрәт-әл-әнғәм. 59-сы аят).

ғәмбәрҙең (ғәләйһиссәләмдең), Ҡөрьән Ҡәримдең тәғлимәтен яҡшы аңлау, яңы шәриғәтте яҡшы өйрәнеү өсөн пәйғәмбәр ғәләйһиссәләмдең хәдистәрен өйрәнеү ләзим ине. Уларға тотондолар. Шул ваҡытта уҡ, Ҡөрьән Ҡәримдең лафыздары[1] өҫтөндә оҙаҡ уйлай, унан бер низам ҡағиҙә эҙләй торған заттар ғилем нәхеүҙең нигеҙен, пәйғәмбәрҙең, уның әсхәбенең хәлен, сәфәрҙәрен ҡаид итеүсе[2], хәдистәрҙе риүәйәт итеүсе заттарҙың мәнаҡибтарын[3] яҙа торған заттар тарих ғилеменең әсәсен һалдылар.

Ҡөрьән менән хәдис әүәлге хәлифәләр дәүерендә яттан өйрәнелә — хафиз ителәләр ине. Бар эш ғәмәли һүрәттә генә үтәлә ине. Низағлы мәсьәләләрҙе хәлифәләр үҙ ижтиһадтары менән хәл итәләр ине. Был хәл әмәүиҙәр дәүеренә ҡәҙәр дауам итте. Был һуңғылар дәүерендә бөтөн исламдың ике мәркәзе бар ине, береһе Мәҙинә — дини ижтиһадтың мәсруры[4], икенсеһе Димашҡи — идара, сәйәсәт мәркәзе[5] ине. Әмәүи хәлифәләренең дини ижтиһадты (авторитетты) үҙ ҡулдарынан ебәргеләре килмәй ине. Быға үҙҙәренең хаҡтары барлығын иҫбат итергә тырышалар ине. Шуға был эш Ҡөрьәнде, шәриғәтте ауыҙҙан ғына уҡып ҡәнәғәтләнмәйенсә, мәктәптә уҡыу ихтыяжын тыуҙырҙы.

Был ваҡыт Ҡөрьән вә хәдистән, хаяттан истинбат ителеп[6] яһала торған мосолман хоҡуғы — ҡанундар ҙа «Фиҡһе» исеме менән айырым бер ғилем һүрәтен ала башланы. Һәр ни ҡәҙәр был ғилем — «Фиҡһе» мосолман хоҡуғы әле тәртипле бер системаға килеп етә алмаһа ла, беренсе ғасыр һижриҙең ахырында был фәндең ғалимдары быны бер тәртипкә һалырға ижтиһад итәләр ине. Икенсе ғасыр һижриҙең урталарында мосолман ғилеменең был өс ҡыҫымы— Ҡөрьән, хәдис, фиҡһеләргә ғаид төрлө китаптар, дәреслектәр тәәлиф итеү башланды. Мәккә, Мәҙинә, Йәмән, Суриә, Бәсрә, Куфи, Рәй, Хөрәсәндә ни ҡәҙәр фиҡһе ғалимдары[7] фиҡһене ысынлап тәртипкә ҡуйыу иштиғәл иттеләр. Был ваҡыт элек шағирҙар, ҡаһандар менән генә ҡәнәғәтләнеп килгән ғәрәптәргә һәм ислам ҡабул иткән башҡа ҡәүем-

---

[1] лафыздары — һүҙҙәре
[2] ҡаид итеүсе — етәкләүсе
[3] мәнаҡибтарын — яҡшы эштәрен
[4] мәсруры — шатлығы
[5] мәркәзе — үҙәге
[6] истинбат ителеп — хөкөм сығарып
[7] Былар ибн Жәрих, Мәлик, әл-Озағи, ибн Мөслим, Мәррур, Суфиян әл-Сәүри, Әбү Хәнифә, Ир-рабиғ бин Сабах, Жәрих ибн Ғәбделхәмит, ибн Шиһап, ибн Мөбәрәктәрҙән ғибәраттер. *(Ә. В.)*

дәргә инде уҡыһалар, ысынлап уҡырлыҡ нәмәләр — Ҡөрьән, хәдис, фиҡһе, ғәрәп лөғәте, мосолман тарихы, сәйәр[1] кеүек фәндәр тыуған ине. Һәм хәҡиҡәтән мосолмандар, берҙәре иснад[2], икенселәре тилмиз[3] улмаҡ үҙрә ысын-ысындан уҡыу-уҡытыу эштәренә керештеләр. Мосолман мәғарифы, мосолман мәҙрәсәләренең тәшкил итеүе йәки Ҡөрьәндең уларҙы тәшкил итеүе ошо рәүешсә булды.

Был мосолман мәғарифы, мәҙрәсәһенең килеп сығыуы була.

---

[1] сәйәр — астрономия

[2] иснад — бында: өйрәтеүсе

[3] тилмиз — шәкерт

## ҠАЙҺЫ МИЛЛӘТТӘНҺЕҢ?

«Мәктәп»тең 6-сы һанында Ғ. Баттал әфәнденең «Миллиәтте[1] билдәләү» нам мәҡәләһен дәрж иткәс, идара: «Киләсәк номерҙа идараның үҙ мөләхәзәһе яҙылыр» тигән ине. Инде шул «миллиәт» мөнәсәбәте менән ошо «Ҡайһы милләттәнһең?» нам мәҡәләне дәрж итәбеҙ.

I

Әүәл заманда хәлифәлектәрҙең сәйәси мәҡсүттәре арҡаһында тамам сәйәси бер һүрәт алған вә бөтөнләй үҙ күсәренән сыҡҡан исламиәт үҙ флагы аҫтында булған бик күп ҡәүемдәрҙе барыһын да бер милләт тиеп таныҡҡан һәм барыһының да миллиәттәрен вә милли хосусиәт вә имтияздарын онотторған ине. Шуның өсөн иҫке иман китаптарында ошо рәүешсә «ҡайһы милләттәнһең?» тип бирелә торған сөәлгә беҙҙең бабаларыбыҙ «Ибраһим милләтенәнмен» тиеп яуап бирергә өйрәтәләр ине.

Инде Ибраһим милләтенән булған ғәрәптәр вә йәһүдиләр менән үҙебеҙҙең һис бер ғоруғи[2] мөнәсәбәтебеҙ юҡ икәнен күргәс, яңыраҡ заман кешеләре үҙебеҙҙе, башҡа ҡәүемдәрҙә булған кеүек, ғоруғи йәхуд[3] ҡәүми бер исем менән атарға хәжәт таптылар ҙа балаларыбыҙға татар милләтенәнмен, ҡаҙаҡ милләтенәнмен, һарт милләтенәнмен тип күрһәтә вә өйрәтә башланылар.

Һуңғы ғасырҙа миллиәттең башына килгән был хәлдәрҙән һуң, беҙҙең кеүек үҙ исемдәрен фәҡәт дини йәһәттән генә ҡарап мосолман тип атап йөрөгән ҡәүемдәрҙең бынан да ваҡ киҫәктәргә бүленеүе вә шулай итеп улар араһында түгел, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ милләттәре генә, хатта ҡаҙаҡ халҡы үҙе лә әллә ни ҡәҙәр ҡыпсаҡ, ҡуңырат,

---

[1] миллиәт — милләткә ҡарағанлыҡ
[2] ғоруғи — туғандаш, ырыуҙаш
[3] йәхуд — йәки

найман, ҡара ҡырғыҙ тигән кеүек милләттәргә, башҡорттарҙа тағы ҡатай, бөрйән, тәлтем, юрматы тигән кеүек милләттәргә(!) бүленеүе лә мөмкин ине.

Быныц өҫтөнә хөкүмәт мәктәптәрендәге география китаптарында беҙҙең башҡорт, типтәр, ҡырғыҙ милләттәре ителеп күрһәтелеүебеҙ вә эш башында йөрөгән бәғзе берәүҙәребеҙҙең йәштән үк шундай география китаптары илә тәрбиә ителгән заттар булыуы ла беҙҙең бындай яңылыш юлға кереүебеҙгә сәбәп булғандыр. Мосолман итеп тәрбиәләй торған мәҙрәсәләрҙән сыҡҡан һәм миллиәттең нимә икәнен бер ҙә белмәгән шәкерттәребеҙҙең үҙ телебеҙ, тарихыбыҙ, ижтимағи хәлдәребеҙ, «Ибраһим милләте» булмаҫтан элекке дәүерҙәге әҙәбиәтебеҙ менән таныш булмауҙары беҙҙе шундай яңылыш юлға кертеүе тәбиғи ине. Бында беҙҙең был хатабыҙ хатта иң һуңғы көндәге ысули йәдиди мәктәптәребеҙ вә ундағы балаларыбыҙҙың был хосуста яңылышып яфа сигеүҙәре инде тамам йөрәктәргә үтә башланы. Инде мәктәп, мәҙрәсәнең фекере булған «Мәктәп» журналы был хосуста бер аҙ изахат[1] бирһә, бик ваҡытлылыр.

II

Миллиәт, тел, тарихи ғәнғәнәләр[2], (күп ваҡыт) дин, ижтимағи интерестар ҡан берлектәре әсәсенә[3] һалыналыр. Шуның өсөн «Ҡайһы милләттәнһең?» сөәлен биреүсе заттарҙың да алдарында шундай әсәстәргә бина ителгән[4] бер милләт булырға кәрәк.

Урта Азия, Сибириәнең йәнүби яртыһы, Европаи Русиҙың шәрек тарафтарында, йәғни ғөмүмән Россия мәмләкәтендә тереклек итә торған төрки ҡәүемдәр: ҡаҙаҡ, татар, башҡорт, нуғай, үзбәк, һарт, тарансы, төркмәндәр араһындағы тарихи, этнография, тел йәһәтенән бөтөнләй әхүәл рухиялары[5], ижтимағи хәжәттәре йәһәтенән берлек, ғарб[6] вә рус ғалимдары тарафынан ни дәрәжәлә яҡшы тәфтиш ителгән[7], асылған булһа, ошо көнгә ҡәҙәр Россия мосолмандары тип аталып йөрөгән был ҡәүемдәр үҙҙәренең миллиәттәрен аңлау йәһәтенән шул дәрәжәлә түбән торалар, ки әле былар үҙ араларындағы миллиәткә әсәси булған

[1] изахат — асыҡлыҡ, аңлатыу
[2] ғәнғәнәләр — традициялар
[3] әсәсенә — нигеҙенә
[4] бина ителгән — ҡоролған, төҙөлгән
[5] әхүәл рухиялары — рухи тороштары, психик хәлдәре
[6] ғарб — көнбайыш
[7] тәфтиш ителгән — тикшерелгән

берлекте түгел, үҙ баштарына өйрәнеү, хатта кеше эшләгәнде лә өйрәнергә етешкәндәре юҡ.

Бинаән ғәләйһи[1] беҙҙә ысын мәғәнәһе менән милли хасият та (национальное самосознание ла) юҡ. Сөнки берәүҙә ысын мәғәнәһе илә милли хасият булыр өсөн, ул үҙ милләтен тамам менән аңларға кәрәк, миллиәтте аңлау иһә шул халыҡтың үҙ араларында тарихи мөнәсәбәт вә бөтөн ижтимағи берлеккә бөтөн йәне-тәне менән ышаныуы тимәктер. Әле ҡайҙа ул беҙҙә! Беҙҙә тарих эшләнмәгән: әҙәбиәтебеҙ, телебеҙ, төрлө ләһжәләр тәьҫиренән сығып еткәне юҡ. Бөтөн айырым йәмғиәттәребеҙҙе үҙ ҡулы менән бергә йыя торған халыҡ әҙәбиәте ҡәтғиән[2] эшләнмәгән; ғарб ғалимдары тарафынан эшләнгән ҡәҙәреһе лә беҙҙең ҡулға кергәне юҡ. Шулай ҙа булһа ғөмүмән хәжәттәр һәм уртаҡ хасиятты күрһәтеп тора торған, төрлө ләһжәләрҙә булһа ла, газеталарҙа сығып тора, әҙәбиәтте тәшкил итеп бара. Мәмләкәттең олуғ Думаһында ла был халыҡтың вәкилдәре мосолман исеме менән булһа ла бер йән, бер тән тәшкил итеп торалар. Ғарб халҡы ла бит был халыҡты культурное движение среди русских мусульман тигән кеүек исемдәр менән мәҙәниәткә табан хәрәкәт итеүсе бер халыҡ итеп таный. Хәҙер беҙҙә миллиәт тамам тәшкил итеп етмәһә лә, бер милләт һүрәтен алып баралыр. Шулай булғас, беҙҙә әле ысын бер миллиәт булмаһа ла, тәшкил итеп бара торған бер милләт, миллиәт бар.

## III

Милләттәр айырым ҡәбилә вә йәмғиәттәрҙән торалар. Беҙҙәге татар, ҡаҙаҡ, башҡорт, һарт тигән кеүек һүҙҙәр шундай ҡәбилә вә йәмғиәттәрҙең исемдәрелер. Һүҙ уңайында шуны ла һөйләп үтәйек: беҙҙә бәғзе бер заттар, мәҫәлән, Исмәғил Гаспринский, Риза хәҙрәт кеүектәр, татар тигән исемде ҡабул итәһеләре килмәй. Быларҙың тарихыбыҙҙа шундай мөһим бер урын алған был исемде ҡабул итеүҙән баш тартыуҙары тәғажжаб[3] ителерлек бер эштер. Татар исеме тарихыбыҙҙа бынан мең ике йөҙ йылдар элгәре булған бер исемдер; иҫке орхон һәйкәлдәрендә лә был исем бар[4]. Ниндәй юл менән булһа ла бер ҡыҫым төрк халҡы татар тип аталғандар һәм уларҙы хәҙерҙә лә бөтөн донъя татар тип атай. Был хәлдә уны

---

[1] банаән ғәләйһи — шуның өсөн

[2] ҡәтғиән — тулыһынса

[3] тәғажжаб — ғәжәпләнеү

[4] Мелиоранский П. Памятник в честь Кюль Тегина. С. 64, 67, 100. *(Ә. В.)*

ҡабул итмәгән төҫлө тороуҙа бер мәғәнә лә булмаһа кәрәк. Тарих бик аҙ ваҡытта ғына яңылыша. Тарих беҙҙе татар тип атауында ла яңылышлыҡ итмәгән, сөнки һәр ни ҡәҙәр ҡаҙаҡтарға ҡарағанда кәрәк миҡдарҙа булһа ла, беҙҙең ҡаныбыҙҙа монгол, татар ҡаны аға. Ошо мөнәсәбәт менән рустарҙың беҙҙе татар исеме менән атарға хаҡтары бар. Элекке болғарлыҡты саф көйгә һаҡлап килә торған сыуаштарҙы һис кем татар тип атамай бит. Ошоноң өсөн татар тигән һүҙҙән ҡасыуҙа бер мәғәнә лә юҡ. Хатта шундай хәл һарт вә ҡаҙаҡ халыҡтарында ла күрелде. Әүәлгеләре үҙҙәрен һарт, икенселәре ҡырғыҙ тип ататмаҫ өсөн йән фиҙа итәләр. Хәлбүки, «ҡырғыҙ» кәлимәһе ошо халыҡҡа исем булып, бынан мең ике йөҙ йылдан бирле йөрөп килгән[1] һарт һүҙе лә тажир[2] мәғәнәһендә булмаҡ үҙрә, «Ҡотадғу белек»тә вә ғәйреләрҙә бар. Һәр хәлдә быйдай исемдәрҙән ҡасыу мәғәнәһеҙ эштәрҙер. Был һүҙҙәр әле ҡәүмиәттәрҙең (народностарҙың) исемдәре хаҡында булды. Әммә беҙ бит миллиәтебеҙ (национальносыбыҙ) мәсьәләһендә һөйләшергә теләй инек. Юғарыла мәҙкүр ҡәүемдәрҙең ошо көнгә ҡәҙәр йөрөгән «Россия мосолмандары» тигән исемдәре, Россия христиандары тигән төҫлө булып, һис бер милли йәһәтте күрһәтмәй. Яңы истиғмалға кереп бара торған «төрк» һүҙе инде беҙҙән байтаҡ йыраҡ киткән ғосманлы төрөктәрен дә эсенә алғаны өсөн, бәғзе кешеләр Россия мосолмандары урынына «Россия төрктәре» исемен йөрөтә башланылар. Һуңғы әҙәбиәттә шул истилахты йөрөтәләр. Радлов вә ғәйре ғалимдар, һуңғы заманда тәкәммел итеп[3] барған тюркология, йәғни төрклөктө өйрәнеү ғилемендә бөтөн төрктәр тел һәм этнография айырмаларына ҡарап йәнүби[4], урта (центральный) вә шәрҡи тип өскә бүлеп йөрөтөләләр[5]. Ғарбе Ҡытайҙа, Сибириәләге мәжүси вә бәғзеләре христиан булған төрки ҡәүемдәр шәрҡи тип. Ҡесе Азия вә шимали Иранда тороусы төрктәр йәнүби тип, ҡаҙаҡ, Иҙел буйы, Ҡырым, Ҡавказ һәм түбән татарҙары, башҡорт, һарт, үзбәк, ноғайҙар һәммәһе урта төрктәр (центральные турки) тип аталалар. Хәҡиҡәтән[6] Россия ҡул аҫтындағы мосолман төрктәр ошо көн тәшкил итеп барған

---

[1] Мелиоранский П. Памятник в честь Кюль Тегина. С. 64.

[2] тажир — сауҙагәр, һатыусы

[3] тәкәммел итеп — камиллашып

[4] йәнүби — көньяҡ

[5] Брокгауз ҡамусында (һүҙлегендә) 67-се жилд, «Тюрки» маддәһен һәм Радловтың ҡоман теле хаҡында яҙған әҫәрен ҡарағыҙ // Петербург, 1886 йылғы Академия наук записскалары, жилд IX. С. 87—96. *(Ә. В.)*

[6] хәҡиҡәтән — ысынбарлыҡта

милләттәре менән йәнүби төрктәрҙән күп үк айырылалар. Иҫке әхләк, ғәҙәт, тәбиғәт, миллиәткә яҡынлыҡ, телдең таҙалығы һәммәһе лә беҙҙе ғосманлы, анатолия төрктәренән байтаҡ айыра. Урта рустарҙы, бөтөн тарихтары менән ғосманлыларға оҡшай торған малоросс халҡынан айырыр өсөн, великорус тип йөрөтөлгән кеүек беҙҙең өсөн дә бер айырым исемгә ихтыяж булһа кәрәк. «Шимали төрк»[1] тигән исем яртыһы ғәрәпсә һүҙҙән ғибәрәт булыуынан милли исем түгел. Әгәр шундай хәҙерге ориентализм[2] ғәләмендә китеп барыуынса, «урта төрктәр» исеме шәиғ булһа[3], ул ваҡыт был милли бөтөн этнически төҙөлөшкә муафиҡ булған[4] бер исем булыр ине. Беҙҙең был рәүешсә йәнүби, урта, шәрҡи кеүек бүлектәргә бүленеүебеҙ, рус миллиәтенең великоросс, малоросс, белорус тип бүленгәне кеүек бер хәләттер[5]. Һуңғы замандағы миллиәт көрәштәре, ижтимағи, әҙәби, дини хәлдәр беҙҙе мотлаҡан[6] берләштерәләр. Һәм, шулай итеп, әкрен-әкрен үҙ алдына бер төрк милләте тәшкил итәләр. Ошоноң мәжмуғаһы мотлаҡан төрк кенә, мәхдүдерәк[7] булһа, йәнүби һәм урта төрктәр булалыр.

Әгәр Россияла тәшкил итеп барған был миллиәт бер ваҡыт Сыңғыҙ командаһында булыу иғтибары менән «татар» тигән исем менән аталып китһә, тағы гүзәл булыр ине. Ләкин ул булмаҫ кеүек күренә. Сөнки татар исеме был көндә төрк исеме кеүек бер этнический исем түгел, бәлки тарихи исем генәләр. Ул үҙе төрк булған ҡырғыҙ, һарт, үзбәк, төркмән, башҡорт вә ғәйре ҡәүемдәрҙе шамил[8] булмай, әммә төрк булмаған тунгус, манджурия халыҡтарына ла бик ныҡ итлаҡ ителеп[9] йөрөй. Ошоноң өсөн был көндә Ҡазан татарсаһы, Ҡырым татарсаһы тигән кеүек шиүәләр булһа ла «татарса» тигән ғөмүми бер тел юҡтыр. Мөстәшәрк[10] Абель Ремуз «татар телдәре» хаҡында тип яҙған әҫәрендә татар исеменән магол, манджур, тибет, төрк телдәренең һәммәһен ирада итә[11]. 1885 йылда Харлис «Татарҙарҙың диндәре» тип сығарған әҫәрендә маголдар менән манджурҙарҙы ирада итәләр.

Ошоноң өсөн был исем Россиялағы башҡа төрки ҡәүем-

---

[1] ш и м а л и  т ө р к — төньяк төрк
[2] о р и е н т а л и з м — Көнсығышты өйрәнеү фәне
[3] ш ә и ғ  б у л һ а — таралһа, билдәле булһа
[4] м у а ф и ҡ  б у л ғ а н — тура килгән, яраҡлы, урынлы
[5] х ә л ә т т е р — хәлдер, күренештер
[6] м о т л а ҡ а н — шикһеҙ
[7] м ә х д ү д е р ә к — сикләнгәнерәк
[8] ш а м и л  б у л м а й — эсенә алмай
[9] и т л а ҡ  и т е л е п — ҡулланылып
[10] м ө с т ә ш ә р ҡ — көнсығышты өйрәнеүсе ғалим
[11] и р а д а  и т ә — күҙҙә тотоп һөйләй

дәр, ҡырғыҙ, һарт, төркмәндәргә итлаҡ ителеп бөтөн донъяға ҡаршы бер милли исем булып китә алмаҫ, бәлки айырым йәмғиәттәрҙең исемдәре генә булып ҡалыр кеүек күренә. Ошоноң өсөн бөгөн «Россия мосолмандары» тип аталған был милләткә урта төрк милләте, йәки йәнүби вә урта төрктәрҙең барыһына ҡарап «төрк милләте» тигән исемдең шул көйгә тороп ҡалыуы ихтималы яҡыныраҡтыр.

Беҙ үҙебеҙҙең мәжмуғыбыҙҙы[1], кәрәк хәҙерге ориентализм истиғмал иткәнсә[2] «урта төрк» тип атайыҡ, кәрәк «төрк» һүҙен ғосманлылар ҡулынан алып уларҙы үҙ әҙәбиәтебеҙҙә ғосманлылар тип атап ҡалдырып, төрк һүҙен үҙебеҙгә генә исем итеп йөрөтәйек, беҙҙеңсә, барыһы ла берҙер.

Ошоноң өсөн инде хәҙергә ниндәй ҡәүемдәнһең тиһәләр, ҡаҙаҡ ҡәүеменән, һарт ҡәүеменән, татар ҡәүеменән тип яуап бирергә яраһа, «ҡайһы милләттәнһең?» тип һораусыларға Ибраһим милләтенәнмен, йәки Россия мосолмандарынанмын йәки ҡаҙаҡ, башҡорт, татар милләтенән тимәйсә «төрк милләтенәнмен» тип яуап биреү тейештер.

---

[1] мәжмуғыбыҙҙы — барыбыҙҙы
[2] истиғмал иткәнсә — ҡулланғанса, файҙаланғанса

## ДИУАНИ МӘХТҮМКОЛОЙ

Әстрханда имам Ғабдрахман әфәнде Ниязи ошо исем менән төркмән халкының мәшһүр шағиры Мәхтүмколой-ҙың әшғәрен йыйып нәшер итә башланы. Хәҙер сыккан беренсе жөзьә урта кулда 48 сәхифәлек булып Әстрханда Ғөмәров вә шәриктәре[1] матбағаһында әғлә[2] баҫылған. Хакы 20 тин. Ғ. Ниязи әфәнденең был эше беҙҙең ғәләмдә ысын-ысындан тәбрик ителергә тейеш эштер. Ул бының менән төрки әҙәбиәттең төрлө кәүемдәренә мәнсүб булған кыҫымдарын өйрәнергә юл асты. Сөнки төрк-татар милләте һуңғы быуаттарҙағы сәйәси хәлдәр аркаһында төрлө айырым һәм бер-береһе менән бик аҙ таныш булған йәмғиәттәргә айырылды. Айырым йәмғиәттәрҙә үҙ араларындағы ғөмүми мөнәсәбәт менән таныш булмаған халык шағирҙары айырым исемдәр менән төркмән, кырғыҙ, Казан, һарт, Кавказ, Кырым әҙәбиәте тигән кеүек әҙәбиәттәр яһай башланылар. Инде беҙгә уларҙың барыһын бер ергә йыйып өйрәнергә бик вакыттыр. Ниязи әфәнде төркмән әҙәбиәтен йыя башлаһа, Урта Азия төрктәре ундағы шағирҙарҙың әҫәрҙәрен йыйып нәшер итә башлаһалар, эш һәйбәтләнә. Ниязи әфәнденең был хеҙмәтенә тәшәккүр йәһәтенән был урында мин ғөмүмән төркмән әҙәбиәте һәм хосусан Мәхтүмколой вә уның әшғәре хакында бер нисә һүҙҙәр яҙырға керешәмен. «Диуани Мәхтүмколой» китабы укыусыларға бер еңеллек һәм бер ҙә кул теймәгән төркмән әҙәбиәте хакында бер мөләхәҙә булһын.

### I

Төрк кәүемдәренән һәр береһенең ләһжәләре, ауыҙ әҙәбиәте Радлов, Катанов, Кунц, Мелиоранский, Вамбери, Ильминский вә ғәйреләрҙең һиммәттәре аркаһында инде

---

[1] шәриктәре — иптәштәре
[2] әғлә — бик якшы (якшы сифатлы)

бик яҡшы тәфтиш ителгән, байтаҡ асылған хәлдә, Урта Азия төрктәре, бигерәк төркмәндәрҙең телдәре бөтөнләй тәфтишһеҙ ҡалған. Хатта был эш өсөн рус ориенталистары бик ныҡ ойлалар[1]. Сөнки төрки теленең ғөмүми хәле хаҡында һөйләгән ваҡытта был ләһжәләрҙең тәфтиш ителмәгән булыуы күп уңайһыҙлыҡ килтерә. Мөтәваффи профессор Березин үҙенең «Турецкая хрестоматия» исеме менән 1857—1859 йылдарҙа Ҡазанда 3 жилдтә нәшер иткән әҫәренең 2-се жилдендә 40—102-се биттәрҙә төркмәндәрҙең халыҡ әҙәбиәтенән байтаҡ өлгөләр нәшер иткән ине. Ләкин яҙыуы ғәрәп хөруфәте менән булғанлыҡтан фәнни йәһәттән әһәмиәтһеҙ ҡалды.

1879 йыл Вамбери Лейпцигта «Zeitschrift der deutschen handischen Gesellschaft» журналының 33-сө жилдендә, 387—444-се биттәрҙә Мәхтүмҡолойҙың әшғәрен нәшер итте. Ләкин был һәмишә ғәрәп хөрүфәте менән ине...

III

...Занымса, ориенталист әфәнделәр Мәхтүмҡолойҙың әшғәренә тәүсиф[2] биреүҙә, уның бар шиғырҙарын йыйып бөтөрөү һәм башҡа шиғырҙарын, әҫәрҙәрен ысынлап өйрәнеүгә туҡтап тормаҫтар ине, бында ориенталистарға уңайһыҙланған икенсе бер йәһәт бар: ул да уларҙың беҙҙең телебеҙ, мәғәнәбеҙ, рухыбыҙ менән бик аҙ таныш булыуҙалыр. Шулай итеп, беҙгә Мәхтүмҡолой әшғәре хаҡында ысынлап һөйләргә урын киң әле.

VI

## Ғабдрахман әфәндenең мәжмуғаи әшғәре

Ғабдрахман әфәнде нәшер иткән диуанынан башҡа миңә Мәхтүмҡолойҙың бер нисә шиғыр мәжмуғалары мәғлүм. Былар араһынан иң киң булғаны минең үҙ ҡулымдағы яҙма нөсхәлер. Был нөсхәне миңә Ҡокандта ерле мөғәллим Ғаширғәли әфәнде Заһиров ебәргән ине. Был нөсхә ориенталистар күргән һәммә нөсхәләрҙән дә киң. Бында барыһы ике йөҙ ун ҡәсидә бар. Тәғлиҡ хаты менән яҡшы итеп 279 сәхифәлә 8 ҡулда яҙылған. Иҫке яҙма. Ләкин ҡайһы сәнәлә яҙылғаны зикер ителмәгән. Ғабдрахман әфәнде хәҙергә барыһы 45 ҡәсидә нәшер ит-

---

[1] Записки Восточного отд. Имп. Рус. Археолог. Общества. 1909, т. XIX. С. 151. *(Ә. В.)*

[2] т ә ү с и ф — характеристика

кән. Вамбериҙың мәжмуғаһында 31 тамам ҡәсидә, 10 ҡәҙәр китғалар бар. Барыһы 41 була. Профессор Березиндың «Турецкая хрестоматия» исемендә нәшер иткән әҫәренең икенсе жилдендә бары бер бит ҡәсидә бар. Бынан башҡа Шәйх Сөләймәниҙең «Лөғәт сығатай вә төрки ғосмани» тигән китабында Мәхтүмҡолойҙың бәйеттәре 18 урында зикер ителә. Мәшһүр Остроумов та Мәхтүмҡолой әшғәрен нәшер иткән. Ләкин мин уны күрмәнем. Ул барыһы 50 нөсхә генә баҫылған (1907 сәнә, Ташкент). Унда барыһы, Самойлович бәйәненсә, 81 ғәзәл бар имеш. Профессор Самойлович «Диуан»дың күп нөсхәләрен күргән. Үҙендә алты нөсхә киҫәк яҙма нөсхәләр бар имеш. Ул быныц өҫтөнә Императорский публичный библиотекалағы ике нөсхәне һәм Ташкент ғөмүми китапханаһындағы, Императорский географический йәмғиәттең китапханаһындағы нөсхәләр һәм башҡа бәғзе бер кешеләр ҡулындағы нөсхәләрен күргән. Уның барлыҡ күргән ғәзәлдәренең һаны 197.

Кәрәк беҙҙең күргәнебеҙ, кәрәк Самойлович күргән ҡәсидәләр барыһы ла бер-береһе менән тәдәхел итәлер[1]. Ошо сәбәптән хәҙергә мәғлүм булған төрлө мәжмуғаларҙағы ҡәсидәләрҙең иҫәбе нисә йөҙҙәргә етһә лә, хәҡиҡәттә барыһы 270-ләптән артмай. Беҙҙең ҡулдағы мәжмуғала барыһы 209 ғәзәл, бында башҡалар тарафынан күрелгән 80 ҡәҙәр ҡәсидә юҡ. Әммә үҙендә ориенталистар тарафынан күрелмәгән 68 ғәзәл бар. Самойловичта барыһы 197 ғәзәл (быларҙың 137 беҙҙең мәжмуғала бар), беҙҙең мәжмуғала ғына булған 68, Вамбери мәжмуғаһында ғына булған 2, Ғабдрахман әфәнде мәжмуғаһында ғына булған 2 — былар барыһы 269 ғәзәл...

Мәхтүмҡолой диуандарының төрлө варианттары араһында күп айырма була. Мәҫәлән, бер бәйет минең ҡулымдағы мәжмуғала, Вамбери, Ниязи нәшерҙәре, Самойловичтарҙа бер-береһенә башҡа, хатта улар мәжмуғаларҙы яҙыусы кешеләр ләһжәләренә ҡарап башҡа. Мәҫәлән, минең ҡулымдағы мәжмуғала Хива тирәһендә яҙылғаны өсөн үзбәк, һарт ләһжәһенең хосусияттары асыҡ күренеп тора. Икенсенән, был шиғырҙарҙы Төркөстанда төркмәндәр араһында яттан беләләр, тинек. Унда һәр кем үҙ тарафынан был шиғырҙарға үҙгәреш бирә булырға кәрәк. Күсереүселәр ерле халыҡ ауыҙынан күсерәләр, төрлө нөсхәләр араһында байтаҡ айырма булыуы ошо сәбәптәрҙән булһа кәрәк. Хатта был варианттар араһынан Вамбери нөсхәһендә бик күп яңылыштар бар... Күсереүселәрҙә хаталар күп. Шуның өсөн мөмкин ҡәҙәр бик күп варианттарын йыйырға кәрәк. Ошо

---

[1] т ә д ә х е л  и т ә л е р — аралашалар

мәжмуғаһын татбиҡ иткәндә генә Мәхтүмҡолой әшғәре тө-ҙөк бер һүрәттә йыйыла алыр. Минең ҡулымдағы мәжмуғала тағы бер ҡыҙыҡ хосусият бар. Бында бөтөн ғәзәлдәрҙең тәҡрибән яртыһында ул ғәзәлде Мәхтүмҡолой ниндәй мөнәсәбәт менән әйткәне яҙылған. Был әле хәҙергә фәҡәт минең ҡулымдағы мәжмуғала күренде. Ихтимал, башҡалары тураһында ла быларҙы табып булыр.

Мәхтүмҡолой төрк-татар шағирҙары араһында иң ҙуры түгел; ләкин төрк-татарҙарҙың «халыҡ шағирҙары» араһында мөһим урынды ишғәл иткәндәренән береһелер. Уның төрлө нәсихәттәре бик ғади. Ләкин күп ваҡытта байтаҡ матур булған тасуирҙары менән «барсаның ҡолаҡтарына яғымлы вә ҡыҙыҡлыраҡ күренгән» әшғәре беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең «яһиллият дәүере» эсендә яҡшы уҡ мөһим урынды ишғәл итә. Әҙәбиәт тарихыбыҙ өсөн ҡәҙерле булған был әҫәрҙәрҙе беҙгә ысынлап йыйыу вә мөмкин ҡәҙәр күп иғтинаи[1] менән быларҙың өҫтөндә эшләү, нәшер итеү ләземдер. Был хаҡта мин Ғабдрахман әфәндеең хеҙмәтен тәбрик иткәндең һуңында үҙ тарафымдан был хеҙмәттәрҙә Ғабдрахман әфәнделәр менән бергә буласағымды ғарыз итәмен. Алла теләһә, киләсәктә бер форсат менән Мәхтүмҡолой әшғәренә ғаид бәғзе бер тәфтиштәр (разборы) яҙырбыҙ. Был сәфәргә әҙәбиәт һөйөүселәренә бер булышлыҡ булһын тип, Мөхтәрәм шағирҙарҙың ниндәй ғәзәлдәре бар икәнен күрһәтеү өсөн «Мәхтүмҡолойҙың ғәзәлдәренә күрһәткес» яҙҙым. Хәҙергә ҡулдан килгән шул.

...Шағир Мәхтүмҡолойҙың беҙгә мәғлүм булған ғәзәлдәре ошо рәүешсә 269 ҡәҙәр булды. Урта Азияла ғөмүмән, Төркмәнстанда хосусан, туғандарыбыҙ Мәхтүмҡолойҙың тағы башҡа ғәзәлдәрен беләләрҙер. Инде улар шағирҙың был беҙҙең һаналған ғәзәлдәрҙән башҡаларын үҙҙәрендә генә һаҡлап ҡалмаһындар, матбуғатҡа сығарһындар ине. «Шура» мөжәлләһе лә был хосуста үҙенең сәхифәләрендә мөхтәрәм шағир Мәхтүмҡолойҙың мәжмуғаларын йыйып бөтөрөрбөҙ һәм ул ваҡыт төрлө ғәзәлдәрҙең, төрлө риүәйәттәренең нөсхәләрен татбиҡ итеп хаҡиҡи бер «Мәхтүмҡолойҙың мәжмуғаи әҫәре»н вөжүдкә килтерә алырбыҙ.

[1] иғтинаи — иғтибар

# ПРОФЕССОР БАРТОЛЬДТЫҢ БЕҘҘЕҢ АРАБЫҘҘА БУЛЫУЫ МӨНӘСӘБӘТЕ МЕНӘН

## I

«Ваҡыт»та Бартольд йәнәптәренең Ырымбурға килгәнен, Ҡарғалыға барып ҡайтыуын, унан Стәрлебаш, Өфө тарафтарына сәфәр итәсәген ишеткәс, инде беҙҙең был тарафтарҙа фәнни тәфтиштәр[1] аҫтына керерме әллә тигән уйға килдем. Һәр ни ҡәҙәр был хөрмәтле заттың был тарафтарға ниндәй мәҡсудтәр[2] менән сәфәр итеүе мәғлүм булмаһа ла, ошондай уй башҡа килмәк мөмкин түгел ине. Сөнки Бартольд йәнәптәре шундай зат ки, ул хосусан беҙҙең, ғөмүмән ислам ғәләменең хәле, рухы менән яҡшы уҡ яҡын таныш булғаны өсөн беҙҙең арабыҙҙа аҙ ғына ваҡыт ҡалыуында ла «Шәреҡте таныу» (Востоковедение) ғилеменең бер йыртығын ямарға өлгөрә, беҙҙең ғаләмебеҙгә артыҡ вөжүде менән бирелгәне өсөн был халыҡ араһына ниндәй генә йомош менән килеп кермәһен һәмишә[3] фәнни тәфтиштәрен онотмай.

Беҙҙең Урал — Иҙел буйы төрктәре (татар, башҡорт, типтәр, мишәрҙәр) тарихы, этнография, хатта лингвистика йәһәтенән һис бер етди фәнни тикшереүҙәргә мәхкүм булғандары[4] юҡ. Ҡазанға килгән Европа ғалимдары, был халыҡ иҫке-моҫҡо нәмәләр йыйыуға бик оҫта икән, тип китһәләр, Өфө тирәһенә килгәндәре, былар ҡымыҙ яһайҙар, ләкин үҙҙәре бик ялҡау, тип кенә китәләр. Әммә халыҡтың эсенә кереп уларҙың тышҡы тормоштарына ғаид мәғлүмәт, иҫке тормоштарын, тарихы вә лисаны йәһәтенән ҡәтғи бер халәткә килтерер өсөн фольклор, риүәйәттәр (преданиялар) тарих вә тел ядлыҡтары[5] йыйыу мәшәҡәтен ныҡлап йөкләгәндәре юҡ. Әгәр башҡорттар, мишәр вә ерле татарҙарҙың асылдары (происхождениелары) хаҡында ғәрәп, грек, әр-

---

[1] тәфтиштәр — тикшереүҙәр
[2] мәҡсудтәр — ниәттәр
[3] һәмишә — һаман
[4] мәхкүм булған — хөкөм ителгән. Бында: фәнни тикшереүҙәргә эләккәндәре
[5] ядлыҡтары — ҡомартҡылары

мән яҙыусыларына ғына ҡарап хөкөм итеүсе заттар ерле халыҡтың эсенә кереп уның бөтөн тышҡы, эске хаятын тәфтиш итеп башҡа төрөк ҡәүемдәре[1] менән тиңләштерһәләр ине, халыҡтың тарихы был көнгә мәғәнәһеҙ гипотезаларҙан үткән, тәбиғи бер юлға кергән булыр ине. Был ҡәүемдәр хаҡында етди тәфтиштәр шул ҡәҙәр юҡ ки, иң һуң ваҡытта (1896 йыл) төрки ҡәүемдәр хаҡында етди тәфтиштәр яһаусы ғалим, Аристов, үҙенең әҫәрендә иң ныҡ таяна торған ер итеп, бик өҫкө ҡаттан ғына йөрөгән иҫке ғалим Рычковтың әҫәрен генә таба. Фәнни тәфтиштәр юҡ тинек, сөнки беҙҙең хаҡта фәнни тәфтиш тигәндән беҙ тел хосусында Радлов, этнография бабында[2] Потанин вә Аристов, тарих хосусында Бартольд тәфтиштәрен ирада итәбеҙ[3]. Радлов Иҙел буйы телдәрен — сит телдәрҙең тәьҫиренә артыҡ мәхкүм булған тел тип етди тәфтиштәр итмәне. Катанов башҡорт, типтәрҙәр хосусындағы күп, ләкин Бәләбәй өйәҙҙәре тирәһендә генә йөрөүе өҫтөнә бик өҫкө ҡаттан ғына булған тәфтиштәрен ҡысман[4] ғына баҫтырҙы. Унда ла башҡорт этнографияһына ғаид булғаны фәҡәт бер нисә сәхифә ҡәҙәр генәлер. Вельяминов-Зернов был хаҡта бик аҙ нәмә ҡалдырҙы. Назаров, Небольсин, Куник, Хвольсондарҙың яҙыуҙары тағы шулай. Рыбаков, Игнатьев вә бәғзе бер мәмләкәт ғалимдарының (мәҫәлән, Баленттың тәфтиштәре) миссионер ағайҙарҙың тәфтиштәренән(!) бик аҙ айырмалылыр. Былар барыһы ла һис ул Бартольдта булған мәғәнә менән фәнни тәфтиштәр түгелдер. Беҙҙең тарихты Европа ғалимдары бик ҡыҙыҡ бер һүрәттә, шәреҡтән ғарбкә йәғни йыраҡтан яҡынға килмәк тариҡынса[5] өйрәнә башланылар. Якинов, Васильев, Кастрен, Клапрот, Жулиандар үткән ғасырҙың әүәлге яртыһында фәҡәт Монголия тирәһендә генә йөрөнөләр. Шул ғасырҙың икенсе яртыһына сыҡҡас, Риттер, Григорьевтар Шәрҡи Төркөстанға[6] килеп еттеләр. Урта һәм ғарбе Төркөстан тәфтише шул ғасырҙың ахырында һәм был егерменсе быуатҡа сыҡҡас, Вамбери, Веселовский, Бартольд кеүектәр тарафынан эшләнде. Бартольд йәнәптәре Ырымбур, Стәрле, Өфө тарафтарына йөрөйәсәк тип ишеткәс, инде фәнни тәфтиштәр был ергә лә

---

[1] ҡәүемдәре — халыҡтары
[2] бабында — бүлегендә
[3] ирада итәбеҙ — күҙ уңында тотабыҙ
[4] ҡысман — өлөшләтә
[5] тариҡынса — ысулы менән
[6] Шәрҡи Төркөстан — Көнсығыш Төркөстан. Көнсығышты өйрәнеүселәр хәҙерге Ҡытай Халыҡ Республикаһының Синцзян — Уйғыр автономиялы районы урынлашҡан географик урынды шулай атағандар.

килеп етте ахырыһы, тигән уй ихтыярһыҙ килде. Һәр ни ҡәҙәр беҙҙең Урал — Иҙел төрктәре фольклорға шәреҡ төрктәренә, иҫке әҫәрҙәр, тарихи китаптар йәһәтенән Урта Азия төрктәренә нисбәт сиктән тыш ярлы булһалар ҙа, әгәр Бартольд кеүек заттарҙың ҡулдары тейһә, бер-бер эш сығыуы шөбһәһеҙҙер. Бартольд йәнәптәре ислам, хосусан иран тарихы, әҙәбиәте менән дә иштиғал итә[1]. Ләкин уның тәхсисе[2] был көнгә ҡәҙәр Урта Азия булды. Һәм Урта Азияның 13 ғасырҙарға ҡәҙәр булған тарихын шундай ҡәтғи итеп тәфтиш итеүенә уның бер аҙ өлөшө генә булһын беҙҙең ҡысматыбыҙға[3] төшһә, тарихыбыҙ күп бәхетле булыр ине.

«Һуң ул Урта Азия тарихына ғаид ниндәй хеҙмәттәр итте?» — тип һораусылар булыр. Шуның өсөн беҙгә был урында уның был хаҡтағы әҫәрҙәре хаҡында бер ҡәҙәр һүҙ әйтергә тура килер. Ләкин пароходта барған ерҙән был хаҡта тәртипле бер нәмә биреп булмаҫ.

Бартольдтың Урта Азия тарихына ғаид етди тәфтиштәре 1893—94-тә Төркөстанға сәйәхәтенән башлана. Уның 1896 һәм 1902 йылдарҙағы сәйәхәттәре иң һуңғы етди әҫәрҙәрен генә сығарҙы. Уның тәфтиштәре шул 93 йылдарҙан башлап Петербургта Император археология йәмғиәтенең шәреҡ шөғбәһе[4] запискаларында вә башҡа мәжмуғаларҙа һәм айырым китаптар һүрәтендә сыҡты.

1) Мәҙкүр[5] З.В.О.И.Р.А. Общ. мәжмуғаһының VIII жилдендә «Мағолдар дәүеренә ҡәҙәр Төркөстанда христианлыҡ» исемендә әҫәре.

2) Китабы Ҡорҡот, уның тәржемәһе һәм Ҡорҡот хаҡында мәҡәләләре 8, 9, 10, 12, 15, 18, 19 жилдтәрендә сыҡты. Һәм был хосуста «Живая старина» мөжәлләһенең[6] IV жилдендә (1894 йыл) мәҡәләһе баҫылды.

3) Унынсы жилдтә «Сыңғыҙхан дәүләтенең тәшкиле» тигән әҫәре.

4) XV жилдендә «Төркөстанға сәйәхәттең хисабы». Бында ул шул ваҡытҡа ҡәҙәр Европаға мәғлүм булмаған ниндәй тарихи әҫәрҙәр тапҡанын һанай. Вә уларҙың мәалдарын[7] тәфсилән яҙа.

5) Жилд XVII лә «Ғәрәптәрҙең Урта Азия фәтехтәре[8]

---

[1] иштиғал итә — шөғөлләнә
[2] тәхсисе — бағышланыуы, билдәләнеше
[3] ҡысматыбыҙға — яҙмышыбыҙға, өлөшөбөҙгә
[4] шөғбәһе — бүлеге
[5] мәҙкүр — әйтеп үтелгән
[6] мөжәлләһендә — журналында
[7] мәалдарын — эстәлектәрен
[8] фәтехтәре — баҫып алыуҙары

тарихына ғаид» һәм «Орхон яҙыуындағы хисап рәүеше бөгөнгө төрки ләһжәләрҙә»[1] тигән әҫәрҙәр.

6) 1896 йылғы Ж.М.Н. Просв. мәжмуғаһының июнь нөсхәһендә мәшһүр (бигерәк Истанбулда шөһрәт алған) мөәррих[2] Леон Қаэндың «Азия тарихына мәдхәл» тигән әҫәренә ғаид яҙған мөһим мәҡәләһе.

7) 1896 йылғы «Урта Азия мөхбире»[3] мөжәлләһенең июнь нөсхәһендә «Урта Азияла мәҙәниәт арияға ғаид» тигән әҫәре.

8) Шул уҡ сәнәлә Ташкентта Наршаһиҙың «Тарихы Бохара»һын нәшер итә.

9) 1898 йылғы «Академия науктың тарих вә лисан шөғбәһенең записскалары»нан дүртенсе номерҙа «Урта Азияға фәнни мәҡсут илә сәйәхәтемдең хисабы» тип яҙған мөһим әҫәре.

10) 1898 йылғы «Етеһыу вилә йәтенең статистика комитеты» мәжмуғаһында «Етеһыу вилә йәтенең тарихы» тип яҙған әҫәре баҫылды.

11) 1899—1900 йылдарҙа «Маголдар дәүерендә Төркөстан» исемендә олуғ мөһим әҫәрен нәшер итте. Төрк тарихы менән иштиғал итеүселәр өсөн һәр ваҡыт ҡулда тоторға, бәлки быны уҡымайынса төрк тарихы майҙанына сыҡмаҫҡа тейеш булған был әҫәр ике жилдтә баҫылды.

12) 1911 сәнә дәрелфәнүндә шәкерттәренә уҡыған дәрестәренән ғибәрәт булған «Европа һәм Русияла шәреҡте өйрәнеүҙең тарихы» тигән әҫәре сыҡты. Ҡыҫҡа рәүештә яҙылған был китап беҙҙең, ғөмүмән мосолман ғәләменең тарихына, мәҙәниәтенә ғаид күп файҙалы мәғлүмәтте хауиҙыр[4]. Был да тарихыбыҙ менән шөғөлләнеүселәргә һәр ваҡыт ҡулда тоторға тейешле булған әҫәрҙәрҙәндер. Бартольд йәнәптәре үткән 1912 сәнә «Ислам ғәләме» мөжәлләһендә мөхәрририлек итте һәм унда тарихыбыҙға ғаид яҡшы мәҡәләләр яҙҙы. Мәҫәлән:

13) Франция тарихсыһы Блошеның беҙҙең тарихыбыҙға ғаид яҙған олуғ әҫәре (Лондонда сыға торған «Gibb memorial»дың ун икенсе жилде. 1910 сәнә) хаҡында һәм Рәшитетдин вә уның тарихы «Жәмиғ-әт-тәуарих»[5] хаҡында яҙған мөһим мәҡәләһе.

14) 1894 йыл Радловтың Орхон һәйкәлдәре хаҡында яҙған әҫәрҙәрендә был һәйкәлдәрҙәге тарихи исемдәрҙе шә-

---

[1] ләһжәләрҙә — телдәрҙә
[2] мөәррих — тарихсы
[3] мөхбире — хәбәрсеһе
[4] хауиҙыр — эсенә алғандыр
[5] «Жәмиғ-әт-тәуарих» — «Дөйөм тарих»

рех итеп[1] мөһим бер әҫәр яҙҙы һәм шул Радлов мәжмуғаһында баҫылды[2].

15) Былаҙан башҡа Бартольдтың «Живая старина» һәм «Известия Рос. Ком. для изуч. Вост. и Средней Азии» исемендәге мәжмуғаһында һәм юғарылағы З.В.О.И.Р.А.О. мәжмуғаһында төрлө ваҡытта яҙған мәҡәләләре, тәнҡиттәре, докладтары баҫылып торған. Былар араһынан иң мөһимдәре Ж. С. мөжәлләһенең Радлов шәрифенә сыҡҡан жилдендә «Уйғыр мәҙәниәте хаҡында бер нисә һүҙ» тип яҙған мәҡәләһе һәм З.В.О.-ның X жилдендә «Тарих Рәшиди» тәржемәһенә, жилд XIII-тә Иностранцевтың һундар хаҡында яҙған китабына, XV жилдтә Шаванндың Орхон һәйкәлдәренә ғаид яҙған әҫәренә һәм Корниловтың Кашғар тарихына ғаид яҙған китабына, XVII жилдтә Пантусов нәшере булған «Кашғар тарихы», «Тарихы Әмкнә»гә тәнҡиттәр. Бының өҫтөнә XI жилдтә Аристовтың «Төрки ҡәүемдәренең этнический төҙөлөштәре хаҡында» («Живая старина», 1896, вып. III—IV) яҙған әҫәренә һәм Грум-Гржимайлоның Шәрҡи Төркөстан тарихына ғаид яҙған әҫәре («Описание путешествия в западный Китай» тигән әҫәренең икенсе жилдендә, 1899) хаҡында тәнҡит. Хатта Грум-Гржимайло был тәнҡиткә ҡаршы бик зәһәрле яуап та биреп ҡараны. Бынан башҡа Бартольдтың тағы Брокгауз ҡамусында күп үк мәҡәләләре дәрж ителгән[3]. Уның был әҫәрҙәре барыһы ла ғайәт ҙур ғилем, сикһеҙ ижтиһат[4] һәм күп ваҡыт исабат итә[5] торған тоғро фекер менән яҙылғандар. Бартольд йәнәптәре беҙҙең тарихыбыҙға ғаид кәрәк Европа телдәрендә сыҡҡан, кәрәк ғәрәп, фарсы, төрки телдәрендә яҙылып та бөгөнгә ҡәҙәр табылған йәки ҡытайсанан тәржемә ителгән мәжмуғ әҫәрҙәрҙе үҙенең үткен күҙенән кисереп бөткәне һәм улар күрмәгән вә бөгөнгә ҡәҙәр донъяға сыҡмаған, фәҡәт үҙе тарафынан иҫке ислам ғалимдары әҫәрҙәре менән файҙаланғаны вә шулар өҫтөнә күп ваҡыт яҡшы уҡ, хатта бөгөнгә ҡәҙәр (Ҡаэн һәм инглиз мөхәррире Говард, тағы бер икеһе истисна ителеүе хәлдә)[6] күрелмәгән бер һүрәттә битарафлыҡ[7]

---

[1] шәрех итеп — анлатып

[2] Мелиоранский кеүек ғалимдар үҙҙәренең был һәйкәлдәр хаҡында яҙған әҫәрҙәрендә (мәҫәлән, Ж.М.Н.П., 1888, № 10 һәм 1904, З.В.О. т. XII һәм Радлов мәжмуғаһында) мотлаҡан Бартольд тәфтиштәренә генә һылтаналар *(Ә. В.)*

[3] дәрж ителгән — эсенә ингән

[4] ижтиһат — тырышлыҡ

[5] исабат итә — дөрөҫлөккә ирешә

[6] истисна ителеүе хәлдә — индермәгән хәлдә

[7] битарафлыҡ — объективлыҡ

менән яҙғаны өсөн, тарихыбыҙҙың иң олуғ һәм бөгөнгә ҡәҙәрге тарихсылар араһында иң ғәҙел бер ғалиме һаналырға тейештер.

II

Инде беҙ был заттың Урта Азия тарихына яҙған әҫәрҙәренән мөһимдәрен һәм хәтерҙә торғандарын яҙҙыҡ. Ихтимал ки, уҡыусылар араһында Европа ғалимдары вә мөстәшәрҡтәренең[1] тарихыбыҙға ғаид күп төрлө фекерҙә булғандарын белеүселәре был фекерҙәр араһында Бартольд йәнәптәренең мәүҡиғы[2] (позицияһы) нисек икәнен һораусылар ҙа булыр.

Бартольд йәнәптәре был хосуста инглиз мөхәррире Говардтан ҡала ижаби[3] (положительное) урында тороусылығы менән иң беренсе урынды ишғәл итә[4]. Беҙҙе (төрк халҡын — Сыңғыҙ, Тимер һәм уларҙың ғәскәрен) Европа ғөләмәһе һис кеше рәтенә кертмәй вәхшиләргә генә хисаплайҙар ине. Хатта әле 1896 йылда ғына вафат иткән, ләкин беҙҙең тарихыбыҙҙы бөтөн үҙгәртеп ебәргән, боронғо мәҙәниәтебеҙҙең ҡалдыҡтары — Йәнәсәй һәм Орхон һәйкәлдәре вә Турфан әҫәрҙәре — кәшеф ителгәнгә[5] ҡәҙәр үҙенең әҫәрҙәрен сығарып өлгөргән һәм мәмләкәтебеҙҙә беҙҙең тарихыбыҙҙы иң яҡшы белеүсе тип иҫәпләнгән мәшһүр мөстәшәрҡ Березин беҙҙең халыҡтың элек тә яҙыуҙары булған, Сыңғыҙҙарҙың пулаттарға[6] яҙылған ҡанун-ясалары булған тигәнгә ышанаһы килмәй ине. (Труды Вост. отд. VIII томда Алтын Урҙаның дахили[7] төҙөлөшө хаҡында яҙған мәҡәләһен ҡарағыҙ.) Һәм бөтөн тарихыбыҙҙы башынан ахырына ҡәҙәр дикарь — вәхши тигән һүҙҙәр менән әйләндереп сығаралар ине. Мәшһүр ислам тарихын яҙған Август Мюллер вә ғәйреләр был хаҡта ғәйәт түбән бер назарҙа[8] инеләр. Инде ваҡ-төйәк мөәррихтәрҙе әйтмәйбеҙ ҙә. Беҙҙең тарихыбыҙ әле ошо көнгә ҡәҙәр һәмишә ғөмүми тарихҡа ғаид дәрес китаптарына керә алмай. Һәм олораҡ, киңерәк әҫәрҙәргә мөәллифтәр[9] беҙгә бер-ике бит фида (!) иткән[10]

---

[1] мөстәшәрҡтәренең — көнсығышты өйрәнеүсе ғалимдарының

[2] мәүҡиғ — урыны, позицияһы

[3] ижаби — уңайлы, позитив

[4] ишғәл итә — тота, биләй

[5] кәшеф ителгәнгә — асылғанға

[6] пулаттарға — ҡоростарға

[7] дахили — эске

[8] назарҙа — ҡарашта

[9] мөәллифтәр — авторҙар

[10] фида иткән — ҡорбан иткән

ваҡыттарында ла беҙҙе тарихта бер сүп тигән кеүек кенә йөрөтәләр ине. Инде һуңғы кәшфиәттән[1] һуң килгән Бартольдтар эштең бөтөнләй башҡа икәнен аныҡ күрҙеләр. Һәм тарихты бөтөнләй икенсе яҡҡа борон ебәрҙеләр. Әле 1896 йылда ғына Аристов беҙҙең тарихыбыҙҙағы йәмиғ инҡилаптар[2], тарихи ваҡиғаларҙың барыһын да ырыуҙар менән ырыуҙар араһындағы хәлдәрҙән килеп сыҡҡан эштәр тип ҡараған ине. Бартольд быға ҡаршы яҙған тәнҡитендә (З.В.О. т. XI. 1898) тәҡрибән[3] ошондай йөмләләр яҙған ине.

«Төрки ҡәүемдәр араһындағы инҡилабтарҙы бындай иҫкергән мәғәнәләр менән шәрех итеү заманаһы үтте инде. Уларға ла Европа халыҡтары башына йөрөгән донъя, тәбиғәт ҡануидары йөрөгән, улар ҙа Европалағы кеүек тәриҡ[4] милләттәр булғандар. Европалағы һуғыштар төрлө ижтимағи, иҡтисади сәбәптәрҙән килеп сыҡҡан икән, быларҙа ла шулай булған. Яңы мөстәшәрҡтәр, бигерәк тә немец мөстәшәрҡтәре арҡаһында шәреҡҡә ғәжәйеп донъяһы, мең бер кисә хикәйәләренең, ниһәйәтһеҙ легенда вә батыл[5] урыны тип ҡарау дәүере бик йыраҡ китте. Беҙ Шпенглер, Вайл, Дози, Кремер кеүектәр ваҡытында Мөхәммәдкә лә (ғәләйһиссәләмгә лә) шундай бер күҙ менән ҡарай инек. Инде беҙгә был ғасырҙа «беҙ бик мәҙәни халыҡтарбыҙ» тип юғарынан ғына ҡарап вә был халыҡты кешегә һанамаған кеүек хәлдә тороу фән алдында бер кәмселектер. Һәм беҙҙең был эштәребеҙҙең хаталығы был халыҡтарҙың тарихтарын тағы артығыраҡ, тағы мөкәммәлерәк[6] өйрәнгән ваҡытта һаман асыҡ күренә бара».

Бартольд йәнәптәре «Шәреҡте өйрәнеүҙең тарихы» тигән китабында ла шундай һүҙҙәрҙе күп һөйләгән. Ул фәндең, тарихтың бөгөнгө хәленән риза түгел. Ул унда әгәр беҙҙең халыҡтарҙың тарихтары мөкәммәл өйрәнелһә, ғөмүми тарихтар бөтөнләй икенсе төҫ аласағын вә бөгөнгө коруне үлә[7], коруне вәстә[8], коруне йәдидә[9] тигән кеүек булыуҙарының, тарихтың һәр бер мәсьәләһен Европала булып үткән ваҡиғаларға ғына килтереп теркәүҙең ҙур хата икәнен һөйләй. Хатта фәҡәт Европа халҡының мазыһы[10], тормоштан килеп сыҡҡан хәҙерге социологияның элек вәх-

---

[1] кәшфиәттән — фәнни асыштан
[2] йәмиғ инҡилаптар — дөйөм үҙгәрештәр
[3] тәҡрибән — яҡынса
[4] тәриҡ — юл; бында: үҫеш юлындағы милләттәр
[5] батыл — бында: ысынбарлыҡта булмаған
[6] мөкәммәлерәк — тулыраҡ, камилыраҡ
[7] коруне үлә — боронғо быуаттар
[8] коруне вәстә — урта быуаттар
[9] коруне йәдидә — яңы быуаттар
[10] мазыһы — үткәне

ши тип йөрөлгән халыҡтарҙың вә исламдың етди тәфтиштәре һуңында бөтөнләй үҙгәрергә мохтаж булғанын зикер итә[1]. Бартольд йәнәптәренең тарихта, бигерәк шәреҡ вә ислам вә төрк тарихтарындағы ағымдар хаҡында вә ғәйре мәсьәләләрҙә бөтөнләй айырым һәм ғаҡылға муафиҡ (иррациональный) фекерҙәре бар. Мәҫәлән, дин исламға, ул бөгөнгә ҡәҙәр Крымский, Дози вә ғәйреләр тарафынан әйтелгән фекерҙәренең тамаман хилафындалыр[2]. Ул «ислам халыҡтарының тәдәнниһенә[3] дин ислам сәбәп булды тигәнде ҡабул итмәй. Сөнки,— ти,— дин һәр ваҡыт, кәрәк халыҡтар тәрәҡ итһен[4], кәрәк тәдәнни итһен, бер ҡорал ғына булып йөрөй һәм сәйәси-ижтимағи тормоштарға ҡарап һәр ваҡыт үҙгәреп тора, йәғни үҙе тормошҡа ҡарап йөрөй, ти. Ислам мәҙәниәтенең сөҡутының[5] сәбәптәрен тәфтиш иткән ғалимдар бында иң мөһим бер сәбәп итеп тәҡдирҙе (фатализм) күрһәтәләр. Хатта Шпенглер кеүек иң һуңғы ғалимдар ҙа ислам мәҙәниәтен дин исламдың тәҡдир хаҡындағы тәғлимәте харап итте, тиҙәр. Бартольд йәнәптәре быны ла инҡар итә. Ул әйтә: «Тарих һәм мосолмандарҙың бөгөнгө мәғишәттәре[6] күрһәтә ки, тәҡдир мосолман фатихтары[7], вәзир вә әмирҙәре, сауҙа әһелдәре үҙ мәҡсүдтәренә етеү өсөн һәр төрлө әсбәптәргә йәбешеүҙәренә, һәр эштә тәбиғи сәбәптәр бар тип таныуҙарына вә шул юл менән йәмиғ эштәрен мотлаҡан әсбәп менән күрәшеп кенә ифа итеүҙәренә[8] маниғ[9] булмаған кеүек, мосолман мөәррихтәренең дә ислам тарихындағы бөтөн ваҡиғаларҙы тәбиғи сәбәптәр менән генә шәрех итеүҙәренә лә маниғ булманы. Исламдың әсасы булған Ҡөрьәндә тәҡдир ҡәтғи һүрәттә тәғәйен ителмәгән. Башҡа китаптарҙағы тәғлимәт тә христианлыҡтың был хаҡтағы тағы яманыраҡ булған тәғлимәтенә етә алмайҙыр (Послание апостола Павла к римлянам, гл. 9). Мосолмандар тәҡдиренә тәбиғи әсбәп тапмаған ваҡытта таяна торған бер ер итеп кенә таныйҙар. Тәбиғи юлдар менән сисә алмаған мәсьәләләрен тәҡдир илә хәл итәләр. Был христиандарҙа ла шулай ине. Ошоноң өсөн тәҡдир исламдың сөҡутына сәбәп тимәк дөрөҫ түгелдер: Әһле исламдың бөгөнгө тәдәнниләренә бөтөнләй башҡа бер

---

[1] зикер итә — әйтеп үтә
[2] тамаман хилафындалыр — бөтөнләй ҡаршылыр
[3] тәдәнниһенә — артта ҡалыуына
[4] тәрәҡ итһен — алға китһен
[5] сөҡутының — түбәнгә төшөүенең
[6] мәғишәттәре — тормоштары
[7] фатихтары — баҫып алыусылары
[8] ифа итеүҙәренә — башҡарыуҙарына
[9] маниғ — тоҡарлыҡ

тәбиғи, ижтимағи, тарихи сәбәптәр ғарыз итә[1]. Бартольд йәнәптәре былдай фекерҙәрҙе асла[2] бер фекер кеүек итеп кенә әйтмәй. Ул үҙенең хисапһыҙ эрудицияһын урындарҙа бер ҙә ҡыҙғанмай истиғмал итә[3]. Һәм уҡыусылар уның фәҡәт бер мөстәшәрҡ түгел, сәйәси-ижтимағи мәсьәләләрҙә лә тәрән ғалим икәнен күрәләр. (Хатта төрлө имзалар аҫтында мосолмандарҙың биттәренә ҡара төшөрә торған мәҡәләләр яҙыусы әллә ниндәй Әхмәтбәк Аллаев та үткән көҙ «Казанский телеграф»та «Ислам ғәләме» журналына тәнҡит назары менән яҙған оҙон мәҡәләһендә Бартольд йәнәптәренең ислам хаҡындағы ошо фекерҙәренә ҡаршы әллә ниндәй бысраҡ һүҙҙәр яҙҙы, профессор йәнәптәре вә уның рафиғы[4] Шмидттың («Мир ислама»ла ислам тарихын яҙған зат) биттәренә ҡара яғырға тырышты. Сөнки Бартольд кеүек олуғ заттарҙың беҙгә, беҙҙең тарихыбыҙ, динебеҙгә ғәҙел күҙ менән ҡарай торған булыуы әллә ниндәй Аллаевтар өсөн бер ҙә мөтәллиғ[5] түгел ине. Ләкин профессор йәнәптәре быға ҡаршы бер нәмә яҙырға ла тәнәззел итмәне[6]).

Бартольд йәнәптәренең беҙҙең тел, тарих, шағирҙарыбыҙға ғаид башҡа фекерҙәре, назарҙары барҙыр ки, хәҙергә уларҙы оҙон-оҙон һөйләргә тура килмәне. Был һөйләгәндәребеҙҙән башҡа ғалимдар, мөстәшәрҡтәрҙең фекерҙәре, назарҙары араһында Бартольд йәнәптәренең мәүҡиғы[7] бер ҡәҙәр күренһә, шул етеп торор.

Бөгөнгә ҡәҙәр төрклөк вә ислам ғәләмен тәфтиш итеүсе заттарҙың күбеһе хеҙмәттәрен үҙҙәренең һауаларына[8] ҡарап төҙөйҙәр ине. Беҙҙе, беҙҙең тарихыбыҙҙы салиби (отрицательный) яҡтан ҡарағандарҙың да, ижаби (положительный) яҡтан ҡарап матурлап яҙыусыларҙың да хеҙмәттәрен төрлө мил (тенденция) менән изаға итеп[9] була ине. Мәҫәлән, Березин беҙҙең тарихта һис яҡшы яҡты күрмәҫкә теләгән дә бөтөн хеҙмәттәрен шуға бинаи итеп[10] алып киткән, икенсе бер мөәррих Говард яҡшы яҡтан ғына ҡарарға теләгән дә тарафгир[11] булып ҡына ҡалған. Әммә Бартольд йәнәптәре был хосуста бөтөнләй башҡа күренә. Үҙенең бәғзе әҫәрҙәре (мәҫәлән, «Монголдар дәүерендә Төр-

---

[1] ғарыз итә — аңлата
[2] асла — һис
[3] истиғмал итә — ҡуллана
[4] рафиғы — дуҫы
[5] мөтәллиғ — аңлап еткерерлек
[6] тәнәззел итмәне — түбәнһенмәне
[7] мәүҡиғы — урыны
[8] һауаларына — теләктәренә
[9] изаға итеп — юҡҡа сығарып
[10] бинаи итеп — нигеҙләп
[11] тарафгир — яҡлаусы

көстан» китабының ахырында Сынғыҙҙың васиф[1] — характеристикаһы кеүек) менән күрһәтә ки, ул фән алдында һәр ваҡыт битараф торорға, мөмкин ҡәҙәр хеҙмәттәрен һис бер милгә фида итмәҫкә ижтиһат итә[2]. Уның яңы хеҙмәттәрендә был хосусият йәнә артығыраҡ күренә. Быға шундай миҡдар[3], шундай битараф бер заттың ҡылымы беҙҙең был Урал — Иҙел тарафтарының мазыһын да (үткәнен дә. — (Ә. С.) асмаҫмы тип уйланыҡ. Сөнки ул эш беҙҙең тарихыбыҙ өсөн бер бәхетлелек булыр ине.

Бартольд йәнәптәренең беҙҙең арабыҙға килеүе мөнәсәбәте менән башҡа икенсе бер фекер ҙә килде ки, үҙен фәҡәт ғилемгә генә фида иткән бер зат алдында был фекерҙе әйтеп тороуы ла уңайһыҙ булыр кеүек күренә. Ул да беҙҙең бөгөнгө сәйәси хәлебеҙҙер. Сөнки беҙҙең сәйәси хәлебеҙ (положение) моҡтәдир[4], ләкин битараф заттарҙың тәфтиштәренә тарихыбыҙ тағы артығыраҡ бер һүрәттә мохтаждыр. Беҙҙең бөгөнгө сәйәси тормошобоҙ бөгөн дә йәки бөтөнләй беҙ, беҙҙең телебеҙ, мазыбыҙ, ижтимағи хәлдәребеҙ менән таныш булмаған заттар йәки уң күҙҙәрен ҡаплап беҙгә фәҡәт һул күҙҙәре менән генә ҡараусы миссионер ағайҙарҙың ҡулындалыр. Был хәл беҙҙең өсөн булған кеүек, мәмләкәтебеҙ, ватаныбыҙ өсөн дә бәхетлелек түгелдер. Әле беҙҙең бәхетебеҙ шундай заттар ҡулынан моҡтәдир заттар ҡулына күсә алмай. Сөнки Бартольд, Потанин, мөтәүәффи[5] Ядринцев, Пантусов, Полевкин, Радлов, Корш кеүек заттар, ысын тәрбиә алған моҡтәдир әҙәмдәр шул ҡәҙәр аҙҙар ки, ҡул бармаҡтары һанына ла етә алмайҙар. Әгәр мәмләкәттә бындай заттар күбәйеп беҙҙең сәйәси хәлдәребеҙ менән дә ижтиғал итәргә, сәйәси тормошобоҙҙоң тарихыбыҙ, психологиябыҙ менән ни дәрәжә бәйле икәнен күрһәтергә өлгөрһәләр ине, юғары ҡот та (влас та) беҙҙе әллә ниндәй Аллаевтар, Шаһтахтинский, Әхмәтовтар, «Россия», «Новое время», «Земщина», «Колокол», «Православный благовестник»тарҙың мөхәррирҙәре, миссионер ағайҙар васитаһы[6] менән генә өйрәнеү сәбәпле килгән уңайһыҙлыҡтарҙан ҡотолор ине. Бартольд йәнәптәре был хосуста күҙен һалмаҫмы икән тип уйланым. Бар хеҙмәтен ғилемгә генә биргән был зат хаҡында былай уйлау, һәр ни ҡәҙәр юғарыла әйтеүемсә, уңайһыҙ, бының өстөнә ни өсөн

---

[1] васиф — сифат

[2] һис бер милгә фида итмәҫкә ижтиһат итә — һис бер яҡҡа иғтибарҙы күп бирмәҫкә тырыша

[3] миҡдар — олпат

[4] моҡтәдир — көслө

[5] мөтәүәффи — мәрхүм

[6] васитаһы — ярҙамы

сәфәр иткәнен бер ҙә белмәгән көйөнә булһа ла шундай фекер башҡа килде. Сөнки профессор йәнәптәре фән әһеле булыуы менән бергә үткән сәнә беҙҙең сәйәси хәлдәребеҙҙән дә бәхәс итә торған «Ислам ғәләме» мөжәлләһендә мөхәррирлек иткән ине.

Әхмәтзәки Вәлиди.
«Латник» пароходы.
1913 сәнә, 6 июнь.

## ФИРҒӘНӘ ҠАТЫНДАРЫ ТУРАҺЫНДА НАЛИВКИН

Казанда саҡта «Сөйөмбикә» мөхәрриренә: «Һеҙгә, әлбиттә, Фирғәнә ҡатындары хаҡында бер-бер нәмә яҙһам кәрәк»,— тип бер вәғәҙә биргән инем. Инде Фирғәнәгә килгәнгә ай ярым ваҡыт үтте. Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, был ваҡыт эсендә мин Фирғәнәлә урыҫ, йәһүд, сиған ҡатындарынан башҡа, мосолман ҡатындарын күргәнем юҡ. Һарт өйҙәренә кереп йөрөнөм. Күп ерҙә ҡунаҡ булдым, ләкин ҡатын-ҡыҙ күргәнем юҡ. Урамда ҡай ваҡыт әҙәмме, түгелме икәнен белергә һис юл булмаған бәғзан[1] бер «хәрәкәтләнеүсе есемдәр» күренәләр. Былар ҙы мосолман ҡатындары тиҙәр. Былар биттәрен һәм күкрәктәрен ҡап-ҡара ҡылдан яһалған ҙур иләк (сетка) йәки үҙ истилахтарынса[2] «чимбәт» менән ҡаплағандар. Баштарынан аяҡтарына ҡәҙәр күк йәки ҡараңғыраҡ зәңгәр төҫтәге ҙур сапан менән бөркәнгәндәр. Был сапан үҙе күп ваҡыт ебәк ҡатыш материянан йәки фәҡәт ебәктән була. Уның оҙон тар ғына еңдәренең остарын теген нығытып ҡуйғандар. Был сапан менән был «чимбәт» ҡатындарҙың биттәрен һәм күкрәктәрен генә ҡаплап ҡуймай, бөтөн вөжүден[3] ҡаплай. Һәм был ҡатындарҙың аҡрын ғына китеп барғандарын күргән ваҡытта, тауышһыҙ-тынһыҙ ғына көйгә урам буйынан ваҡ-ваҡ аҙымдар менән атлап шыуышып барыусы һынһыҙ, шыҡһыҙ мумия (неуклюжая мумия) хәтергә килә. Бына Фирғәнә ҡатындары тип белгән нәмәләрем шулар. Яҙһам да, шуны ғына яҙа алырмын. Сөнки есемдәрҙең ни төҫтәрен, биттәрен күргәнем бар ҙа, ни тауыш һәм тындарын ишеткәнем бар. Дөрөҫ, Урта Азиялағы иҫке төрөк шағирҙары Навои һәм Латифтар:

Уның кем ал иңендә миң яратты,
Буйы менән сәсен тиң яратты.

---

[1] бәғзан — ҡайһы
[2] истилахтарынса — үҙҙәре атауынса
[3] вөжүден — кәүҙәһен

Һәм ул ки хәсән итте бәһанә илде шәйдә ҡылғалы[1],
Ҡөҙгөнән ҡылды һине үҙен пәйҙә ҡылғалы,—

тип был ҡатындарҙың буйҙарынан, күҙ һәм ҡаштарынан, сәстәренән, ирҙәрҙе артыҡ үҙҙәренә йәлеп итә белеүҙәренән вә ғәйре вә ғәйреләренән бәхәс итәләр, хатта солтан Бабур кеүектәр бынан өс-дүрт йөҙ йылдар элек быларҙың йөҙҙәрен асыҡ-асыҡ күреп:

Нисә йөҙөң күреп хайран булайым.
Аллаһы! Мин һиңә ҡорбан булайым,—

тип уларҙың ямалына үҙҙәрен ҡорбан итәр хәлгә киләләр ине, ләкин уларҙың нисә йөҙ йылдар элек әйткән бәйеттәренә ҡарап ҡына ул ҡолаҡһыҙ, күҙһеҙ, ауыҙһыҙ, йөҙһөҙ, сәсһеҙ, бәдәнһеҙ[2] есемдәргә ғашиҡ булып булмай шул. Кем белә, ул ҡара чимбәттәр, сапандар аҫтында әллә ниндәй бер күрһәң йән фида итерлек «дилбәрҙәр» барҙыр. Бәлки, ул йәшерен ғәләм эсендә үҙҙәренең матур ҡыланыштары йәки матур тәбиғәт, хатта ҙур ғилем, бөйөк шағирлыҡтары менән «Европа ҡатындарын оялтырлыҡ» заттар барҙыр...

Былар барыһы ла миңә мәғлүм түгел. Беҙҙең Ҡазанда, әлхәмдулилләһ, инде әҙәм төҫөнә кергән, асыҡ йөрөй, асыҡ һөйләй торған ҡатындар күбәйҙе. Былары тороп торһон, беҙҙең сапандар менән биттәрен ярым-ярты ғына ҡаплаған абыстайҙарыбыҙ ҙа был Фирғәнә ҡатындары алдында һүҙ күтәрмәҫлек дәрәжәлә юғары торалар. Ошонон өсөн мин үҙебеҙҙең Ҡазан ҡатындарын Фирғәнә ҡатындары алдында бөтөнләй Европа ҡатындары сираһына[3] ҡуйырға итәм. Бында ҡатындар шул дәрәжәлә түбән мәхлүҡтәр[4] һаналалар ки, хатта бахшылар мәжлисендә улар хаҡында һүҙ һөйләргә, фәлән әфәнде, һеҙҙең ҡатынығыҙ тип һүҙ ҡуҙғатырға ярамай, оят хисаплана. Әммә беҙҙең Ҡазан яғында улай уҡ түгел бит инде. Унда нисек тә булһа ҡатындар менән күрешергә, уларҙың хәл-әхүәлен белеп өйрәнергә мөмкин. Ә бында бит ҡатындар шул кәфененә солғанып урамға сыҡҡан мәйеттәр. Уларҙы нисек өйрәнәһең?

Минең бәхеткә ҡаршы, ике иренмәгән кешеләр Наливкин һәм уның ҡатыны Наливкина миңә ҡәҙәр күп элгәре ваҡыт был эште күп ҡыйынлыҡ менән, күп ваҡыттар са-

---

[1] хәсән — гүзәл; бәһанә — сәбәп; шәйдә — ғишыҡтан аҡылдан яҙған ғашиҡ. Йәғни: һәм уның гүзәллеге сәбәбенән илде ғишыҡтан аҡылһыҙланған ғашиҡ ҡылды.
[2] бәдәнһеҙ — тәнһеҙ
[3] сираһына — рәтенә
[4] мәхлүҡтәр — йән эйәләре

рыф итеп[1] өйрәнеп яҙғандар. «Очерки быта женщин оседлого туземного населения Ферганы» был быларҙың биш йыл ҡәҙәр ваҡыт һарт араһында һарт кейемен кейеп, һарт тормошон итеп, ерле төрктәрҙең тамам араларына кереп өйрәнгәндең һуңында яҙып, 1886 йыл Ҡазанда баҫтырған китаптарының исеме. Был китап фәҡәт һарт ҡатындарының эске, тышҡы тормоштарын йәғни шул бик йәшерен ғәләмде донъяға күрһәтеү өсөн яҙылған ҡиммәтле әҫәрҙер. Инде мин дә мәғлүмәтте шул китаптан алып үҙемдең һүҙемде еренә еткерергә итәмен. Китаптан һүҙ күсермәҫтән элек Наливкиндың үҙе һәм хеҙмәттәре хаҡында бер-ике һүҙ әйтһәк, зыян булмаҫ, тип уйлаймын. Наливкин һарт, ҡаҙаҡ һәм фарсы телен бик әғла[2] белеүсе вә был телдәрҙә бик рәхәт һөйләшеүсе моҡтәдир[3] мөстәшәрҡтер[4]. Был зат һәм уның ҡатыны икеһе ғәли образование алған заттар. Наливкин Ташкент дарелмөғәлиминендә[5] мөғәллимлек иткән ваҡытта ирле-ҡатынлы был икәү һарттар араһында (Наманган вәзире Нанай ҡышлағында) оҙаҡ ваҡыт тороп уларҙы өйрәнгәндәр. Һуңынан йәнә бер нисә йылдар ҡаҙаҡ менән бергә сәхрәүи[6] булып күсеп йөрөп ҡаҙаҡса вә ҡаҙаҡ мәғишәтен[7] энәһенән ебенә ҡәҙәр өйрәнгәндәр. Беҙҙең Россия мәмләкәтендә иң һуңғы ваҡытҡа ҡәҙәр шәректе өйрәнеү эштәре рухани халыҡтар: поптар, миссионерҙар ҡулында килде.

Россиялағы инородецтар араһында хөкүмәт насаран[8] динен таратыу мәҡсүде менән миссионерҙар тәрбиә итте һәм уларға инородецтарҙың телдәрен өйрәтте. Былар инородец телдәрен ярты-йорто белеп алғас та бер-ике китап сығаралар һәм шуның менән Европалағы «мөстәшәрҡтәр» рәтендә бер урын алып ғилми бер исем алалар һәм хөкүмәт эштәренә лә насиб ителәләр ине. Был хәл Россияла инородецтарҙы өйрәнеү эшенең гел бер тарафлы (односторонний) һәм һәр ваҡыт бик һай булыуына һәм инородецтар менән рус халҡы араһында дини дошманлыҡтарҙың ҙур булып тороуына сәбәп була ине. Урта Азияны өйрәнеүселәрҙән мөтәүәффи Ядринцев был хосуста бөтөнләй башҡа бер урынды тота. Улар миссионер түгел, донъяуи мәғлүмәт алған һәм сит ҡәүемдәргә (инородецтарға) ла

[1] сарыф итеп — ҡулланып
[2] әғла — бик юғары дәрәжәлә, бик яҡшы
[3] моҡтәдир — көслө
[4] мөстәшәрҡтер — Көнсығышты өйрәнеүсе ғалимдыр
[5] дарелмөғәлимин — ир уҡытыусылар әҙерләй торған уҡыу йорто
[6] сәхрәүи — күсмә тормошта йәшәүсе
[7] мәғишәтен — тормош-көнкүрешен
[8] насаран — христиан

инсан тип ҡарай белә, уларҙың хәленә (положениеһына) керә ала торған заттар булдылар. Наливкин һуңынан Фирғәнәлә вице-губернаторлыҡ мәнсубында[1] торҙо һәм хөрриәт йылдарында Думаға член булып та барған ине. Артыҡ хөр мәсләкле[2] һәм мәсләгендә күп сәбатлы[3] кеше булғанлығынан был урындарында тора алманы. Хәҙер ул һәм ҡатыны бөтөн ҙур тәклифле[4] тормоштарҙы, хатта шәһәрҙе ташлап, Ташкенттан йыраҡ булмаған имениеларында тамам ғади игенсе һүрәте менән ғади мәғишәт кисерәләр. Наливкин үҙенең ғүмере буйы Урта Азияның ерле төрктәренә яҡын тороп, уларҙы һөйөп, уларға гел яҡшыны теләгән, уларҙы донъяға танытып торған хөрмәтле заттыр. Уның ошо «Фирғәнә ҡатындары» тигән китабы Фирғәнәләге мәҙәни[5] төрктәрҙең мәғишәттәрен, эске тормоштарын өйрәнеү тураһында академик Маттендорфтың әҫәре («Очерки Ферганской долины») менән иң беренсе иң төплө әҫәрҙәр һаналалар. Ул бынан башҡа 1885-тә «Ҡоканд ханлығының тарихы» исемендә бер әҫәр сығарҙы. Был китап, хатта иң һуңғы көнгә ҡәҙәр, Ҡоканд тарихына ғаид берҙән-бер әҫәр булып тора. Ул 1888 йыл Һырдаръя статистика йәмғиәте мәжмуғаһының беренсе жилдендә «Урта Азияның ерле халҡында мәғариф» тип, 1900 йыл «Төркөстан әҙәби мәжмуғаһы» тигән мәжмуғала «Төркөстандағы ерле мәктәп вә мәҙрәсәләрҙең тәрбиә йәһәтенән әһәмиәте» тип бик мөһим һәм бик тоғро яҙылған әҫәрҙәр сығарҙы. Ул был әҫәрҙәре менән үҙенең ерле мәҙрәсәләр, шәкерттәр, мәҙрәсәләрҙең эсенә нисек керә алғанлығын һәм ни дәрәжәлә тәрән өйрәнә алғанлығын күрһәткән. Ул фарсы теле һәм төркисәнең һарт ләһжәһе[6] өсөн ҙур һәм кесе лөғәт[7] һәм нәхү[8] китаптары, Төркөстандағы бик буталсыҡ ваҡыт эштәрен (Ежегодник Ферган. области. Т. III, 1904) өйрәнеп яҙҙы. Ташкентта, Сәмәрҡәндтә сыҡҡан ғилми мәжмуғаларҙа, «Туркестанские ведомости»ҙа һәм «Курьер» газетаһында Урта Азия төрктәренең мәғишәттәре вә ғәйре ижтимағи эштәре хаҡында файҙалы мәҡәләләр яҙып торҙо. Уның ошо 1913 сәнәлә «Ерле халыҡтың (һарттарҙың) элекке һәм хәҙерге хәлдәре» тип яҙған матур әҫәре баҫылып сыҡты. Был заттың һәм ҡатынының ерле халыҡты ни дә-

[1] мәнсубында — вазифаһында
[2] хөр мәсләкле — ирекле ҡарашлы
[3] сәбатлы — фекерендә, эшендә ныҡ тороусы
[4] тәклифле — көс талап итеүсе
[5] мәҙәни — бында: ултыраҡ тормош көтөүсе
[6] ләһжәһе — теле
[7] лөғәт — һүҙлек
[8] нәхү — синтаксис

рәжәлә яҡын белгәндәрен күрмәк, ерле халыҡтың әхүәле менән яҡындан танышмаҡ өсөн, мотлаҡ Фирғәнә ҡатындары тураһында яҙған китабы менән ошо һуңғы әҫәрен уҡып сығырға кәрәк.

Наливкиндың Фирғәнә ҡатындары хаҡында яҙған әҫәре (244 сәхифәлек) яҡшы уҡ ҙур һәм бер нисә бабтарға[1] бүленә. 1) Башта ғөмүмән Фирғәнә вә уның халҡы хаҡында. 2) Ерле халыҡтың дине тураһында. 3) Тормоштары һәм өй әсбәптәре. 4) Ҡатындарҙың тышҡы күренештәре һәм кейемдәре тураһында. 5) Ҡатындарҙың иштиғәл итә[2] торған эштәре һәм ашау әсбәптәре. 6) Ерле ҡатындарҙың сәжийәһе[3] (характеры), ғәҙәттәре, әйләнәһенә (мөхитенә) мөнәсәбәте. 7) Ҡорһаҡлы булыуы һәм бала тыуҙырыуы. 8) Йәш ҡыҙ, уны яусылау, никах, туй. 9) Күп ҡатын алыу, талаҡ, ирһеҙ ҡалыу һәм ҡатындарҙың үлеме. 10) Ниһәйәт, ҡатындарҙың араһында боҙоҡлоҡ тураларында яҙылған. Быларҙың һәммәләрендә тәфсил менән яҙыу минең өсөн мөмкин булмаған кеүек, уларҙың барыһын ҡыҫҡартыу иҡтибас тариҡынса[4] яҙыу ҙа күп файҙалы булмаҫ, ошоноң өсөн мин уның «Ерле ҡатындарҙың сәжийәләре (характерҙары), ғәҙәттәре, әйләнәһенә мөнәсәбәте» тигән бабын ғына ихтисар менән[5] тәржемә итәмен.

---

[1] бабтарға — бүлектәргә

[2] иштиғәл итә — шөғөлләнә

[3] сәжийәһе — тыумыштан булған холҡо

[4] ҡыҫҡартыу иҡтибас тариҡынса — ҡыҫҡартып цитата килтереү юлы менән

[5] ихтисар менән — ҡыҫҡартып

## МӨХӘРРИРҘЕҢ ҮҘ ИСЕМЕНӘ ЯҘЫЛҒАН БЕР МӘКТҮБ

### I

Мөхтәрәм хәҙрәт! Һеҙ биргән китап, тәфтиш һуңында аңлашылыуынса, шул «Тәлфиҡ»тә зикер ителә торған Хажи Ғәбделғафар тәәлифе булған «Ғибәдәте әл-әхбәр» китабы икән. Быны Морат әфәнде тәржемә иткән ҡитғалар менән татбиҡ иткән[1] һуңында белдем. Был китап Ташкенттың ғөмүми китапханаһында ла бар. Быны Бартольд та (Записки Восточн. отд. имп. Археол. общ. т. XV. С. 226—232) яҙған отчетында «Сыңғыҙ намә» тип атай һәм мөәллифен Үтәмеш Хужа исемендәге бер Хуржум кешеһе булған, китабын Илбарыс хан исеменә яҙған, тип һөйләй. Ташкенттағы яҙма нөсхәлә шулай яҙылған, ти. Беҙҙең нөсхәбеҙҙең башы юҡ. Әммә Бартольд күргән Ташкент нөсхәһендә ахыры юҡ икән. Был эш бик яҡшы тәсадеф[2] булды. Быны Бартольдҡа хәбәр итәрмен, иншалла. Беҙҙең нөсхәбеҙҙә лә мөәллиф Илбарыс хандың үҙ ауыҙынан ишеткән һүҙҙәрен хикәйә итә. Йәғни китап 16 быуат милади, 10 быуат һижриҙың урталарында яҙылған. Мөәллиф Хуржум буйҙарынан Иҙел буйҙарына сәфәр иткеләп төрлө тараф әхүәлен үҙ күҙе менән күреп белгәне өсөн яҡшы уҡ төрлө яҙған. Тик сәнәләр генә күрһәтелмәгән. Был, әлбиттә, зарарлы түгел. Сөнки сәнәләрҙе күрһәткән икенсе китаптар бар. Беҙҙең нөсхәнең ахырында 84—86-сы сәхифәләр һуңында ҡушылған булырға кәрәк. Сөнки унда мөәллиф заманында байтаҡ һуңғы Күсемхан вә уның балалары ваҡыты һөйләнә. Быны өҫтөнә теле юғары яғы кеүек сығатайса түгел, ҡырымса, йәғни ғосманса менән ҡырым татарсаһы ҡатыш булған бер нәмә бар. Ҡазан ханы Мамаҡтың Мөхәмәт бин Шайбан бин Ғәли бин бәк Көндө икәнен һөйләй. Вельяминов был Мамаҡтың кем улы икәнен һәм Күсем нәҫеленә нисек тотошҡанын белмәгән (ҡарағыҙ: О касимовских царях. т. I, 190; т. II, 390) һәм Вельями-

[1] татбик иткән — сағыштырыу
[2] тәсадеф — тура килеү

новтан һуң да Мамаҡтың кем улы икәне мәғлүм түгел тип йөрөтөлә. Әммә нәфис китапта (нисек мин һеҙгә һөйләгән инем) Алтын Урҙа тарихына ғаид күп файҙалы мәғлүмәт бар. Һеҙгә әйтеүемсә, Морат әфәнденең был китапты ҡағып маташыуы урынһыҙҙыр. Ташкентҡа барғас, ундағы нөсхә менән татбиҡ итәрмен. Иншалла. Әммә Истанбулдағы нөсхә менән татбиҡ ителгәндә эш тағы иғла булыр[1] ине. Ҡыҙғаныс шуныһы, беҙ ул китаптың Истанбулда ҡай китапханала һаҡланыуын белмәйбеҙ. Шунда ла Морат әфәндегә был хаҡта хат яҙырмын тип торам. Миңә мәктүб яҙырға ваҡыт тапһағыҙ.

Адрес: Коканд, Ферган. обл., почтовый ящик 84. Закию Валидову.

Баҡы ихтирам: Әхмәтзәки.

1913 сәнә, 12 ноябрь.
«Чили».

## II

Һеҙҙең күрһәткән китаптар араһында «Зәфәр намәи Әмир Тимур» Шәрәфетдин Йәзди әҫәре, Тимер тарихы буйынса иң мөғтәбәр мәнбәғ[2] фарсы телендә яҙылған. Ташкентта бының нөсхәләрен күрҙем. Низами-заданың «Тарихи Тимер курган» тигән матбуғ[3], ләкин файҙаһы күп булмаған әҫәре Ҡазанда Ғәлимйән хәҙрәт һәм Катанов китапханаларында бар. «Тарихи Ғафари» тигәнегеҙ был Әхмәт әл-Ғафари тигән заттың «Йыһан ара» исемендәге китабы булһа кәрәк. Был китап хаҡында Вельяминов-Зернов Ҡасим хандары тарихының беренсе жилдендә 230-сы бит тирәһендә булһа кәрәк зикер итә һәм мәшһүр Гаммер Пургсталь Алтын Урҙа тарихын яҙған ваҡытта ошо китаптан бик файҙаланған. Был кемсәнең Никарстан тигән китабы ла бар, ләкин ул кемсә беҙҙең Хажи Ғәбделғафар әфәнде түгел. Морат әфәнде тарафынан Хажи Ғәбделғафар тип аталған был кеше Ташкент китапханаһында һаҡланған әҫәрендә үҙен «Үтәмеш» тип атай. Был кемсә Әбүлғәзиләрҙән элгәре Хивала Илбарыс хан дәүерендә булған. Ташкент нөсхәһендә мөҡәддәмәһе[4] бар. Ләкин үҙенең башы ла, ахыры ла юҡ. Был мөҡәддәмәне һәм һеҙ биргән нөсхә илә Ташкент нөсхәһе араһындағы мөнәсәбәтен һәм был китаптың тарихи ҡиммәтен тарих йәмғиәте мәжмуға-

---

[1] иғла булыр — баһалыраҡ булыр
[2] мөғтәбәр мәнбәғ — ышаныслы сығанаҡ
[3] матбуғ — баҫылған әйбер
[4] мөҡәддәмәһе — баш һүҙе

ларында тәфсил менән, иншалла, яҙырмын. Һеҙҙә В. Д. Смирновтың 1887 йыл Ҡазанда нәшер иткән «Ҡырым ханлығы» тигән китабы бармы? Булһа, бәлки, ҡарарһығыҙ, шуның беренсе жилдендә, ике йөҙөнсө сәхифәләр тирәһендә, булһа кәрәк, Ҡырым хандарының нәсәптәренә, Хажигәрәй хандың асылына ғаид Ҡырымда табылған бер тарихи яҙыуҙарҙың тәржемәһен дәрж иткән. Ул да беҙҙең «Ғөмдәт әл-әхбәр» хәбәре ине, буғай. Хуш-сәләмәт булығыҙ.

Әхмәтзәки.
Ҡоканд.

## ЛОТФИ ҺӘМ УНЫҢ ДИУАНЫ [1]

(мөәллифтең үҙ имләһе[2] менән)

Мәшһүр сығатай шағиры Лотфи, уның хаяты һәм әшғәре[3] тураһында рус һәм ғарбе[4] Европаның шәреҡкә ғаид әҙәбиәтендә һис бер тәфтиш[5] булғаны юҡ. Үткән йыл Фирғәнәгә йөрөшөмдә һәм һуңғы Бохара сәфәремдә миңә Лотфиҙың әшғәре менән иштиғәл итеп[6] уның хаяты вә әшғәре хаҡында мәғлүмәтемде киңәйтергә мөмкин булды. Беҙ элек Лотфи, уның хаяты вә әшғәре хаҡында фәҡәт Хундәмирҙең «Хәбиб-әс-сийәр»ендәге бәғзе һүҙҙәре һәм Навоиҙың «Мәжәләс-ән-нәфәис» һәм «Мөхәкәмәт-әл-ләғәтәйн»-дәрендә яҙғаны аша ғына хөкөм итә инек. Инде быға икенсе бер әҫәрҙәр ҡушылды һәм шағирҙың диуанының бик яҡшы яҙылған нөсхәләре табылды.

«Мәжәләс-ән-нәфәис»тә Лотфи хаҡында ошо һүҙҙәр яҙылған: «Мәүләнә[7] Лотфи ғәләйһи-ир-рәхмәти[8] үҙ заманының мәлик-әл-кәләме[9] ине. Фарсы вә төркиҙә нәзире[10] юҡ ине.

Хундәмир «Хәбиб-әс-снйәр»ендә мәүлә Лотфиҙың хаяты һәм әшғәре тураһында яҙғаны ошо «Мәжәләс-ән-нәфәис»-тәгенән башҡа түгел.

Лотфи хаҡындағы был хәбәрҙең хөләсәһе[11] шул: Лотфи 897 йыл шағбан ун етенсе (1492 йыл 14 июнь) көнөндә 99 йәшенә етеп вафат итте. Йәғни ул 797 (1395) йылдар ти-

---

[1] диуаны — шиғырҙарының йыйынтығы
[2] имләһе — орфографияһы
[3] әшғәре — шиғырҙары
[4] ғарбе — көнбайыш
[5] тәфтиш — тикшереү
[6] иштиғәл итеп — шөғөлләнеп
[7] мәүләнә — остаз
[8] ғәләйһи-ир-рәхмәти — уға рәхмәттәр төшһөн
[9] мәлик-әл-кәләме — һүҙ оҫтаһы, яҙыусы
[10] нәзире — ише, тиңдәше
[11] хөләсәһе — һығымтаһы

рәһендә тыуған. Йәшлегендә ғолум заһириәне[1] тәхсил[2] вә тәкәмел итеп[3] бөтөргәндең һуңында шағирҙарға шиғырҙарын иркенерәк әйтер өсөн уңай юл булған тәсауфҡа әнсаб иткән[4] һәм Шиһабетдин Хаябаниға мөрит булған. Ғүмерен заһитлыҡта[5] үткәргән, төрки шиғырҙары өсөн заманында мәлик-әл кәләм, йәғни әҙәбиәттең батшаһы, тип аталған. Фарсы шиғырҙары бик моғтәбәр[6] булған. Мәүләнә Жами кеүек бөйөк шағир һәм хаким зат Лотфиҙы бик ихтирам иткән, Навои һәм Хөсәйен Байҡара кеүек ул замандың батшалары Лотфиҙы бик ҡәҙерләгәндәр, уның шиғырҙарының мәжмуғаһы (диуаны) ул заманда халыҡ араһында бик мәшһүр булған. Шиғырҙарынан башҡа йәнә ул, әлбиттә, Шәрәфетдин Йәздиҙеке булырға тейеш «Зәфәрнамә» йәғни әмир Тимерҙең хаяты хаҡында яҙылған әҫәрҙәрҙе ун мең ҡәҙәр бәйет менән төркисәгә тәржемә иткән. Ул үҙенең ғүмерен ул заман әҙәбиәт һәм ғилем мәркәзе булған Һиратта үткәргән. Сәмәрҡәнд халҡы Лотфиҙың яҡшы шиғырҙарын күргән ваҡыттарында үҙҙәренең Сакакиҙарынан урлап алған тип һөйләр булған, Һират шағиры Навои былырҙы мәғәнәһеҙ эшкә иҫәпләгән. Йәғни заманында Сәмәрҡәндтә Сакаки шөһрәт сығарһа, Һират яғында Лотфи булған. Һәр ике шағирҙың тарафдарҙары үҙ шағирҙарын яҡлағандар. Лотфи шул заһитлығында Һираттың Кенәр тигән мәхәлләһендә ғүмер уҙғарып вафат иткән һәм Хаябан тигән ерҙә дәфен ителгән...

Лотфиҙың «Зәфәр-намә» тәржемәһе Навоиҙың «Мәжәләс-ән-нәфәис»тә әйткәненән күренде ки, бәйәзгә[7] күсерелмәй ҡалған, ихтимал, шунан юғалып киткәндер. Әммә диуанының иһә бөгөн нөсхәләре бар. Үткән йыл Кокандта Юнысйән хажи Дәдә Мөхәммәт улы китапханаһында Лотфиҙың диуанын күргәс, был хаҡта Самойлович йәнәптәренә хат менән хәбәр иттем, ул ноябрҙә яҙған мәктүбендә «Лотфиҙың диуаны Британский музейҙа ла бар буғай» тип яҙҙы. Ахырҙан тәфтиш иткәс күренде, Лотфиҙың диуаны Британский музейханала түгел, бәлки Германияла Гота шәһәрендәге китапханала булғаны мәғлүм булды. Гота нөсхәһе нисек «тамаммы, түгелме?» икәнлеге хаҡында хәбә-

---

[1] ғолум заһириә — сәнғәт ғилеме

[2] тәхсил — үҙләштереп

[3] тәкәмел итеп — камиллаштырып

[4] тәсауфҡа әнсаб итеү — ул заман шағирҙары өсөн бер шағир замины (бағыусыһы) булған. Бының өҫтөнә тәсауф әһеленә хакимдар ҡул тигеҙмәгәндәр, улар иркенерәк һүҙ һөйләй, иркенерәк мөғәмәлә итә алғандар. *(Ә. В.)*

[5] заһитлыҡта — донъя эштәренән ваз кисеп

[6] моғтәбәр — хөрмәтле

[7] бәйәзгә — аҡҡа

ребеҙ юҡ. Үткән яҙ көнө был нөсхәнең өҫтөнә тағы Петроградта Азия музейханаһында Лотфи диуанының икенсе бер нөсхәһе икенсе китаптар араһында ятҡанын күрҙем...

Ошо нөсхәләрҙең өҫтөнә ошо йылдың йәй көнөндә Бохарала Ҡаршы шәһәрендә «Диуани Лотфи»ҙың тағы бер нөсхәһен табып, Академия науктың Азия китапханаһы иҫәбенә алдым. Юнысйән хажиҙың нөсхәһе бары 24 вәрәҡ[1]...

Йәғни беҙҙең Россия хөдүдендә[2] хәҙергә мәғлүм булған өс нөсхәнең өсөһө лә тамам түгелдәр, әммә өс нөсхәнең бергә ҡушылыуынан тамам бер нөсхә хасил була[3].

Лотфиҙың фарсы шиғырҙарынан беҙ юғарыла килтерелгән бер-ике бәйетенән башҡаһын күрмәнек. Ләкин ул фарсы шиғыры менән шөһрәт ҡаҙана алмаған булырға тейеш, сөнки ул замандың фарсы шағирҙарҙы һәйләй торған «Тәзкирәи Дәүләтшаһ», «Төхфәи Сәми» һәм һуңғы «Аташғадаи Азәри», «Хәзәнәи ғамрә»ләрҙә һәм быларҙан башҡа беҙгә мәғлүм булған фарсы тәзкирәләрҙә Лотфи зекер ителмәй ҡалған. Уның бөтөн шөһрәте шул төрки шиғырҙары менән булған. Хаҡиҡәтән Лотфи үҙенең шиғырҙары менән ул заман шағирҙары араһында ҙур шөһрәт ҡаҙанырға лайыҡ. Иҫке шағирҙарҙың әҫәрҙәре мәал[4] йәһәтендә, өслүб[5] йәһәтендә Сакаки менән Лотфиҙың шиғырҙарына ҡарағанда бик түбән ине.

Иҫке шағирҙар (мәҫәлән, Әхмәт Йәсәүи, Сөләймән Баҡырғани, Хәйҙәрҙәр) яҙған нәмәләренең тышҡы яҡтан зиннәтле булыуына артык риғая[6] итмәйенсә бик садә[7] генә итеп дини нәмәләр, вәғәздәр, тәсауфҡа ғаид һүҙҙәр генә яҙалар ине. Сакаки менән Лотфи донъяның нәфис нәмәләренә артыҡ әһәмиәт биреп, шул нәфәсәткә[8] ҡаршы үҙҙәрендә ниндәй тойғолар һаҡлағандарын һөйләгәндәр һәм Иран шағирҙарында булған кеүек үк нескә, үткен ғибәрәт вә өслүбтәр табырға тырышҡандар һәм яҡшы уҡ алға киткәндәр. Хосусан Лотфи был хосуста тағы алға киткән. Уның ғибәрәләре Сакакиҙыҡынан тағы салисерәк[9] һәм мәғәнәләре йәһәтенән тағы бөйөгөрәк булған.

Бына әҙәбиәтебеҙ тарихының бер дәүерендә төрк интеллигенттары әдәбаһы әҫәр[10] — ерле әҙәбиәтенең «сихыр-

---

[1] вәрәҡ — бит
[2] хөдүдендә — сигендә, йәғни эсендә
[3] хасил була — барлыҡҡа килә
[4] мәал — мәғәнә, маҡсат
[5] өслүб — ысул
[6] риғая — иғтибар
[7] садә — ябай
[8] нәфәсәткә — матурлыҡҡа
[9] салисерәк — асығыраҡ, аңлайышлыраҡ
[10] әдәбаһы әҫәр — әҙиптәрҙең әҫәре

лы яҡтарын, рухын» ни ҡәҙәр яҡшы һаҡлай алған булһа, шул ҡәҙәр мөкәмәл һанайҙар ине. Ғәйне[1] шул заманда төрк яҙыусыларының икенсе бер ҡыҫымы Ҡытай Будда мәҙәниәтенең тәьҫиренә артыҡ бирелгән ине. Инде был заманда беҙ үҙ әҫәрҙәребеҙҙә рус һәм Европалағы рух ни ҡәҙәр ныҕыраҡ күренһә, шул ҡәҙәр яҡшы һанайҙар, ләкин быларҙың һәр береһендә милли хосусият зәғиф булған. Былар халҡыбыҙҙың милли мәҙәниәткә бай булмағанын, ләкин нисек кенә булһа ла һәр заманда шул дәүерҙең көслө мәҙәниәттән истифада итергә[2] әҙер торғандарын күрһәтә.

Лотфи һәм уның әшғәренең беҙгә биргән нәмәһе лә шул.

---

[1] ғ ә й н е — тап

[2] и с т и ф а д а  и т е р г ә — файҙаланырға

# МӘРЖӘНИ

Иптәштәребеҙ араһында «Шиһабетдин дамулла[1] үҙе шундай һис хәтер һаҡламай торған тура һүҙле кеше булған. Әммә уның шәкерттәре ни өсөн был дәрәжәлә ҡойроҡһоҙҙар, һәммәһенең эсендә Шиһап хәҙрәт мәсләген[2] йүнләп тәғҡип итеүсе[3] берәүҙе лә күрә алмайбыҙ» тип һөйләшергә вә быны бер ҡәҙәр миҫалдар менән изах ҡылыр[4] инек. Арабыҙҙан беребеҙ: «Шиһап хәҙрәт үҙе лә шундай булған, үҙе китаптарында Бохара дәрестәрен яманлай. Әммә үҙе һәмишә лә Бохара тәртибе менән уҡытып дауам иткән, хәҡиҡи ғәмәлдәр тип һанаған нәмәләренең береһен дә шәкерттәренә уҡытмаған. Инде үҙе шулай булһа, дамулла менән... мулла араһында айырымлыҡ булмаҫҡа тура килә» тине. Ысынлап та был ниндәй эш? Был бер хәҡиҡәт! Был рәүештә һүҙ һөйләй, теге рәүештә эш йөрөтә. Шиһап дамулла шәкерттәре шул уҡ Ҡашҡар шәкерттәре, araларында фариҡ[5] юҡ. Быға яуап урынында ошо нәмә хәтергә килә: «Шиһап муафиҡ күрмеш вә шулар тәрәзендә дәрес уҡытмыш». Был бер зан[6] ине. Һуңынан әстрханлы Ғабдрахман әфәнде әл-Ғөмәриҙән ишеткән бер хикәйәт быны тәәйед ҡылды[7]. Мәзкүр Ғабдрахман әфәнде: «Дамулланың бәғзе шәкерттәре бер ваҡытта үҙ күңеле риза булған рәүеш менән дәрес уҡырға һорамыштар, дамулла уларға төрлө нәмәләр, мәҫәлән: тарих, география, тәфсир, хәдис вә ғәйре фәндәрҙән һабаҡ бирә башламыш. Әммә Ҡазанда мәғруф[8] булған мантиҡ[9] вә ҡәләм[10] китаптарының

---

[1] дамулла — ҙур белемле кеше
[2] мәсләген — ҡараштарын
[3] тәғҡип итеүсе — дауам итеүсе
[4] изах ҡылыр — аңлатыр
[5] фариҡ — айырма
[6] зан — фараз
[7] тәәйед ҡылды — нығытты
[8] мәғруф — билдәле
[9] мантиҡ — логика
[10] ҡәләм — дини

фәкәт мәтендәрен[1] генә уҡытыр, шәрех вә хашиялар[2] арағa кермәмеш. Шәкерттәр был шәйҙән [3] ләззәт тапмай уҡыуҙы ташламыштар» тине. Зан итәбеҙ, был хаҡта «Аҫар»ҙа мөләхәзә барҙыр. Әгәр ҙә булмаһа, быны яҙырға тейешле. Шиһап хәҙрәтте русса белмәгән тиҙәр. Мин дә белмәгәндер тинем. Шиһабетдин хәҙрәт үҙенең тарихын төрки, фарсы әҫәрҙәрҙән генә йыйған, руссанан алмаған, тиҙәр (хатта үҙенең улы Борһан хәҙрәт тә шулай ти), ләкин мин руссанан (хатта әғлә[4] һүрәттә һайлай белеп) алған тимен. Хажи Морат әфәнде «Тәлфиҡ әл-әхбәр» исемле китабында күп урында Шиһап хәҙрәткә һөжүм итә. Хатта күп урында: был һүҙ тарихта юҡ, бәлки Мәржәни үҙе сығарған, тип үк әйтә. Беҙ үҙ күҙебеҙ менән күреп беләбеҙ, Мәржәни Шиһап хәҙрәттең шул Хажи Морат тарафынан рәд ителгән[5] һүҙҙәре рус китаптарында ваҡаиғ нәмәләрендә (летопистарында) бар. Уның тарихында әҫәре ғатиҡә йәмғиәттәре мәжмуғаларынан, хатта ваҡ тарихи брошюраларҙан, мәҫәлән: Фукс вә Френ кеүектәрҙең әҫәрҙәренән һүҙҙәр бар. Дамулланың русса китап уҡымағанлығы сабит[6] булһа, уның китабы уның русса уҡыған мырҙаларҙан ғына түгел, хәҡиҡи һүрәттә тарихҡа вә әҫәре ғатиҡәгә интисаб[7] иткән ғоләмәләрҙән туранан-тура файҙаланыуына шәһәҙәт бирер. Мәҫәлән: Тимер Ҡотлоғ менән Туҡтамыш хандарҙың ярлыҡтары юғары синыф ғоләмәләр араһында йөрөгән иң надир[8] әҫәрҙәрҙер. Туҡтамыш хан һәм Тимер Ҡотлоғ ярлыҡтары мөстәшәрҡ Березиндың «Ханские ярлыки» тигән әҫәрендә дәрж ителгәндәр һәм Тимер Ҡотлоғ нәҡи[9] яңғыҙ хәлендә немецса «Fund gruben des Orients» журналының 1818 йылғы IV жилдтә 61—359-сы биттәрҙә дәрж ителгән.

Мәржәниҙең русса ниндәй әҫәрҙәрҙән истифада иткәнлеге[10] хаҡында профессор Шпелевский үҙенең Ҡазанда 1877 йылда «Древние города и другие булгарско-татарские памятники в Казанской губернии» тип яҙған олуғ әҫәрендә 139-сы сәхифәлә лә зикер итә. Нисек тә Мәржәни рус-

---

[1] мәтендәрен — төп текстарын
[2] шәрех вә хашиялар — бер китаптың эстәлеген аңлатыусы, асыҡлаусы китаптар
[3] шәйҙән — нәмәнән
[4] әғлә — юғары
[5] рәд ителгән — кире ҡағылған
[6] сабит — асыҡ, шикһеҙ
[7] әҫәре ғатиҡәгә интисаб иткән ғоләмәләрҙән — боронғо әҫәрҙәргә мөрәжәғәт иткән ғалимдарҙан
[8] надир — һирәк осрай торған
[9] нәҡи — үҙе генә
[10] истифада иткәнлеге — файҙаланғаны

са әçәрçәрçән файçаланған. Быныӊ өçтөнә Шиһап хәçрәт Ҡазан ханлығыныӊ тарихын русса мәнбәғтәрçән[1] алмай, башҡа ерçән алып яçа ла алмаған, сөнки башҡа мәәхәзçәр[2] тәҡрибән[3] юҡтыр. «Мөстәфадел-әхбәр»çеӊ беренсе жилдендә, «Фаслы фил-дәүләт әл-мөтәжәддит би Ҡазан» тигән бабында Фукстыӊ «Краткая история города Казани» тигән китабынан[4] алған һүççәр (ҡайһы һүççәрçе Морат әфәнде рәжман билгәйебдер итә[5]) ап-асыҡ күренеп тора. Мулла Хөсәйен әфәнде Фәйезхани кеүек тарихҡа бик киӊ һүрәттә ашнә булған шәкерттәре Шиһап хәçрәтте рус әçәбиәтендәге тарихи мәғлүмәттән дәриғ[6] итмәгәндәрçер. Быныӊ өçтөнә мәрхүм Мәржәни Ҡазандыӊ дарелфәнүнендәге тарих йәмғиәтендә һәм Ҡазанда 1877 йыл Европаныӊ һәр тарафынан йыйылған тарих ғалимдарыныӊ çур йәмғиәтендә ағза булыуы мөнәсәбәте менән русса мәнбәғтәрçән һәр хәлдә файçаланмай ҡалмаған. Тарих вә этнографияныӊ олуғ ғалимдарыныӊ профессор Готвальд дамулла мәрхүм менән таныш вә яҡын дуç булған вә дамулла мәрхүмде Европанан килгән һәммә олуғ заттар менән (мәшһүр миссионер профессор Маловтыӊ нәҡылынса[7]) таныштыра торған булған. Нисек тә был эштәрçеӊ Мәржәни мәрхүмгә күп файçалары булған вә әçәренә лә яҡшы тәьçир итә алғандар.

Әхмәтзәки Вәлиди.
Ҡазан.

---

[1] мәнбәғтәрçән — сығанаҡтарçан

[2] мәәхәззәр — сығанаҡтар

[3] тәҡрибән — яҡынса әйткәндә

[4] Был китап башта «Казанские известия» журналыныӊ 1817 йылғы 6, 7, 68, 80-се номерçарында дәрж ителгән. Һуӊынан «Изв. Общ. Арх. этногр. и истории при Казанском универ.» журналыныӊ 1905 йылғы XXI жилдендә айырым рисалә хәлендә тәбәғ ителгән. *(Ә. В.)*

[5] рәжман билгәйебдер итә — ҡаты ғәйепләй

[6] дәриғ — мәхрүм

[7] нәҡылынса — әйтеүенсә

# РУС ТАРИХИ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ МӘРЖӘНИ

Мәржәниҙең Европа ғоләмәһе[1] иҡҡәтен йәлеп итерлек хеҙмәттәре тарих бабында[2] булғаны өсөн уның хаҡында рус әҙәбиәтендә була торған һүҙҙәр ҙә фәҡәт тарихи әҙәбиәттә генә булған.

1877 йыл Ҡазанда инғиҡад иткән[3] дүртенсе археология съезында Радлов Шиһап хәҙрәттең «Ғәләләтел заман фи тарих болғар вә Ҡазан» тигән бәләкәйерәк әҫәрен руссаға тәржемә итеп тәҡдим иткән урында, хәҙер булған ғоләмәгә, бына һеҙгә, беренсенән, бөгөнгә ҡәҙәр мәғлүм булмаған мәәхәззәрҙән истифада ителеп[4] яҙылған әҫәр, бына һеҙгә, икенсенән, бер мосолман ғалимы, өсөнсөнән, бер татарҙың үҙҙәренең тарихтары хаҡында фекере, тип әйткән[5]. Ваҡиған[6] Мәржәни үҙенең тарихи хеҙмәттәрендә Европаға мәғлүм булмаған мосолман сәйәхтәренең[7], мөәррихтәренең[8] әҫәрҙәренән истифада иткәндең өҫтөнә уларға мәғлүм булмаған бәғзе фиҡһе[9], ҡәләм[10] китаптарында, хатта китаптарҙың дибажаларында[11] Урта Азия тарихына ғаид нәмәләр бар икәнен күрһәткән.

Тағы быларҙың өҫтөнә Мәржәни Урта Азияла үҙ күҙе менән күргән, үҙе ишетеп, үҙе уҡып белгән күп нәмәләрҙе майҙанға сығарған, хосусан[12] Урта Азияға мосолманлыҡ-

---

[1] ғоләмәһе — ғалимдары
[2] бабында — темаһы буйынса
[3] инғиҡад иткән — үткәрелгән
[4] истифада ителеп — файҙаланып
[5] Известия о занятиях четвертого археологического съезда в Казани. Казань, 1877, № 9. С. 157. *(Ә. В.)*
[6] ваҡиған — ысынлап та
[7] сәйәхтәренең — сәйәхәтселәренең
[8] мөәррихтәренең — тарихсыларының
[9] фиҡһе — ислам хоҡуғы
[10] ҡәләм — дини
[11] дибажаларында — инештәрендә
[12] хосусан — бигерәк тә

тың әүәл таралған ваҡыттары һәм һуңғы Бохара ханлыҡтары хосусын да.

Ләкин Мәржәниҙең хеҙмәттәре рус ғалимдары өсөн ул заманда ни ҡәҙәр файҙалы булһа ла, артыҡ етди тәфтиш, тәнҡит вә тәҡдиргә[1] осрай алмағандар. Сөнки Мәржәниҙең тарихи хеҙмәтттәре һәр ни ҡәҙәр үткән быуаттың уртаһында уҡ эшләнгән булһалар ҙа, быларҙың иң мөһиме (Мөстәфадел-әхбәр) һуң заманда ғына баҫылған, тағы бер мөһиме (Вафиәтел-әсләф) әле баҫылмаған.

Беҙҙең аңлауыбыҙға күрә, Россияла Иҙел буйы инородецтары һәм Ҡазан вә болғарҙарҙың тарихтары менән иштиғәл итеүҙең[2] иң ҡыҙыу ваҡыты 19 быуаттың уртаһындағы икенсе рабиғында[3] булған. Академияның Алтын Урҙа тарихын тәфтиш итеү хаҡындағы иғланы 1826, 1836 йылдарҙа сыҡты[4]. Болғар һәм Ҡазан хаҡындағы тәфтиштәрҙең көсләләре Ҡазанда 1877 йыл инғиҡад иткән археология съезы тирәһендә булды. Был йәмғиәткә әҙерләнеү ерле ғалимдарға Ҡазан вә Болғар тарихына ғаид мәсьәләләр биргән[5]. Һәм Ҡазан тарих профессорҙары съезд халҡы алдында оятлы булып ҡалмаҫ өсөн күп ижтиһат итергә[6] мәжбүр булғандар. Шуның арҡаһында Ҡазандың үҙенә хас бер археология йәмғиәте асылған һәм профессорҙарҙан Шпелевский, Лихачев, Шестаков, Фирсовтарҙың мөһим хеҙмәттәре вөжүткә[7] килгән. Съездың төрлө мәмләкәттән йыйылған биш йөҙ ҡәҙәр ағзалары бер юлы Болғар хәрәбәләренә[8] барып йөрөгәндәр һәм был әтрафты етди тәфтиш итергә нигеҙ һалғандар.

Был съездан һуң иҫке Болғар шәһәренең хәрәбәләрен, был хаҡта мосолман сәйәхтәренең һүҙҙәрен тәфтиш итеү ерле археология йәмғиәтендә бик ҙур жетдиәт[9] менән дауам иткән, ләкин оҙаҡ тормай Төркөстан, Мәүрәннәһер тарафтары мәмләкәтебеҙгә ҡушылыуы сәбәпле шәреҡ тарихын тәфтиш менән шөғөлләнеүсе заттар һәм мөстәшәрҡтәрҙең диҡҡәттәрен ул яҡҡа йәлеп итеп алып киткән, ғоләмәләр хеҙмәттәрен Иҙел буйы, Алтын Урҙа яҡтарына

---

[1] тәфтиш, тәҡдиргә — тикшеренеүгә

[2] иштиғәл итеүҙең — шөғөлләнеүҙең

[3] рабиғында — сирегендә

[4] Тизенгаузен. Сборник материалов, относящихся к истории «Золотой Орды». СПб, 1884. С. 554—556. *(Ә. В.)*

[5] Заринский П. Очерки древней Қазани. Қазань, 1877. Шпелевский С. З. Древние города и другие болгарско-татарские памятники в Қазанской губернии. Қазань, 1879. Инеш һүҙҙе ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[6] ижтиһат итергә — тырышырға

[7] вөжүткә — барлыҡҡа

[8] хәрәбәләренә — емереклектәренә

[9] жетдиәт — етдилек

түгел, яңы фәтех ителгән[1] шәһрәтле Бохара, Сәмәрҡәнд яҡтарына бағышларға мәжбүр булғандар.

Иҙел буйы тарихын өйрәнеүҙең иң ҡыҙыу ваҡытына Мәржәниҙең ни бары «Ғәләләтел-заман фи тарих Болғар вә Ҡазан» тигән китабы менән «Ғорфател-хауаҡин ли ғорфател-хауаҡин» тигән китабы ғына сығып ҡалғандар. Быныҡ өҫтөнә был һуңғы китап ул замандың ғалимдарына нисектер бөтөнләй мәғлүм булмай ҡалды[2]. «Мөстәфадел-әхбәр» 1885 йыл Иҙел буйы тарихын тәфтиш эше иғтибарҙан төшкәс кенә майҙанға сыҡты. Әгәр был китап элегерәк майҙанға сығып ҡалған булһа икән, Мәржәни рус әҙәбиәтендә тағы ҙурыраҡ шөһрәт ҡаҙанған булыр ине. Һуңғы заманда Иҙел буйы тарихы бөтөнләй ташланғанын шунан ғына асыҡ белергә мөмкин ки, үткән йыл төрк тарихы менән бик иштиғәл итеүсе бер мөстәшәрҡҡә Мәржәниҙең «Мөстәфадел-әхбәр»е менән «Ғорфател-хауаҡин»ын биргән ваҡытымда Ҡазандағы татар китаптары араһында бындай етди тәфтиштәрҙең «ҡапланып ятҡанына» тәғажжет итте[3].

Мәржәни хаҡында башлап Вельяминов-Зернов үҙенең «Исследования о Касимовских царях и царевичах». СПб., 1863 (Труды восточ. отд. Арх. Общ., IX т.), беренсе жилдтең 548—554-се биттәрҙә зикер итә. Бында Мәржәниҙең Хөсәйен Фәйезхановҡа 1860 йыл мәсеттәге ҡәбер ташы хаҡында яҙған мәктүбе ғибәрә[4] һәм русса тәржемәһе менән дәрж ителгән. Тағы яҙған 554—557-се сәхифәләрҙә Мәржәниҙең шул уҡ Фәйезхановҡа 1861 йыл Һары Күкшәй өйәҙе Ашыт һыуы буйында Әжем ауылының мәҡбәрәһендә[5] табылған иҫке ҡәбер таштары хаҡында яҙған мәктүбе дәрж ителгән. Ильминский «Зап. Имп. Русск. Археол. Общ., 1850, т. III. С. 114—118»ҙә «Ҡазан ханлығына ғаид ҡәбер таштары» тип яҙған мәҡәләһендә Лайыш өйәҙендәге ҡәбер таштары хаҡында һөйләгән һәм шуларҙан башҡа Ҡазан ханлығына ғаид ҡәбер таштары юҡ кеүек итеп күрһәткән ине, Вельяминов-Зернов, Мәржәниҙең мәктүбен дәрж итеп, Ҡазан ханлығына ғаид ҡәбер таштарының Ильминский зикер иткәндәргә генә мөнхәсир[6] булға-

---

[1] фәтех ителгән — баҫып алынған

[2] Был китап хаҡында ошо 1914 йыл «Аң» журналының 4-се номерында «Ғорфател-хауаҡин һәм уның ҡараханлылар тарихын өйрәнеү өсөн әһәмиәте» тип бер мәҡәлә баҫтырған инем, аҙағы һаман шул көйө баҫылмай ҡалды. *(Ә. В.)*

[3] тәғажжет итте — ғәжәпләнде

[4] мәктүбе ғибәрә — хатының тексы

[5] мәҡбәрәһендә — зыяратында

[6] мөнхәсир — сикле

нын һөйләгән. Шиһап хәҙрәт үҙ мәсетендәге ҡәбер ташын «Мөстәфадел-әхбәр»ҙең 2-се жилд 4-се сәхифәһендә лә тәүсиф итеп[1] яҙған.

Мәржәниҙән һуң Мәржәни хаҡында һүҙҙәр унын «Ғәләләтел-заман» тигән китабы тураһында булған. Ул заман мәәхәҙҙәргә һыуһаған Ҡазан профессорҙары уны баҫылмаған көйө ҡулдан-ҡулға йөрөткәндәр. Яҙма көйөнсә ул әҫәр хаҡында башлап профессор Готвальд үҙенең 1872 йыл Академия наук мәжмуғаһында[2] «Разбор сочинения Хвольсона» тигән мәҡәләһендә зикер итә. Готвальд был әҫәрендә Хвольсондың ғәрәп мөхәррире Ибн Даста (дөрөҫө Ибн Руста) тарафынан яҙылған «Иғләҡен нәфисә» тигән китапҡа ғаид яҙған мәҡәләһен[3] тәнҡит итә. Ул унда Мәржәни хаҡында оҙон һүҙ әйтмәй, тик Болғар хандары хаҡында Мәржәниҙең ошо әҫәрендә яҙғандарын күсерә (8—9-сы бит).

Бынан һуң Мәржәниҙең был әҫәре хаҡында профессор Шпелевский үҙенең «Ҡазан губернаһында болғар һәм татар хандарынан ҡалған иҫке әҫәрҙәр» тип (Древние города и другие болгарско-татарские памятники в Казанск. губ.) 1877 йыл. Ҡазанда баҫтырған әҫәрендә 39—40-сы биттәрҙә зикер итә. Ул унда әйтә:

«Болғарҙа ханлыҡ иткән кешеләрҙең хисабын Ҡазанда мулла Шиһабетдин үҙенең «Ҡазан татарҙарының тарихы» тигән китабында ошо рәүешсә яҙа... (был урында китаптан күсерә) ...Шиһабетдиндың бөгөн руссаға тәржемә ителгән был әҫәренән был урынды мин Готвальд васитаһы[4] менән алдым, Шиһабетдиндың хәбәре башҡа тарихтарға бөтөнләй башҡа бер һүрәттәлер. Мәҫәлән, Әхмәтхан Талиптың улы булыусылығы һәм Мөәминдең Таләбәгә ҡәрҙәш булыуы академик Френ тарафынан шәрех ителгән[5] иҫке болғар аҡсаларынан алынған. Әммә татарҙар килгәндең һуңындағы болғар хандары хаҡында Френдың әҫәрендә бер нәмә лә зикер ителмәй. Мулла Шиһабетдин иһә, беҙгә мәғлүм булмаған мәәхәҙҙәрҙән алып булһа кәрәк, тотош һәм мөрәттип[6] һүрәттә болғар хандарының исемдәрен һанай».

Мәржәниҙең был әҫәре бынан һуң тағы шаиғ була[7].

---

[1] тәүсиф итеп — тасуирлап

[2] Известия Ибн Дасты о хазарах, болгарах, буртасах и других (журнал Министерства Народного Просвещения за 1869 — декабрьская книжка). *(Ә. В.)*

[3] Хвольсондан һуң Ибн Рустаның әҫәре Де Гойя тарафынан нәшер ителде. Bibliotheca Ciographurum Arabicorum. VIII. *(Ә. В.)*

[4] васитаһы — ярҙамы

[5] шәрех ителгән — аңлатылған

[6] мөрәттип — тәртипле

[7] шаиғ була — тарала, билдәлерәк була

Шул 1877 йылғы археология съезында (бында Мәржәни үҙе лә ағза булған) Радлов Мәржәниҙең был китабын руссаға тәржемә итеп 13 августа уҡыған. Был йәмғиәттең мәжмуғаларында Радловтың уҡыуы хаҡында ошо һүҙҙәр әйтелгән: «Радлов мулла Шиһабетдин Баһауетдиновтың «Болғар һәм Ҡазан хандарының тарихы» исемендәге әҫәренең русса тәржемәһен уҡып сыҡты һәм бының менән бергә Ҡазан тирәһендәге мосолман тарихын өйрәнеү өсөн яңы мәнбәғкә[1] халыҡтың диҡҡәтен йәлеп итте. Бигерәк тә Алтын Урҙаның төрлө хандары ваҡытында шул хандар шәрәфенә[2] тәэлиф ителгән иғтиҡад вә кәләм[3] китаптарының баштарындағы мөҡәддәмәләр[4] һәм хотбәләренең әһәмиәтен һөйләне».

Мәржәниҙең был әҫәре мәҙкүр съездың мәжмуғаһында[5] (Труды IV-го археологического съезда в Казани. Т. I. Казань, 1879 г.) төрки ғибәрәһе һәм тәржемәһе менән баҫылған (тәржемәһе 40—50 сәхифәләрҙә, әммә ғибәрәһе 50—58 сәхифәләрҙә).

Һуңғы «Мөстәфадел-әхбәр»гә ҡарағанда «Ғәләләтел-заман» бик зәғиф һәм мәғлүмәткә бик ярлы булһа ла, уға ул ваҡыттағы ғоләмәи әһәмиәт бирҙеләр. Шпелевский шул уҡ съезда «Болғар шәһәре» тип яҙған рефератында (шул уҡ мәжмуғаның I жилдендә дәрж ителгән) йәнә Мәржәниҙең әҫәренә ҡайтып әйтә: «Шиһабетдин мулланың әҫәрендә болғар әмирҙәре араһында Сәлимдән һуң Ибраһим хан зикер ителә. Ул Андрей Боголюбский ваҡытына тура килә, ваҡиғаи Ибраһим шәһәре летопистарҙа Андрей Боголюбскийҙың сәфәрҙәре ваҡытында зикер ителә. Бынан күренә ки, рустар мулла Шиһабетдин әйткән Ибраһим ханға ҡарап, Болғар шәһәрен Ибраһим (Брахим) шәһәре тип атағандар» (с. 26). Шпелевский был һүҙҙәрен летопистарҙа зикер ителгән Ибраһим (Брахим) шәһәренең Болғар шәһәре менән бер икәнен иҫбат иткән урынында һөйләгән.

Бынан һуң яңы заманда профессор Загоскин 1895 йылда яҙған «Путеводитель по Казани» тигән әҫәренең тарихи ҡыҫымында бер нисә урында Мәржәниҙең ошо бәләкәй әҫәрен истинад итә[6].

«Мөстәфадел-әхбәр» тарих менән иштиғәл итеүселәрҙең күҙенә бик оҙаҡ ваҡыт әләкмәй торҙо. Смирнов 1888

---

[1] мәнбәғкә — сығанаҡҡа
[2] шәрәфенә тәэлиф ителгән — хөрмәтенә яҙылған
[3] иғтиҡад вә кәләм — дини китаптар
[4] мөҡәддәмәләр — инеш һүҙҙәр
[5] Ҡара: Известия о занятиях съезда. С. 157 // Труды съезда. Т. II. Казань, 1891. С. 3. *(Ә. В.)*
[6] истинад итә — нигеҙ итә, һылтана

йыл Император Археология йәмғиәтенең шәреҡ шөғбәһе[1] мәжмуғаларында (запискаларында) өсөнсө жилдендә (100—111-се биттәрҙә) «Россияла мосолман матбуғаты» тип яҙған әҫәрендә «Мөстәфадел-әхбәр»ҙе ғосманлы ифадаһын[2] күп иштиғәл иткән әҫәрҙәр йөмләһенән һанап китә, башҡа бер һүҙ әйтмәй. Шундай уҡ ҡыҫҡа һүҙҙәр Соловьев менән Ҡатанов баҫтырған «Каталог книг, отпечатанных тип. университета. Казань, 1896» китабында 373—375-се биттәрҙә зикер ителеп уҙа.

Бынан һуң «Мөстәфадел-әхбәр» хаҡында етдиерәк итеп яҙылған нәмә Ҡатанов менән протоиерей Маловтың яҙғандары булыр. Ҡатанов Ҡазан дарелфәнүне янындағы тарих вә археология йәмғиәтенең 1895 йылғы 2 ғинуарындағы мәжлесендә «Мөстәфадел-әхбәр» хаҡында бер доклад уҡыған. Был доклад шул йәмғиәттең мәжмуғаһында баҫылған[3]. Ҡатанов унда әйтә:

«Был китап Ҡазан муллаһы Шиһабетдин Баһауетдинов Мәржәниҙең әҫәрелер. Ул инде хәҙер вафат. Был китаптың мәалдәре[4] үҙенең тарихи һәм этнографик йәһәттән бик мөһим булғаны өсөн, түгел рус теленә генә, хатта башҡа Европа телдәренә лә тәржемә ителергә лайыҡ. Мөәллиф[5] был әҫәрендә үҙенең Болғар һәм Ҡазан батшалыҡтары хаҡында йыйған мәғлүмәтен тамам бер фәнни һүрәттә тәртип иткән. Ул китабының башында Россияла сәйәхәт итеп Болғарҙа булған ғәрәп ғалимдарын, сәйәхтәрен һанай. Мәҫәлән, Ибн Фадлан, Ибн Батутта, Мәсғүди, Шәмсетдин Димәшҡи, Санаи кеүектәрҙе, йәғни X—XVI быуаттарҙың ғалимдарын һанай. Мөәллиф Болғар һәм Ҡазан мәмләкәттәренең халыҡтары хаҡында бик мофассал[6] һөйләй. Ул бында уларҙы тарихи йәһәттән генә түгел, бәлки телдәре, тәбиғәт вә әхләктәре, ғоруф вә ғәҙәттәре йәһәтенән дә тәфтиш итә һәм был Болғар, Ҡазан хөкүмәте халыҡтарының иң олуғ ҡыҫымы һис шөбһәһеҙ төрк нәҫеленән ине. Ҡазан хөкүмәтенең халыҡтары Болғарҙарҙың ғайн[7] үҙҙәрелер. Һәр ике халыҡ бер тел менән һөйләштеләр, диндәре, аңдары, хасиәттәре[8] бер ине, ти. Һәм быларҙы күп тарихи дәлилдәр менән иҫбат итә».

---

[1] шөғбәһе — бүлеге
[2] ифадаһын — аңлатыу юлын
[3] Известия Общества археологии и этнографии при Казанском университете за 1895 год. Т. XIV. С. 470. *(Ә.В.)*
[4] мәалдәре — мәғәнәләре, эстәлеге
[5] мөәллиф — автор
[6] мофассал — ентекле, тулы
[7] ғайн — тап, тулыһынса
[8] хасиәттәре — сифаттары

Ҡатанов докладын уҡығас, йәмғиәт ағзаһынан Пономарев: «Ағзаларҙан бер-берене Шиһабетдин мулланың был олуғ хеҙмәтенең икенсе жилденең ҡайҙа булғанын белергә булдыра алмаç микән. Әгәр шуны һорап табып булһа[1] ағзаларҙан бере был китаптың һәр ике жөзьәһен руссаға тәржемә итһә, бик яҡшы булыр ине»,— тигән. Ҡатанов быға ҡаршы тороп: «Китаптың бер етешмәгән ере шул, мөәллиф әçәрендә мәмләкәттәрҙең башындағы заттарҙың араларындағы мөнәсәбәтте һәм нәсәп йәһәттәрен бер ҙә күрһәтмәй китә һәм ошо сәбәптән китапҡа ҡарап Болғар һәм Ҡазан хандарының бер нәсәп йәдүәлдәрен[2] төҙөү мөмкин түгел (?)»,— тигән. (Ләкин был, әлбиттә, дөрөç түгел, сөнки мөәллиф хандарҙың нәçел-нәсәптәрен бик ныҡ тәфтиш итеп яҙған.) Ҡатановтың был һүҙенән һуң тәржемә мәсьәләһе шул көйө тороп ҡалған.

Ҡатанов шул уҡ 1895 йыл «Казанский телеграф» газетаһының 13 ғинуарҙа сыҡҡан 584-се номерында «Ҡазан һәм Болғар ханлыҡтарының тарихына ғаид сыҡҡан татарса әçәрҙәр» тип бер мәҡәлә баçтырҙы. Бында мөәллиф башта 1882 йыл сыҡҡан «Дастани нәсле Сынғыҙхан» китабын ҡарап сыҡҡан, унан һуң 1885 йылғы беренсе нәшере буйынса «Мөстәфадел-әхбәр»ҙең беренсе жилден тәфтиш иткән. Профессор бында Мәржәниҙе мәүзуғының[3] география һәм тарих вә этнографияһын бик әтрафлы[4] белеүсе тип таный, бынан һуң китабының ҡыçҡаса мәзмунын [5] һанап мөхакәмә итеп[6] сыға. Мәржәниҙең күп урында мәәхәҙҙәрен күрһәтмәй китеүен, икенсе китаптарҙан күсергән һүҙҙәренә үҙ һүҙҙәрен, төрлө ғәрәби, фарсы, төрки шиғырҙар тығыуын тәнҡит итә. Болғар хәрәбәләренән олуғ манараның йығылыуы хаҡында Мәржәни күрһәткән тарихты тәфтиш итә. Мәржәниҙең ғәрәп вә фарсы һүҙҙәрен күп истиғмал итеүен[7] ғәйепләй һәм уның был мөғамәләһе татар телен кәмһетеп ҡарау тип тәғбир итә[8], гүйә Мәржәни еңел халыҡ теленә «яһил ғауам теле — түбән тел» тип ҡараған. Бында Ҡатанов был китапты рус вә ғәйре Европа телдәренә тәржемә итеү кәрәклеген, китаптың мәал йәһәтенән бик бай булғанын һөйләй. Бында тағы ла шул

---

[1] Был ваҡыт «Мөстәфадел-әхбәр»ҙең 2-се жилде баçылғаны юҡ ине. *(Ә. В.)*

[2] йәдүәлдәрен — теҙмәләрен

[3] мәүзуғының — темаһының

[4] бик әтрафлы — күп яҡлы

[5] мәзмунын — эстәлеген, мәғәнәһен

[6] мөхакәмә итеп — тикшереп сыға

[7] истиғмал итеүен — ҡулланыуын

[8] тәғбир итә — аңлата

Болғар, Ҡазан ханлыҡтарының шәжәрәһе бик яҡшы төҙөлмәгәнен әйтә, тағы Мәржәниҙең дүртенсе археология съезы мәжмуғаһында уҡылған рисәләне («Ғәләләтел-заман») зикер итә һәм «Мөстәфадел-әхбәр»ҙе йәнә тәфсил менән ентекләргә вәғәҙә биреп мәҡәләһен тамам итә. Катанов йәнәптәре ошо вәғәҙәһен үтәй алғаны беҙгә мәғлүм түгел, ундай әҫәр майҙанға сыҡманы буғай.

Бынан һуң шул Ҡазан тарих йәмғиәте мәжмуғаһының 1904 йылғы икенсе бер доклады баҫылған. Быныһында ул Идрис Ғалим улы Богдановтың «Мөстәфадел-әхбәр»ҙән Ҡазан ханлығы тураһындағы бабты руссаға тәржемә итеп ебәргәнен һөйләгән һәм уны уҡыған. Ләкин был тәржемә йәмғиәттең мәжмуғаһында һаман баҫылманы.

Шул уҡ йәмғиәттең мәжмуғаларынан 1905 йыл сыҡҡан егерме беренсе жилдендә (92—112-се биттәрҙә) Н. Ашмариндың «Архиерей сайфияһында[1] мосолман ҡәбер ташы» тип яҙғанында (94-се б.) Мәржәниҙең «Мөстәфадел-әхбәр»-ҙең икенсе жилдендә (4-се б.) был ҡәбер ташы хаҡында яҙғандарын күсерә. Ашмарин йәнәптәре китаптың исемен «Книга, из которой можно почерпнуть сведения о Казани и Болгарах» тип яңылыш тәржемә итә.

Бынан һуң йәнә шул мәжмуғаның 1910 йылғы егерме алтынсы жилдендә (23—51-се биттәр) протоиерей Малов «Мөстәфадел-әхбәр»ҙең беренсе жилдендә «Фасли ми фима уирд мин зикер әл-рус» тигән бабын тәржемә итеп бик мөфассал һүрәттә тәнҡит вә мөхакәмә күҙенән үткәргән. Мәржәни хаҡында рус матбуғатында тәфсиллерәк бер әҫәр булһа, ул да ошо мәҡәләлер[2].

Был әҫәр протоиерей тарафынан фәнни мәҡсуд менән булыуҙан бигерәк мосолман татарҙарҙың мәшһүр бер ахунғалимдарына рәддиә[3] булмаҡ вә мосолмандарға «хаҡлыҡты аңлатмаҡ» мәҡсүде менән яҙылған. Господин Малов 30 сәхифәлек был әҫәрендә башта (23—40 б.) «Мөстәфадел-әхбәр»ҙең ғөмүменә һәм шул рус бабына ғаид мөләхәзәләрен[4] яҙа. Интихаб тариҡынса[5] күсергәндә ул, мәҫәлән, ошо һүҙҙәрҙе яҙа:

«Был «Мөстәфадел-әхбәр» китабы Ҡазан мосолмандары араһында ғалим зат һәм мәшһүр хаҡиҡи мөәррих тип

---

[1] сайфияһында — йортонда

[2] Маловтың был әҫәре «Мөстәфадел-әхбәр»ҙең сыҡҡан ҡыҙыуында 1886 йыл яҙылған һәм ул әҫәр шул йыл Шиһап хәҙрәт тере ваҡытында уҡ тарих йәмғиәте мәжлесендә уҡылған. Ҡарағыҙ: «Волжский вестник», 1886, 19 декабря. *(Ә. В.)*

[3] рәддиә — ҡаршы, кире ҡаҡҡан һүҙ

[4] мөләхәзәләрен — фекерҙәрен

[5] интихаб тариҡынса — һайлап алыу ысулы менән

йөрөтөлгән һәм бөгөн дә шулай йөрөтөлә торған бер кеше тарафынан яҙылғанлығы өсөн айырым иғтибарҙа тотолорға тейеш. Занымса[1], был мөәллиф — Шиһабетдин мулланың рус тарихына ниндәй рәүештә ҡарағанлығын һәм, ихтимал ки, рус тарихы хаҡында бөгөнгә ҡәҙәр рус мөәррихтәренең күҙенә төшмәгән бәғзе яңы мәәхәҙҙәрҙән алып яҙған һүҙҙәрен өйрәнеү файҙаһыҙ булмаҫ.

Шиһабетдин рус тарихын иң ибтидаһынан[2] башлап Александр III-гә ҡәҙәр килтерә. Был әҫәрҙең тәржемәһен тәкдим итмәҫтән элгәре бында мине ғәжәпләндергән бер нөктәне[3] әйтеп китергә мәжбүрмен: «Мулла тарихын яҙған был ҡәүемгә (рустарға) ҡаршы был әҫәрендә аҙ ғына булһа ла сочувствие күрһәтмәй, гүйә, уның рустар менән һис мөнәсәбәте юҡ. Ихтимал ки, мөәррих шулай булырға, йәғни шундай битараф булырға кәрәктер. Ләкин ваҡиғда[4] бик яҡшы эш булған был битарафлыҡ муллала бөтөнләй башҡа мәғәнә менәндер. Ул рустарға ҡаршы һис бер хәсән илтифат итмәй, әммә уның ғайн шул уҡ ваҡытта болғар, татар кеүек ислам динен ҡабул иткән ҡәүемдәргә ғаид яҙғанында бөтөнләй икенсе нота ишетелә. Быны ҡолағы бик яҡшы ишетмәй торған кешеләргә лә ишетергә мөмкин.

Мулла Шиһабетдинден был китабында рус тарихы бары ете бит ҡәҙәр урын шөғөлләндерә. Был ҡәҙәр ҙур ҡәүемдең (рустарҙың) тарихын ете сәхифәгә һыйҙырыр өсөн бик ҙур оҫталыҡ кәрәк. Ләкин мулла бында тарих яҙмай, тик рус тарихынан бәғзе бер факттарҙы ғына килтерә һәм шундай факттарҙы ки, уларҙы мосолмандар уҡыһалар, тик ғәжәпләнеп көлөргә генә мөмкин. Мәҫәлән, Владимир үҙенә ысын-ысындан оҡшаған дин исламды дуңғыҙ ите менән араҡыға ирек бирмәгәне өсөн генә ҡабул итмәгән. Һәм рус халыҡтары үҙҙәренең батшаларынан бик күп хеҙмәт күрһәткәндәрен (мәҫ., Петр Великий менән Екатеринаны) ҡағыҙ аҡсаларға тасуир итәләр, ти.

24—25-се биттәрҙә Мәржәниҙең һүҙҙәре ниндәй тәртиптә (планда) яҙылғанын бәйән итеп бөткәс (26-сы б.): «Мулла Шиһабетдин алдына алған мәсьәләһен нисек тамам итә?» — тип сөәл ҡуя ла: «Мулла үҙенең һүҙҙәрен һәр ваҡыт һис низағһыҙ ҡәтғи һүҙҙәр менән әйтеп бирә, бер ҙә тәнҡит итмәй һәм ғөмүмән уның был китабында тәнҡит вә мөхакәмә бер ҙә юҡ»,— ти.

Бынан һуң Малов был бабындағы бәғзе хаталарҙы һәм

---

[1] з а н ы м с а — фараз итеүемсә
[2] и б т и д а һ ы н а н — башынан
[3] н ө к т ә н е — серле нәмәне
[4] в а ҡ и ғ д а — ысынбарлыҡта

үҙе ҡашында хәтәр тип уйланған йәки иғтиҡад ителгән[1] һүҙҙәрҙе күрһәтә. Ләкин араға бәғзе ваҡыт профессор Катанов төшөп тасхих иткеләй[2].

Мәржәни: «Иҫке заманда рустар ҡыҙҙарын үлтерәләр ине»,— тигән икән, Малов шуны жәрех[3] итеп: «Был һүҙ мулланың, рустарҙы ғәрәп мөшриҡтәренә оҡшатып, рустарҙа ла, Ҡөрьән әйткәнсә, ғәрәп мөшриҡтәрендәге кеүек, ҡыҙҙарҙы үлтереү булғандыр, тип уйлауынан килгән»,— ти. Ҡатанов, быны төҙәтеп: «Мулла Шиһабетдин был һүҙҙәрҙе ғәрәп мөхәррирҙәренең әҫәрҙәренә ҡарап әйткән, мәҫәлән, Әхмәт Ибн Фадлан: «Рустар ҡыҙҙарын үлтерәләр»,— тип һөйләгән. Был хаҡта Гергас менән Розендың «Ғәрәпсә хрестоматия»һынан 1875 йыл баҫылған беренсе жөзьә, 316—323-сө биттәрҙе һәм Гаркавиҙың «Сказания мусульманских писателей. СПб., 1870» тигән китабынан 93—103-сө биттәрҙе ҡарағыҙ»,— тип әйтә.

Мәржәниҙең: «Рустар өс ҡәбиләгә бүленәләр ине: славян, бармания, бабарма»,— тигән һүҙе хаҡында: «Был бабарма һәм бармандар фин нәҫеленән булмаҫмы икән. Бәғзе ғалимдар абарманан (бабарманан) мордваларҙы аңлайҙар»,— ти. Был ерҙә Ҡатанов, шәрех итеп: «Бабарманан морат[4] биармалыр. Былар хаҡында тәфсил менән үҙ археология йәмғиәтебеҙҙең ағзаһы Кузнецов «Этнографические обозрения» журналының 1905 йыл сыҡҡан 25 һәм 26-сы жилдтәрендә яҙҙы»,— ти.

Бынан һуң Малов Мәржәниҙең Россия мәмләкәтенең башлап төҙөлөүе хаҡында мосолман мөәррихтәренең һүҙҙәренә ҡарап йыйған, ләкин бер-бере менән ойошмай торған ике тарихы (миләдинән 500 менән 900 һәм ваҡиғтағы 862 йыл) хаҡында һөйләй.

67-се биттә бабтың төрлө урындарындағы шөбһәле урындарға рустарҙың үҙ араларында шаиғ булған[5] һүҙҙәрҙе дәлил итеп бәхәстәр яһай.

28-се биттә София Палеологтың Грециянан Россияға ҡасып йәки ҡасмай килеүе мәсьәләһе.

Шиһап хәҙрәт Владимир Святой менән Владимир Мономахты бутап йөрөткән икән.

Рустар христиан динен нисек ҡабул иткәндәр, Владимир христианлыҡты нисек ихтыяр иткән? Шул хаҡта Мәржәниҙең Владимир исламды муафиҡ[6] күреүе хәлдә дуңғыҙ

---

[1] иғтиҡад ителгән — ышанған
[2] тасхих иткеләй — төҙәтә
[3] жәрех — рәнйетеү
[4] морат — аңлатылырға теләнгән нәмә
[5] шаиғ булған — таралған
[6] муафиҡ — яраҡлы

ите менән арағы өсөн христиан динен ҡабул итте тигәнен жәрех итә. Владимирҙың христианлыҡтың хаҡ дин икәнлеген белеп ҡабул иткәнлеген «мосолмандарға төшөндөрөү һәм Мәржәниҙең был хаҡта «положительное непонимание дела»һын майҙанға сығарыу өсөн тотоштан биш сәхифә (28—33-сө биттәр) яҙа һәм православный дининең хәҡиҡәтенә төшөнмәгәнлектәре өсөн мосолмандарҙы ғәйепләй.

Бынан һуң Мәржәниҙең рус батшаларын теҙеп зикер иткән шәжәрәһен ҡарап тәфтишләп сыға (34—38-се биттәр) һәм Василий Дмитриевич, Юрий, Өсөнсө һәм Дүртенсе Ивандарҙың болғар һәм ҡазандарға мөнәсәбәте мәсьәләләрендә Мәржәниҙең яҙғандарын тәфтиш итә. Мәржәниҙең Петр менән Екатерина хаҡында «һүрәттәре ҡағыҙ аҡсаларҙа бар» тигән һүҙ менән Икенсе Александр менән Өсөнсө Александр хаҡында «әһле исламға йәмиғ әүәлдә ямин[1] иттерҙек» тигән кеүек һүҙҙәр менән генә ҡәнәғәтләнеп бик ғәйепләй. Гүйә, Мәржәни үҙенең ошо биғәт иттереүендә[2] берәр ҙур эш тапҡан һәм, гүйә, уны үҙенең китабында күрһәтәһе килгән була.

Мәржәниҙең һүҙҙәрен тәфтиш итеп бөткәндең һуңында Малов: «Был бабтағы башҡа хаталарын шул көйө ҡалдырайыҡ, улар бик күп, был баб бөтөнөһө хата менән тулы»,— тип әйтә.

Бабтың тәржемәһенән элгәре йәнә ғөмүмән «Мөстәфад-ел-әхбәр» хаҡында һәм үҙенең был мәҡәләне ни өсөн яҙыуы тураһында яҙа (39, 40-сы биттәр). Шиһабетдин хәҙрәттең теле хаҡында: «Мәржәниҙең теле бик ауыр. Ул ғәрәп, фарсы, төрки һүҙҙәрҙең бик ныҡ ҡушылыуынан яһалған бер тел менән яҙғансы китабын фәҡәт ғәрәпсә йәки фәҡәт татарса ғына яҙһа, тағы һәйбәт булыр ине»,— ти. Китаптың бер һәйбәт урынын зикер итмәк булып, китаптың эсендәге тыныш нөктәләрен зикер итә, ул көнгә ҡәҙәр һис бер нөктә ҡуйылмаған мосолман әҫәрҙәрен уҡыу бик ҡыйын икән, Шиһап хәҙрәт тыныш ҡуйып үҙенең китабын уҡыуҙы бик еңеләйткән икән, бынан һуң Мәржәниҙең ҡуйған рәҡымдары[3] хаҡында бәғзе һүҙҙәр һөйләй.

Мәҡәләне ни өсөн яҙғанын һөйләгән урында (40-сы б.) әйтә: «Мин мулланың фәнни хеҙмәттәрен бик юғары тәҡдир итәмен. Ул үҙенең дини ғилемдәрҙә күрһәткән күп хеҙмәттәре менән мәшһүр. Һәм мулла был дини мәҙрәсәләрҙә хаҡиҡәтән күп етешлек (деятельность) күрһәтте. Әммә ул рус тарихын яҙған урында бөтөнләй башҡа. Ул бында бик

---

[1] ямин — ант
[2] биғәт иттереүендә — тоғролоҡҡа ант иттереүендә
[3] рәҡымдары — һандары

иғтибарһыҙ тауранә[1] һәм үҙенә хоҙай тәғәләнең унда ризыҡланырға бойорған ошо ватанға (Россияға) ҡаршы ул һис бер мөхәббәт әҫәре күрһәтмәй»,— ти. Ошо күсергән ҡәҙәребеҙҙән үк яҡшы аңлашылһа кәрәк ки, протоиерейҙың бер мосолман дине ғалимына тарих тирәһендәге «фәнни» бәхәстәре мотлаҡ дин тирәһендә генә йөрөй. Протоиерей мосолман муллаһының был яҙғандарында православиеға һәм православный милләткә ихтирамһыҙлыҡ күрергә теләй, мосолмандың олуғ бер дин ғалимын еңеп, «мосолмандарға хәҡиҡәтте төшөндөрөргә» ижтиһат итә.

Беҙҙең фекеребеҙсә, протоиерей йәнәптәре бында бер ҡәҙәр муаффиҡиатһыҙлыҡҡа осраған, Мәржәниҙең «фима уирд мин зикер әл-рус» тигәненән үк белергә кәрәк ки, ул мосолман ғалимдарының әҫәрҙәрендә рустарға ғаид осраған һүҙҙәрҙе килтерә. Был бабтан юғары «фима уирд мин зикер әл-хәжәр», «фима уирд мин зикер буртас», «фима уирд мин зикер әл-ҡыпсаҡ», «фима уирд мин зикер әл-башҡорт» тип шундай уҡ ислам тарихсыларынан күсереп килгәндәренән үк аңларға кәрәк ине. «Фима уирд мин зикер әл-рус» тигән һүҙҙең мәғәнәһе «рустар тураһында иҫке тарих китаптарында килгән һүҙҙәр» булалыр. Шул мәғлүмәттең ахырына үҙ тарафынан ҡушып һуңғы рус императорҙарының исемдәрен һанап үҙенең ишетеп белгән бәғзе һүҙҙәрен яҙған.

Малов әфәнде Мәржәниҙе, «китабында рустарға бары ете сәхифә генә биргәнһең, әммә мосолман болғар һәм мосолман татарҙарҙы маҡтап күп һөйләйһең, алла һиңә ошо Россияла ризыҡланып торорға ҡушҡан, һин уның ҡәҙерен белмәйһең» тип шелтә әйтә. Протоиерей йәнәптәре күрмәй микән ни, Мәржәни бында Россия тарихын түгел, Болғар, Ҡазан тарихын яҙған. Ул был китапта рустар хаҡында бер кәлимә лә һөйләмәҫкә хаҡы бар: сөнки Болғар вә Ҡазан тарихы тарих ғилеменең шундай уҡ бер мөстәҡил ботағы ки, рус тарихы кеүек.

Мәржәни рустар хаҡындағы мәғлүмәтен мосолман тарихтарынан алған, Россияның һуңғы тарихын ул яҡшы белмәй. Ошоноң өсөн Петр менән Екатерина тураһында ҡағыҙ аҡсаларға төшкән һүрәттәренән, Александр II һәм III тураларында ямин иттергәндәренән артыҡ нәмә һөйләй алмаған һәм башҡа һүҙҙәрендә лә тасхих итеңә торған нөктәләр булған. Ләкин Малов йәнәптәренең хата тип күрһәткәндәренең һәммәһе лә дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, шәреҡ һәм ғәрәп мәәхәҙҙәрен күргән әҙәмдәргә мәғлүм ки, Владимир Святой ваҡыттарында рус кенәздәре өсөн ислам

[1] тауранә — күренә

дине тәҡрибән[1] шундай уҡ урын тотҡан ки, христиан дине кеүек. Ун өсөнсө быуат миләдиҙә торған мосолман мөәррихе Гофи үҙенең «Жәмиғел-хикәйәт вәл-әмиғел риүәйәт» исемендәге әҫәрендә[2] кенәз Владимир Святойҙың дин исламды бер мәртәбә ҡабул иткәндең һуңында христианлыҡҡа күскәнен нәҡыл итә[3], сөнки хәҙерге йәнүби Россиялағы славян һәм хәзәрҙәрҙә мосолман һәм христиан мәҙәниәттәре бер дәрәжәлә хөкөм һөргәндәр[4].

Малов йәнәптәренең Мәржәни хаҡындағы фекерен тулы вә мөкәммәл[5] итеп бирмәк өсөн был зат менән бер осрашҡан ваҡытыбыҙҙа Мәржәни хаҡында һөйләгән һүҙен килтерәмен. Малов йәнәптәре әйтте: «Мәржәниҙең «Мөстәфадел әхбәр» тигән китабының әүәлге жилден мин руссаға тамам тәржемә иткән инем, баҫтырмаҡ өсөн Ҡазан тарих йәмғиәтенә ғарыз иттем, ләкин йәмғиәттең мәжмуғаһы ҙур нәмәләрҙе һыйҙыра алмағанын бәһанә[6] күрһәтеп, баҫтырманылар һәм шул көйө ҡалды. Мулла Шиһабетдинды мин күреп беләм, уның менән күрешкеләгәнем, мәҙрәсәһенә барып йөрөгәнем бар. Ул бик аҡыллы кеше ине. Ләкин мосолмандар уны яратмай һөйләй инеләр. Сөнки ул либераль ине. Элгәрге авторитеттарға ул ҡәҙәр иғтибар итмәне һәм күп мосолман авторитеттары тураһында тар бизмәнле муллалар күтәрә алмаҫлыҡ һүҙҙәр һөйләне. Шуның өсөн уның дошмандары күп булды. Ләкин ул нисек кенә булһа ла һаман бохарец ине, руслыҡҡа ҡаршы ине. Ул Ҡазанда заманында ғилеме вә мәртәбәһе[7] менән мөһим урынды шөғөлләндерҙе. Ул археология йәмғиәтенең йыйылыштарын үҙенең аҡ сәлләһе менән йыш-йыш зыярат итә[8] ине. Бындағы профессор Готвальд һәм Радлов кеүек ориенталистар уның менән бик таныш инеләр. Ҡазанға килгән сит мәмләкәт ғалимдарын Готвальд һәр ваҡыт Мәржәни янына алып төшә ине. Бер-бер ориенталист йәки турист татарҙар араһынан белекле кеше һораһа, Готвальд һәр ваҡыт Мәржәниҙе тәҡдим итте. Ул русса белмәй ине. Готвальдҡа һәр ваҡыт уға тәржеманлыҡ итергә тура килгәндер. Төрлө ғалимдар менән ҡатнашыу арҡаһында ул ғилемдең Европаса булған мәғәнәһенән дә бер аҙ хәбәрҙар булғандыр».

---

[1] тәҡрибән — яҡынса

[2] Был китап 1909 йылда профессор Браун тарафынан нәшер ителгән. *(Ә. В.)*

[3] нәҡыл итә — һөйләй

[4] Ҡара: Бартольд. История изучения Востока в Европе и России. СПб. 1911. *(Ә. В.)*

[5] мөкәммәл — камиллашҡан

[6] бәһанә — сәбәп итеп

[7] мәртәбәһе — дәрәжәһе

[8] зыярат итә — хәлен белә

Был һүҙҙәрҙән күренә ки, Малов йәнәптәре Мәржәниҙе яҡшы уҡ яҡындан белгән һәм уның ғилми дәрәжәһен тәҡдир ҙә иткән [1]. Ул «Мөстәфадел-әхбәр»ҙе руссаға тәржемә итеп, шунан рустар хаҡындағы бабын бәғзе мөләхәзәләр менән нәшер иткән икән, быны ул яҡшы белеп аңлап эшләгән.

Мәржәни хаҡында рус тарихи әҙәбиәтендә әле яңы ғына тағы профессор Ҡатанов бәғзе нәмәләр әйтеп үтте. Быныһы был профессорҙың Ҡазан археология йәмғиәтендә 1911 йыл 15 ноябрҙә «Татар телендә тарихҡа ғаид сыҡҡан китаптарға ғөмүми бер назар» тип уҡыған докладындағы һүҙҙәрелер. Бында Ҡатанов татар телендәге бөтә тарих китаптарын (был йөмләнән, Ҡазан муллаһы Ғарифулла Салиховтың хатта әле майҙанға сығырға өлгөрмәгән китабын да) күҙҙән үткәрә, «Мөстәфадел-әхбәр» хаҡында бәғзе бер хронология хаталары булғанын, тағы был китапты татарҙарҙың эскелек тарафдарҙары яратмағанын һөйләй[2].

Бына Мәржәни хаҡында рус тарихи әҙәбиәтендә һөйләнгән һүҙ һәм зикер ителгәндәрҙең бөтөнөһө шунан ғибәрәт.

Ә х м ә т з ә к и   В ә л и д и.
Яҙылды 1912 йыл, февраль,
тәсхих ителде[3] 1914 йыл, ноябрь.

---

[1] т ә ҡ д и р   и т к ә н — баһалаған
[2] Известия общ. археол., истории. XXVIII. С. 501—502. *(Ә. В.)*
[3] т ә с х и х   и т е л д е — төҙәтелде

## АКАДЕМИК КОРШ ХӘТИРӘҺЕ

«Агентство телеграммаһы», мәшһүр ғилме лисан[1] ғалимы академик Корш рак ауырыуынан вафат итте, тип бер хәбәр килтерҙе. Әлбиттә, Лазаревский институтта фарсы әҙәбиәте дәрестәре биреүсе Федор Николаевич Корш инде. Әле күптән түгел генә бер шәкерте уның ауырыуы вә шул йөмләнән күҙҙәренең бик зәғифләнеүе сәбәпле был заттың быйыл дәрес бирә алмағанын, бәлки уның эсәк ауырыуы менән инде хәстәханаға[2] кереп ятҡанын бик ҡыҙғанып һөйләгән ине.

Был һуғыш ваҡытында бер ҙә Корштай фәлән тимәйенсә бер нисә ҙур кешеләр үлеп китте, иҫке замандың атаҡлы эшселәре яңы заман килтерерҙәй булып торған был һуғыштың ахырын көтмәй үләләр. Сөнки улар бөтөн кешеләр һәм уларҙың шул үҙ замандарындағы бөтөнлөктө һаҡлап китәһеләре килә. Корш донъяның иң танылған ғалимдарынан, фәндең иң һайландыҡ фиҙәкәрҙәренән ине. Донъяла ул белмәгән тел, ул өйрәнмәгән әҙәбиәт, ул өйрәнмәгән инсан йәмғиәттәре булһа, ул да уның ҡулы аҫтында булмаған вәхши милләттәр, вәхши ҡәүемдәр генә булғандыр. Мәҙәни халыҡтарҙы ул ҡалдырһа, фәҡәт ҡытайсаны ҡалдырҙы, буғай. Әммә башҡалары ҡалманы.

Ул етмеш нисә йәшендә ине, был йылдарҙың һәр береһенә берәр тел, берәр ҡәүем бирһәң аҙ булыр. Ул башта Мәскәү дарелфәнүнендә латин һәм грек теле вә әҙәбиәттәре профессоры булған. Бер аҙҙан һуң ул бөтөн славян телдәрен ентекләп өйрәнгән ки, һәммә славян телдәре вә милләттәре исеменә асылған йәки үҙе асҡан күп йәмғиәттәргә рәйес булған. Хатта ошо һуңғы йылдарҙа ла Мәскәүҙәге «Славян мәҙәниәте» йәмғиәтендә лә. Шәреҡ телдәренән ғәрәпсә вә фарсысаны студент ваҡыттарында уҡ өйрәнгән. Һуңынан фин телдәрен, Ҡавказдағы әрмән, грузин телдәрен, тағы Һиндостандың санскрит телен өйрәнгән.

---

[1] ғилме лисан — тел ғилеме
[2] хәстәханаға — больницаға

Академия наукта ағза булыуы рус теле һәм әҙәбиәтенең мөтәхассисы[1] булыу йәһәтенән ине. Ул бер ҡәҙәр тел һәм ҡәүем, милләттәрҙе өйрәнеп кенә ҡуймаған. Шул ҡәүемдең үҙҙәре менән яҡын мөнәсәбәттә булған һәм һәр ҡәүем тарафынан да телдәребеҙҙең, милләтебеҙҙең һөйөклө ғалимы тип танылған. Шуға күрә был ғалимдың вафаты өсөн Россиялағы һәм уның тышындағы әллә ни ҡәҙәр халыҡтар ҡайғыра. Ләкин мин мәрхүмдең рухы бик рәхәтләнеп рөхсәт итәренә ышанам да уның вафаты төрк ғаләме өсөн иң ҙур бер юғалтыу тип һанайым һәм, был һуғыш дәүерендә беҙҙең милләт үҙенең иң ҙур ике кешеһен юғалтты, тим. Береһе — Исмәғил Гаспринский, икенсеһе — Федор Николаевич Корш.

Сөнки ваҡиғда эш шулай. Дөрөҫ, ул әллә ни ҡәҙәр халыҡтың һөйөклө ғалимы. Ләкин иң алдан беҙҙең һөйөклөбөҙ. Сөнки ул әүәл ғүмерендә шәреҡ телдәрен уңайынан ғына өйрәнгән булһа, һуңғы йылдарында бының мөтәхассисы һәм бының мөғәллиме булып әүерелде. Дөрөҫ, ул башта Мәскәү һәм Одесса дарелфәнүндәрендә иҫке һәм яңы Европа тел вә әҙәбиәттәрен өйрәткән, әммә һуңғы һәм аҙаҡҡы ғүмерендә 1892 йылдан башлап Лазаревский институтта фарсы әҙәбиәте өйрәтеү һәм төрк теленең төрлө яҡтарын тикшереү менән генә шөғөлләнде һәм Мәскәү тарих йәмғиәтенең шәреҡ шөғбәһендә рәйеслек итте. Телебеҙ һәм әҙәбиәттәребеҙҙе өйрәнеп кенә ҡуйманы. Ул беҙҙе һөйҙө, беҙҙең халҡыбыҙҙа йөҙ яҡтылығы булырлыҡ һүҙҙәр әйтте. 1912 йыл көҙ көнө Балҡан хәдисәләре ваҡытында «Русское слово» һәм уның мөхәррире Философов һәм уның яҡлылар төрөктәр уңайынан беҙҙе, Россия мосолмандарын да эләктерә башлағанда, мосолман зыялылары «Русские ведомости» арҡылы был эштең сиктән ашып барыуына ҡаршы протест иттеләр. Ваҡиғда рус әфкәр ғөмүмиәһе[2] шул мөнәсәбәт менән беҙгә әллә ниндәйерәк ҡарай башланылар. Шул ваҡыт Федор Николаевич «Русская молва» гәзитендә мосолман ғалимы, хосусан беҙҙең халыҡ хаҡында бик матур бер мәҡәлә яҙып, мосолмандарҙың истиҡбалына нисек ҡарарға кәрәк икәнлеген күрһәтте һәм быңың менән үҙенең беҙҙе ысындан һөйөп өйрәнгәнен белдерҙе. Был һуңғы һүҙемде шуның өсөн әйтәмен, сөнки рус мөстәшәрҡтәре араһында бәғзе берәүҙәре беҙҙең телдәр арҡаһында ғына тамаҡ туйҙырып торһалар ҙа, беҙҙе уңайы килгән һайын тешләргә, өҫтөбөҙгә төкөрөргә әҙер торалар, үҙ кафедраларына үҙҙәре ерәнеп ҡарайҙар. Ләкин башҡа

---

[1] мөтәхассис — белгес
[2] әфкәр ғөмүмиәһе — йәмғәтселеге

төрлө һөнәрҙәре булмаған өсөн генә шундай һөймәй торған урындарҙы тотоп торалар. Был йәмһеҙ хәлдәрҙе күҙ менән күреп торғанда беҙ белергә кәрәк ки, Корш кеүек донъялағы телдәр һәм ҡәүемдәрҙе бөтөн нигеҙе, рухы менән белгән кешенең үҙ ихтисасынан[1] сығып ахыр ғүмерен беҙгә биреү һәм беҙгә йылы күҙ менән ҡарауы үҙебеҙ өсөн дә, телебеҙ өсөн дә ҙур шәрәф һәм бер ни тиклем битһеҙ халыҡтың йөҙөн ҡыҙартырлыҡ эштер. Федор Николаевичтың шәреҡ әҙәбиәтенән иң яҡын итеп белгәне һәм бик яҡын итеп һөйгәне фарсыса ине. Ул уның хәрефен төҙөп баҫтырҙы («Труды по востоковедению» мәжмуғаларының 6 жөзьәһе). Төрки тел һәм әҙәбиәтенән иҫке сығатай дәүере менән, хәҙергә төрлө ләһжәләрҙән ҡумыҡ ләһжәһе менән шөғөлләнде. Тел һәм әҙәбиәтебеҙҙең был ике юлда Ф. Н. биназир[2] ине. Сығатай әҙәбиәте хаҡындағы белемен ул 1867 йыл сығарған «Хорошо кәлимәһе хаҡында мөләхәзә» тигән әҫәрендә күрһәткән ине. Һуңынан 1889 йыл Мәскәү археология йәмғиәтенең шәреҡ шөғбәһе мәжмуғаһында (Древности восточные. Т. 1) хәҙерге Етеһыу виләйәтендә табылмаҡта булған төрки телдә яҙылып ҡалған ҡәбер таштарын тәфтиш итеп «О турецком языке Семиреченских надгробных надписей» тип бер әҫәр баҫтырҙы.

Бында ул сығатайса әҫәрҙәрҙең уйғыр әҙәбиәтенә мөнәсәбәтен, уйғырса тип йөрөтөлгән әҫәрҙәрҙең күбеһе сығатайсаға ҡайтҡанлығын, сығатай әҙәбиәтенең төбөн яҙып үтте. Шул уҡ мәҡәләһендә башҡорт теле хаҡында әйтеп киткән һүҙе менән төрк телен бөтөн рухы менән белә икәнлеген күрһәтте.

1897 йылдарҙа Академия наук «мәжмуғаларҙан элгәре ваҡыттағы рус телендә төрки һүҙҙәр»ҙе эҙләү мәсьәләһен ҡуҙғатты. Шул ваҡыт был мәсьәләне мөтәүәффә Мелиоранский менән ошо Корш башҡарҙылар. Ул, «Слово о полку Игореве» тигән иҫке рус теле әҫәрендәге төрки һүҙҙәрҙе тәфтиш итеп, Академия науктың «Известия отд. русского языка и словесности. Т. VIII» мәжмуғаһында бер әҫәр баҫтырҙы һәм шул уҡ мәжмуғаһында Мелиоранскийҙың был маузуғтағы әҫәренә тәнҡит яҙҙы. Тағы «Древности восточные» мәжмуғаһының өсөнсө жилдендә «Һәр төрлө телдәрҙә хәҙерге заман ғәләмәте» тип бер әҫәр баҫтырҙы. Һәм шул ваҡыттарҙа уҡ «Этнографическое обозрение» мәжмуғаһында төрк ҡәбиләләрен телдәренә ҡарап синыфҡа айырыу («Классификация турецких племен по языкам») тип бер әҫәр баҫтырып, был хаҡта Радловтың классификацияһына ҡаршы икенсе бер яңы назар сығарҙы.

[1] ихтисасынан — яҡшы белгес булыуынан
[2] биназир — тиңдәшһеҙ

1909 йыл «Живая старина»ның Радлов исеменә сығарылған жилдендә төрки «балдаҡ» кәлимәһе хаҡында бер тәфтиш яҙҙы. Федор Николаевичтың иң һуңғы әҫәре булмаҡ үҙрә, әл-шәрҡиәт мәжмуғаһындағы мажарсанан тәржемәһе, тағы иң яңы ғына ошо көндәрҙә генә уның фарсы шағирҙарынан Хафиздың «Гөлөстан»ы, Йәләлетдин Румиҙың «Мәснәүи»һе вә ғәйреләрҙән тәржемә итеп баҫтырған бер әҫәре килде. Был уның иң һуңғы әҫәре булмаҡ кәрәк.

Федор Николаевич донъя йөҙөндәге мәғруф телдәрҙең ғарузын (метрика — стихосложение) бөлеүҙә беренсе урынды алған ғалим һанала ине. Ул Академия науктың рус тел әҙәбиәте мәжмуғаларында «Рус йырҙарының ғарузы» хаҡында ул көнгә ҡәҙәр күрелмәгән тәфтиштәр яҙҙы. Төрки теленең, ғөмүмән туран телдәрененең ғарузы, 1898 йылда Мелиоранскийҙың әйткәне (Записки Вост. Отд. Т. XI. Рыбаковтың «Урал мосолмандарының музыкалары» тигән әҫәренә тәнҡитен ҡарағыҙ), тағы элгәре (1880 йыл) Позднеевтың «Монгол әҙәбиәтенең нәмүнәләре» тип яҙған әҫәрененең беренсе жилдендә әйткәне кеүек, һис эшләнмәгән мәсьәлә ине. Ул хаҡта Радловтың бер немецса мәҡәләһе менән Ҡатановтарҙың фараздарынан башҡа нәмә юҡ ине, Федор Николаевич был мәсьәләгә килеп, инде юғарыла күрһәтелгән «Слово о полку Игореве» хаҡындағы мәҡәләһендә был мәсьәләне һөйләне. Һуңынан 1909 йыл «Батшалыҡ тарих йәмғиәтенең шәреҡ шөғбәһе» мәжмуғаларының (Зап. Вост. отд.) 19 жилдендә «Төрк ҡәбиләләренең иң иҫке йыры» («Древнейший народный стих турецких племен») тип был мәсьәлә хаҡында махсус бер мөһим әҫәр бирҙе. Бында ул Орхон яҙмаларына (Күл Тегин мәхкүкәтендәге бер, ике вәзенле һүҙгә) оҡшаған йөмләләрҙе тотоп ала ла быныҡ мисрағы ете һижәнән[1] (слогтан) торғанын иғтибар итеп, төрки ләһжәләрененең һәммәһендәге һәм иҫке сығатайсалағы («Диуаны хикмәт»тәге) шундай йыр вә бәйеттәр менән тиңәп, төрк халҡының йырҙа истиғмал иткән иң иҫке вәзене ете һижәле вәзен булғанын, шундай вәзендең монгол һәм фин вә мажар телдәрендә лә истиғмал ителгәнен күрһәтеп, был вәзендең хатта туран ҡәүеме, монгол, фин, төрк тигән кеүек йәмғиәттәргә айырылмаҫтан элгәре үк йөрөгәнен иҫбат итә. Балдаҡ кәлимәһе хаҡындағы мәҡәләһендә төрки телдә һижәнең оҙонлоҡ, ҡыҫҡалығы мәсьәләһен һөйләне[2].

---

[1] һижәнән — ижектән

[2] Был мәсьәлә тураһында Федор Николаевичҡа ҡәҙәр Радловтың «Ҡуман теле хаҡында» тип Академия наук мәжмуғаларында (запискаларында) яҙғандарынан башҡа һүҙ юҡ ине. *(Ә. В.)*

Федор Николаевич фарсы ғарузы хаҡында яҙҙы (грамматикаһының аҙағында) һәм уныһы төрки ғарузына ҡарағанда тамамыраҡ, төрки ғарузы бабында беҙ был заттан йәнә бер хеҙмәт көтә инек, булманы ахыры, сөнки был мәсьәлә һаман тейешенсә хәл ителеп бөткәне юҡ. Ғәрәп вәзене хаҡында ла бер әҫәр яҙған икән. Ләкин баҫыла алмай ҡалғандыр инде.

Федор Николаевичты мин күреп белмәнем. Дәрестәрен ишетә алманым. Ләкин әҫәре арҡылы уның ғаибанә[1] шәкерте һәм мөрите инем.

Уның атаһы Корш заманында беҙҙең инородец халҡының бәхете менән күп сыуалған «Московские ведомости» гәзитендә һуңғы мөхәррире Катковҡа ҡәҙәр мөхәррирлек иткән, йәнә бер ҡәрҙәше шундай уҡ мәсләктәге «Петербургские ведомости»ҙа мөхәррирлек иткән. Ошоноң өсөн Федор Николаевич инородец мәсьәләләренең ҡайнаған ерендә сыҡкан заттыр. Ләкин шәкерттәренең һөйләүҙәре буйынса, Федор Николаевич фән әһеле булған өҫтөнә үҙенең инородец шәкерттәрен бик яҡын күреүсе булған һәм мосолман ғалимы хаҡында юғарыла зикер ителгән һүҙҙәрен ғәмәлдә лә татбиҡ иткән [2]. Россияла шәреҡ ғилемдәре менән шөғөлләнеүселәр байтаҡ булһа ла, үҙҙәренең белектәрен йәмғиәткә генә хеҙмәт иттереүселәр, беҙгә лә үҙ белектәренән, үҙ нөфүздарынан[3] файҙа тигеҙеүселәр бик һирәк осрай. Ахыр ғүмерендә мөстәшәрҡ булып үлгән Корш беҙҙе яҡын күрҙе. Шул нисбәттә үҙенең вафаты менән беҙҙе артығыраҡ ҡайғыға төшөрҙө.

Әхмәтзәки Вәлиди.
1915 йыл, 17 февраль.
Сызрань станцияһы.

---

[1] ғаибанә — күрмәйенсә, ситтән тороп
[2] татбиҡ иткән — ҡулланған
[3] нөфүз — абруй, йоғонто

## «АҠ ЮЛ» ЖУРНАЛЫ ХАҠЫНДА

«Йондоҙ» газетаһының 1408-се һанында «Уйғыр» әфәнде «Аҡ юл» журналы хаҡында бер мөләхәзә яҙҙы. Был мөләхәзә мине тик торған ерҙән матбуғат битенә сығып был журнал хосусында бер нисә һүҙ әйтергә мәжбүр итә. Сөнки Уйғыр әфәнденең «Аҡ юл» хаҡында яҙғаны миңә бөтөнләй бер тарафлылыҡ һәм ғәзәләтһеҙлек[1] менән яҙылғандай күренде.

Уйғыр әфәнде кеүек матбуғатыбыҙҙың сығып торған фабрикалары тирәһендә әйләнгән, бының өҫтөнә шул уҡ «Аҡ юл» журналында байтаҡ ваҡыт секретарлыҡ хеҙмәтен иткән әҙәмгә бик асыҡ мәғлүм ки, Фәхрелислам әфәнде Агеев үҙенең ошо эшенә мотлаҡан беҙҙең донъябыҙҙа хараплыҡ хәленә әйләнеп барған балаларыбыҙҙың хәлдәрен аяғанлыҡтан ғына кереште. Бының өсөн ул дарелфәнүн тупһаһына килтереп баҫҡан аяғын кире тартып алды. Ике йылдың эсендә үҙ ҡулында булған бөтә матди вә мәғнәүи ҡоттарын сарыф итеп йәне-тәне менән шуға бирелде. Халыҡ араһында матбуғатҡа һалҡынлыҡ, хосуси бабтарға бағланған журналдарға нисбәтән артығыраҡ асыҡ күрелгән иғтибарһыҙлыҡ, суи назир[2] сәбәбенән мөхәррирргә журналды дауам иттереү бабында сикһеҙ күп ҡыйынлыҡтар күрергә, төрлө әҙәмдәр алдында йөҙ һыуҙарын түгергә тура килде. Бөтөн донъяны ҡаплап алған был дәһшәтле көндәрҙә лә мөхәррир үҙ башына төшкән төрлө уңайһыҙ хәлдәргә ҡарамайынса, эшен юлдан сығармай алып бара. Ҡүпте күргәнерәк мөхәррирҙәребеҙҙең көстәренән файҙаланырға тырышыу менән бергә үҙ тирәһенә йәш үҫмер егеттәрҙе, яңы көстәрҙе йыйып беҙҙең иң ауыртҡан еребеҙ булған бала — йәш быуынды тәрбиәләүҙе ҡарарға өйрәтә. Шул бабта эшләрлек шағирҙар вә әҙиптәр етештерергә тырыша. Журналды уҡыусы меңләп балаларыбыҙ был

[1] ғ ә з ә л ә т һ е ҙ л е к — ғәҙелһеҙлек
[2] с у и н а з и р — насар ҡараш

журнал арҡаһында бөгөн үҙ буйҙары, үҙ көстәре нисбәтендә милли вә мәҙәни тәрбиә ала. Был балаларҙың бөтөнөһө бер юлы булмаһа ла айырым-айырымдарын беҙ һәр ерҙә күреп ни дәрәжәлә матур кешеләргә әйләнеп барғандарын, йәғни журналдың ғилми тәьҫирен беләбеҙ, быларҙың һәммәһе, әлбиттә, Уйғыр әфәндегә асыҡ мәғлүм. Ул шулай булһа ла х у ж а, а с л а н, х ә т е р, т а р а ф, з а р а р тигән кеүек бәғзе бер кәлимәләрҙең «Йондоҙ» имләһенә хилаф һүрәттә яҙылыуын тотоп ала ла журналдың бөгөнгө һандары «неграмотный» яҙалар, һәм рустан тәржемә ителгән мәҡәләләргә һәм бәғзе әҫәрҙәрҙең мөәллифтәре матбуғатта шаиғ[1] булмауына мөәллиф тәғбиренсә, школьниктар (ләкин школьник ҡына түгел, арала гимназистар ҙа бар) булыуға ҡарап, һандарының мөндәрижә[2] йәһәттәренә бәйләнә, етмәһә, журналды таратыу өсөн яҙылған иғландарға ла тейеп ала.

Был матур журналыбыҙ хаҡында һөжүмде мин бөтөнләй урынһыҙ һәм ғәҙәләтһеҙ һанайым. Иң әүәл имлә тураһында баш-баштаҡлыҡ (анархия) беҙҙә бөгөн тамам бер ҡануни (законлы) нәмә булып киткән. Төпләп алған бер имлә юҡ. Һәм телебеҙ хаҡында фәндең еткән дәрәжәһе беҙҙең үҙебеҙгә мәғлүм булып бөтмәгәне, иҫке яҙыуҙарыбыҙ һәм уларҙың телебеҙгә нисбәте, хәҙерге имләбеҙҙең тарихтары яҡшылап асылмағаны мөддәттә[3] мин ошо анархия булырға тейеш һәм беҙгә шул анархиянан башҡа нәмә кәрәкмәй тип беләм.

Ошоноң өсөн «Йондоҙ» гәзитенең имләһе йәһәтенән «Аҡ юл» менән «Сөйөмбикә»не, «Тәржеман» нөктәһенән «Ваҡыт»ты ғәйепләүен ҡануна хилаф эш тип уйлайым. Журналдың мөндәрижәте, уның бөтөн һуңғы ғүмере хаҡында бер нәтижәгә килер өсөн айырым номер йәки айырым бер хикәйәләрен ҡарау түгел, бәлки һуңғы көнгә яҙылған әҫәрҙәрҙең барыһын, журналдың һуңғы ваҡытта эшләгән бөтөн хеҙмәттәрен ентекләргә кәрәк. Ошо һуңғы нөктәнән ҡарағанда журнал үҙенең күсәренән сыҡҡаны юҡ. Хосусан Уйғыр әфәнде телгә алған һандарҙағы «Яллы бүре», «Зәкиҙең апалары», «Ҡара мәргән», хосусан «Ул ваҡыт мин илатҡан инем, инде һин мине илатаһың» һәм «Аяҡҡа сөйәл сыҡты» хикәйәләре яратылмаҫлыҡ түгел тип беләм. Быларҙың беренсе һәм икенселәрендә хәҙерге дәһшәтле көндәрҙән бер сәхифә, һуңғыһында балаларҙың яҙғы хаятынан бик матур, улар күңеленә бик яҡын бер дәҡиҡәысын балаларға муаффиҡ булған өслүбтә тасуир ителә.

[1] ш а и ғ — билдәле
[2] м ө н д ә р и ж ә — эстәлек
[3] м ө д д ә т т ә — ваҡытта

«Аҡ юл» үҙенең матур, яҡты юлында бара. Беҙҙең кеүек мәктәптәге һәм өйҙәге тәрбиәләр урынына ҡуйылмаған халыҡтың балалары өсөн фәҡәт «Аҡ юл» ғына берҙән-бер төплө, ысын бер мәҡсүткә ҡарап барыусы мөғәллим булып бара алыр. Беҙҙең балаларыбыҙ быныһыҙ үҙ көс вә даирәләрендә тәрбиәләнә алмайҙар. Хәҙергә ҡәҙәр беҙҙең балалар ололар өсөн яҙылған матбуғатты уҡып килделәр. Ошо сәбәптән беҙҙә ун-ун бер йәшендә үк милләттең артҡа йәки алға китеүенән, Муса вә Риза әфәнделәрҙең дини вә фәлсәфи һүҙҙәренән, төрлө мәмләкәттәр араһындағы сәйәсәттән бәхәс итә торған бер быуын балалар үҫте. Улар ҙурайғас та һәр ваҡыт үҙҙәренең даирәләренән тыш булған эштәргә тығылыусы, дәғүәле булып ҡалырҙар. Әммә «Аҡ юл» инде үҙенең бәләкәй уҡыусылары менән беҙҙең милли, дини хаятыбыҙҙың төрлө яҡтары хаҡында һөйләшеп, уларҙың үҙҙәре төҫлө генә итеп бәхәсләшеп алды. Хәҙер беҙҙең бер ҡыҫым балаларыбыҙ Гаспринский, Туҡай, Мәржәни кеүек заттар, Иҙегәй, Туҡтамыш, Сыңғыҙ, Жәмүҡә, Мәнгү хан, Хутулахан кеүек тарихи шәхестәр, күп кенә фәнни вә әҙәби мәсьәләләр, әхләҡи идеялар, милли хаятыбыҙҙан һабан туйы, мәүлит, ғәйеттәр, балалар кисәһе тигән кеүек зоһурат менән тамам үҙ көстәре даирәһендә таныштылар.

Мин журналдың барышында уның һаман тәкәммел юлына керергә тырышыуынан, уның эшлеклелегенән тамам ризамын. Уның балаларыбыҙ араһында икһеҙ-сикһеҙ таралыуын теләйем. Беҙгә уға бер суи назир менән ысындан сәйер итеп[1] тороу, уның мөғжәмә-х-тәре[2] менән һәммәләрен һин неграмотный тип битенә атып бәреү, ҡағып ебәреү түгел, уны күтәрешеү, уны һаман тәкмил итергә[3] юлдар күрһәтеү, кескенә уҡыусыларға әйтәһе килгән һүҙҙәребеҙҙе тиҙ генә шул журналға яҙып биреп, уның яҡшы материалдарын күбәйтеү тейеш. Беҙҙең мәҙәни хаятыбыҙҙағы был беренсе эштәребеҙ әлегә шул ҡәҙәр зәғиф һәм шул нисбәттә аяныс ки, унда беҙ бер-беребеҙҙе ҡағып ебәреү түгел, бергә-бергә тотоношоп, ярҙамлашып барһаҡ та саҡ-саҡ үтеп китә алырбыҙ. Әгәр хоҙай иркен форсат, киң ҡул бирһә икән, мин беҙҙәге был иң беренсе рияһыҙ[4] вә ысын культурный хеҙмәткә бөтә вөжүдем менән ҡатнашыр инем һәм уның ҡағыҙҙарын халыҡ балаларының ауыҙҙарына сәйнәп ҡаптырыр инем. Мин был хеҙмәтемдә ысын мөҡәддәс хеҙ-

[1] сәйер итеп — ситтән ҡарап
[2] мөғжәмә-х-тәре — нөктәле ғәрәп хәрефтәре (?)
[3] тәкмил итергә — тулыландырырға
[4] рияһыҙ — бында: ихлас

мәт тип ышанам, шул нисбәттә Уйғыр әфәнделәрҙең шундай суи назир итеп тороуҙарына күңелем әрней. Сөнки матбуғат башында торған әҙәмдәрҙең беҙҙең арабыҙҙа унһыҙ ҙа бик ситенлек менән генә барған шундай изге хеҙмәттәргә ҡаршы ихтирамһыҙлыҡ, суи назир күрһәтеүҙәре матди һәм мәғнәүи йәһәтенән зарар килтерергә һәм шул нисбәттә уның ғүмерен ҡыҫҡартырға мөмкин.

# БАШҠОРТТАРҒА ҒАИД ЯҢЫ ӘҪӘР

Мөәллифтең үҙ фекерҙәре башҡорттарҙың асылы, башҡорт кәлимәһе, башҡорттарҙың иҫке диндәре, башҡорт теле, башҡорттарҙың Россия ҡулы аҫтына кергәнсе булған тарихы мәсьәләләренә ҡайта. Унан һуңғы бабтарҙа һөйләнгән башҡорттарҙың Россия ҡулы аҫтындағы хаяттары, фетнәләре, ғәскәри хеҙмәттәре, кантон ваҡыттары, һуңғы хаяттары тигән кеүек мәсьәләләр хаҡында тарихи дәлилдәр күп булғанлыҡтан, бик ваҡ ҡына бәғзе һүҙҙәрҙе истисна иткәндә[1] яңылыш фекерҙәр керткәне күренмәй. Башҡорт еренең төп халҡы тигәнендә мөәллиф хәҙерге башҡорт ерҙәре элек вогул, остяктар кеүек фин халыҡтары һәм ҡалмыҡтар менән мәшғүл булған, башҡорттар һуңынан ғына был ергә килгәндәр тигән фекерҙе ихтыяр итә. Башҡорттарҙың Иртыш, Тубыл тарафтарындағы хаяты хаҡында һис дәлил таба алмай.

Башҡорттарҙың төбө мәсьәләһендә «ғоләмәләр, ғәрәп география ғалимдарының һүҙҙәренә ҡарап, башҡорттар төрктәр һәм улар венгрҙар менән бер асылдан тиһәләр ҙә, мин икенсе төрләрәк уйлайым: «Башҡорттарҙың асылы фин булған мадьяр (венгр) халҡы ине, ләкин шул мадьярҙарҙың олуғ бер ҡыҫымы ғарб тарафына киткәс, төрктәр араһында ҡалған бер ҡыҫымы финлыҡтарын юғалтып, башҡорт исеме менән төркләшеп ҡалғандар. Һәм быға хәҙерге башҡорттоң телендәге иҫке мажар лөғәте финлыҡты күрһәтеп тора торған хосусияттар, дәлил»,— ти.

Башҡорт кәлимәһенең мәғәнәһе хаҡында был «башы ҡорт» тигән һүҙҙән төҙөлгән, сөнки, башҡорттарҙың үҙ уйҙарынса, уларҙы дин исламға өйрәтергә килгән кешегә башҡорт араһына килгән ваҡытында юл күрһәтеүсе бер бүре булған, имеш. Шунлыҡтан башы ҡорт йәғни башы, башлап йөрөүсеһе бүре тип аталған йәки башҡорттар элек бик һуғышсан булғанға бүре баш тип аталған булырҙар, ти.

---

[1] истисна иткәндә — иҫәпкә алмағанда

Башҡорттарҙың диндәре хаҡында улар башта мәжүси булғандар — тәбиғәткә табынғандар, һуңынан 13 быуат миләдиҙең баштарында дин исламды ҡабул иткәндәр, ти. Һәм шуға Минзәлә өйәҙе Зәй һыуы буйындағы Хөсәйенбәк тигән кешенең (1227 м — 623 һ. сәнәлә вафат) ҡәберен дәлил итә.

Башҡорттарҙың иҫке тарихы бабында байтаҡ фараздарға сумғылағас, былар башта болғар, һуңынан Алтын Урҙа, Себер, Ҡазан хандары, нуғайҙар ҡулы аҫтында торғандар, ти һәм урыҫҡа тәбәғ булыуҙарын[1] ысынлап тәғәйен итә алмай. Бәлки, Френға ҡарап, 1557 йылдар һәм унан да һуңыраҡ йылдарҙа булғандыр, тип уйлай.

Бына шуларҙы уҡығас, һун ниңә был башҡорт тарихы менән артығыраҡ моҡтәдир (компетентный) кешеләр шөғөлләнмәйҙәр, ни өсөн был мәсьәлә менән иҫке вә сәйнәлеп бөткән эбер-себер һүҙҙәрҙе һөйләп тора, етмәһә, шуларҙан әүһәләп үҙҙәренән әллә ниндәй бүре баштары сығара торған кешеләр генә сыуалалар, тиәһе килә. Дөрөҫ, мөәллиф тарафынан ҡуҙғатылған был мәсьәләләр бик ауыр, ләкин ни ҡәҙәре ауыр булһа ла был ҡәҙәр ҡараңғы, был ҡәҙәр хыялатҡа[2] сумдырырлыҡ түгел. Урал тауҙары әтрафында вогул, остяк, ҡалмыҡтарҙың тороуы әле бик яңы ғына эш. Был мәсьәләне бик өрөп ҡабартып алып китеүсе Флоренский менән башҡорттарҙың иҫке телдәре һәм уның сығатайсаға мөнәсәбәте хаҡында һөйләүсе Өмөтбаевтарҙың һүҙҙәре «фәнни гипотеза» тип әйтерлек нәмәләр түгел[3]. Йәнә башҡорттарҙың Иртыш, Тубыл яҡтарында кимәк тигән төрктәр менән сиктәш булып тереклек итеүҙәре Иран мөәррихтәренән Гардизи тигәндең «Зәйнел-әхбәр» тигән әҫәрендә күрһәтелгән. Был китаптың был ерҙәре урыҫ фәнни әҙәбиәтендә лә ғибәрә[4] һәм тәржемәһе менән нәшер ителде[5]. Ғарбтәге башҡорттар менән шул уҡ ғарбтәге мажарҙар араһындағы айырма ла әҙәбиәттә яҙылып үтте. Өфө —

---

[1] тәбәғ булыуҙарын — ҡул аҫтына инеүҙәрен

[2] хыялатҡа — хыялдарға

[3] Флоренскийҙың «Башҡорттарҙың ере һәм башҡорттар» тип яҙған әҫәре (Вестник Европы. 1874, № 12) һис бер фәнни әҫәр түгел, бәлки бер әҙәби генә әҫәрҙер. Ул үҙе лә фәнни хеҙмәт яҙам тип яҙмаған. Өмөтбаев иһә үҙенең «Ядкәр» исемендәге татарса һәм 1883 йылғы Өфө справочный книгаһында русса яҙған мәҡәләләре менән үҙенең был мәсьәләләр хаҡында һәр төрлө хыялатҡа ышана торған кеше икәнлеген күрһәтә. Быларҙың әҫәрҙәрен фәнни гипотеза тип түгел, хосуси бер фекер итеп килтерергә лә тартыныу тейеш. *(Ә. В.)*

[4] ғибәрәһе — тексы

[5] Ҡара: Записки Импер. Акад. Наук по историко-филол. отд., 1897. Т. I, № 4. Бартольдтың «Урта Азияға фәнни мәҡсүт менән сәфәренең хисабы» тигән мәҡәләһе. *(Ә. В.)*

Ырымбур башҡорт тарихтары менән шөғөлләнгән кешеләр ғөмүмән шәрҡи Россия, Алтын Урҙа һәм уны тәшкил иткән ваҡ ханлыҡтарҙың тарихы менән был яҡтарҙа ул иҫке заманда шаиғ булған[1] телдең ядкәрҙәре, хатта ғөмүмән был ерҙәрҙең археологияһы менән таныш булмаған заттар булып килделәр. Филоненко әфәнде рәсмән мөстәшәрҡтәр араһында һаналырға хаҡлы булһа ла, беҙ уны шәреҡ телдәрен яҡшы белмәй булһа кәрәк тип уйлайбыҙ[2]. Ошо йәһәттән ул һәм шул иҫке иптәштәре кеүек башҡорт кәлимәһенә ғаид хыялдар, башҡорттарҙың ислам ҡабул итеүҙәре, уларҙың нуғайҙарға нисбәттәре[3] хаҡында әллә ниндәй «тәрән» фекерҙәргә сума. Был әфәнделәрҙең ҡай саҡта унан-бынан соҡоштороп бер әҙәм башы (ҡайһы ваҡыт әҙәм башы булмаҫҡа ла мөмкин) алып ҡайталар ҙа шуны йә башҡорт башы йә мишәр башы тип фараз итеп тәрән уйҙарға керәләр һәм хәҙер уны мажар баштары менән тиңләргә башлайҙар. Йәки бәғзән, мәҫәлән, Шишмә йәки Зәй буйындағы кеүек бәғзе ҡәберҙәрҙе табалар ҙа шул башҡорттарға килгән иҫке мосолман миссионерҙары, уларҙың мәркәздәре (стандары) тип ҡаҙынырға башлайҙар. Хәлбуки Өфө виләйәттәрендә ундай иҫке ҡәберҙәр байтаҡ бар. Тик күптәренең таштары Шишмә таштары кеүек түҙем булмағанлыҡтан яҙыуҙары юйылған. Нуғай мырҙаларының хаяты, башҡорттарға, Ҡазан һәм Себер хандарына, һуңынан Россияға мөнәсәбәттәре тураһында шул уҡ урыҫ мөәррихтәренән Вельяминов-Зернов, Карпов тигән кешеләрҙең хеҙмәттәре арҡаһында байтаҡ асылдылар. Былар хаҡында башҡорттарҙың үҙ араларында йөрөй торған шәжәрәләрҙә лә байтаҡ мәғлүмәт бар. «Тормош»та ошо шәжәрәләр хаҡында бәғзе нәмәләр яҙырға иҫәбебеҙ бар. Шунда был мәсьәләне ҡуҙғатырға һәм иншалла күренер ки, был хаҡта ла хыялдарға сумырлыҡ урын юҡ. Бындай уңайһыҙ, ауыр мәсьәләләрҙә Филоненко әфәнде үҙе компетентный булмағас, ул хаҡтарҙа шул үҙенең Волков мәжмуғаһына йыйылған мәғлүмәтте генә яҡын итеү (суммировать) менән генә ҡәнәғәтләнһә, ул туралаҙа үҙемдеке тип артыҡ бер фекерҙәр ырғытмаған булһа, тағы яҡшы булыр ине.

Мөәллиф Волков мәжмуғаһын нисек башҡарыуы һәм уның үҙемдеке тип керткән фекерҙәре хаҡында әйтергә теләгән һүҙебеҙ шул.

Тарихи хәжәттәре (данныйҙары) күп булған һуңғы дә-

---

[1] шаиғ булған — таралған

[2] Мәҫ., ул 20-се биттә уба кәлимәһе, 21-се биттә ҡыс (ҡасаҡ) һәм абышҡа кәлимәләренең мәғәнәләрен белмәй, хәлбуки был һүҙҙәр мөәллифтең ҡулындағы Будагов һәм Радлов словарында ла бар. *(Ә. В.)*

[3] нисбәттәре — мөнәсәбәттәре

үерҙәр хаҡында мөәллиф эшен бик яҡшы үтәгән, хатта башҡорт фетнәләренең мәмләкәт идараһындағы низамһыҙлыҡтарынан килеп сығыуы, унда иҫке дәүләтте ҡайтарыу фекерҙәре бәғзе бер кешеләрҙең телдәрендә һөйләнгән һүҙҙәр генә булыуы башҡорт ерҙәренә урыҫ ултыртыу мәсьәләләре хаҡында уның Волковтан алып һәм үҙенән ҡушып килтергән дәлилдәре бөтөнләй яңы нәмәләр. Башҡорттарҙың хәҙерге хаяттары, татарлашыуҙары хаҡында әйткән һүҙҙәре лә бер ҙә үлсәүҙән тыш түгел. Ҡитаптың ҡиммәтле урындары, әлбиттә, ошо ерҙәрелер. Ләкин был бабтарға ғына ҡарап беҙ был китапты башҡорттоң фәнни тарихи бабында (шаг вперед) бер аҙым алға китеү тип әйтә алмайбыҙ. Был китаптың шул юғарыла әйткәнебеҙсә ҡәҙерлелеге лә Волков мәжмуғаһы кеүек ҙур китапты, иҫкелә сығып килгән, ләкин нөсхәләре ҡалмаған әҫәрҙәрҙе ғөмүм халыҡ истиғмалына[1] ҡуя алыу, китапҡа ярлы шәһәрҙә был мәсьәләләрҙе тәфтиш итә белеүгә юл асыуҙалыр.

Әхмәтзәки Вәлиди.
1915 сәнә, 28 апрель.
Стәрлетамаҡ.

[1] истиғмалына — файҙаланыуына

## МӘРЖӘНИҘЕҢ БЕР ӘҪӘРЕ ТУРАҺЫНДА ҠӘЙҮМ НАСЫРИ

Мәржәни менән Ҡәйүм Насыри икеһе лә бер заманда килгән. Икеһе лә ошо Иҙел буйындағы татар вә ғәйре ҡәбиләләрҙең тел һәм тарихтарын тергеҙергә тырышҡан. Тик беренсеһе тарихҡа артығыраҡ әһәмиәт бирһә, һуңғыһы тел һәм әҙәбиәткә артығыраҡ биргән. Был ике заттың ике араларында ниндәй мөнәсәбәт булған икәнен һәм быларҙың береһе икенсеһенең хеҙмәттәренә нисек ҡарағанын өйрәнеү, әлбиттә, ҡыҙығырлыҡ эш. Мәржәниҙең шәкерте вә минең остазым булған Хәбибназар хәҙрәттең һөйләүенсә, Ҡәйүм менән Мәржәниҙең араһында һис бер яҡшы мөнәсәбәт булмаған. Мәржәни Ҡәйүмде наҙан тип яратмай һөйләй торған булған, Насыри иһә, үҙ нәүбәтендә, Мәржәниҙең дошмандары Кәрим, Ғәлләм хәҙрәттәр менән күп ҡатнашып, Мәржәнигә хилаф[1] булып йөрөгән.

Ҡәйүм Насыри ваҡиғда[2] бик мәхдүд[3] кенә кеше ине. Тарих тураһында ла, ижтимағиәттә лә һәм Мәржәниҙең ихтисасы[4] булған ғолүм диниәлә[5] бөтөнләй йәйәү булған, ләкин шуға ҡарамайынса үҙенең дәғеүәһе ҙур ғына булған. Ошо сәбәптән Ҡәйүм Мәржәниҙе аңлай алмаған. Мәржәниҙең иҫке авторитеттарҙы ҡағыуын, һәммә китаптарҙы күреп белеп һәм белгәненә ышанып һөйләүен яратмаған. Ҡәйүм үҙенең бындай нисбәтен матбуғатта һөйләп үткән. Мәржәниҙең «Труды IV-го археологического съезда в Казани»ҙа дәрж ителгән «Ғаләләтел-заман фи тарих Болғар вә Ҡазан» тигән китабына ҡаршы Насыри үҙенең 25 йылдар буйы сығарып килгән календарҙарының 1885 йылғы нөсхәһендә бер тәнҡит йәки дөрөҫөрәге «рәддиә»[6] яҙған. Ҡәйүм-

---

[1] хилаф — ҡаршы
[2] ваҡиғда — ысынбарлыҡта
[3] мәхдүд — сикләнгән
[4] ихтисасы — профессияһы
[5] ғолүм диниәлә — дин фәндәрендә
[6] рәддиә — кире ҡағыу

деӊ календарҙары ваҡытында бик аҙ нөсхә генә баҫылған[1]. Бының өҫтөнә ул иҫке календарҙар инде таралып та бөткәндәр. Етмәһә, Насыри үҙенең яҙған рәддиәһенең кем китабына ҡаршы икәнлеген әйтмәгән. Ошо сәбәптәрҙән Ҡәйүмдең мәҡәләһе һәмишә[2] йәшерен торорға мөмкин. Ошоларҙы мөләхәзә итеп, беҙ Ҡәйүмдең Мәржәнигә мөнәсәбәтен асыҡ күрһәткән был әҫәрен бер аҙ ихтисар менән[3] күсереп үтергә булдыҡ. Был мәҡәлә, барыһы 6 сәхифәлек булып, мәҙкүр календарҙың 38—43-сө сәхифәләренә дәрж ителгән һәм башына «Әт-тәфтиш вәт-тәхакем»[4] тип исем ҡуйылған.

---

[1] См. статью Смирнова «Мусульманские печатные издания в России» (З. В. О. III. 398) *(Ә. В.)*

[2] һ ә м и ш ә — һаман

[3] и х т и с а р  м е н ә н — ҡыҫҡартып

[4] «Әт-тәфтиш вәт-тәхакем» — «Дәғеүәне тикшереү»

## МӘРЖӘНИ ХАҠЫНДА КЕСКЕНӘЛЕГЕМДӘ ЯҘҒАН БӘҒЗЕ НӘМӘЛӘР МӨНӘСӘБӘТЕ МЕНӘН

Минең бабам һәм остазым булған Хәбибназар хәҙрәт Мәрждәниҙең иң мохлис[1] шәкерттәренән вә мәшһүр хәлфәләренән булған. Хәбибназар хәҙрәт мәрхүм Мәрждәниҙең мәсләгенә һәм күп ғилеменә варис булып ҡалған. Тарих һәм мосолман ғилемдәре бабында мин Хәбибназар хәҙрәттең ихатаһы[2] Мәрждәнигә нисбәт күп тар булыуын иғтираф итеү[3] менән бергә Мәрждәнигә хәләф[4] һанаймын. Сөнки беҙ Мәрждәниҙе күпме яҡшы өйрәнһәк тә, тоғро отпечатоғы фәҡәт Хәбибназар хәҙрәттә булғанын иғтираф итмәй сара юҡ.

1908 йыл 18 йәшемдә саҡта был кеше хозурынан ҡасып Ҡазанға киткән ваҡытыма ҡәҙәр ул мине үҙенең мәҙрәсә һәм йортонда[5] Мәрждәниҙән мираҫ булып ҡалған юл менән тәрбиә итте. Мәрждәниҙән мираҫ булып ҡалған юл тием, сөнки ул үҙе ислам тарихына ғаид күп кенә әҫәрҙәргә Малик һәм Шиһап хәҙрәттең тарихҡа ғаид яҙғандарын хәтерҙән белә торған ине[6]. Беҙгә даимән тарих бабында һәм ислам фәлсәфәһе һәм кәләмиәте бабында Мәрждәни тотҡан мәҙһәпте тотоп килде. Ошонон өсөн мин үҙемде билвасита[7] булһа ла Мәрждәниҙең шәкерте иҫәпләйем.

Мәрждәниҙе мин бик кескенәлегемдән ишеткәнмен. Ул ерҙә күрше ауылда Мәрждәниҙең бик мохлис һәм яҡшы уҡ ғилеме булыуы сәбәпле Мәрждәниҙе тулыһынса аңлай торған Шафиғ ахун бар ине. Мулла бабай (Хәбибназар хәҙ-

---

[1] мохлис — ихлас

[2] ихатаһы — тирә-йүнгә ҡараштары

[3] иғтираф итеү — таныу

[4] хәләф — алмаштырыусы

[5] Хәбибназар хәҙрәт минең анам менән бер туған. Уның элек тә балаһы булмағанлыҡтан мин кескенәлегемдән уның балаһы кеүек булып өйөндә тәрбиәләндем. *(Ә. В.)*

[6] Хәбибназар хәҙрәт тарихты белеп кенә ҡуймаған. Уның тарихтан «Мифтах-әт-тауарих» исемендә бер әҫәре баҫылған һәм «Мәжмуғәи мөһиммә» исемендә үҙ әтрафының тарихын яҙған бер мәжмуғаһы бар. *(Ә. В.)*

[7] билвасита — кеше аша

рәтте беҙ шулай атайбыҙ) менән Шафиғ ахун бик дуҫ инеләр. Һәм быларҙың бик йыш була торған мәжлестәрендә күп ваҡыт мин дә була инем. Башҡа мәсьәләләрҙә булған кеүек, Мәржәни хаҡындағы һүҙҙәрен дә ишетер инем. Ошо сәбәптәрҙән ки, мин кескенәлегемдән үк хәҙрәт бабайҙы белә инем дә Мәржәниҙе белә инем. Ул заман Мәржәни минең ҡашта иҫке заманда булып үткән ҙур мосолман ғалимы, имам Әғзәм тигән кеүек бер мөжтәһит[1] төҫлө булғанын әле лә беләм. Мин Аҡмулла мәрҫиәһенең күп ерҙәрен яттан белә инем, сөнки шундай уҡ минең туғандарым булған Таһир һәм Зариф муллалар ҙа (Хәбибназар хәҙрәттең бер туған энеләре) Мәржәни шәкерттәре ине. Улар ауыҙынан ишетеп һәм үҙем уҡып Аҡмулла бәйеттәрен ятлағанмын. «Назурател-хаҡ»ты башта уҡымаған булһам да, ни һөйләгәнен белә инем. Һуңынан «Назурат», «Әлхикмәтел-билғәт», «Бәрәкел-вәмис», «Хәзәнә»не миңә уҡырға тура килде һәм 1908 йыл йәй көнө Ырымбур һәм Ҡазанға киткәнемдә мин «Әл-тәриҡәтел-мәҫәли һәм ғаҡидәт ел-хәсәни», «Мөнтәхибел-вафия»ларҙың ғибәрәләрен шиғыр кеүек итеп хәтеремә бикләнем. Ырымбурҙан Ҡазанға килгәнемдә пароход өҫтөндә Сембергә килеп етер алдынан «Мөнтәхибел-вафия»ны тамам яттан уҡып сыҡҡаным хәтерҙә. Ул ваҡыт Курсауи, Мәржәни, Ғәбделхәбир әл-Мөслими, Ғариф бин Сәләмҡоли, Низаметдин Илһами, Әхмәтйән бин Әмирхандар беҙҙең өсөн идеал ине[2].

Ниндәйҙер бер юл менән миңә кескенәлегемдән үк бер ғәҙәт кереп ҡалған. Кескенәлегемдән үк мин ҡолаҡҡа бәрелерлек һүҙҙәрҙе, хикәйәләрҙе яҙып барғанмын. Үткән йыл ауылға ҡайтҡанда иҫке «Шәрхе Ғабдулла»м араһында һәм уның ҡатырғаһында боронғо хәҙрәттәр, ғөләмәләр хаҡында мулла бабай һәм Шафиғ ахун ауыҙынан яҙып алған һүҙҙәрен, хикәйәләрен күрҙем. Бик хәтеремдә. Мин ун-

---

[1] мөжтәһит — яңылыҡ индереүсе, новатор

[2] Низаметдин һәм Ғарифтар хаҡында быйыл 9 ғинуарҙа сыҡҡан «Йолдыз»да әйттем. Әхмәтйән хәҙрәт Курсауиҙарҙың моғасыры (замандашы) һәм шулар мәсләгендә бер кеше булған, 1813 йыл Малмыж өйәҙендә Ошма ауылында 29 йәштәрендә вафат иткән. Үҙе Бохара кеүек ерҙәргә йөрөмәһә лә, үҙ атаһы Әмирхан хәҙрәт янында тәхсил итеп бик күп нәмәләр белгән һәм ғәрәпсә яҡшы ғына яҙған. «Саниятел-бишара фи саниятел-ишара» тигән китабы Ҡазанда матбуғ. Бынан бер нисә йылдар элек вафат иткән Мостафа бай Әмирханов бының нәҫеленән ине. Бөгөн Истанбул дарелфәнүнендә студент Әхмәт Әмирханов йәнә шул нәҫелдәндер. Стәрлетамаҡ өйәҙе Ғәбделйәлил хәҙрәт уның шәкерте булған (әҫәр, жилд 2, с. 327).

Әхмәтйән мәхдүм элекке авторитеттарға тәнҡит менән ҡарай башлауҙың иң әүәлге дәүере кешеләренәндер. Тәржемәи хәле «Мөстәфаделәхбәр»ҙә (2-се жилд) *(Ә. В.)* Әҫәрҙә (жилд 1, с. 131—133) бар.

ун бер йәштәремдә булһа кәрәк, мулла бабай мәҙрәсәгә бер шәкерткә Шафиғ ахундар менән бергә ашҡа килгән ине. Шунда минең Рабиғаи Ғадуя һәм Хәсән Басыриҙар хаҡында Шафиғ ахун ауыҙынан яҙып алған нәмәләремде һөйләп мине маҡтап ултырҙы. Был эш, әлбиттә, мине тағын ғәйрәтләндерҙе. Әле быйыл ҡайтҡанымда тағын китаптар араһынан 1907 һәм 1908 йылдар шул мулла бабайҙа уҡып ятҡан ваҡытта яҙып алған нәмәләр таптым. Ләкин тағы элегерәк йылдарҙа яҙғылап килгән нәмәләрем бар ине, улар табылманы. Табылған ҡәҙәрен бер аҙын был урында күсерәм:

1906—1907 йылдарҙа яҙылған башы юҡ. Бында Мәржәниҙең үлем алдындағы хәлен һөйләгән.

...Үҙе ҡаҡырып, күҙҙәре эрендәр менән тулы булып ята ине. Шул көндә лә ғилем менән иштиғәлен ҡуйманы. Миңә «Мөстәфадел-әхбәр»ҙең икенсе жилденән бәғзе маузуғтарын тәкәммел итмәк эшен тапшырҙы. Семипалат һәм Сәғит ҡасабаһы хаҡында бәғзе мәғлүмәт ғиләүә итергә ки был йөрөүе. Бер йыл буйына йоҡлай алмаç булды. Бәғзе ваҡыт йоҡо килгән кеүек булыр ине, дәрес ваҡытында мендәр һорар һәм башын ҡуйып торор, ләкин йәнә йоҡлай алмаç ине.

Дәрес ваҡытында айыу тиреһенә ултыра, әммә мендәргә ултырмай торған ине. Иң хуп күргән мәжлесе мәҙрәсә мәжлесе ине. Нисә самауырҙар бөтәр ине, сәйҙе бик яратып эсәр ине. Шәкерттәр дамуллаға бәлеш ышырып ҡул менән ашамаҡҡа саҡырырҙар ине. Рәхәтләнеп ашар ине. Башынан салмалары, түбәтәйҙәре төшөп китер ине.

Үҙем бер ваҡыт тир ауырыуы менән ауырыным. Хәҙрәт һәр көн ике-өс мәртәбә, ишектән башын тығып: «Нихәл, мулла Һазар? Түҙә алмайһыңмы әллә?» — тип һорай торған ине. Бер аҙ төҙәлгәс, бүлмәгә таяғы менән таянған хәлдә кереп торҙо һәм: «Йә, мулла Назар, сәсте алайыҡ»,— тине. Уның сәсен күп ваҡыт мин ала инем, йылы һыу менән ебетә торған инем. Башы ҙур ине, тигеҙ ине. Маңлайының уң яғынан елкә тарафында бер сөйәлде бар ине. Бына шул ваҡытта ул күп һүҙҙәр һөйләшә ине[1].

1908 йыл хәтирә дәфтәре ҡағыҙҙарына яҙылған:

Мәржәни үҙе Бохара тәртибен яратмаһа ла, ни өсөн үҙе дәрестәрҙе Бохара өслүбендә алып барғандыр[2].

Иң әүәл әйтергә кәрәк, Мәржәниҙең ваҡытында булып,

---

[1] Мулла бабай ошо маузуғта бәғзе һүҙҙәрҙе 1912 йыл һөйләгән ине. Яҙған ҡағыҙҙарҙы таба алманым. *(Ә. В.)*

[2] Был хосуста ошо 1908 йәки 1909 йыл Ризаитдин хәҙрәткә бер нәмә яҙып ебәргән инем. Ул уны «Шура»ла баçтырҙы буғай *(Ә. В.)*

татар халкының, ғөмүмән әһле исламдың ул вакыттағы хәлен яҡшы белгән кеше, нисек тә ул вакыттағы әхүәл менән ашна булған кемсә быңдай сөәлде бирмәҫ.

Мәржәниҙең ваҡытында Ҡазан вә әтрафында ғилем эштәре лә нөсәллим[1] ине. Бөтөн мөхит лә нөсәллим менән ағыуланған ине. Был хәл ул ваҡытта халыҡтың мәғнәүи, рухи хәлдәрен тәрбиә итеүсе кемсәләр Наполеон ҡәҙәр эшлекле, Сыңғыҙ ҡәҙәр ҡеүәтле булһалар ҙа, үҙҙәренең мәҡсүттәренә бик аҙ ғына яҡынлаша алалар ине. Ваҕыраҡ идеалистар, прогрестар ул ваҡыт һәм Мәржәниҙән һуңыраҡ зоһур итмәнеләр. Халыҡтың мөхитенең ул ҡеүәтле ағымында, рухында иҙелеп тапалдылар ҙа бөттөләр. Фараз итегеҙ! Мәржәни үҙенең мәжмүғ пландарын вөжүдкә ҡуйып сбәрһен. Уға берәр шәкерт килер инеме? Ҡашҡарҙарҙа, Маҫҡаралараҙа, ғәйне Ҡазандың үҙендә лә нөсәллим[2] шәкерттәр Мәржәниҙең шәкерттәрен, лә нөсәллим булмағандары фарызда, уларҙы һәр бер мәжлестә ғалиба итеп[3] ырғытып ташлап халыҡ күҙенән төшөрөп, һиммәттәрен, күңелдәрен һүндереп торғандар. Инде шул ваҡытта Мәржәни шәкерттәренең тәфсир, хәдис, география, тарих уҡып ултырыуҙары мөтәсаувирмы[4]? Мәржәни күп ваҡыттарҙа үҙенең шәкерттәренә үҙенең ҡашында һөйөклө булған өслүбтә дәрес уҡытырға башланы. Ләкин шәкерттәре, уның ул юлы менән барғанда «наҙан ҡалырбыҙ тип (!)»зан итеп, эштәрен туҡтата. Ошоноң өсөн Мәржәни үҙенең дошманы булған нәмәләрҙе әхүәлгә, шәкерттәренең кәйефенә ҡарап уҡытып торорға һәм, шул эштәрҙе эшләп, шәкертте һыуындырмай икенсе бер юлға кертергә ижтиһат иткән, Мәржәни лә нөсәллимде уҡытып бөтөргәндең йәки шәкерттәрҙең был эштәр менән иштиғәлен ҡарап торғандың һуңында: «Ай, юҡ эш менән булышаһығыҙ, юҡҡа ваҡыт әрәм итәһегеҙ!» — тип әйтә торған булған. Һәм ошо эш шәкерттәргә күп тәьҫир иткән. Һәр һабаҡтың аҙағында булған бер мәсьәләне үткән һабаҡҡа ҡарағанда был әһәмиәтле тигән мәғәнәне аңлатып һөйләй торған булған. Ошондай рухи тәрбиә Мәржәниҙең шәкерттәренә күп тәьҫир иткән. Мәҙрәсәнең эсендәге шәкерттәренең үҙ ана телендә тәсниф эштәренә керешеүҙәре, рус мәктәптәренә төркөм-төркөм ихтирам мәғәнәһе бирелгән ҡоллоҡто ташлап истиҡлал рухы менән мөдәррис вә мөдирләренән ғөмүми бер ҡыям[5] менән үҙ хаҡтарын талап итеүселектәре Мәржәни

[1] лә нөсәллим — яраҡһыҙлыҡ
[2] лә нөсәллим — бында: танылмаған
[3] ғалиба итеп — еңеп
[4] мөтәсаувирмы — күҙ алдына килтерерлекме?
[5] ҡыям — баш күтәреү

шәкерттәренең ни дәрәжәлә остазларының тәрбиәһенә муаффиҡ сыҡҡандарын асыҡ күрһәтәләр. Мәржәни мәҙрәсәһе эсендә төрксә география, тарих вә ғәйре ғилемдәр вә ғолүм исламиә менән ысындан истиғмал итеүселәр күп булған. Мәҙрәсәлә ғомуми ҡыям ваҡытында илле-алтмыш сана извозчиктар мәҙрәсә төбөнә килеп туҡтағас, шәкерттәр ашығыслыҡ менән нәмәләрен мәҙрәсәнән сығара һәм саналарға тейәй башлағандар. Шул ваҡыт бәғзе берҙәренең көррән әрыз һүрәттәре (глобустары) лампалары менән бергә ҡар башына ултыртылып торолған икән. Ғалимйән хәҙрәт һәм кән буйы мәҙрәсәләренән был шәкерттәрҙе оҙата килеүселәр: «Ана, ерегеҙ»,— тип мыҫҡыл итеп әйтә торған булғандар. Был эштәр ул мәҙрәсә шәкерттәренең бер-береһенә ни ҡәҙәр мәсафа[1] менән йыраҡ булыуҙарын күрһәтмәйме ни?

Ошо хәлдәрҙе мөләхәзә иткәндең һуңында әҙәм улы юғарылағы сөәлде бирергә лә оялыр. Йәки нисек тә икенсе бер ғибәрәгә[2] әйләндереп: «Ни өсөн Мәржәни үҙенең бындай тәрбиәһен сәйәсәттәр аҫтында ҡаплап йөрөттө, ни өсөн асыҡтан-асыҡҡа эшләмәне?» — тип әйтергә ҡалһа ҡалыр.

Быларҙан башҡа яҙған бәғзе нәмәләрем булһа ла, майҙанға сығарырлыҡ ҡәҙәр әһәмиәттәре булмағанлыҡтан ҡалдырам. Дөрөҫ, был килтергәндәремдең һуңғы китғаһы хаҡында ла бөгөн икенсе төрлө уйларға мөмкин, сөнки Мәржәни үҙе Бохара тәрбиәһен генә күргән кеше булғанлыҡтан ул тәрбиәһенең ноҡсанатын[3] белһә лә, уларҙы Бохара биргән мәғлүмәт даирәһенән артыҡ китеп ислах итә алмаған. Ул түгел әле, унан күп һуң килгән Ғәбделәр ҙә шулай инеләр. Ләкин мин әле был ерҙә был мәсьәләләрҙе мөхаккимә итергә[4] теләмәйем. Мин Мәржәниҙең миңә кескенәлегемдә ниндәй тәьҫире булғанын һөйләйем. Бына әле яңы ғына мин бер убежденный семинарист инем. Мин һаман шул муллалар һәм семинариялағы мөғәллимдәр персоналы араһында ҡайнап, муллалар донъяһынан башҡа ғаләмде белмәй, уның мулла бабайҙары, Шафиғ ахундары, Мәржәниҙәре менән генә һаташып йөрөй инем. Шуны хәтергә алам, шунда Мәржәниҙең ҡодсиәт[5] менән хакимлыҡ иткәнен әйтәм. Бик хәтеремдә, бер ваҡыт мин Шафиғ ахунды үҙебеҙгә ҡунаҡҡа алырға барҙым, ҡыш көнө ине. Ахун хәҙрәткә ихтирам бик ҙур булғанға ул кешене ҡыҫырыҡламаҫ өсөн сананың ситенә генә ултырып барҙым. Ул миңә

---

[1] мәсафа — ара
[2] ғибәрәгә — әйтемгә
[3] ноҡсанатын — етешһеҙлеген
[4] мөхаккимә итергә — тикшерергә
[5] ҡодсиәт — изгелек

күп һүҙҙәр һөйләне. Ул Мәржәни менән яҙышҡан һәм китаптары сығыу менән Мәржәни был ахун хәҙрәткә ебәреп торған. Ахун хәҙрәт шуларҙы һөйләй-һөйләй миңә әйтә ине: «Улым, инде шул Мәржәни кеүек булһаң ине». Мин дә артынан уҡ эсемдән: «Я, рабби, Мәржәни кеүек булһам ине»,— тип хоҙайҙан теләй-теләй барҙым. Ул заман фәҡәт руханиҙарҙан ғибәрәт булған татар аңлы зыялый ғалим синыфы өсөн иҫке авторитеттарға иғтибар итмәүҙә, белекте тарихи нигеҙгә ҡороп һәм шуға ҡарап мосолмандарҙың дини вә мәҙәни хаяттағы барыштарынан риза булмауҙа, Бохараны, иҫке схоластиканы һүгеү кеүек эштәрҙә Мәржәни һәм уның тотҡан юлы бер недосягаемый образец ине. Мин үҙемдә бер миҫал итеп килтерҙем. Иҙел буйы татарҙары араһында быйдай миҫалдар күп ине. Мәржәниҙең бөтөн беҙҙең хаят, ижтимағи вә динебеҙҙәге ҙур фағилиәте шунан ғибәрәттер.

# ХӘЛФИНДӘР

(Сәғит. Исхаҡ. Ибраһим)

## I

Уҡыусылар араһында был «Хәлфиндәр» һүҙенән беҙҙең был урында һөйләргә теләгән заттарҙы белеүселәр, зан итәмен, күп булмаҫ. Беҙҙә Хәлфин исеме менән аталған күп кешеләр булыр ҙа, ихтимал ки, уҡыусылар был исемдән үҙҙәре белгән төрлө Хәлфиндәрҙе уйларға керешерҙәр. Мәсьәләнең ҡараңғы был һүрәттә барыуы матлуб булмауы өсөн[1], беҙ маузуғлы тәфсилгә кереүҙән элек беҙҙең «Хәлфиндәр»ебеҙҙең кемдәр икәнен ҡыҫҡа ғына әйтеп китергә, шулай итеп мәҡәләгә ҡыҫҡа бер мәдхәл яһарға тура килде.

Беҙ был урында бөгөнгө көндә үҙебеҙҙең арабыҙҙа булған «Хәлфиндәр» йә уларҙың аталары булған «Х» хаҡында һөйләмәйбеҙ. Бәлки беҙҙең «Х»-ребеҙ бөтөнләй башҡа затлылыр. Беҙҙең «Х»-ребеҙ бынан йөҙ вә унан артыҡ йылдар элек беҙҙең ҡазанлылар араһында ғына түгел, бәлки бөтә Россияның ғилем, фән ғилемендә мөһим урын шөғөлләндергән. Ләкин беҙҙең өҫтөбөҙҙө ҡаплап алған ҡараңғылыҡ аҫтында күмелеп онотолоп ҡалған «тарихи Хәлфиндәр»ҙер. Был Хәлфиндәр олуғ заттар булған. Ләкин нимә булғандыр, беҙҙең был олуғ заттар беҙҙең олуғ вә кесе кешеләребеҙҙән күҙгә-колаҡҡа эләгеп ҡалғандарын йыйырға башлаған 2-се жилд «Мөстәфадел-әхбәр»ҙә лә, мосолмандарҙың һәр йәһәттән мәркәздәре булған духовное собрание янында тороп, уға ниһайә күп фиҙәҡәрҙәр итеп яҙылған «Аҫар»ҙа ла зикер ителмәгән.

Бик ҡыҙғаныс хәл! Ни булғандыр. Россияның төрлө тарафында тороп «Аҫар»ға иштирәк итеүсе заттар, был кемсәләр хаҡында бик аҙ ғына булһа ла һүҙ табып, Ризаитдин хәҙрәткә бер хәбәр итә алмаған[2]. Беҙҙең бер нисә быуаттарҙан бире шәреҡ халыҡтары, төрк халыҡтары эсен-

---

[1] матлуб булмауы өсөн — кәрәкмәгәнлектән

[2] Сөнки, хәбәр иткән булһалар, Ризаитдин хәҙрәт мәжмуғаһында улар хаҡында әллә ҡасан яҙған булыр ине. Тарихты тәртип менән яҙып килгән «Аҫар»ға инде Хәлфиндәрҙән күпкә һуң йәшәгән кешеләр яҙылды.

дә үҙенең мәҙәниәте, истиғдаты[1] менән донъяға мәшһүр булып килгән халҡыбыҙҙың (ҡазанлыларҙың) эсендә кәрәк сәйәсәт, кәрәк ғилем, һөнәр, байлыҡ йәһәтенән бик мөһим урындарҙы шөғөлләндереп килгән заттар үҙҙәренең барлыҡ шөһрәттәрен үҙҙәре менән бергә ҡәбергә алып киткән дә булған. Сауҙагәр, фәүҡелғадә мәшғүл үҙенең бөгөнөн вә киләсәген генә ҡайғырта, мәҙәниәтте бөтөнләй онота торған халыҡтың (ҡазанлыларҙың) эсендә үҙенең һис бер эҙен ҡалдырмаған.

Аҙмы ни? Аҙмы ни?..

Беҙ был урында һөйләргә теләгән Хәлфиндәр аталы-уллы өс кеше: Сәғит, Исхаҡ, Ибраһим. Йәғни Ибраһим Исхаҡ улы, Исхаҡ Сәғит улы.

Сәғит ун һигеҙенсе быуаттың аҙағында Екатерина (Әбей батша) ваҡытында ғилми вә милке ҙур хеҙмәттәрҙә булған зат. Ул Екатерина тарафынан халыҡтарҙың хәжәттәренә ҡанун төҙөү өсөн йыйылған мөстәснә[2] депутаттарынан. Ул 1769 йылдан башлап 1780 йылға ҡәҙәр Ҡазандың беренсе гимназияһында татар теле мөғәллиме булған.

Икенсеһе Исхаҡ 1780—1800 йылдарҙа шул уҡ гимназияла атаһы кеүек төрк теле мөғәллиме. Һәм Екатерина ҡашында мөғтәбәр кеше, губернатор канцелярияһында секретарь булған. Өсөнсөләре, Ибраһим иһә аталарына ҡарағанда тағы мөһим урындарҙы шөғөлләндергән. Ул башта гимназияла төрки теле мөғәллиме, һуңынан дарелфәнүндә шәреҡ әҙәбиәтенең лекторы, тағы бынан һуң адъюнкт, йәғни профессор нәби дәрәжәһендә вә мосолман матбуғатында назир (цензор) һәм коллежский асессор дәрәжәһендә булған. Ҡазан дарелфәнүнендә мөһим урынды шөғөлләндергән. Уларҙың һәр береһе төрки әҙәбиәтенең һәм рус әҙәбиәтендә төрки теленең беренсе фағилдәренән[3] булған. Төрки теленең нәхеүен һәм лөғәт китабын яҙғандар. Төрки һәм бәғзе мөһим әҫәрҙәр һәм хрестоматия (шәкерттәр өсөн ҡираат китабы) тәэлиф иткән. Френ кеүек Европа вә Рәсияның ғилем тарихында иң ҙур урын тотҡан профессор, академикка үҙ телебеҙҙе өйрәткән вә беҙҙең ижтимағи вә ғаилә хәлебеҙ, ғилми дәрәжәбеҙ хаҡында әҫәр вөжүдкә килтереп ҡалдырған. Беҙ был урында ҡулыбыҙға төшкән әйберҙәргә ҡарап был заттарҙың тәржемәи хәлдәренә, ватан вә дәүләтебеҙҙең тәрәҡҡиһе бабында күрһәткән хеҙмәттәренә ғаид бәғзе нәмәләр яҙырға керешәбеҙ.

Беҙ мәҡәләне ошо вәзифәдә яҙабыҙ: 1) Россияла шәреҡ

[1] **истиғдаты** — һәләте
[2] **мөстәснә** — айырылып торған
[3] **фағилдәренән** — эшләүселәренән

телдәре уҡытылыу һәм Хәлфиндәр. 2) Сәғит Хәлфин һәм уның ҡылған эштәре. 3) Исхаҡ Хәлфин. 4) Ибраһим вә уның хеҙмәттәре. 5) Ибраһим Хәлфин гимназияла. 6) Университетта. 7) Цензор. 8) Ибраһимдың яҙған әҫәрҙәре. 9) Ибраһимдың шәхсиәте, милләт, тел вә әҙәбиәт хаҡында фекерҙәре.

Беҙ был мәҡәләне яҙған ваҡытта ошо әҫәрҙәрҙән файҙаландыҡ:

1) Историческая записка о I Казанской гимназии XVIII столетия, жилд I. Владимировтың тәэлифе. 1869 йыл Ҡазанда баҫылған.

2) Профессор Н. Буличтың «Из первых лет Казанского университета» тигән әҫәренең беренсе жилде. 1887 йыл Ҡазанда нәшер ителгән.

3) Профессор Буличтың «Очерк истории языкознания в России»» тигән әҫәре, беренсе жилд, 416—440-сы биттәр. (Был китап «Записки историко-филологического факультета С.-Петербургского университета» мәжмуғаһының 1904 йылғы XXV жилден тәшкил итә.)

4) «Труды третьего международного съезда ориенталистов в СПб в 1869 году» мәжмуғаһының беренсе жилдендә дәрж ителгән «Сведения об официальном преподавании восточных языков в России» тигән әҫәр. 1879—80 йылдарҙа Петербургта матбуғ.

5) Ҡазан университетының архивы.

6) Ҡазандың беренсе гимназияһының архивы.

7) Артемовтың «Казанская гимназия в XVIII веке» исеме менән «Журнал министерства народного просвещения» журналының 1874 йылда дәрж ителгән рисәләһе.

8) Профессор Ковалевскийҙың шул уҡ «ЖМНП» мәжмуғаһының 1843 йылғы 32-се жилдендә III ҡыҫымында «Обозрение хода и успехов преподавания восточных языков в Казанском университете» исеме менән дәрж ителгән рисәләһе.

9) Профессор Загоскиндың «Биографический словарь Профессоров Казанского университета» исеме менән 1904 йылда нәшер ителгән мәжмуғаһы; йәнә Ҡазан дарелфәнүненең башҡа мәжмуғалары.

10) Быларҙан башҡа йәнә Шпелевский, Заренский, Ильминский, Фуйкин, Савельев, Бартольд, Аристов, Потанин вә ғәйре ғалимдарҙың әҫәрҙәрендә вә археология йәмғиәттәренең мәжмуғаларында бәғзе бер юл өҫтөнән һөйләнеп киткән һүҙҙәр.

Хәлфиндәр Рус әҙәбиәтендә бик мәғруф. Уларҙың тәржемәләре ҡамустарҙа (мәҫәлән, Брокгаузда) яҙылған. Улар һаман телдә йөрөйҙәр. Һәм һуңғыһының һүҙҙәре күп

вакыт дәлил урынына килтерелә. Хәлфиндәрҙең тәржемәһен тәфтиш итәсәк кемсәләргә ыңғай булһын өсөн мәҡәләнең ахырына дарелфәнүн вә гимназияның архивтарындағы материалдарҙың йыл вә номерҙарын дәрж итербеҙ.

## II

## Россияла шәреҡ телдәре уҡытылыу һәм Хәлфиндәр

Россияла шәреҡ вә мәмләкәтендәге инородец, хосусан төрк ҡәүемдәренең телдәрен өйрәнеү Петр Великий вә уның хәлифтәре ваҡытында башлана. Петрҙың хәлифтәре ваҡытында бигерәк тә 18-се быуаттың һуңғы йылдарында татар телдәренә ғаид яҙылған (ләкин тәбағ ителмәгән[1]) байтаҡ әҫәрҙәр бар. Европа һәм Азия Россияһындағы был ҡәүемдәрҙең телдәрен өйрәнеү ул ваҡыт ике мәҡсүд менән ине. Береһе миссионерлыҡ. Икенсеһе мәмләкәт идараһы (администрация эштәре). Ошо мәҡсүдтәр менән беҙҙең хөкүмәт инородецтарҙы белә торған руханиҙар (миссионерҙар) һәм шул халыҡтарҙың телдәрен белә торған тәржеман-талмачтар әҙерләргә кереште. В. Н. Татищев Оренбург тарафтарын идара иткән ваҡыттарында 18-се быуаттың 40-сы йылдарында Самарала «татар-ҡалмыҡ мәктәбе» асты һәм уның янында рус-татар-ҡалмыҡ словары тәэлиф ителде[2]. 1740 йыл ҡатын батшаһ Анна Иоанновна Святейший синодҡа инородецтарға христиан динен өйрәтер, уларҙы христиан диненә килтерер өсөн Ҡазанда 30 поп, Архангелдә 10 поп әҙерләргә ҡушып указ бирҙе һәм уларға жалование тәғәйен итте. Русияла инородец һәм ғөмүмән шәреҡ телдәрен ныҡлап уҡытыу Екатерина II (Әбей батша) ваҡытында башлана. Инде уның ваҡытында был телдәрҙе өйрәнеү миссионерлыҡ өсөн генә түгел, тағы ла ғали мәҡсүдтәр өсөн була[3]. Екатерина ваҡытында Россияла (Ҡазанда) инородец һәм шәреҡ телдәре ныҡлап уҡытыла башлағанды һөйләгән урында Ҡазан профессоры Н. Н. Булич ошо һүҙҙәрҙе әйтә: «Россияны шәреҡ телдәрен өйрәнергә үҙенең тарихы, географик хәлдәре мәжбүр итте. Ҡазан үҙенең шәреҡлектә тоткан урыны менән Россияла шәреҡ телдәре өйрәнеү өсөн бер мәркәз итеп тәғә-

---

[1] тәбағ ителмәгән — баҫтырылмаған

[2] Был хаҡта С. Буличтың мәҙкүр «О. И. Я. в России» тигән әҫәрендә (жилд I, 405-се бит) һәм Пекарскийҙың «Жизнь и литературные переписки П. И. Рычкова». СПб. 1867 ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[3] С. Булич. «История языкознания в России», ж. I, 416—417-се биттәр. *(Ә. В.)*

йен ителгән ине. Элекке ҡотло татар батшалығының пайтәхете булған был ҡала был ваҡытҡа ҡәҙәр кәрәк төрлө иҫке памятниктары, кәрәк күп үк ғадәд тәшкил иткән халҡы һәм үҙҙәренең кейемдәре, чәррәләре[1] менән, башҡаларҙан тамам асыҡ айырылып торған холоҡтары менән үҙенең иҫке әҫәрҙәрен, төҫөн һаҡлап килә. Татар биҫтәләрендә тамам шәреҡ елдәре иҫә, мәсет манараларында аҙандар әйтелә, мәҙрәсәләрендә шәреҡ ғилеме уҡыла. Һәм ул мәҙрәсәләрҙән шәреҡ ғәҙәтенсә оҙаҡ йылдар уҡып муллалар сығып тора. Ҡаланың бындай шәрҡи характеры бында шәреҡ телдәренең хәжәт булыуы вә ҡаланың шәреҡ телдәрен өйрәнеүгә иң ыңғай урын булыуы бик иртә, хатта Ҡазанда 1-се гимназияның тәэсисе[2] (гимназия Елизаветаның әмере буйынса 1708 йыл асылған) ваҡытта уҡ иҡрар ителгән ине. Гимназияның беренсе директоры М. М. Веревкин (унын янында мөхәррир Державин уҡыны) 1709 йыл императрицаға: «Был ҡала, татарҙарҙың милли телдәренең хөкөм иткән урыны, гимназия хозурында татар теле уҡытылыу хосусында бер-бер бойороҡ булмаҫмы икән?»[3] — тип яҙған ине. Веревкиндың һүҙе ваҡытында еренә еткерелмәһә лә, һуңынан унын һүҙенең хаҡлығы сабит булды[4], һәм Ҡазан Россияла шәреҡ телдәрен өйрәнеүҙең мәркәзе булды.

Шәреҡ телдәрен Россияла фәнни һүрәттә өйрәнеү Екатерина II ваҡытында башланды. Ул батша-мәликә үҙенең Россия буйынса сәйәхәте ваҡытында һәм депутаттарҙы саҡырыр алдынан үҙенең өлөшөнә ни ҡәҙәр вә ни ҡәҙәр күп төрлө халыҡтарҙы идара итергә төшкәнен үҙ күҙе менән күрҙе һәм шул уҡ ваҡытта ихтыяждарын һөйләргә килгән депутаттарҙың һүҙҙәре һәм был аҡыллы, инсаниәтле батшаның үҙ халҡына һәйбәт идара итеү өсөн иткән ниәте был телдәрҙе өйрәнеү хаҡында тейешле тәдбирҙәрҙе ҡылырға саҡырҙы. Ул шәрҡи виләйәттәрендәге мәктәптәргә шәреҡ телдәре һабаҡтары индерҙе һәм оҫта, белекле кешеләр, тәржемандар әҙерләргә кереште. Екатеринаның был эше Россияла фәндең терәгендә тәбиғи юл ине. Бында башҡа ғәмәли һүрәттәренән тыш тел өйрәнеү эше ғилми фән һүрәтенә әйләнергә тейешле ине. Мәҫәлән, шул Екатеринаның бик яҡындан белгән Англияның вә унда фән вә ғилеменең тәрәҡҡи итеүендә шәреҡте өйрәнеү бик мөһим роль уйнаны. Мәшһүр инглиз ғалимы Сэр Вильям Джанстың

---

[1] чәррәләре — йөҙҙәре
[2] тәэсисе — нигеҙ һалыныуы
[3] Владимиров Жөзьә I, 39-сы бит. *(Ә. В.)*
[4] Булич. Жилд I, 186-сы бит. Ковалевский. 8-се бит. *(Ә. В.)*

әйткәне кеүек, инглиздәр кеүек ғәмәли (практичный) халыҡта 18, 19-сы быуаттарҙа руханиҙарҙың шундай мөһим урынға менеүҙәренең иң мөһим вә ҡотло сәбәбе (сильнейший стимул) мотлаҡан шәреҡте өйрәнеү ине. Шәреҡте тәфтиш итеү уларға ҙур фәнни тәхҡиҡәткә[1] юл асты. Шуның кеүек үк, Россияла руханиҙарҙың ғилемдә вә фәндә төплө юлға килеүе үҙҙәренең аҡыллы батшаһы Екатерина ваҡытында тәржемандарға ихтыяж исеме менән башланды, һәм ул төрлө мәктәптәрҙә шәреҡ телдәре өйрәнгән беренсе кластарын асты[2].

Ҡазан гимназияһында татарса уҡытыу хосусында Екатерина Ҡазан губернаторы князь Квашнин-Самаринға ошо рәүешсә указ ебәрҙе: «...Ҡазан гимназияһы хосусында теләүселәргә татар теле уҡытыу өсөн татарса синыф асылһын. Һәм уға иҫке вә яңы татар биҫтәләренең депутаты һәм шундағы адмиралтейский контораның талмачы Сәғит Хәлфин тәғәйен ителһен. Ҡайһы кемсә губернатор янындағы тәржеман дәрәжәһендә булһа, уға шундай уҡ вазифа бирелә. Ул үҙе һәм уның балалары биргеләрҙән мәғәф[3] булырҙар. Тағы йәнә ул үҙенә тапшырылған был ике хеҙмәттә ижтиһад итһен һәм балалары ла киләсәктә хеҙмәткә ярарлыҡ булырға әҙерләнеү өсөн яҡшы өмөтлө булһындар. Был указ буйынса гимназияла татар теле уҡытыу Сәғит Хәлфин тарафынан 1769 йыл директор фон Капиц хозурында 5 октябрҙә башланды. Татар теле шәкерттәрҙән уҡырға теләгәндәренең һәммәһенә лә уҡытылды. Был класҡа кергән шәкерттәрҙе мөтәржимлек (тәржемәсе) сигенә еткәнгә ҡәҙәр мәҙкүр класта дауам итергә мәжбүр иттеләр. Бында уҡыу тик латинсаны бик яҡшы белеү менән айырылған шәкерттәргә генә ләзим түгел ине. Сөнки улар Мәскәү дарелфәнүненә ебәреләләр ине. Башта (гимназияның 1768 йылғы 17-се номерлы положениеһы буйынса) татарса класс, татар телендә тәржемандар етештерер өсөн генә булыуы өсөн, гимназияла мөһим урындар тотмаған һәм был класта 6—8-ҙән артыҡ кеше ҡуймаҫҡа ҡарар иткәндәр. Сөнки «файҙалы нәмәләр өсөн хәжәт булған ваҡытты әрәм итергә» мәғҡүл күрелмәгән ине. Класс асылып эш дауам итә башлағас, был туралағы план бөтөнләй икенсе вазиғиәтте[4] алды. Кластың бик аҙ ваҡытта көндән-көн

---

[1] тәхҡиҡәткә — дөрөҫләккә

[2] Был һүҙҙәр профессор Н. Н. Буличтың «Из первых лет Казан. ун-та», жилд I. 176—180-се биттәрҙән алынды, йәғни «Комиссия о сочинении проекта нового уложения»ның депутаттары. Н. Булич, 178-се бит. *(Ә. В.)*

[3] биргеләрҙән мәғәф — һалымдарҙан азат

[4] вазиғиәт — төҫ

ҙур файҙалары күренә башланы. Ул үҙенең уставын тамам үҙгәртте. Ул үҙенең тәбиғи (природный) учителдәре араһында күп сәмәрәләрен[1] күрһәтте. Башта уҡытырға әсбәп дәрес китаптарының юҡлығы уңайһыҙлыҡ килтергән. Эшлекле уҡытыусылар Хәлфиндәр дәрес китаптары төҙөп баҫтырҙы. Һәм шулай итеп уҡыу әсбәптәре күбәйҙе. Англия, Франция, Германия ҡалаларынан китаптар килтерелде[2].

Ҡазандағы һүрәт менән Әстрхан, Ырымбур, Омск, Тобол ҡалаларында ла шундай уҡ кластар асылған ине[3]. Хәлфиндәрҙең әҫәрҙәре уларҙа ла дәрес китабы булды[4]. 1800 йыл Ҡазан университеты асылды. Беренсе гимназия нигеҙендә ойошторолған был университеттың үҙендә лә гимназияла уҡытыла торған татар телен вә уға эйәреп йөрөгән ғәрәп, фарсы телдәрен (уларҙы Хәлфиндәр татар теле менән бергә аҙлап өйрәтә ине) ҙур һиммәт менән уҡытырға керешкәндәр[5]. Һәм был шәреҡ телдәрен уҡытыу өсөн Ростоктан профессор Христиан Мартин Френ килтерелгән. Ул кеше инде шул ваҡытҡа ҡәҙәр сығарылған әҫәрҙәре менән Германияның мәшһүр ориенталисы була алған ине[6].

## Тәнбиһ[7]

Беҙ ошо урында тағы дауам итеп Россияла шәреҡ телдәре уҡытылыуының тарихы һәм ғөмүмән уның Россияның тәрәҡҡиһе бабында әһәмиәте һәм шул эштә Хәлфиндәр вә уларҙың хеҙмәттәре ниндәй урынды тотоуы хаҡында төрлө әҫәрҙәрҙән истифада менән байтаҡ һүҙҙәр һөйләнгән һәм шул мәсьәләгә ғаид мөстәшәрҡ Лазаревтың нотоғон дәрж итеп[8] Россияла шәреҡ телдәрен өйрәнеү һәм Хәлфиндәр бабын тамам иткән инек һәм уның һуңында Сәғит Хәлфин вә уның хеҙмәттәре бәйәненә керешеп ҡулдан килгәнсе йыйылған әйберҙәргә ҡарап Сәғит Хәлфиндең тәр-

---

[1] сәмәрәләрен — емештәрен

[2] Владимиров.

[3] С. Булич. 417-се бит. *(Ә. В.)*

[4] Владимиров. *(Ә. В.)*

[5] Ивановтың 1842 йыл Ҡазанда нәшер ителгән «Татарса грамматика»һының мөҡәддәмәһен ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[6] Френ вә уның хеҙмәттәре хаҡында «Труды Вост. отд. Имп. Рус. Арх. Общ-ва» мәжмуғаһының 2-се жилдендә Савельевтың Френ хаҡында яҙған мәҡәләһен ҡарағыҙ. Унда Хәлфиндәр хаҡында зикер бар. *(Ә. В.)*

[7] тәнбиһ — иҫкәрмә

[8] нотоғон дәрж итеп — һүҙҙәрен эсенә алып

жемәи хәлен, уның дәрес йәдуәлен[1] һәм шул ваҡыттағы Пугачев хәдисәһе мәсьәләһендәге эшен, был мәсьәләне хәл итеү тураһында Семберҙә инғиҡад иткән[2] комиссияға саҡырылып, унда мәшһүр ғалим Рычков менән танышып уға мәғрүф тарихы хаҡында ярҙам итеүе тураһында яҙған инек. Сөнки минең йыйған әйберҙәремдең бөгөн янымда сәуады[3] ҡалмаған һәм ул күп мәэхәҙҙәрҙән йыйылған материалдарҙың барыһы ла хәҙер беренсе гимназия һәм дарелфәнүн архивтарында инде. Әксәрйә[4] исемдәрен оноткан китаптар араһында ҡалды. Инде уларҙы аҡтарып йөрөргә төрлө маниғтар ҙа[5] бар һәм оҙон ваҡыттар сарыф итергә инде мөмкинселек юҡ. Шулай итеп хеҙмәтем заиғ булды[6]. Уның Ҡазанға мөнәсәбәте булғаны өсөн үткән яҙ көнө Ҡазан газетаһы «Йондоҙ»ға кертеүҙе мәғҡүл күреп мөхәррире Һаҙый әфәндегә биргән инем. Иң тәүҙә бер нисә сәхифәһен «Йондоҙ»ға индерҙе (номер 871). Шунан туҡталып ҡалды. Бынан һуң йәнә баҫылыуына үтенеүемә Һаҙый әфәнде уның уртаһынан ун сәхифәһен юғалтыуын һөйләне. Минең хеҙмәтемдең заиғ булыуы мине мөҡәддир итте[7]. Инде уҡыусылар араһында миңә ошо ҡайғыма иштирәк итеп мәҡәләмдең уртаһынан өҙөк булыуы өсөн мине ғәфү итеүселәр булыр, тип уйлайым. Инде мәҡәләне Сәғит Хәлфиндең эшләгән хеҙмәттәре тип дауам итәбеҙ.

## III

## Сәғит Хәлфиндең эшләгән хеҙмәттәре

Сәғиттең әҫәрҙәре. 18-се быуатта рус халҡы эсендә сит ҡәүемдең (һәм был йөмләнән беҙҙең) телдәре менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа бар ине, ә эш эшләрҙәй кеше булмаған. Шубер кеүек сит мәмләкәт ғалимдары бәғзе бер бик мөһим була алмаған әҫәрҙәр яҙған булһалар ҙа, быларҙың һәммәһе лә яҙма көйө ҡалған[8]. Был хаҡта элек үк яҡшы һәм төплө әҫәр яҙыусы Сәғит Хәлфин[9] вә иң әүәл Россияла татарсаға ғаид баҫылған әҫәр уның әҫәре[10]. Дәрес өсөн хәжәт булғанға күрә Сәғит бәғзе дәрес китаптары тәэлиф итте. Уларҙын бәғзеләре баҫылды, бәғзеләре яҙма килеш ҡалды[11].

---

[1] йәдуәлен — расписаниеһын
[2] инғиҡад иткән — урынлашҡан
[3] сәуады — ҡараға яҙылған нөсхәһе
[4] әксәрйә — күбеһе
[5] маниғтар ҙа — ҡаршылыҡтар ҙа
[6] заиғ булды — юғалды
[7] мөҡәддир итте — ҡайғыға һалды
[8, 9, 10, 11] С. Булич. «И. я. в Р.», 419—420-се биттәр. *(Ә. В.)*

Россияла татарса ғаид иң беренсе әҫәр булып баҫылған «Азбука татарского языка с обстоятельным описанием букв и складов, сочиненная казанских гимназий учителем Сагитом Халфиным и татарских в Казани слобод муллами, в оных гимназиях рассмотренная и одобренная» исемендәге әҫәре. Был китап Мәскәү дарелфәнүненең башлығы Иван Милицындың әмере буйынса Мәскәү дарелфәнүненең матбағаһында баҫылған. Баҫылып тамам булғас та (1774 йыл 4 сентябрҙә) Ҡазан гимназияһына йөҙ нөсхә ебәрелгән. С. Буличтың әйтеүенсә, китаптың ҙурлығы 80 ҡәүелдә 52 битлек булып, нөсхәһе Петербург дарелфәнүненең китапханаһында бар икән[1]. Беҙ был китаптың нөсхәһен дарелфәнүн, Академия, гимназия китапханаларында таба алманыҡ. Восточный факультет күсерелгән ваҡытта бындай китаптарҙың Петербургка күсерелгәнен юғарыла әйткән инек.

Сәғит Хәлфиндең исемен мәңгегә ҡалдырған иң мөһим вә ҙур хеҙмәте «Русса-татарса лөғәт» исеме менән яҙған әҫәре. Был олуғ китаптың Петербургтағы публичный император китапханаһында, Азия музейханаһында[1] һәм Ҡазан дарелфәнүнендә нөсхәләре бар. Һәммәһе лә яҙма килеш. Сөнки китап нисек тә табәғ ителмәгән. Сәғиттең был әҫәрен гимназияның мөдире Ай. Ф. Людман кенәз Потемкинға ебәргән (1780 йыл). Был эш кенәз Потемкин һәм Екатерина өсөн бик ҡиммәтле әҫәр булып табылған. Сөнки Екатерина ул ваҡыт инородец телдәренә ғаид мәшһүр словарын[2] (Сравнительный словарь инородческих племен) тәэлиф иттерә һәм төрлө тарафтағы инородец телдәрен белеүселәргә был китаптарҙы нисек яҙыу хаҡында төҙөлгән пландарҙы ебәрә ине. Татар теле Ҡазан архиепископы Антон менән Нижегород епископы мәшһүр ғалим Дамаскинға (был кеше Геттинген дарелфәнүнен бөтөргән)[3] тапшырылған ине. Архиепископ Антон гимназиянан бер шәкерт һәм Иманғол Чюриков исемле бер татар һалдат алып эшләп ҡараһа ла, олуғ эш башҡара алмаған. Һәм ғәйне ваҡытта Потемкин Сәғит Хәлфиндең грамматикаһын һәм словарын алған. Кенәз Потемкинға ебәрелгән вә уның китапханаһы Ҡазан дарелфәнүненә килтерелгән ваҡытта Ҡазан дарелфәнүне китапханаһына төшкән вә бөгөн унда һаҡланған нөсхәһендә мөәлифтең исеме яҙылмаған. Бәлки шул гимназия хозурында тәэлиф ителде генә тигән. Ошо сә-

---

[1] Б у л и ч С. 427-се бит. *(Ә. В.)*

[2] Был словарь хаҡында Буличтың мәҙкүр «И. я. в Р.»ында айырым бабты ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[3] Б у л и ч С. *(Ә. В.)*

бәптән бәғзе кешеләр «был словарҙы шөбһәһеҙ Сәғит Хәлфин тәәлиф иткәндер» тип кенә әйткән. С. Буличтың әйтеүенсә (426-сы бит), словарҙың Азия музейханаһындағы нөсхәһендә «Мөәлифе Сәғит Хәлфин» тигән һүҙ бар икән. Ошоноң өсөн словарҙың Сәғит Хәлфин тәәлиф булыуында шөбһә ҡалманы. Словарҙың Ҡазан дарелфәнүнендәге нөсхәһе олуғ китапхананың «Яҙма әҫәрҙәр һәм һирәк китаптар ҡыҫымы»нда 1582 $^{1}/_{50}$ номер аҫтында һаҡлана. Китаптың беренсе сәхифәһенә ошо рәүештә яҙылған: Татарский словарь в пользу обучающихся при Казанских гимназиях юношеств татарскому языку, сочиненный при оных же гимназиях в 1785 году[1].

Китап сәхтиән[2] менән матурланып ике ҡалын жилдтә тышланған вә әғлә[3] ҡағыҙҙа яҙылған. Оҙонлоғо $7^{5}/_{7}$ дюйм, киңлеге $7^{1}/_{8}$ дюйм (С. Буличтың әйтеүенсә, был словарға 25˙меңдән артыҡ һүҙ кергән). Беренсе жилд 653 бит, икенсе жилд 876 бит. Китап мәәл иғтибары менән өскә бүленә: 15 бит китапты кенәз Потемкинға бағышлау һәм мөҡәддәмә. 20 ҡыҫым, 43 бит — Краткая грамматика для чтения и правописания на татарском языке. Был ҡыҫымда башта хәрефтәрҙе вә уларҙың нисә истиғмал[4] булғанын вә мөхарәжиләрен[5] һөйләй. 11—32-се биттәр ғәрәп яҙыуын нисек уҡырға кәрәк икәнен күрһәтә. Һуңғы замандағы ҡираат ғәрәбиәләр өслүбендә[6] хәрефтәрҙе уҡырға өйрәтеү, һуңғы ысул — мәддиә өслүбе, йәғни хәрефтәрҙе хәрфе мәдтәргә ҡушып, *А, ба, та, ҫа, ау, бу, ту, ҫу, ай, би, ти, ҫи* тариҡынса[7] яҙылған. 34-се бит сүрәи фатиха һәм сүрәи Бәҡара башы, 43—45-се биттәрҙә сүрәи Ясин тамам. Өсөнсө ҡыҫым словарь-лөғәт. Бында һүҙҙәр рус хөруфаты тәртибе менән яҙылған һәм сәхифәләр ошо рәүешсә өскә бүленгән:

| | | |
|---|---|---|
| татарса хөруфат менән татарса һүҙҙәр | рус хөруфаты менән татарса һүҙҙәр | рус хөруфаты менән рус һүҙҙәре |

Китап русса уҡыу тәртибе менән һулдан уңға табан уҡыла. Яҙыуы (Сәғит Хәлфиндең хаты) кәрәк русса, кәрәк татарса бик асыҡ, матур, бәғзе русса һүҙҙәр рус графикаһында яҙылған, татарса графала тәржемәләре юҡ.

---

[1] Китаптың Петербургтағы нөсхәләре хаҡында Булич С. 426—427-се биттәрҙе ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[2] сәхтиән — сафьян

[3] әғлә — юғары сифатлы

[4] истиғмал — ҡулланыу (төрө)

[5] мөхарәжиләрен — ҡанундан тыш булғандарын

[6] ҡираат ғәрәбиәләр өслүбендә — ғәрәптәрҙең уҡыу стилендә

[7] тариҡынса — ысулында

Былар китапта бик аҙ урында, ихтимал ки яҙыусы ул һүҙҙәргә татарса ла һүҙ эҙләргә ауырһынғандыр йәки таба алмағандыр. Сөнки бындай һүҙҙәр күп осраҡтарҙа русса булмаған сит (иностранный) һүҙҙәр булалар, ҡайһыларға татарсала, әлбиттә, һүҙҙәр табылып бөтмәй. Россияла Сәғит Хәлфин әҫәренә ҡәҙәр татарсаға ғаид һәм грамматика һәм рәтле словарь булмаған. Сәғиттең был әҫәре баҫылмай ҡалһа ҡала биргән. Уның әҫәрендәге барлыҡ хаталарыниҙәре менән бергә күсереп, шундай уҡ ҙур итеп Тобол попы Гиганов Русса-татарса словарь яҙған вә Гигановтың әҫәре исеме менән Академия наук тарафынан нәшер ителгән. Был китаптан ун нөсхәне 1856 йыл Ҡазан гимназияһына ебәргәндәр икән. Якулин шунда уҡ эште һиҙгән; ул «Беҙҙең Сәғит яҙған словарҙың нөсхәһе нисек тә был мөәлиф ҡулына төшкән дә, ул унан һүҙгә-һүҙ үҙгәртмәй һәм барлыҡ хаталары менән күсергән һәм шул көйө тәбағ булған тип яҙған[1]. Хәлбуки, Гиганов Россияла ғына түгел, бөтөн Европала[2] татарса ғаид беренсе мәртәбә грамматика һәм словарь сығарыусы тип мәшһүрҙер. Сәғит словары булған кеүек, Гиганов словары ла Ҡазан дарелфәнүне китапханаһында бар. Ҡыҙыҡҡан кешеләр уҡый ала. Беҙ, ниһәйәт, шуны әйтәбеҙ: Сәғиттең словары беҙҙең был көндәрҙә русса-татарса лөғәт яҙыусы әфәнделәр өсөн дә ҙур файҙа итер ине. Сәғиттең бынан башҡа ниндәй әҫәрҙәре бар һәм нәмәләр, беҙ был хаҡта бер нәмә лә белә алманыҡ. Инде был эштәр вә Сәғиттең тәржемәһенә ғаид башҡа тәфтиштәр башҡа кешеләребеҙгә ҡалды.

## IV

Исхаҡ Хәлфин атаһы урынына хеҙмәткә керешә. Уның хаҡында төрлө китаптарҙан ошо ҡәҙәр генә мәғлүмәт ала алдыҡ:

Сәғиттең улы Исхаҡ Россия хөкүмәтенә ҙур хеҙмәттәр итте. Ул Екатеринаның саҡырыуы буйынса Петербургка килде. Һәм унда «Устав управы благочиния» һәм «Учреждение о губерниях»ты Ҡазан татарсаһына вә Иҙелдең түбән яғындағы телдәргә тәржемә итте. Ул был хеҙмәттәре бәрәбәренә Екатеринаның генерал-прокурор, князь Вяземский исеменә ебәрелгән махсус указы менән (1792 йыл, 20 октябрь) губернский секретарлыҡ вазифаһын алды һәм

---

[1] Булич Н. Н. Из П. Л. К. жилд I. 178—179-сы биттәр

[2] «Труды третьего международного съезда ориенталистов в СПб.» (1879) мәжмуғаһында. жилд I. 256-сы бит.

1000 һум аҡса һәҙиә алды[1]. Ул Петербургта ваҡытта вазифаһын энеһе Исмәғил үтәп торҙо. Исхаҡ 1800 йылда вафат итте.

## V

Ибраһим Исхаҡ улы Хәлфин (рәсми яҙыуҙарҙа Исаевич). Ул 1773 йылда тыуған. Атаһы вафат иткәндән һуң, 1800 йыл 31 августа гимназияла һабаҡ уҡытырға керешкән. 1801 йыл Ҡазанда матбаға асылғас, цензор итеп ҡуйылған. 1804 йыл ғинуарҙа XIV класс чины бирелгән. 1805 йыл цензорлыҡ хеҙмәте һәм татарса әлифба, сарыф вә лөғәт китабы тәәлиф иткәне өсөн мөкәфәт[2] алған. 1812 йыл 26 июлдә Ҡазан дарелфәнүнендә татар теленең мөғәллиме (лектор татар. языка) итеп тәғәйен ителгән. Университеттың советына төрлө мәсьәләгә ғаид мөләхәзә вә докладтарын, үҙенең тәәлифтәрен һәм тәғлим өсөн яһаған конспекттарын, мосолмандарҙың мәғишәттәре вә белектәре хаҡында фекерҙәрен ғарыз иткән. Үҙенең дәрестәрендә етешлеге өсөн попечителдәрҙән шөкөр вә рәхмәттәр алған. 1823 йыл университетҡа шәреҡ әҙәбиәтенең наиб профессоры (адъюнкт восточной словесности) итеп тәғәйен ителгән, 1824 йыл 11 августа коллежский асессор дәрәжәһе алған һәм 1828 йыл хеҙмәт өҫтөндә вафат иткән. Университеттағы рәсми мәғлүмәттең барлығы ошо[3].

Ибраһим гимназияла һәм дарелфәнүндә һабаҡтарын, эштәрен, үҙенең хосуси мәғишәтен нисек алып барған, айҙарын, йылдарын нисек үткәргән, был хосустарҙа мин бер ҡәҙәр тырышһам да етерлек материалдар таба алманым һәм тапҡан ҡәҙәрҙәремдә ул ҡәҙәр мөһим эштәр булманы. Ошоноң өсөн дә был хаҡта яҙып маташмаймын, бәлки уның хосуси бер-ике эшен һәм әҫәрҙәрен генә зикер итергә керешәм.

Ибраһим Хәлфин — цензор. Ҡазанда татар телен уҡытыу Хәлфиндәр ҡулында. Көндән-көн тәрәҡҡи итеп барыу нисбәтендә татарса әҫәрҙәргә ихтыяж да көндән-көн артты. Ҡазанда ғәрәп хәрефтәре менән бер матбаға асылды. ...Ихтыяж бик ҙурайҙы. Ҡазан гимназияһы был хаҡта мәғариф министры менән оҙаҡ хәбәрләшкәндең һуңында, ниһайәт, 1801 йыл гимназия хозурында «Азиатская типография» исеме менән бер матбаға асылды. Был мосолман мат-

---

[1] Был аҡса ул ваҡыт бик күп булып күренә ине. Владимиров. 47-се бит.

[2] мөкәфәт — бүләк

[3] Был хаҡта университетта 103-сө номерлы 1813—1815—1828 формулярҙарҙы ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

бағаһына мөдир итеп министр тарафынан мосолман прапорщик Ғәбделғәзи Бурашев тәғәйен ителгән[1]. Ҡитаптарҙы Ырымбур мөфтөйө ҡарап ебәрергә, унан һуң китаптарға цензор итеп тәғәйен ителгән Ғәбдразаҡов ҡарарға тейеш ине. Ләкин былай оҙаҡ тора алманылар, «Фәүзәнел нәжәт» китабын баҫырға булғас, Мөхәмәтйән мөфтөйгә ебәргәндәр, мөфтөй бәғзе урындарҙы ҡанунға муафиҡ түгел[2] тип ҡалдырырға ҡушҡан. Матбағала Бурашев менән Ғәбдразаҡов ҡалдырылырға тейешле урындарҙы баҫҡандыр. Шуның өсөн Гимназия советы матбағаны Бурашев ҡулынан алып, купец Апанаевҡа, цензорлыҡты Ғәбдразаҡов ҡулынан алып, бик ҡаты шарттар аҫтында Ибраһим Хәлфингә тапшырғандар[3]. Матбағала мосолман китаптары нәшер ителеү көндән-көн артҡан. Ғәрәпсә, фарсыса, төркисә телдәрҙә яҙылған күп әҫәрҙәр баҫыла башлаған. Һәм улар Урта Азияға, хатта Һиндостанға китеп тарала башлаған. Матбағала был китаптарҙың баҫылышы матбағаға бик күп файҙа килтергән һәм шул нисбәттә был матбаға вә уның эштәренең тауышы ла Ҡазанда мөһим урынды алған. Мөфтөй, министр, гимназия, дарелфәнүндәрҙе был матбаға байтаҡ күп шөғөлләндергән.

1807 йылда матбаға хужаһы Апанаев тарафынан баҫылырға бирелгән алты мосолманса китапты Ибраһим Хәлфин, был китаптар һәммәһе лә дини әҫәрҙәр, быларҙы мөфтөйгә күрһәтергә кәрәк тип, үҙе ҡарамаған. Университет уны Ырымбурға мөфтөйгә ебәргән. Сөнки ул ваҡыт донъяуи булмаған һәммә китаптар мөфтөйгә ебәреләә ине. Был алты китап мөфтөй ҡулында ҡалған, уларға ғаид яуап булмаған. Алты китаптан 1808 йыл башында бары ике китап ҡына ҡайтарылған. Уларҙың да бәғзе урындары төшөрөп ҡалдырылырға тейешлеге күрһәтелгән ине. Китап Хәлфингә бирелгән һәм ҡалдырылған һүҙҙәрҙе кертмәҫкә бойоролған, бик ҡаты шарттар аҫтында цензор ителгән Ибраһим был китаптарҙан «Рисаләи Мөхәммәт» исемендә береһенең эсендә мөфтөй ҡарағандан һуң йәнә шөбһәләнерлек бер доға тапҡан. Был доға «Аллаһомма инсур мән

[1] Был Бурашев тигән зат Ҡазан мосолмандары эсендә мөһим кеше булған, уның шул ваҡыттағы олуғ мәэмүрҙәр, губернаторҙар менән ҙур яҡын мөнәсәбәттәре булған. Ҡенәз Вяземский менән хаттары «Известия общества археологии и этнографии при Казанском ун-те» мәжмуғаһының 1908 йылғы жилдендә 112—113 һәм 113—118-се биттәрҙә дәрж ителгән. Ҡорсаковтың «18 быуат Ҡазан тарихына ғаид әйберҙәр» тигән әҫәрендә. *(Ә. В.)*

[2] муафиҡ түгел — тура килмәгән

[3] Ибраһим Хәлфин — цензор тип яҙғандарыбыҙҙың был ергә ҡәҙәргеһе Владимировтың әҫәренән 68—69-сы биттәрҙән алынды. Унан һуңғылары Буличтың «Из. пер. лет Ҡаз. ун.» әҫәренән алынды. *(Ә. В.)*

нәсара әд-дин вәхҙул мән хәҙәлә әд-дин Аллаһома инсур ғаскарел мөслимин фи әлбәрә вә әлбәхрә вә әлхәмдүлилләһи раббил ғаләмин»дән ғибәрәт ине. Хәлфин был доғаны тәржемә итеп университеттың советына ғарыз итте. «Беҙҙең батшалығыбыҙ Россия менән Төркиә араһында бөгөн һуғыш дауам итә, беҙгә бындай доғаны баҫыу беҙҙең ватаныбыҙ (отечество) өсөн кире булмаҫмы?»—тип һораған. Совет доғаны ҡарап: «Был доға был ваҡытта, йәғни һуғыш ваҡытында ҡарағанда монасип түгел, китап баҫылмаһын, бәлки попечитель ҡулына бирелһен»,— тип яуап биргән. Попечитель был эште йәнә мөфтөйгә ебәргән һәм шул көндән башлап попечитель, мөфтөй, совет араһында оҙаҡ ваҡыт яҙышыу, бәхәс дауам иткән. Ырымбурҙа мөфтөй, доға Хәлфин тарафынан дөрөҫ тәржемә ителгәнме-юҡмы шуны ҡарар өсөн китапты беҙгә ҡайтарығыҙ, ти. Совет иһә китапты һаман тота һәм асыл китапты собраниеға ебәрмәйенсә Хәлфин аша унан нөсхә (копия) алып ҡына ебәрергә теләй. Профессор Френ Хәлфиндең яҙған копияһы дөрөҫ икәненә шаһит була һәм уны мөфтөйгә ебәрәләр. Собрание Хәлфиндең копияһына һәм тәржемәһенә ышанмай. Һаман китаптың асыл нөсхәһе ебәрелеүен һорай. Эш йәнә попечителгә ғарыз ителә. Френ советҡа, «Рисаләи Мөхәммәт»тең сәхибе был китапты бынан күп элек замандарҙа яҙған, бик аҙ ғына ла христиан диненә теймәй, баҫырға бик мөмкин, тип ғарыз итә. Совет уға ҡарамай. Попечитель советтың фекерен мәғҡул күрә һәм китапты мөфтөйгә ебәрмәй. Шулай итеп йөрөй торғас, китап үҙе лә юғалыр, ти. Бәлки Духовный Собраниеға: «Һеҙ китапты һәм уның тәржемәһен яҡшылап ҡарап сығып, һеҙгә һәм беҙгә хәбәр итеп бойороп, эште Ҡазандағы бер ышаныслыраҡ муллаға тапшырығыҙ»,— тип хәбәр итә. Был эш булғанмы-юҡмы — мәғлүм түгел. Әммә эш оҙаҡҡа тартылды һәм ике йылға яҡын дауам итте. Матбаға хужаһы Апанаев: «Китап тамам баҫылған, һаман һатыла алмай, миңә бынан зарар килә»,— тип шикәйәт итә. Ниһәйәт, собрание университеттың советы менән көрәшеүендә ғалиб ҡыла[1]. Һәм Советты, был доғалыҡтың Россия хөкүмәтенә вә Ватанға бер ҙә ҡаршы булмағанына инандыра, ахырҙан Совет китапты Апанаевҡа ҡайтарып бирә[2].

Ибраһим Хәлфиндең әҫәрҙәре: 1) Ибраһимдың беҙгә мәғлүм булған әҫәрҙәренән иң өлгөһө русса яҙылған «Азбука и грамматика татарского языка с правилами араб-

---

[1] ғ а л и б  ҡ ы л а — еңеүгә өлгәшә

[2] «Из первых лет Казанского университета» Н. Булича. Том I. 637—639-сы биттәр. *(Ә. В.)*

ского чтения, преподаваемая в Импер. Казанской гимназии» тигән әҫәре. Был әҫәр 1809 йыл Ҡазанда университет матбағаһында «Һәфтиәк» ҡәүлендә баҫылған. Әлифбаһы—62 бит, грамматикаһы 1—103 бит. Китаптың башына мосолманса ошо рәүешсә яҙылған: «Шаһиншаһтың Ҡазан гимназияһында вә хат ғәрәби өйрәтелә торған Әлифба илә ҡыҫҡаса төрки сарыфылыр. Җилдһеҙ, һары ҡағыҙлыһының хаҡы 40 копейка, әммә аҡ ҡағыҙҙағыһыныҡы 60 копейка. Университет исемле мәҙрәсәи ғәзимдең баҫмаларылыр. 1809 сәнә». Был китап Россия мәмләкәтендә һәм бөтөн Европала баҫылған татарса грамматикаларҙан икенсеһе. Китап фәнни күҙлектән бик үк мөһим урынды тота. Үҙенән элгәре сыҡҡан Гиганов грамматикаһынан күп йәһәт менән артыҡ. Ул әле баҫылғаны юҡ. Ибраһим был китапты яҙған өсөн 1809 йылда 130 һум мөкәфәт алды. Был китаптың нөсхәһе дарелфәнүн китапханаһында 203.8786 номер аҫтында бар.

2) 1819—1820 йылдарҙа попечителдең үтенеүе буйынса татар телендә хисап, география, тарихтан дәрес китаптары тәржемә итте. Был әҫәрҙәрҙең баҫылыу-баҫылмауҙары мәғлүм түгел.

3) 1819 йылда «Татарҙарҙы нисек ағартыу» хаҡында бик һәйбәт мөләхәзә яҙған. Был әҫәрендә ул татарҙарҙағы наҙанлыҡты, ҡараңғы мәғишәтте һөйләгәндән һуң уларҙы ағартыу өсөн мотлаҡ университеттың шәреҡ телдәре шөғбәһендә уҡый торған студенттарҙың татарҙарға ҡатнашыуҙарын һәм татарса белгән кешеләр арҡаһында ғына был мәҡсүдкә етеп буласағын һөйләй.

4) 1819 йыл университетта хрестоматия урынында истиғмал итеү өсөн беҙҙә «Дастани нәҫеле Сыңғыҙ хан», Урта Азияла «Сыңғыҙнамә» исеме менән мәғрүф булған тарихи әҫәрҙе баҫтырған. Башына русса вә татарса мөҡәддимәләр яҙған һәм ахырына словарь яҙған. Китап 170 сәхифәлә баҫылған. Мөҡәддимәһе 8 бит. Асыл китап 91 бит. Словарь 71 бит. Был китап оҙаҡ заман университетта дәрес китабы булып йөрөгән. Был китаптың башына яҙылған татарса мөҡәддимәһенән бер миҡдарын түбәндә дәрж итәбеҙ. Ибраһим был китабы өсөн 1820 йылдың беренсе февралендә батша тарафынан бриллиант йөҙөк һәҙиә алды. Был әҫәренең нөсхәһе дарелфәнүн китапханаһында Готвальд ҡыҫымында 416 номерҙа бар. Был китаптың исеме икенсе бер биттә ошо рәүешсә, «Жизнь Чингисхана и Аксак Тимура с присовокуплением разных отрывков истории касающихся» тип яҙылған һәм баҫылған йылы 1822 йыл тип ҡуйылған, ошоға ҡарап, Загоскин үҙенең «Биографический словарь профессоров Каз. ун-та» һында (193-сө бит) шулай тип күрһәтә һәм дарелфәнүн китапханаһының сту-

денттар ҡыҫымында китап 2953 номер менән, Академия китапханаһында XXVI. 6. 13 номер менән шул русса исем аҫтында ҡаид ителгән. Загоскиндың һүҙенә ҡарап, бәғзе кешеләр Хәлфиндең йәнә бер китабы бар икән тип йөрөмәһендәр ине тип, мин был урында быны тәнбиһ[1] тейеш күрҙем.

5) Ибраһим Хәлфиндең тағы бер әҫәре Йенала немецса сыҡҡан «Fundgruben des Orients» журналының 1818 йылғы 17-се жилдендә «Тимер-Ҡотлоғ хандың ярлығы тураһында» («Commentator Herr Halfin») исеме менән яҙылған мәҡәлә. Немец мөстәшәрҡе мәшһүр фон Гаммерға Истанбулдағы Австрия илсеханаһынан мәэмүр фон Рааб 1812 йыл һарай ханы Тимер-Ҡотлоғ хандың уйғыр телендә уйғыр яҙмаһы менән яҙылған бер ярлығын[2] ебәргән. Гаммер уйғыр теле менән ашна[3] булмағанлыҡтан шәрҡе телдәре нығыраҡ уҡытылыуы менән шөһрәте сыҡҡан Ҡазандағы профессор Френға ебәргән. Ул үҙе эште башҡара алмағас, Ибраһим Хәлфингә биргән. Ул был ярлыҡты изах иткән[4]. Ибраһимдың тәржемәһенә ҡарап, Гаммер ярлыҡты шәрех итеп баҫтырған. Мин һәр ни ҡәҙәр Хәлфиндең был мәҡәләһен ҡулымда тотһам да, немецса белмәгәнем өсөн ни һөйләгәнен белә алманым. Хәлфиндең мәҡәләһенән бәғзе һүҙҙәрҙе Радлов был ярлыҡ хаҡында яҙған әҫәрендә (Записки Восточного отдел. Имп. Арх. общ.» мәжмуғаһының III жилдендә 22—23-сө биттәрҙә) алған.

6) 1822 йыл Ибраһим дарелфәнүн Советына үҙенең студенттарына уҡыясаҡ лекциялары хаҡында мохтасар бер яҙыу (конспект) ғарыз итә. Уның был конспекты дарелфәнүн архивында 1822 карточка, 52 дело, 103 номер аҫтында һаҡлана. Ул бында ғөмүми төрк вә татар телдәре хаҡында бик һәйбәт, ләкин ҡыҫҡа һүҙҙәр яҙған. Олуғ бит менән 84—92-се биттәрҙә. Был конспект был көндә унан ҡалған иң ҡәҙерле әҫәр булараҡ һаналырға тейеш.

7) 1823 йыл Ибраһим Хәлфин «Мосолмандарҙа ғаилә мәсьәләһенә ғаид ҡанундар»ҙы татарсаға тәржемә итеп тамамлаған. Был әҫәр тағы юҡ. Быны рәсми яҙыуының ахыры ла 1823 номерҙа бар.

кар. 47

8) 1824 йылда мәшһүр мөәррих Әбүлғәзиҙең «Шәжәрәи төрк» тигән әҫәрен ҡарап шәрехтәр менән табағ иттерҙе.

---

[1] тәнбиһ — иҫкәртеү

[2] Тимер-Ҡотлоғ хан хаҡында минең «Төрк вә татар тарихы» тигән әҫәремдә 172—178-се биттәрҙе, ярлыҡты 278—279-сы биттәрҙән ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[3] ашна — дуҫ, таныш

[4] изах иткән — аңлатҡан

Был әҫәр 40 ҡәүелдә яҡшы ҡағыҙҙа 210 биттә университет матбағаһында баҫылған. Башына профессор Френ латинса мөҡәддимә яҙған. Ахырына 185—186-сы биттәрҙә Ибраһим үҙенең китабы һәм уның туралы нөсхәләре һәм Френ, китапты нәшер итеүсе граф Румянцевтар хаҡында мөләхәзәһен яҙған. Ахырына, адъюнкт Ибраһим бин Исхаҡ, тип имза иткән. 182—193-сө биттәрҙә китаптың Мәскәү һәм Өфө нөсхәләрен тәтбиҡ итеп сыҡҡан, 198—210-сы сәхифәләрҙә китаптың эсендәге һәммә исемдәргә әлифба тәртибенсә фиһрист яҙған. Китапты яҡшы вә төҙөк итеп нәшер итеү хаҡында Ибраһим Хәлфиндең ҙур ижтиһаттар иткәне[1] үҙенән үк асыҡ күренеп тора. Европала беҙҙең тарихыбыҙҙы өйрәнеүҙә күп хеҙмәт иткән был әҫәрҙең яңы хаяты мотлаҡ ошо Ибраһимдың тәхҡиҡенән һуң башлана. «Шәжәрәи төрк»төң ошо Ибраһим баҫтырған нөсхәһе минең үҙ ҡулымда ла бар. Был ғәзиз нөсхәне миңә һәҙиә итеүе өсөн шәкертем Мөхәммәт Фатхулла улына күп рәхмәт уҡыйым.

9) Ибраһим үҙенең зекер ителгән конспектында йәнә профессор Якуниндың тарихын татарсаға тәржемә иткәнен яҙған. Был әҫәр хаҡында йәнә һис бер тауыш тын ишетелмәй. Ибраһимдың быларҙан башҡа әҫәрҙәре барлығыюҡлығы миңә мәғлүм булманы. Ибраһимдың шәхсиәте һәм ҡылған эштәре, кәрәк Сәғит һәм Исхаҡ, кәрәк Ибраһим шәхсиәте характерҙары хаҡында мин үҙемдең ҡулыма төшкән материалда төплө әҫәр таба алмаймын. Шунда ла Ибраһимдың шәхсиәте аталарынығы ҡәҙәр үк ҡараңғы түгел. Уның хаҡында кәрәк рәсми ҡағыҙҙарҙан, кәрәк башҡа кешеләр һәм үҙенең әҫәрҙәренән, тышҡы һүрәте хаҡында булмаһа ла эске мәғнәүи хәләте (характеры) хаҡында бәғзе нәмәләр истихраж итергә[2] мөмкин.

Тәфтиш ваҡытында Ибраһим үҙенең ғилми хеҙмәттәрендә вә яҙған әҫәрҙәрендә беҙгә Европалағы мәғәнә менән төплө вә фекер даирәһе урта дәрәжәлә киң бер ғалим булып күренә. Инде уның хосуси хәлдәренә ғаид табылған материалдар беҙгә уны диненә, айынына, халҡының ғәҙәттәренә ныҡлы йәбешеүсе бер Ҡазан татары (әммә һис мырҙа түгел) итеп күрһәтә. Уның ике ҡатыны булған. Хатта Загоскин риүәйәтенсә, Хәлфиндең вафаты бәғдендә[3] уларҙың һәр икеһе лә пенсия һораған, ахыр университет идараһының сағи арҡаһында икеһе лә пенсия алған[4]. Бынан

---

[1] ижтиһаттар иткәне — тырышҡаны
[2] истихраж итергә — сығарырға
[3] бәғдендә — һуңынан
[4] Загоскин. 194-се бит

һуң уның үҙ ҡатыны Хәбибә Искәндәр ҡыҙы менән тамам мосолманлыҡ еҫе килеп торған ваҡиғалар булған. Ҡатыны был хаҡта университет советына шикәйәт иткән. Совет эште муллаларға тапшырған. Архивта был хаҡта булған эштәр $\frac{1814}{к.\ I,\ д.\ 4}$ номер аҫтында һаҡлана. Һәм быларҙан башҡа йәнә бәғзе хәлдәрен мөләхәзә иткәндең һуңында Ибраһим беҙҙең күҙ алдыбыҙға ғәйәт садә һәм үҙенең дини, милли айындары хаҡында һис кемдән тартынмай торған ныҡлы бер Ҡазан татары булып ултыра.

Ғилми йәһәттән Хәлфин ғәмәли бер ғалим булыу өҫтөнә һәр нәмәләрҙе назири (теоретический) йәһәттән яҡшы белгән (шул 19-сы быуат башындағы мәғәнә менән) бер ғалим булған. Ул ғәрәпсә, фарсыса яҡшы белгән, төрк теленең төрлө ләһжәләре менән яҡшы таныш булған. Беҙгә уның ғилми идраҡы[1], фекер даирәһе хаҡында юғарыла зикер ителгән конспекттары шәһәҙәт бирә. Ул унда төрк телдәре, ғосманлы, сығатай вә татар шиүәләренә фәнни, назири һүрәттә ҡарай белгәненең һуңында, уларға фәлсәфи һүрәттә лә ҡараған. Был телдәрҙең сафлығы фәҡәт ғауам[2] телендә ҡалғанлығы, әҙәби телдең ғәрәби, фарсы һүҙҙәре менән сыбарланып бөткәнлеген, шуның өсөн дә төрк телдәрен өйрәткәндә һөйләшеү (разговор) телендә һәм бер миҡдар ғәрәпсә, фарсыса телдәрен дә белеү кәрәк икәнен һөйләй. Төрк-татар телдәрендәге архаизмды әтрафлы мөләхәзә итә. Ибраһим үҙенең яҙыуҙарында тамам халыҡса яҙған. Бәлки муллалар өслүбендә ят һүҙҙәр күп ҡатнаштырып, Истанбул төрксәләре һүрәтендәрәк яҙа. Ильминский, Ибраһимдың ошо эшенә алданып, үҙенең «Вступительное чтение в курс турецко-татарского языка» тигән әҫәренең[3] 10-сы битендә, Хәлфин татар теленә муллалар күҙе менән ҡарай ине, ти. Әгәр Ибраһимдың мәҙкүр конспекты Ильминскийға мәғлүм булһа ине. Ул ундай һүҙҙе әйтмәҫ ине. Ибраһим һәр ни ҡәҙәр төрк милләтенең яҙыу теле халыҡ теленән йыраҡ киткәнен аңлаған булһа ла, үҙ башына бер юл йыртаһы килмәгән. Бәлки халыҡҡа әҙәби һаналған тел менән яҙа биргән. Нитаки, Ильминскийҙарҙан күп элек булмаған заманда рустар үҙҙәре быңдай ауырыу менән мөбтәлә итте[4].

---

[1] идраҡы — төшөнсәһе

[2] ғауам — халыҡ

[3] Был китап Ҡазан дарелфәнүненең «Ученые записки» исемендәге мәжмуғаһының 1861 йылғы 31-се жилдендә нәшер ителгән һүрәттә сыҡҡан. Ул Ильминскийҙың дарелфәнүндә төрк телдәре һәм әҙәбиәте хаҡында һөйләгән лекция-дәрестәренән ғибәрәт. (*Ә. В.*)

[4] мөбтәлә итте — яфаланды

Инде беҙгә был урында Хәлфинден был ғилми хеҙмәттәрҙә инде идеалға ҡарап барғаны, аҙыраҡ уның хеҙмәттәренең психологияһы хаҡында бер-ике һүҙ әйтергә кәрәк була.

Беҙҙең был ғалимыбыҙ Ибраһим, татар-төрк теле һәм тарихы менән бик яҡшы шөғөлләнгән һәм ике мәүзуғка ла күп үк хеҙмәт иткән. Ләкин уның ул хеҙмәттәре, зан ғалибәбеҙсә[1], мәғлүм вә моғаин[2] бер ғайәгә[3] ҡарап түгел, бәлки гимназия вә дарелфәнүн хеҙмәттәренә хәжәт булған өсөн эшләнгән кеүек күренә. Сөнки үҙ халҡының, төрк вә татарҙарҙың көндән-көн бөтә барғандарын күреп торған Ибраһим ул халыҡтың яңынан терелеүенә, бәлки был көндәге хәленә килеүенә ышана алмағанға оҡшай. Быны уның яҙыуҙарындағы бәғзе тәҡбирҙәренән аңларға мөмкин. Беҙ уның бындай тәҡбирәтен «Сыңғыҙ намә» китабының мөҡәддимәһендә: «Хәҙерге заман беҙҙең мәмәлик[4] Россиялағы йәмәғәт мөслимин меңдәрендә тауарих вә йыһаннамә кеүек фәндәрҙең биттамам[5] боралып вә истиғмал булмағанлыҡтан ошо китапсыҡ тағы тәләф вә заиғ улынмаҡ[6] ихтимал... тип яҙған һүҙҙәре менән тиңәгәнбеҙ. Һуңында уның беҙҙең ошо көндәге хәлебеҙгә ҡалыуыбыҙға ышанмағаны (ихтимал ки, ышана белмәгәне) хәтергә килә. Һәм шуға ҡарап уның хеҙмәттәрен халҡына, милләтенә ҡарап түгел, урыҫтар, студенттар өсөн эшләнгән эштәр тип әйтергә тура килә. Әгәр ҙә Френ кеүек олуғ ғалимдың серҙәше вә бының өҫтөнә милли мосолман булған Хәлфин, ул олуғ ғалимдың илһамдары өҫтөндә, ғилми йәһәттән генә түгел, милли йәһәттән дә иғанә[7] ҡылһа, артыҡ мөһим һәм рухлы эштәр эшләй алған булыр ине. Әммә Ибраһимдың алдында бындай хәл түгел, бәлки бындай хәлгә киләсәгенә бер ғәләмәт тә юҡ ине. Ошоноң өсөн дә Ибраһим үҙ халҡының бәҡаһы[8] хаҡында бер ҡарарға килә алмаған һәм уларға төплө хитап менән һүҙҙәр һөйләмәгән (был урында әйтеп китергә кәрәк ки: минең, Ибраһим мәрхүм хаҡында аң, милләттең истиҡбалы[9] хаҡында фекерҙәр йөрөткәнен фарыз итеүем, уны, өмөттәренең киләсәк көндәре хаҡында ҡәтғи уйҙар йөрөтә торған ҙур ижтимағи ғалимдар рәтенә

---

[1] зан ғалибәбеҙсә — фараз итеүебеҙсә
[2] моғаин — билдәләүсе
[3] ғайәгә — сиккә
[4] мәмәлик — дәүләт
[5] биттамам — тулыһынса
[6] тәләф вә заиғ улынмаҡ — юғалыуы һәм юҡҡа сығыуы
[7] иғанә — ярҙам
[8] бәҡаһы — мәңгелеге
[9] истиҡбалы — киләсәге

һанауҙан түгел, сөнки минең белеүемә (йәки мәғлүм булған дәлилдәргә) күрә, Ибраһим ундай ғалимдарҙан һаналырлыҡ мөтәфәккир[1] булмаған һәм шуның өсөн дә юғарыла мөғтәризә[2] эсенә алып «ихтимал ки, ышана белмәгәне» тинем, ләкин ниндәй генә бер милләткә мәнсүб[3] булып та, шул милләттең әҙәбиәте, тарихы менән шөғөлләнгән заттарҙың шул милләттең истиҡбалы хаҡында фекер йөрөтөүҙәре тәбиғиҙер һәм, ниһәйәт, бының менән тәбиғи һүрәтендә генә Ибраһимдың истиҡбал хаҡында фекер йөрөткәне шөбһәһеҙҙер.

Ләкин шуныһы иғтибарға лайыҡтыр ки: беҙҙең хәҙерге әҙәбиәтебеҙгә хеҙмәт итә, ләкин милләттең бәҡаһын күктән кетә торған бәғзе йәштәребеҙ ҡәбиленән[4] Ибраһим мәрхүм истиҡбал хаҡында тышҡы тарафтан (занытыҙса) бер ҡарарға килә алмаһа ла, беҙҙең хәҙерге әҙәбиәтебеҙҙә булған кеүек, уның яҙыуҙарында бәҡаны тәбиғи булараҡ ҡабул иткән олоғ уҡ хис (предчувствие) бар.

Нисек булһа ла булған үҙ халҡының, милләтенең маҙыһы[5] һәм теле менән бик яратып шөғөлләнгән, ул хаҡта үҙенең хеҙмәттәрен күбәйтергә ижтиһат иткән[6]. Бына һеҙгә уның мәҙкүр «Әхүәле Сыңғыҙ хан» китабының башына, халыҡ араһында тарих китаптары яҙған «мөнадат»[7] исемендәге бүлекте килтерәм: «Һеҙгә ошо мөҡәддәмәне ҡирайәт итеүсе ғиззәтле әһле ғоләмә вә әрбабе фән [8] вә мәғрифәт хәҙрәттәрегеҙҙән рижаи[9] булырға бында зикер булынған тик ҡадими хан, хосусан хөкүмәт Ҡазан вә ғәйреләрҙең үткән әхүәлдәрен тәфсилән зикер итеүе бер-бер тәуарих йә шул «Шәжәрәи төрк» китабы вә йә бер барса уларҙан нөсхәме кемдәлер булып вә йә бер кемсә лә булыуы мөшәһәдә вә истимағ булһа[10], Ҡазандың «Императорский университет» баш мәҙрәсәһенә ғарыз ҡылһағыҙ ине. Әгәр һатһалар, тәхҡиҡ камил баһалары бирелеп вә һатылмаһалар хаҡ менән нөсхәһе алыныр ине. Вәссәләм вә Аллаһы кәрим».

Уның бындай ялҡынлы һүрәттә хеҙмәт итергә теләгәнлеген күргәндең һуңында уның ниндәйҙер йәшерен хискә бирелгәнлеге һиҙелә. Һәм уның хаҡында сит милләттәр

---

[1] мөтәфәккир — уйлаусан
[2] мөғтәризә — йәйә
[3] мәнсүб — бер нәмәгә ҡараған
[4] ҡәбиленән — төрөнән
[5] маҙыһы — үткәне
[6] ижтиһат иткән — тырышҡан
[7] мөнадат — мөрәжәғәт
[8] ғоләмә вә әрбабе фән — ғалимдар һәм фән кешеләре
[9] рижаи — үтенеү
[10] мөшәһәдә вә истимағ булһа — күренһә һәм ишетелһә

беҙҙең тарихыбыҙ, беҙҙең мәсьәләләр менән ни һүрәттә шөғөлләнһәләр, Ибраһим да шул рәүешсә шөғөлләнгән тип әйтәһе килә. Бының өҫтөнә сит ҡәүемдәрҙән, мәҫәлән, рустар беҙҙең тарихыбыҙ менән үҙ тарихтарының бер дәүерен өйрәнеү ҡасиды[1] менән шөғөлләнгән кеүек, Ибраһим да үҙ милләтенең тарихы менән, үҙ милләтенең тарихы булғанлығы өсөн шөғөлләнгән булһа кәрәк. Һәр хәлдә беҙ Ибраһимды тыш яҡтан шулай мәғлүм бер ғайәгә ҡарап бармаған кеүек күрһәк тә, уның мәғәнәүи йәһәттән бер йәшерен хасиәткә[2] йәки юғарылағы хис ҡәбилел воҡуғка[3] бирелгәнлеге шөбһәһеҙҙер. Ошоларҙы бер аҙ моталәға иткәндең[4] һуңында мин инде үҙемдең юғарылағы: «Ул хеҙмәттәрен халыҡҡа, милләтенә ҡарап түгел, рустар, студенттар өсөн эшләгән», тигән һүҙемдең урынына йәки янына «бының менән бергә ул тәбиғи хистәр тәхте тәьҫирендә[5] был хеҙмәттәренең милләте, халҡы өсөн булыуын да уйлаған» тигән һүҙҙәремде лә ҡушам.

Был хаҡта, йәғни Ибраһимдың был ғилми хеҙмәттәрендә ниндәй әмәлгә ҡарап барғаны һәм эштәренең ҡысман психологияһы хаҡындағы һүҙҙәремдең барыһы ла саф гипотезаларҙан ғибәрәт. Инде мин ки хәл итәйем, был рус ғалимдары тарафынан үҙҙәренең характер һәм шәхсиәттәре хаҡында төплө тәфтиштәр иттерерлек дәрәжәлә иғтибар ҡаҙана алмаған Хәлфиндәрҙең, татарҙар ҡашында, тарихтан мөҡаддәмге (доисторический) тигән кеүек бер дәүерҙә килеүселектәре беҙҙе үҙе шул сафаға (гипотезаға) алып килә. Йәғни бында мин түгел, бәлки Хәлфиндәр һәм татарҙарҙың үҙ тарихтары ғәйепле. Мин был һүҙҙәремде, уларҙың тәржемәи хәлдәрен яҙырға керешкәс, бәлки бер ваҡыт кәрәк булыр тип яҙа бирҙем.

Ибраһимдың шәхсиәтенә вә эшләгән эштәренә ғаид һүҙебеҙ был урында тамам булды. Ибраһимдың тәржемәи хәленә ғаид йәнә бер-ике йөмлә күсерәйек. Н. Булич әйтә: «Шәреҡ әҙәбиәте вә ғилеменең фәүҡелғәдә[6] ғалиме булған профессор Н. Френ Ибраһим Хәлфин менән дуҫлашты һәм унан татар телен өйрәнде һәм уның васитаһы[7] менән татарҙарҙың муллалары вә мөғтәбәр кешеләре менән ҡатнашты. Үҙе Петербургка киткәндән һуң Ибраһим менән

---

[1] ҡасиды — ниәте
[2] хасиәткә — хистәргә
[3] хис ҡәбилел воҡуғка — ысынбарлыҡ йоғонтоһонда тыуған хистәргә
[4] моталәға иткәндең — өйрәнгәндең
[5] тәхте тәьҫирендә — тәьҫирҙәре аҫтында
[6] фәүҡелғәдә — ғәҙәттән тыш
[7] васитаһы — ярҙамы

дуҫлығын һаман онотманы. Һәр ваҡыт мөхәбәрә итешеп[1], хат яҙышып торҙо[2]. Владимиров әйтә: «Ул үҙенең дарелфәнүндә күрһәткән етешлектәре менән үҙенә әҙәби тәзкирә (лит. память) ҡалдырҙы[3].

## Хатимә[4]

## VI

Инде мин был хатимәлә Хәлфиндәр фамилияһының һәм гимназияла татар теле уҡытылыуының халҡыбыҙға тәьҫире хаҡында бер-ике һүҙ әйтәм. Владимиров (65—67-се биттәрҙә) әйтә:

«Гимназия вә университетҡа татар балаларын алыу өсөн Хәлфиндәрҙең ижтиһадтары сайәһендә шөбһәһеҙ күп тәдбирҙәр[5] әйтелде. 1810 йылдан башлап попечитель Магницкий һәм профессор Ҡандиров мосолман мәсеттәренең береһе янына бер шәреҡ мәктәбе асыу сәдәдендә[6] йөрөнөләр.

Мәғариф министры Уваров быны мәғкүл күргән, профессор Кандиров был мәктәптең бинаһы-фәләне өсөн мосолмандарҙан аҡса йыйып бирәсәгенә Ырымбур мөфтөйөнән вәғәҙә лә алған ине һәм адъюнкт Ибраһим Хәлфин был мәктәп өсөн ләзим булған уҡыу әсбәптәрен әҙерләгән, гимназия курстарында уҡыла торған дәрес китаптарын татарсаға тәржемә иткән ине һәм төрлө тарафтағы мосолмандарға был хаҡта төркисә дәғүәтнамәләр тараҡан ине. Тик был эш нисек тә вөжүдкә сыҡмай ҡалды. Университет идараһы мосолмандарҙы уҡыуға ҡыҙыҡтырыу өсөн гимназия һәм университеттағы ғомуми ҙур имтихандарға ерле мосолман мөғтәбәрҙәрен саҡыра ине. 1824 йылда мосолман шәкерттәр үҙҙәренең етешлектәре өсөн ҙур һәҙиәләр алды. Мосолмандарҙы имтиханға саҡырып Ибраһим Хәлфин тарафынан яҙылған дәғүәттәрҙең береһе ошо:

«1816 сәнә ушал тәммүздең, йәғни июлдең 5 йәүмендә[7] шаһиншаһтың Ҡазан университеты нам[8] баш мәҙрәсә кәнде фәтех вә мәншүренең сәнәүи ғаид мәссәррәтен әйләмәк-

---

[1] мөхәбәрә итешеп — хатлашып, хәбәрләшеп

[2] Булич Н. «Из п. л. Ҡаз. ун-та». жилд I. 180-се бит. *(Ә. В.)*

[3] Владимиров «Ист. з. о I Ҡаз. гим.» жилд I. 47-се бит. Был һүҙҙәр юғарыла онотолоп ҡалған ине. Һуң булһа ла, был урынға ҡаид итеп ҡуйҙыҡ. *(Ә. В.)*

[4] хатимә — һуңғы һүҙ

[5] тәдбирҙәр — тейешле саралар

[6] сәдәдендә — ниәте менән

[7] йәүмендә — көнөндә

[8] нам — исемле

селер[1] вә шуның өсөн әғләм итеп[2] мөғәллимдәрен вә ғиззәтле ғәскәриә вә шәһриә забиттар[3] вә мәнсаб эйәләрен[4] вә мәғрифәт вә һөнәрләргә рәғбәт итеүсе[5] һәр бер исламдағы кемсәләрҙе ошбу ғаид мәсәррәткә хиссадар[6] улынмағығыҙҙы үтенмәклә мәзбүр[7] университеттың ректоры вә һәм мөшәвир диваны[8] улынкан хәҙрәттәрегеҙҙе дил[9] вә йәне илә ундайҙар ушал дәғүәттең ибтидаһы[10] зәвәлдән һуң[11] 5 сәғәттә булыр»[12].

Был гимназия вә университеттарҙа мосолман Хәлфиндәр ҙә булған. Унда мосолманса һабаҡтар ҙа, ғәрәпсә китаптар ҙа, ҡөрьәндәр ҙә уҡытылғас, мосолмандар был мәктәптәргә балаларын бирһәләр алданмаясаҡтарына ышана башлағандар. Ҡазан мосолмандарынан иң тәү башлап гимназияла уҡыған кемсә Шаһи Алкин. Был кемсә һуңынан полиция министры дәрәжәһендә хеҙмәт итте[13]. Гимназияла[14] надзирателлек хеҙмәтен бер ваҡыт гимназияның ғәрәп теле мөғәллиме мулла Мөхәммәт Ғәлиев әда итеп[15] торҙо. 1844 йылда гимназияны Хәмидулла Ишбулатов, Әл-Мөхәмәт Ҡыуатов, Заһретдин Насретдинов, Зариф Һыртланов, Шаһиәхмәт Хәйеров, Мөхәмәт Йосопов исемле алты мосолман егеттәре тамамланы. Шул уҡ йылдарҙа Банзаров, Туҡумбәтов, Ваһапов, Саинов кеүек мөһим заттар гимназияны тамамланы. Мосолман шәкерттәре көндән-көн арта ине. Был мәктәптәр хөкүмәт һәм ерле халыҡ мәктәбе, йәғни һәм рус һәм татар мәктәбе һүрәтенә килгәндәр ине. Мосолман араһында быны аңлай башлағандар була башланы. Ләкин был эш оҙаҡҡа барманы. Һуңғы йылдарҙа гимназияларҙан шәреҡ телдәре сыҡты, мосолман мөғәллим дә бөттө. Гимназиялар шәреҡ менән ғарб араһында уртаҡ мәктәптәр һүрәтенән фәҡәт рус мәктәптәре һүрәтенә әйлән-

---

[1] кәнде фәтех вә мәншүренең сәнәүи ғаид мәссәррәтен әйләмәкселер — үҙенең асылыуы вә указ сығыуы уңайы менән тантана үткәрергә теләй

[2] әғләм итеп — бөтәһенә еткереп

[3] забиттар — етәкселәр

[4] мәнсаб эйәләрен — чиновниктарҙы

[5] рәғбәт итеүсе — ынтылыусы

[6] мәсәррәткә хиссадар — тантанаға ҡатнашыусы

[7] мәзбүр — әйтеп үтелгән

[8] мөшәвир диваны — кәңәшсе йыйын

[9] дил — йөрәк

[10] ибтидаһы — башланыуы

[11] зәвәлдән һуң — ҡояш байығандан һуң

[12] Владимиров. 66—67-се биттәр.

[13] Был кемсә хаҡында Ҡәйүм Насыриҙың 1881 йылғы календарында 33-сө битте ҡарағыҙ. (*Ә. В.*)

[14] Шәреҡ телдәре шөғбәһендә булһа кәрәк. (*Ә. В.*)

[15] әда итеп — үтәп

гәндәр, ихтимал ки, мөһим урындарға рухани кешеләр поптар менеп алғандарҙыр ҙа «Войти в сношение с туземными жителями Казани» тигәндәрҙер[1]. Һүҙҙәрҙе дини сәйәсәттәренә ҡорал итеп тота башлағандар. Ихтимал ки, мәктәптәргә мосолман балалары һанын күбәйтеү Екатерина тотҡан мәғариф биреү һүрәтенән әллә ниндәй дини мәҡсүдтәргә ҡарап йөрөй башлағандар. Ихтимал ки, ошоларға ҡарап мосолмандар рус мәктәптәрендә уҡыуға назарларын алмаштырғандар. Бынан һуң мәктәптәрҙән мосолман шәкерттәре йылына алтылап түгел, берәмләп кенә сыға башлаған йәки бәғзе йылдарҙа бөтөнләй булмаған[2]. Нисек тә «мәхәлли[3] гимназия»ла ерле халыҡтың теле уҡытылыуы, Хәлфиндәр вә ғәйреләрҙең бында мосолман телдәренән һабаҡ биреүҙәре, шулай итеп, был хөкүмәт мәктәбенең ерле халыҡ гимназияһы булыуы ерле халыҡҡа, мосолмандарға яҡшы тәьҫир иткән ине.

---

Хәлфиндәр хаҡында яҙырға төрлө китаптарҙан күсерергә теләгәнем был урында тамам булды. Мин бер яңғыҙым был заттар хаҡында күңелдәрҙе баҫырлыҡ һүрәттә төплө, әсаслы[4] мәғлүмәт бирә алманым. Ҡулымда материалдар шул ҡәҙәре генә булды. Был яҙғандарым ул хөрмәтле тарихи заттар хаҡында беренсе яҙыу булыуы йәһәтенән, бәлки, ярап торор. Ихтимал ки, тиҙ ваҡыттар эсендә беҙҙең халыҡ араһында үҙҙәренең мазыйҙары. Хәлфиндәре, фәләндәре менән яҡшы таныш кешеләр зоһур итер. 1928 йыл 13 ғинуарҙа Ибраһим Хәлфиндең вафатына бер йөҙ йыл тула. Мөмкин булһа, хоҙа насип итһә, бәлки, ул ваҡыт бер-бер эш күрермен.

---

[1] Владимировты ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*
[2] Шунда уҡ.
[3] мәхәлли — ерле
[4] әсаслы — нигеҙле

# ҠЫҪҠАСА ТӨРК-ТАТАР ТАРИХЫ

(әҫәрҙән өҙөк)

## Боронғо заманда төрк халҡы

*Боронғо заманда төрк ҡәбиләләре һәм уларҙың ултырған урындары.* Төрк халҡы әүәл билдәле булған замандан бире Алтай тауҙары, Ысыҡ күл тирәләренән вә уларҙың ғарбе[1] тарафтарында та Ҡара диңгеҙ ярҙарына, «Үзи» (Днепр) йылғаһы буйҙарына, шимал[2] тарафында Урал тауҙарының уртаһы, Иртыштың — Убаға, Ҡаманың Иҙелгә ҡойған ерҙәренә, йәнүбтә[3] Ҡавказ тауҙары, Амударъя, Сырдаръя буйҙарына ҡәҙәр киңәйгән ҙур, киң урында теләклек итеп килгән. Миләди Ғайса ғәләйһиссәләмдән етенсе, һигеҙенсе быуаттарҙа төрк иленең төрлө тарафтарында ошо исемле ҡәбиләләр ултыра ине. Монголияла һәм уның ғарбе тарафында Алтай тауҙарына ҡәҙәр уғыҙҙар (тукиуҙар), уларҙың шималендә Селенга йылғаһы буйында һәм уның шәреҡ вә ғарб тарафында туғыҙ-уғыҙ һәм уйғыр халыҡтары, уларҙан шималдәрәк Ҡасағол күле тирәһендә һәм уның ғарбендә миркет һәм тува (үрәнхәй) халыҡтары, үрәнхәйҙәрҙең ғарбендә һәм «Көкмән» йәғни Таннаула тауының шималендә ҡырғыҙ халҡы, ошо көндәге Ҡачин ҡалаһы тирәһенән Алтайға, уғыҙҙарға табан һуҙылып киткән ерҙә басмыл халҡы, Ҡара Иртыш йылғаһы тирәһендә бөгөнгө Семипалат областы урындарында ҡарлыҡ халҡы, уларҙың йәнүб вә ғарб тарафтарында ҡыпсаҡ халҡы, Сырдаръяның урта һәм түбәнге ағымында ҡаңны халҡы, бөгөнгө Джунгария (йәғни Тарбағатай менән Урта Тянь-Шань араһында) дулат халҡы, Иҙел һәм Дон йылғаларының түбәнге ағымында ҡаҙар (хәзәр) халҡы, уларҙың шималендә Дон буйында мажарҙар, Сулман — Ҡама йылғаһының Иҙелгә ҡойған урынында болғар халҡы тора ине[4].

---

[1] ғ а р б е — көнбайыш
[2] ш и м а л — төньяҡ
[3] й ә н ү б — көньяҡ
[4] Боронғо замандағы ҡәбиләләрҙән бөгөнгө төрк йәмғиәттәре нисек яһалғанын, йәғни хәҙерге төрк ҡәбиләләренең асыл төптәрен белергә теләгән кешеләр Аристовтың «Живая старина» журналының 1894

Боронғо заманда төрк ҡәбиләләренең аталған исемдәре ни ҡәҙәр күп, ултырған ерҙәре ни ҡәҙәр киң булһа ла, һандары улай бик күп булмаған, бөгөнгө кеүек әллә нисә үк миллиондар менән һаналмаған, ләкин был ваҡ ҡәбиләләрҙең һәр ваҡыт әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа күсеп урындарын алмаштырып, икенселәре менән аралашып, бер-береһе менән ныҡ ҡатнашып бергә тереклек итеүҙәре сәбәпле күрше-тирәләрендәге халыҡтарға ҡаршы олуғ бер көсҡеүәт булып торған. Төрктәрҙең шәреҡ тарафында, хәҙерге Маньчжурия ерендә манжур, тунгус халыҡтары, Байкалдың шәреҡ тарафында монгол халҡы, шимал тарафында фин ҡәүемдәре торған. Улар барыһы ла төрк халҡы кеүек үк «туран» нәҫеленән булған. Ләкин төрк халҡы ҡәҙәр көслө була алмаған. Шуның өсөн уларға һәр ваҡыт төрктәр идараһында ғүмер итергә тура килгән. Төрктәрҙең йәнүб тарафында ҡытайҙар һәм Иран халыҡтары торған, улар күп ваҡыт төрктәр менән һуғышып ғүмер иткән һәм бәғзе ваҡыттарҙа төрктәргә алман (хәреж)[1] биреп торған. Төрк ерҙәренә һөжүм менән ингеләһәләр ҙә, файҙа итә алмағандар. Олуғ төрк халҡы һәм уларҙың ҙур ерҙәре хаҡында Ҡытай, иранийҙар араһында һәр ваҡыт ҡурҡыныслы хикәйәләр һөйләнелеп торған. Шуның өсөн улар төрктәрҙең ерҙәренә килеп инергә ҡурҡҡандар.

*Мәғишәттәре.* Төрк халҡы әүәл бөгөнгө ҡаҙаҡ халҡы кеүек күсмә мәғишәт иткән. Бөгөнгө ҡаҙаҡ халҡының мәғишәте бик боронғо, хатта милади Ғайса ғәләйһиссәләмдән элекке төрктәрҙең тормошонан бик аҙ айырыла. Ул боронғо ата-бабалар ҙа бөгөнгө ҡаҙаҡтар кеүек кейеҙ өйҙәрҙә торған, мал тәрбиәләгән, бер аҙ иген иккән, малдарҙың иттәре, май, ҡорот вә ҡымыҙҙары менән тамаҡ туйҙырған, уларҙың биргән тиреләре вә йөн кейемдәр менән кейенгән. Төрктәрҙең ултырған урындары иген игергә, башҡа ҡәүемдәр менән ҡатнашып сауҙа итергә уңайһыҙ булған. Ниһәйәтһеҙ киң ҡоро сәхрәләрҙә икенсе ҡәүемдәр эсенә һуҙылып киткән йылғалары булмағанлыҡтан төрк халҡы фәҡәт мал тәрбиәләү менән шөғөлләнеп торған. Урта Азиялағы мөнбит вә мәхсүлдар[2] ерҙәр, мәҙәни мәмләкәттәр яғына һуҙылып киткән Амударъя буйҙары күп һәм төрлө ҡә-

йылғы III—IV жөзьәләрендә «Урта йөҙ ҡаҙаҡтарының төбө» тип, 1896 йыл йәнә шул журналдың III—IV жөзьәләрендә «Төрк ҡәбиләләренең төбө» тип яҙған әҫәрҙәрен уҡырға кәрәк. Ләкин һуңғыһын уҡығанда Бартольдтың «Записки Вост. отд. Имп. Археол. общ.»лағы XI жилдендә 341—356-сы биттәрҙә был китапҡа яҙған тәнҡитен дә ҡалдырмаҫҡа кәрәк *(Ә. В.)*

[1] алман (хәреж) — һалым

[2] мөнбит вә мәхсүлдар — уңдырышлы һәм уңыш биргән

үемдәрҙең һәр ваҡыт һуғышып, талашып тора торған урындары булғанлыҡтан йәнә тыныслап мәҙәни мәғишәтте дауам иттерергә уңай булмаған. Шунда ла төрк халҡы шәрҡи вә ғарбе Төркөстанда һәм Монголияла, төрлө ваҡыттарҙа Ҡытай вә Иран кеүек мәҙәни халыҡтар менән ҡатнашып, мәҙәни мәғишәт итеп ҡараған. Яҙыу вә әҙәбиәттәре лә булған, ғолум вә мәғариф, мәктәп вә уҡыу эштәре менән шөғөлләнеп тә ҡарағандар. Ҡалалар яһатып, матур биналар ҙа эшләткеләгәндәр. Ләкин ерҙәренең уңайһыҙлығынан уҙа алмайынса йәнә элекке хәлдәренә ҡайтырға, күсмә мәғишәт итергә мәжбүр булғандар[1].

*Тәбиғәт вә әхләктәре.* Төрк халҡының ерҙәре, донъялары уларға мәғишәт вә ғомран, йәғни тышҡы мәҙәниәт йәһәтенән тәрәҡҡи итергә[2] ирек бирмәһә лә, уларҙың тәбиғәт вә әхләктәрендә, йәғни эске мәҙәниәттә тәрәҡҡи итеүҙәренә маниғ[3] булмаған, бәлки сәбәп булған. Һәм улар был эске мәҙәниәттә бик юғары урынды ишғал итеп килгән[4]. Донъяла бик күп быуаттар ғүмер итеү уларҙа аҡыл вә тәжрибәнең юғарыланыуына сәбәп булған. Шуның өсөн төрк халҡы эсендә халыҡтың аҡыл вә тәжрибә йәһәтенән бөйөклөгөн күрһәтә торған мәҡәлдәр күп булған. Тәбиғәткә бик яҡын тороп, киң сәхрәләрҙә, ниһайәһеҙ урмандар эсендә һөт, ҡымыҙ, ит кеүек нәмәләр менән тәрбиәләнеүҙәре уларҙың баһадир булыуҙарына сәбәп булған. Шуның өсөн уларҙа ғажиз кешеләрҙә генә була торған ялыныу, монафиҡлыҡ[5], ғәйбәт, рияланыу[6], жасуслыҡ[7], кеше алдында тәклифләнеү[8], кеше малын йәшертен алыу-урлау вә хыянат кеүек насар холоҡтар булмаған.

Бер мөәррих әйткән: «Төрктәр ат өҫтөндә үҫкәндәре өсөн атта йөрөргә фәүҡелғәдә оҫта, үҙҙәре ғайәт түҙемле, ҡулдарын бәйләп ҡоҙоҡҡа һалғанда ла тырышып сыға, арыуни икәнен дә белмәй һәм бик еңел вә аҙ йоҡлайҙар вә бик тиҙ уяналар. Һуғыш эштәрендә үҙҙәре бик оҫта вә һәр ваҡыт ғалиб ҡылыусандар. Донъяла һуғыштан башҡаларға зарар итеп, үҙҙәре генә файҙа күреп йөрөүсе бер халыҡ булһа, былар булыр. Һуғыш ваҡытында дошмандарына бик ҡатылар. Үҙ араларында бик тыныс вә иттифаҡлы торалар. Тыуған урындарын, ерҙәрен бик һөйөүсәндәр. Бы-

---

[1] Ж.М.Н.П., 1896. № 6, отд. II, 381-се бит. *(Ә. В.)*
[2] тәрәҡҡи итергә — алға барырға
[3] маниғ — ҡаршылыҡ
[4] Ж.М.Н.П., 1896, № 6, отд. II, 368-се бит. *(Ә. В.)*
[5] монафиҡлыҡ — ике йөҙләләнеү
[6] рияланыу — ялағайланыу
[7] жасуслыҡ — шымсылыҡ
[8] тәклифләнеү — көс ҡулланыу

лар фәҡәт хәрәкәтләнеп, ни мен[illegible] ла шөғөлләнеп тороуҙы ярата. Хәрәкәтһеҙ тик тороу быларҙа аслан юҡ һәм бер урында ғына ултырып тороуҙы хибестә тороу кеүек күрәләр. Тиҙ-тиҙ урын алыштырып торалар»[1]. Төрк халҡы боронғо замандан бирле ҡайғыға, уйға, фекергә оҙаҡ талып тороусан булмаған. Мөмкин ҡәҙәр һәр эште оҙаҡ уйламай ғына бөтөрөргә һәм оҙаҡ уйларға хәжәт төшмәй торған хеҙмәттәрҙе генә итергә яратҡан. Шуның өсөн һәр ваҡыт мәэмүр[2] йәки ғәскәр булып билдәле хеҙмәт алырға, үҙ ерендә булмаһа, башҡа мәмләкәттәргә барып булһа ла мәэмүр йәки ғәскәр булырға яратҡан.

*Боронғо төрктәрҙең ғөрөф-ғәҙәте, ҡанун вә диндәре.* Боронғо төрктәр кейемдәрен йөндән һуҡҡан йәки тиренән иләп кенә яһаған һәм оҙон итеп кейгән. Сәстәрен бәғзеләре киҫкән, бәғзеләре ҡытайҙарҙағы кеүек түбә өҫтөнән оҙон итеп ҡалдырып йөрөткән. Яндарында ҡылыс вә уҡ йөрөтөүсән һәм уларҙы бик матурлап зиннәтле итеүсән булған. Һөңгөләренең баштарына алтын, көмөш кеүек ҡиммәтле гәүһәрҙәрҙән бүре башы яһап ҡуйғандар. Төрктәрҙә ғөрөф менән ҡанун бер-береһенән айырылмаған һәм шул ғөрөфтәрен (ҡанундарын) һәр кем яттан белгән вә шуға итәғәтте үҙенә важиб[3] тип иғтиҡад иткән[4]. Уны яҙып йөрөтмәгәндәр. Ғөрөфтәре буйынса, ил араһындағы ғөрөфкә (ҡанунға) буйһонмағандар, кеше үлтереүселәр, ирле-ҡатындарҙың намыҫына туҡыныусылар, ханға ҡарышҡандар үлтерелгән. Йәш ҡыҙҙы урлап алып китеүселәр йә уға өйләнергә йә бер миҡдар мал түләргә, мал урлаусылар нәмәне ун өлөш итеп түләргә, түләргә нәмә тапмаһа, үлтерелергә тейеш булған. Үҙ тиңенә сыҡҡан ҡыҙҙы аталары ҡайтара алмаған. Үлектәргә бик ҡайғырғандар һәм уға ҡорбан салғандар һәм үлгән кешенең атын вә кейемдәрен яҡҡандар. Үлеүсенең ҡәберенә таштар ҡуйғандар. Олораҡ кешеләрҙең ҡәбер таштарына уның фазиләттәрен[5], батырлыҡ вә ғәйрәттәрен яҙғандар. Һәр йыл үлектең ҡәбере өҫтөнә йыйылып ат йәки ҡуй ҡорбан итеп ҡәбер өҫтөнә аҫа торған булғандар. Ғөрөф буйынса һәр ҡәбилә, йәмғиәт үҙенең башына (ағаға) табиғ булған[6]. Ағалар хандарға, хандар олуғ хандарға табиғ булғандар. Әгәр хандар, олуғ хандар булмаһа, ҡәбилә башлыҡтары үҙҙәре мөстәҡил булған. Хандар вә ҡәбилә башлыҡтары халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәргә

---

[1] Фазаил әт-Төрк әл-Жәхиз *(Ә. В.)*.
[2] мәэмүр — идара итеүсе
[3] важиб — шикһеҙ үтәлергә тейешле
[4] иғтиҡад иткән — ышанған
[5] фазиләттәрен — яҡшылыҡтарын
[6] табиғ булған — буйһонған

итәғәт иткән-итмәгәнен тәфтиш итеп торған. Идара эштәре хаҡында халыҡтың мөғтәбәрҙәрен йыйып, ҡоролтай (кәнәш мәжлесе) яһап кәнәшләшкәндәр. Диндәре бөгөн «шаманлыҡ» тип атала торған мәжүси мәҙһәбе булған. Улар күк, ер, ут, һыу, ағас, мәғдәндәр мәжүси бер алланан ғибәрәт тип ышанған. Ләкин аранан күкте артығыраҡ хөрмәтләгәндәр. Үлгәндең һуңында йән яҡшы булһа күккә — ожмахҡа, гонаһлы булһа, ер аҫтына — ҡараңғылыҡҡа, тамуҡҡа китә тип иғтиҡад иткәндәр. Бик күп пәрей вә ендәргә вә һәр нәмәнең үҙенә күрә бер пәрейе булыуына ышанғандар. Мәғдәндәр араһынан тимерҙе артығыраҡ хөрмәт иткәндәр вә һуғышты мөҡәддәс иғтиҡад иткәндәр. Бәғзе урындарҙы, тауҙарҙы хөрмәтле һанап, шунда ғибәҙәткә барғандар[1].

*Боронғо төрктәрҙә сәйәси тормош. Ҡаандар.* Төрк ҡәбилә вә йәмғиәттәрендә иң боронғо замандан бире ҡәбилә башлыҡтары — ағалар хөкөм итеп килгән. Күп ваҡыт ҡәбилә башлыҡтарынан береһе көслөрәк, ғәйрәтлерәк булып күршеләге йәмғиәттәрҙе лә үҙ ҡулы аҫтына ала алһа, күңеле үҫеп башҡа ҡәбиләләрҙе лә үҙенә ҡушып, мәмләкәтен киңәйткән. Хатта бөтә төрк илен вә төрктәрҙең күрше туғандары булған мағул, тунгус, фин халыҡтарын да ҡулына алып ҙур мәмләкәт төҙөүселәре булған. Ләкин был мәмләкәттәр оҙаҡ быуаттар дауам итә алмай таралғандар. Ғәҙәт буйынса ҡаан, ҡыҫҡартып әйткәндә, хан үҙенең мәмләкәтен балалары араһында бүлеп биргән. Улар йәнә үҙ балаларына бүлгәндәр. Балалары үҙ-ара мәслихәтте оҙаҡ һаҡлай алмай таралған. Шулай итеп, йәнә элеккесә ҡәбилә ҡәбиләгә бүленеп бөтә торған булған. Ындай мәмләкәттәрҙең мәғлүм булғандарының иң боронғоһо «һун ханлығы».

*Һундар.* Һун ҡаанлығының миләди Ғайсанан өс быуат элекке хәле асыҡ мәғлүм түгел. Миләди Ғайсанан өс быуат элек һун төрктәренең башлығы булған Модә хан бөтә төрк ҡәбиләләрен шәреҡтә Бәхре мөхит кәбирҙән[2] ғарбтә ҡыпсаҡ сәхрәләренә ҡәҙәр булған һәммә ерҙәрҙе үҙ ҡулына алған һәм Ҡытай, Шимали Һиндостанды үҙенә ҡаратты. Модә бөтөн төрктәрҙе егерме дүрт олуғ бүлеккә бүлде. Һәм халыҡты ун, йөҙ, мең, йөҙ меңдәргә бүлеп, һәр береһенә рәйес ҡуйып тәртипләп ултыртҡан.

Ҡоролтай йыйып, халыҡ араһындағы ғәҙәттәрҙе нығытып, ғөмүми ҡанун төҙөнө. Модә хан миләдтән 174 йыл

---

[1] Иҫке төрк монгол дине булған шаманлыҡ хаҡында Доржи Банзаровтың 1846 йылғы «Ученые записки Казан. ун-та»ла «Черная вера или шаманизм» тигән әҫәрен ҡарағыҙ. *(Ә. В.)*

[2] Бәхрә мөхит кәбирҙән — Тымыҡ океандан

мөҡәддәм вафат итте[1]. Миләдтән һуң 48 йылда Һун мәмләкәте йәнүби вә шимали исеме менән ике мөстәҡил өлөшкә айырылды. Тянь-Шань тауҙары тирәһендәге йәнүби ҡыҫымы ҡытайҙар нөфүҙенә[2] керҙе. Монголия вә Алтайҙағы, Иртыш вә Урал тарафындағы шимали һундар миләдтән 93 йылда йәнүби һундар һәм Ҡытайҙар тарафынан мәғлүб булды һәм бер ҡыҫымы Урал — Иҙел тарафтарына, ҡазар, болғар, мажар вә фин ерҙәренә вә унан бишенсе быуат миләдиҙә Баламир һәм Атилла исемле ғәйрәтле хандары командаһында Ғарбе Европаға хәҙерге Балҡан дәүләттәре һәм Австро-Венгрия дәүләте урынына барып ҙур мәмләкәт төҙөнө. Вә бер ҡыҫымы Алтай тауҙары араһында ҡасып ҡалды. Шулай итеп, асыл төрк ерендәге Һун мәмләкәте тамам таралды.

Һун нәҫеленең төшөүенән һуң мәмләкәт сияншы исемле, уларҙан һуң жужан исемле, асылдары төрк булмаған сит нәҫелдәргә күсте. Улар ҙа һундар кеүек бөтөн төрк халҡын һәм монгол вә манжур халыҡтарын үҙ ҡулдарында тотто. Һәм миләдтән алтынсы быуаттың уртаһында мәмләкәт идараһы йәнә асыл төрктәргә ҡайтты.

*Тукиулар, уғыҙҙар.* Мәмләкәтте жужандар ҡулынан алыусы төрктәрҙе ҡытайҙар фәҡәт төрк (тукиу) тип атай. Был төрктәрҙең ғөмүмерәк исемдәре уғыҙ булған. Улар ғарбкә Урал — Иҙел тарафтарына киткән һундарҙан ҡалған шимали һундарҙың ҡалдыҡтары. Биш йөҙ йыл ҡәҙәр ваҡыт ситтәр, сияншы вә жужандар ҡулында тороп, аҙаҡтан дәүләтте үҙ ҡулдарына ҡайтарып ала алдылар һәм Бәхре мөхиттән ғарбтә Ҡара диңгеҙгә ҡәҙәр ерҙәге һәммә төрк, монгол вә манжур ҡәбиләләрен үҙҙәренә буйһондорҙолар. Улар ҡулдарындағы ҡәүемдәрҙең һәммәһенә лә идарала ихтыярлыҡ (автономия) биргән ине. Дахили[3] эштәренә бер ҙә ҡатышманылар. Тик алман (хәреж) һәм хәжәт ваҡытта ҡаанға ғәскәр биреп тороу ләзим ине. Бәғзе ваҡыт Ҡытай императорҙары үҙҙәрен ошо төрк хандарының вәлийе һананы һәм күп ваҡыт алман (налог) түләне. Олуғ төрк мәмләкәте етенсе быуаттың башында Ғарбе вә Шәрҡи исемле ике олуғ ҡыҫымға бүленеп идара ителде.

---

[1] Был Модэ ханды төрктәр үҙҙәре Уғыҙ хан тип атаған. Был хаҡта Иакинф Бичуриндың «Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии» тигән китабының беренсе жилд 26—27-се биттәрен ҡарарға кәрәк. Һундарҙың асылы хаҡында Иностранцевтың «Живая старина» журналының 1900 йылғы жилдтәрендә «Хунну и гунны» тигән әҫәрен, мәғишәттәре хаҡында баяғы «Собрание сведений...» китабының I жилд. 1—150-се биттәрен ҡарарға кәрәк. *(Ә. В.)*

[2] нөфүҙенә — йоғонтоһона

[3] дахили — эске

Шәрҡи төрк ханы олуғ ҡаан тип йөрөтөлә, Ғарбе төрк хөкүмәте уға табиғ була ине. Уйғыр, ҡырғыҙ, тува, миркет, ҡарлыҡ халыҡтары һәммәһе лә Шәрҡи хөкүмәттә, әммә Джунгариянан (ул ваҡыт Юйбан) башлап Иран хөдүде «Тимер ҡапуғ»[1] тигән ергә ҡәҙәр бөтә Урта Азия Ғарбе хөкүмәттә ине. Шәрҡи хөкүмәттең мәркәзе, боронғо һундар кеүек, Орхон буйында; Ғарбе төрктәрҙең мәркәзе иһә Джунгарияла ине. Ике мәмләкәт күп ваҡыт айырылышҡылап тора ла һуңынан йәнә бергә йәшәй ине.

Шәрҡи төрк ҡаандарынан мәшһүрерәктәре: Шибы, Ашын, Мочэ, Билгә исемле хандар. Бының өҫтөнә Билгә хандың ағаһы Күлтегин һәм ғарбе төрк хандарынан Дизабул, Сулу исемендәгеләре мәшһүр.

Етенсе быуаттың аҙағында был мәмләкәт бик зәғифләнгән ине. Һигеҙенсе быуатҡа сыҡҡас, Күлтегин хандарҙың ғәйрәттәре менән мәмләкәт хәле йәнә төҙәлә төштө. Ләкин был оҙаҡҡа барманы, сөнки элекке хандарҙың йомшаҡлыҡтары менән мәмләкәт эсендә сыҡҡан баш-баштаҡлыҡ һәмишә дауам итә ине. Икенсенән, мәмләкәттең Иран сигенән ҡеүәтле харижи[2] дошмандар (ғәрәптәр) килеп сыҡты һәм ҡаан ғәскәре дахили фетнәләрҙе баҫыу менән шөғөлләнгән ваҡытта байтаҡ ҡалаларҙы фәтех итеп тә өлгөрҙө.

*Төрк ерҙәрендә ғәрәптәр.* Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең вафаты һуңынан оҙаҡ та үтмәй ғәрәп халҡы ҡеүәтле бер батшалыҡ һүрәтен алды вә тиҙҙән күршеләренән ҡеүәтле Иран мәмләкәтен фәтех итте. Ирандың шаһы мәмләкәтен ғәрәптәргә биреп ҡасты һәм Урта Азияла беҙҙең төрктәр араһына килеп һыйынды. Һижрәттән 46 йылда (йәғни 666 миләди) ғәрәп әмире Рабиғ бин әл-Харис Иран шаһын ҡыуып төрк иленә килде. Һәм Амударъяның бире яғына сығып китте.

Урта Азия был ваҡыт рәсми һүрәттә ҡаанға табиғ иһә лә, бөтөн эш ерле хандар вә диһкандар (байҙар, ер хужалары) ҡулында ине. Улар үҙ-ара өҙлөкһөҙ низағ итешә ине.

Арала бөгөнгө Сәмәрҡәнд вә Бохара виләйәттәренән ғибәрәт булған Соғдаҡ (Соғыд) ханы (уларҙың хандары Саған Худат аталған) иң бай вә ҙур хан ине[3]. Ғәрәп әмирҙәре башҡа ханлыҡтарҙың ярҙамы менән был ханлыҡтың ҡалаларын алды. Башҡа ҡалаларҙы алыуҙа ерле диһкан-

---

[1] Төрк менән Иран хөдүде «Тимер ҡапуғ» тигән урын ине. Бөгөн Бәлх менән Сәмәрҡәнд араһында Боҙғал исемле бер тау араһында. *(Ә. В.)*

[2] харижи — тышҡы

[3] Был ханлыҡтарҙың пайтәхете Соғдиана атала ине, бөгөнгө Динау ҡалаһы урынында булған. *(Ә. В.)*

дарҙан файҙа күрҙе. Ғәрәптәр ғайәт оҙаҡ һуғышты, ерле диһкандар бер ваҡыт ғәрәптәргә ҡаршы (681—683 миләдиҙә) иттифаҡ итеп тә ҡараны, булманы.

Хатта Соғыд ханы үҙенең дошман хандарына ҡаршы ғәрәп әмире Ҡәтибә бин Мөслимде саҡыра ине. Ниһәйәт, олуғ ҡаандың ғәскәре бындағы эшкә ҡатнаша башланы. 701 йыл Мочэ хандың ғәскәре Соғыдҡа барҙы, ләкин ҙур эш башҡара алманы. 712 йыл Күлтегин барҙы, тамам ғәрәптәр ҡулына кереп бөткән Соғыдты алды. Ғәрәптәр ҡулында фәҡәт Сәмәрҡәнд ҡалаһы ҡалды. Ҡаанға хыянат иткән бәғзе ерле хандар Күлтегингә эште оҙаҡҡа һуҙырға ирек бирмәне, ул Тимер ҡапуғҡа барып етте лә кире ҡайтты. Ғәрәптәр бынан файҙаланып, 713 йыл Шаш (Ташкент) менән Фирғәнәне алды. 716 йылда бөтөн төрк илдәрен берләштергән көслө Мочэ хан вафат итте. Урынына (үҙенән элек хан булған) ағаһы Ҡотлоғ хандың оло улы Билгә хан ҡалды. Был кемсә энеһе Күлтегин менән бергә идара итте. Ғарб төрктәре Сулу исемле хандары командаһында Ысыҡ күл һәм Чу йылғаһы буйында тағы нығып истиҡлал итте[1]. Ләкин бының менән файҙа булманы. Сулу хан Соғыдты ғәрәптәргә бөтөнләй бирергә мәжбүр булды. 738 йылда был хөкүмәт тамам төштө. Һәм ғәрәптәр, бынан файҙаланып, бөтөн Сырдаръя буйҙарын алды (739 миләди), Эске Төркөстанға уҡ керҙеләр. Күлтегин (731 йыл) вафат итте. Унан өс йыл һуң олуғ ҡаан Билгә хан да үлде. Уларҙан һуң Баймай хан тигән кеше ҡаан булған ине, йомшаҡ кеше ине, мәмләкәтте идара итә алманы. 745 йыл басмыл халҡы менән Селенга буйындағы уйғырҙарҙың башлыҡтары был ханды үлтерҙе. Шулай итеп, мәмләкәт бөттө.

*Боронғо төрктәрҙең мәҙәниәте.* Бөгөнгө быуатта Себериә йә Төркөстанда боронғо төрктәрҙең мәҙәниәттәрен күрһәтә торған бик күп яҙыулы таштар, китаптар, бина әҫәрҙәре табылды. Ҡытай тарихтарында һун хандарының Ҡытай батшалары менән яҙышҡан хаттары күсерелгән. Был хаттар һун хандарының аҡыл вә белек йәһәтенән яҡшы уҡ мөһим урынды шөғөлләндергәнен күрһәтә[2]. Шул уҡ Ҡытай тарихтары сияншы хандарынан Муйынҡай хан тигәненең миләди 321 йылдарҙа үҙе мәҙрәсә бина иттереп Ҡытайҙан мөғәллимдәр килтерткәнен һәм үҙе дәрес тыңлағанын, мәм-

---

[1] Пайтәхеттәре Чу йылғаһының баш ағымының һул яғында, хәҙерге Туҡмаҡҡа ҡаршы тарафта вә унан йыраҡ түгел урында Суяб исемле ҡала ине. *(Ә. В.)*

[2] Һун хандарының хаттары Иакинфтың мәҙкүр «Собрание сведений» китабының беренсе жилдендә 22—25, 30—32, 53—55, 80—85-се биттәрҙә дәрж ителгән.

ләкәт халҡы, төрктәр араһында уҡыу-яҙыу таратыу менән шөғөлләнгәнен һөйләй. Бөгөн кәшеф ителгән әҫәрҙәр тарихтағы был һүҙҙәрҙең хаҡлығын асыҡ күрһәтте.

Уғыҙ төрктәренең ханлыҡ итеү дәүерҙәре беҙҙең боронғо тарихыбыҙҙа бик яҡты дәүер булып иҫәпләнә. Ҡытай менән Иран күп ваҡыт беҙгә алман түләгән. Европалағы Византия хөкүмәте лә был ханлыҡ алдында үҙен әҙәпле тоторға мәжбүр булған. Был дәүерҙә төрк илендә игенселек, сауҙа, тижарәт[1] тәрәҡҡи итте. Төрк мәмләкәтенең төрлө тарафтарына балыҡтар (ҡалалар), кургандар (крепостар) һалынған ине. Ҡусмә мәғишәт итһә лә, һәр бер төрктөң билдәле бер игенлеге бар ине. Төрлө мәмләкәттәр менән сауҙа вә тижарәт вә уның хаҡында моғаһәдәләре[2] булды. 568 йыл ғарбе төрк ханы Дизабул төрк сауҙагәрҙәренең Истанбулға сауҙа менән барыуҙары тураһында һөйләшер өсөн Византияға илсе ебәрҙе. Быға ҡаршы икенсе йыл Византия хөкүмәте лә илсе ебәрҙе. Бында сауҙа тураһында һәм һәр ике хөкүмәт Иран мәмләкәтенә ҡаршы һуғыш асыу тураһында ғәһед итеште. Ләкин һуғыш ваҡытында Византия ҡурҡты, ҡатнашманы. Шуның өсөн асыу итеп Орхондағы олуғ ҡаан Тарғуҙың мәслихәте менән Дизабул (579 йыл) Византияға ҡаршы һуғыш асты вә бөгөнгө йәнүби Россияла Ҡырым тирәһендәге хөдүдте үтеп, Византияның Херсон ҡалаһын алды. Хатта Босфорға ҡәҙәр барҙы. Был ханлыҡтарҙың сәйәсәт һәм сауҙа вә тижарәт эштәре менән Иран һәм Ҡытайҙа һәр ваҡыт илселәре була ине.

Был ҡаанлыҡтан беҙҙең заманға байтаҡ ядкәрҙәр һаҡланып ҡалған. Күлтегин һәм Билгә хандарҙың исемдәренә таштан яһалып боронғо төрктөң милли яҙыуы менән ул хандарҙың үҙҙәре, мәмләкәттәре хаҡында бик күп файҙалы һүҙҙәр яҙылған һәйкәлдәр был ядкәрҙәрҙең иң олуғтарынан. Был таштар беҙгә Уғыҙ төрктәренең мәҙәниәттә ни дәрәжә юғары булғанлыҡтарын асыҡ күрһәтә.

---

Күлтегин, боронғо бабаларыбыҙҙың һанынса, ҡуй йылында (731 йылға тура килә) мартта вафат иткән. Боронғо ғәҙәт буйынса, алты ай кисектерелеп, октябрҙә (боронғоса әйткәндә, туғыҙынсы айҙа) дәфен ителде. Был йыназаға башҡа мәмләкәттәрҙән дә илселәр килгән. Ҡуян (себен) йылында етенсе айҙың егерме етенсе көнөндә (732 йыл 2 августка тура килә) Билгә ҡаан энеһенең (Күлтегиндең)

---

[1] **т и ж а р ә т** — сауҙа
[2] **м о ғ а һ ә д ә л ә р е** — килешеүҙәре

шәрәфенә таштан яҙҙырып бетек таш (һәйкәл, памятник) ултыртты. Билгә хандың вафаты һуңынан йәнә шундай уҡ бетек таш ултыртҡандар. 1889 йыл Ядринцев исемле ғалим ошо бетек таштарҙы Орхон йылғаһы буйында Ордынтасзу исемле Будда монастырынан 80 саҡрым түбән урында тапты. Һәр ике таш күк мәрмәрҙән бик матур итеп эшләнгән. Күлтегиндың ташы өс метр 74 сантиметр бейеклектә, бер метр 24 сантиметр киңлектә, 40 сантиметр ҡалынлыҡта. Әммә Билгә хан ташы аҙ ғына ҙурыраҡ — 3 метр, 45 сантиметр бейеклектә, бер метр 74 сантиметр киңлектә, 72 сантиметр ҡалынлыҡта. Был таштарҙы Томсон һәм Радлов исемле ғалимдар боронғо яҙыуҙарҙан ҡарап танып уҡыған. Күлтегин мәхкүкәтендә[1] меңдән артығыраҡ хәреф бар. Әммә Билгә хандыҡында бынан да артығыраҡ ине. Ошо яҙыуҙарҙа үҙ мәмләкәттәрен нисек киңәйткәндәре, халыҡ араһындағы фетнәләрҙе нисек баҫып, мәмләкәтте тынысландырғандары, ғәрәптәр һәм ҡытайҙар менән мөхәрәбәләре зикер ителгән һәм төрк мәмләкәтенең сәйәси хәле нисек булғаны, хандарының халыҡ өсөн ни дәрәжәлә ижтиһад иткәне, ҡайғырғаны, төрктәрҙең диндәре вә ул милләттең нисек килеп сығыуы, аҙыраҡ тарихы, әхләҡ вә тәбиғәттәре һөйләнгән. Билгә ҡаан үҙенең энеһенең (Күлтегиндың) вафаты өсөн ни дәрәжәлә ҡайғырғанын ошо һүҙҙәр менән әйтә:

«Минең энем Күлтегин үлде. Был эш минең йөрәгемде әрнетә, минең күрә торған күҙҙәрем гүйә бөтөнләй күрмәҫ булды, аҡылым бер нәмә лә аңламаҫ булды. Мин тамам хурландым. Ғүмерҙәрҙе тәңре бүлеп бирә, инсандар һәммәһе үлер өсөн тыуған. ...Минең күҙҙәремдән йәштәр түгелә, аға. Ҡеүәтле аһтар тамам йөрәк эсенән сыға, мин яңынан, яңынан хурландым. Һәм бик ҡаты хурландым, мин ҡайғыға бирелдем, минең һәм ике бәктәрем, уландарым, ҙур дәрәжәле вәзирҙәремдең күҙҙәре был илауҙан боҙолор...»

Күлтегин һәм Билгә хан һәйкәлдәренән башҡа йәнә бәғзе бер яҙыуҙар, шул ваҡытта Йәнәсәйҙә ҡырғыҙҙар тарафынан яҙылған һәйкәлдәр табылды. Улар барыһы ла ул ваҡыттағы төрктәрҙең башҡаларҙың тәьҫиренә кереүҙән элгәре ваҡытта уҡ эске мәҙәниәттә, тел һәм әҙәбиәттә яҡшы уҡ юғары урында булғанлыҡтарына шәһәҙәт бирә. Яҙыуҙар төрк теленә бик муафиҡ[2] ҡағиҙәле вә монтазам[3] булыуҙары менән беҙҙең бөгөнгө ғәрәпсә яҙыуҙан, теле үҙенең сафлығы вә матурлығы менән беҙҙең бөгөнгө төрк те-

---

[1] мәхкүкәт — ҡәбер ташына соҡоп яҙылған яҙыу
[2] муафиҡ — тура килгән
[3] монтазам — тәртипкә һалынған

ленән әллә нисә мәртәбә артыҡ булған. (Ж.М.Н.П., часть CCCXVIII (1896, № 6), отд. 2. 277—280-се биттәр). Был хәл уларҙың мәҙәниәте бик күптән, бик боронғо замандан уҡ дауам итеп килгәнен күрһәтә.

---

Иҫке төрк мәҙәниәте Орхон, Алтай тирәһендәге төрктәргә генә хас булмайынса, башҡа төрктәр араһында ла булған. Йәнәсәй буйындағы ҡырғыҙҙар тарафынан яҙылып ҡуйылған шундай уҡ таш һәйкәлдәр табылды.

Иҙел (Волга) тамағындағы ҡаҙарҙарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, мәғишәт һүрәттәре Орхон, Алтай төрктәренең ғөрөф вә ғәҙәттәре, мәғишәттәре менән бер булған. Ғәрәптәр Ҡавказ тауҙары аша ҡазар ерҙәренә, йәғни мәмләкәттең ғарбе хөдүдтәренә лә килеп керҙе. Был — һәм ғарбтән, һәм йәнүбтән килеп кереүҙәре шул боронғо мәҙәниәттең бөтөүе тигән һүҙ. Ул мәҙәниәттең бөтөүенә тағы хандар араһында башланған баш-баштаҡлыҡтар ҙа сәбәп булды[1].

---

[1] Тукиу-төрк хөкүмәте хаҡында Ҡытай мөәррихтәренең һүҙҙәрен «Собрание сведений», жилд I, 256—372-се биттәрҙә күрергә мөмкин. Орхон яҙыуҙарының кәшефе хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт «Журнал Министерства Нар. просв.»ның CCXCII жөзьә (1894, № 4), 4-се бүлек, 59—72-се биттәрҙәге Веселовский мәҡәләһенән; Күлтегиндар хаҡында тарихи мәғлүмәт, уларҙың мәғишәттәре, диндәре, мәҙәниәттәре хаҡында һәм таштарҙың ғөмүми хәле хаҡында шул уҡ «Ж. М. Н. П.» журналының CCCXУII жөзьәлә (1898, № 6), 2-се бүлек, 262—263-сө биттәрҙә Мелиоранскийҙың мәҡәләһенән; Күлтегиндың асыл яҙыуҙарының шәрехе хаҡында мәғлүмәт «Зап. Вост. отд. Имп. Рус. Арх. Общ.»ның XII жилдендә, 1—144-се биттәрҙә Мелиоранскийҙың «Памятник в честь Кул-тегина» тигән мәҡәләһенән алырға мөмкин.

Әммә тәфсилле мәғлүмәт өсөн Томсон, Радлов, Бартольд, Клеменц, Ядринцев, Ф. Герт, Банг, Маркварт, Шаванн, Вамбери вә ғәйреләрҙең әҫәрҙәре бар.

## АҢЛАТМАЛАР

**1. Йырҙарыбыҙ хаҡында.**

1911 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан «Шура» журналының 10, 14-се һандарында баҫылған. Текст тулы килеш алынды. Р. Әмирханов төҙөгән библиографиянан башҡаларында «Төрксә дүрт мисраҡлы манилар хаҡында» тип аталған.

«Шура»ла Әхмәтзәки Вәлиди имзаһы менән баҫылған — *18.*

**2. Төрк вә татар тарихы.**

Әхмәтзәки Вәлидиҙең беренсе китабы. Ул 1912 йылда Ҡазанда баҫылған. Йыйынтыҡҡа әҫәрҙең «Инеш» өлөшөнән бер киҫәк алынды. Был китапты Ә. Вәлиди «Ҡасимиә» мәҙрәсәһендә төрки халыҡтарының тарихы буйынса уҡыған лекцияларына таянып яҙған. «Төрк вә татар тарихы»на инмәгән материалдарҙы ул айырым баҫтырырға ниәтләнә. Ул «Һарай дәүләтенең эске ҡоролошо» тип аталырға тейеш була. Был мәғлүмәт китабында теркәлгән. Бынан тыш, Ҡазан ханбикәһе Сөйөмбикә тураһында ла бер әҫәр әҙерләүе тураһында хәбәр итә. 1915 йылда уның «Ҡыҫҡаса рәсемле төрк-татар тарихы» исемле икенсе китабы баҫыла. 1917 йылда ул ҡабаттан нәшер ителә. Китабының ике варианты ла мәҙрәсәләрҙә дәреслек итеп ҡулланыла. 1917 йылда үткән ғөмүми уҡытыусылар съезында «Төрк вә татар тарихы» һәм «Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы» уҡыу китаптары сифатында тәҡдим ителә: беренсеһе — уҡыусылар өсөн, икенсеһе — мөғәллимдәр өсөн. Был әҫәрҙәр библиографияларға шул уҡ исемдәр менән ингән.

1912 йылда Ә. Вәлидиҙең «Төрк вә татар тарихы» исемле тәүге китабы сыҡҡас, уның өҙөктәре Истанбулда нәшер ителгән «Төрөк йорто» исемле журналда ла баҫыла (1912, № 7). Ошо журналда уның китабы хаҡында Йософ Аҡсураның мәҡәләһе лә донъя күрә. — *32.*

**3. Бөрйән башҡорттары араһында.**

1913 йылда «Шура» журналының 19—22-се һандарында баҫылған. Текст шунан алынды. Әбү Нәхил әл-Тамими шиғыры ғына ҡыҫҡартылды. Библиографияларҙа (Р. Әмир-

хановтыҡынан тыш) «Бөрйән башҡорттары этнографияһы тураһында» тип аталған. Ә. Вәлидиҙең Рәсәй осоро эшмәкәрлегенә ҡараған был мәҡәлә уның башҡорт этнографияһына бағышланған беренсе махсус хеҙмәте булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә.

Ә. Вәлиди төрки халыҡтарға дөйөм төрк милләте булараҡ ҡарай, үҙе әйтеүенсә, улар тик һуңғы быуаттарҙағы сәйәси хәлдәр арҡаһында ғына айырым һәм бер-береһе менән бик аҙ таныш булған йәмғиәттәргә айырылған.

Төрки халыҡтарҙың үткән үҫешен ҡарағанда, ул антик дәүерҙән үк билдәле булған өс баҫҡыслы периодизацияны ҡуллана:

1. Вәхшилек дәүере (ҡырағайлыҡ, иң түбән баҫҡыс);
2. Бәҙәүи дәүер (күсмә тормош);
3. Мәҙәни дәүер (ултыраҡ тормош).

Төрки халыҡтар, уның фекеренсә, тарихта билдәле булыуҙарынан алып тереклектең икенсе баҫҡысында булған. Үҙенә замандаш башҡорттарҙы ул мәҙәни тереклектә йәшәүселәр тип иҫәпләгән. Ошо уҡ баҫҡыста булыусы халыҡтар рәтенә Ә. Вәлиди Ҡазан татарҙарын, мишәрҙәрҙе, нуғайҙарҙы, ҡумыҡтарҙы, әзербайжандарҙы, үзбәктәрҙе, уйғырҙарҙы индерә. Сағыштырыу өсөн ҡарағыҙ: ул ҡаҙаҡ, төркмән, Себер татарҙарын күсмә мәғишәттә йәшәүсе халыҡтар тип атай. Мәҙәни баҫҡысты ул, башлыса, ултыраҡ тормошҡа бәйләй. Был мәҙәни тереклек, уның фекеренсә, юғары баҫҡыс булһа ла, халыҡтарҙың дөйөм мәҙәниәт үҫешенә юғары баһа булып тора алмай. Сөнки төрки халыҡтар күсмә тормошта ла мәҙәниәт өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшә алған. Был урында тарихты дәүерҙәргә бүлеп ҡарау тарихсылар тарафынан тарихи үҫеште тикшереү еңел булһын өсөн ҡабул ителгәнен дә әйтеп үтергә кәрәк.

Әхмәтзәки Вәлиди бөрйәндәрҙе мәҙәни тормошҡа һуңыраҡ килеүселәр иҫәбенә индерә һәм уларҙың башҡорт халҡы араһындағы урынын күрһәтеү маҡсаты менән айырым тасуирлай. Ул бөрйән ауылдары тураһында: «Әле беҙ булған ауылдар мәғишәт тарафынан ҡыҫылып, икенсенән, күрше башҡорт һәм татар тәьҫиренә бирелә төшөп, бер аҙ үҙгәргәндәр»,— ти.

Ә. Вәлиди был мәҡәләһендә Башҡортостанды колонизациялау эҙемтәләрен дә урап үтмәй. Уның һөҙөмтәһендә «башҡорттар, боронғо ябайлыҡтарынан айырылып, кеше алдында мөхәббәтһеҙ, боҙоҡ, ғәҙәттән тыш ярлы бәндәләр булып ҡалғандар» тип яҙа ул. Был күренеш Ә. Вәлидиҙе генә түгел, башҡа уҡымышлыларҙы ла борсой. Улар XX быуат башҡарында газета-журналдарҙа был турала йыш ҡына һүҙ ҡуҙғата башлай. Мәҫәлән, «Ва-

ҡыт» газетаһында (1913 йыл, № 1107) «Башҡорт хәлдәре» тип исемләнгән мәҡәләһендә Камил Мусин, башҡорттарҙың насар тормошон уларҙың үҙҙәренән күреп, уҡырға тырышмайҙар, муллалар наҙан, бер туйғансы эсерлек аҡсаға ерҙәрен һаталар, тип ҡайғырып яҙа.

Ошо уҡ йылғы «Шура»ның 3, 4, 5-се һандарында баҫылған «Хәлфиндәр» исемле мәҡәләһендә З. Вәлиди Ибраһим Хәлфингә ҡарата былай ти: «Ниндәй генә бер милләткә монасип булып та, шул милләттең әҙәбиәте, тарихы менән шөғөлләнгән заттарҙың шул милләттең киләсәге хаҡында фекер йөрөтөүҙәре тәбиғиҙер». Был һүҙҙәр уның үҙе хаҡында әйтелгән кеүек.

«Бөрйән башҡорттары...» баҫылып сыҡҡас, «Шура» журналына һәм авторҙың үҙенә байтаҡ шәхси хаттар килә. «Шура»ның шул уҡ йылғы 23-сө һанында Алма-Атала йәшәгән башҡорт Сабирйән Ҡормашиҙың авторға яҙған рәхмәт хаты баҫылып сыға. «Инде ул кеше бөрйән башҡорттарында Темәс вә Күсей ауылдарына барып «Мораҙым» тигән көйҙөң вә йырҙың донъяға таралыуына сәбәпсе булһа, яҡшы булыр ине. Шунан һуң, бәлки, нотаға һалыусылар ҙа табылыр. Әгәр ҙә был көй нотаға һалынһа, йөрәк тамырыбыҙға кереп урынлаша торған бер милли көйөбөҙ булып ҡалыр ине»,— тип яҙа Ҡормаши.

Вәлидиҙең мәҡәләһенә икенсе яуап хат — мәҡәлә Иркутск ҡалаһында мөғәллим булып эшләгән башҡорт Хәбибулла Ғәбитовтан. Уның «Башҡорттарҙың кәмеүенә сәбәп нимә?» тигән мәҡәләһе «Йәш тарихсыбыҙ Ә. Вәлиди йәнәптәренең Башҡортостанда булыуы мөнәсәбәте менән» тигән билдә аҫтында сыға һәм башҡорттарҙың ауыр көнкүрешенә бағышлана. Ул да: «Элек донъяның ожмахы булған киң Урал тауҙарының йәмле баҡсаларында, гүзәл һәм борғоланып, иркәләнеп ағып ятҡан шишмәләре буйҙарында, бал ҡортондай наҙланып, күсеп-күсеп йөрөгән был хоҙай бәндәләре (башҡорттар) замандарында халыҡтарҙың, бәлки, иң бәхетлеһе булғандарҙыр»,— тип, Әхмәтзәки Вәлиди кеүек, башҡорттарҙың әүәлге йәшәгән осорон идеаллаштыра. Ул үҙенең мәҡәләһе аҙағында: «Башҡорттарҙы һан йәһәтенән йылдан-йыл кәметә торған нәмәләр — чахотка, катар, ревматизм, паралич, тиф... кеүек ҡурҡыныслы ауырыуҙар—сит яҡтан булған тәьҫирҙең һөҙөмтәләре. Быға тиклем сифилис кеүек бысраҡ ауырыуҙар уларҙың кәмеүенә сәбәп итеп күрһәтелһә лә, был башҡорттар өҫтөнә ырғытылған ялған икәнендә шөбһә юҡ. Мин уларҙың ысын хәле менән танышҡан инсаф кеше раҫлауына ышанам. Ялғандар хаҡында яҙыуҙы киләсәккә ҡалдырып торҙом»,— тип яҙа. «Шура» редакцияһы Ғәбитовтың мәҡәләһенә коммен-

тарий биргән. Ундағы: «Заманында донъяны үҙенә эйәртә алмаһаң, үҙең заманға эйәр!» — тигән һүҙҙәр башҡорттарҙы, Башҡортостанда булған социаль-экономик һәм башҡа үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алып, үҙҙәренең хәлен яҡшыртырға саҡыра.

Был хеҙмәте тураһында Ә. Вәлиди «Хәтирәләр»ендә иҫкә ала. «Мин,— тип яҙа ул,— башҡорттарҙың ифрат бай фольклорының татарҙар һәм рустар тәьҫире аҫтында ярлылана барыуын, шулай ҙа боронғо төр мәҙәниәтенең ҡайһы бер сифаттарын иң тулы һаҡлаусылар бөрйән башҡорттары булыуын, милли мондоң һәм дастандарҙың бында әле булһа йәшәп килеүен тасуирланым. Ғәскәри тәртип башҡорттарҙың ҡанына һеңгән, улар етәкселәре артынан тотош бер ҡеүәт булып хәрәкәт итә беләләр. Һыбай башҡорт ат һәм эйәре менән бергә һәйкәл кеүек ул. Улар ҡоралды батырҙарса ҡулланыуы, атта йөрөү маһирлығы менән хәҙерге көндә лә боронғо тарихи ғәскәрҙәренең рухын йәшәтеп килә. Был яҙыуҙар башҡорт уҡымышлылары араһында бик ыңғай тәьҫир ҡалдырҙы». Артабан ул: «Дүрт йыл һуңыраҡ башҡорт сәйәси хәрәкәттәре башланғас, был мәҡәләнең файҙалы булыуы күренде»,— тип үҙенең мәҡәләһенә баһа бирә. Ваҡытында башҡорт ижтимағи фекеренә көслө йоғонто яһаған был мәҡәлә хәҙерге көндә лә әһәмиәтен юғалтмаған.— *39.*

**4. Романов сөләләһе батшаһлыҡ иткән дәүерҙә Рәсәй дәүләте һәм мосолмандар.**

1913 йылда Ҡазанда уҡытыусылар өсөн «Мәктәп» журналы сыға башлай. Уның биттәрендә Әхмәтзәки Вәлидиҙең байтаҡ мәҡәләләре донъя күрә. Был мәҡәлә журналдың беренсе һанында баҫылған. Текст тулы килеш шунан алынды.

Журналдың тәүге һанында ошо баҫма менән хеҙмәттәшлек итәсәк күренекле кешеләрҙең исемдәрен баҫтыралар. Ул исемлектә тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди ҙә бар. Беренсе һандың тышлығында «Мәктәп» китапханаһының баҫылып сыҡҡан тәүге китабына реклама бирелә. Ул «Яңы тарихсыларыбыҙҙан Зәки әфәнде Вәлидиҙең «Фетнә ваҡытында һәм Михаил Федорович Романовты тәхеткә һайлау эштәрендә мосолмандар...» тигән әҫәре була. Ул 28 битлек айырым баҫма рәүешендә донъя күрә. Ошо йылда «Мәктәп» журналында уның байтаҡ мәҡәләләре баҫылып сыға.

Библиографияларҙа «Ихтилал заманында вә царь Михаил Федоровичты һайлау ваҡытында исламдарҙың роле» исеме менән сыҡҡан бер баҫмаһы ғына күрһәтелгән.

Р. Әмирханов библиографияһында китап итеп сығарылған баҫмаһы ғына бирелгән.

Журналда мәҡәлә Ә х м ә т з ә к и имзаһы менән сыҡҡан. — *59.*

**5. Мәҙрәсәләребеҙ хаҡында.**

Мәҡәлә 1913 йылда «Мәктәп» журналының 2-се һанында баҫылған. Йыйынтыҡҡа текст тулы килеш алынды. Библиографияларға был әҫәр инмәгән. — *63.*

**6. Мәҙрәсәләребеҙҙең тарихына бер назар.**

1913 йылда «Мәктәп» журналының 3-сө һанында баҫылып сыҡҡан. Текст тулыһынса алынды. Ул «Мәҙрәсәләр хаҡында» исемле мәҡәләнең дауамы итеп яҙылған. Библиографияларҙа был әҫәр ҙә күрһәтелмәгән. — *68.*

**7. Ҡайһы милләттәнһең?**

Билдәле булыуынса, XX быуат баштарында төрки телле матбуғатта тел һәм милләт мәсьәләләренә ҡағылған мәҡәләләр күп баҫыла. Ошо осорҙа «тел ярышы» бәхәсе булып үтә. Милли интеллигенцияны ниндәй телдә яҙыу, милләтте нисек билдәләргә тигән һораўҙар борсой. Ҡайһы берәүҙәр— төрк, икенселәре — ғәрәп, өсөнсөләре — дөйөм төрки, дүртенселәр татар телен Рәсәйҙең бөтөн төрки халыҡтарына әҙәби тел сифатында ҡабул итергә тәҡдим итә. Төрки халыҡтар араһында милләт исемен билдәләү буйынса ла ошондай уҡ бәхәстәр үтә. 1913 йылда «Мәктәп» журналының 6-сы һанында Ғабдулла Батталдың татар исемен хуп күргән мәҡәләһе сыға. Шуға яуап итеп, Ә. Вәлидиҙең «Ҡайһы милләттәнһең?» тигән мәҡәләһе баҫыла. Ул имзаһыҙ донъя күрә. Әммә был уның мәҡәләһе. Был хаҡта ул, 1915 йылда «Сөйөмбикә» журналында «Ҡазан татарҙарының ҡара һүҙҙәренә ғаид яңы әҫәрҙәр» мәҡәләһендә әйтеп үтә. Тик, уның хәбәр итеүенсә, мәҡәлә 9-сы һанда түгел, 7-се һанда булып сыҡты.

Библиографияларға был әҫәр инмәгән.

Әхмәтзәки Вәлиди революцияға тиклем яҙған хеҙмәттәренең һәр береһендә тип әйтерлек милли мәсьәләгә ҡағылып үтә. Улар уның Октябрь революцияһы йылдарында төрки халыҡтарының азатлыҡ көрәшенең алғы сафында булыуын аңларға ярҙам итә.— *74.*

**8. Диуани Мәхтүмҡолой.**

1913 йылда «Шура»ның 12, 13, 14-се һандарында баҫылған. Журналдың ошо уҡ йылдың 15—17-се һандарында, мәҡәләнең дауамы кеүек, «Мәхтүмҡолой әшғәрҙәренә күрһәткес» баҫылған. Был йыйынтыҡҡа «Диуани Мәхтүмҡолой»ҙы бик ныҡ ҡыҫҡартып алдыҡ.

Библиографияларға (Р. Әмирхановтыҡынан тыш) был әҫәрҙәр «Төркмән шағиры Мәхтүмҡолойҙың тормошо һәм

әҫәрҙәре» тип индерелгән, баҫылған йылы 1914 йыл тип яңылыш күрһәтелгән.

Мәҡәлә Әхмәтзәки Вәлиди имзаһы менән сыҡҡан.

Төркиәлә 1928 йылда Ә. Вәлиди «Шәйх Мөхсин-и Фаниҙың Мәхтүмҡолой «Диуаны» баҫмаһы хаҡында тәнҡит» исемле мәҡәлә яҙа. Йәғни ул был темаға тағы бер әйләнеп ҡайта.— *80.*

**9. Профессор Бартольдтың беҙҙең арабыҙҙа булыуы мөнәсәбәте менән.**

Әхмәтзәки Вәлидиҙең 1913 йылда Ырымбур ҡалаһында сыҡҡан «Ваҡыт» газетаһының 1124—1125 һандарында донъя күргән был хеҙмәте, исеменән үк аңлашылыуынса, В. В. Бартольдҡа бағышланған. Мәҡәләлә Көнсығышты өйрәнеүсе күренекле ғалимдың фәнни эшмәкәрлегенә байҡау яһала.

Василий Владимирович Бартольд (1869—1930) Санкт-Петербургта тыуа һәм ундағы университеттың көнсығыш телдәр факультетына уҡырға инә. Университетты тамамлағандан һуң, ул үҙ аҡсаһына Европа илдәре буйлап сәйәхәт итә һәм танылған ғалимдар А. Мюллер, Э. Мейер, Т. Нёльдеке, Г. Гюбшман лекцияларын тыңлай. Әйләнеп ҡайтҡас, уны үҙе уҡыған университеттың көнсығыш тарихы кафедраһына профессор дәрәжәһенә әҙерләнер өсөн алалар. 1900 йылда уға магистрлыҡ дәрәжәһенә дәғүә итеп яҙылған «Туркестан в эпоху монгольского нашествия» исемле хеҙмәте өсөн көнсығыш тарихы докторы дәрәжәһе бирелә. В. Бартольдтың был хеҙмәтен юғары баһалап, Әхмәтзәки Вәлиди: «Төрк тарихы менән иштиғәл итеүселәр өсөн һәр ваҡыт ҡулда тоторға, бәлки быны уҡымайынса төрк тарихы майҙанына сыҡмаҫҡа тейеш булған бер әҫәр»,— тип яҙа. Шулай уҡ ул В. Бартольдтың «История изучения Востока в Европе и России» исемле хеҙмәтен хаҡлы рәүештә: «Тарихыбыҙ менән шөғөлләнеүселәргә даими ҡулланма булырлыҡ әҫәрҙәрҙәндер»,— тип баһалай.

Билдәле булыуынса, 1913—1914 йылдарҙа Ә. Вәлиди Урта Азияға ике археологик экспедиция яһай. Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәте советында үҙен беренсе командировкаға ебәреүҙе һорағанда ул, Бартольдтың фәнни эшмәкәрлегенең тәүге осоронда Урта Азияла йүнле яҙма ҡомартҡылар юҡ тигән фекере, минең мәғлүмәттәрем буйынса, яңылышыу, тип нигеҙләй. Ысынлап та, В. Бартольд үҙенең был мәсьәлә буйынса фекерен һуңынан үҙгәртә. Әхмәтзәки Вәлидиҙең ике сәфәре һөҙөмтәләре, «Восточные рукописи Ферганской области» һәм «О собраниях рукописей в Бухарском хан-

стве» тип аталып, «Записки Восточного Отделения Императорского Русского археологического общества» исемле русса фәнни йыйынтыҡта (В. В. Бартольд редакторлағандан һуң) баҫылып сыға.

Бынан тыш, революцияға тиклемге осорҙа Вәлиди менән Бартольдтың хат алышыуы билдәле. Ә. Вәлиди үҙенең «Хәтирәләр»ендә Бартольд менән булған яҡшы мөнәсәбәттәре хаҡында яҙып үтә, Башҡорт ғәскәрҙәре революцион Петроградта булған ваҡытта унда йәшәгән шәрҡиәтселәргә, шул иҫәптән Бартольдҡа, ярҙам итеүен иҫкә ала.

1926 йылда В. В. Бартольд Төркиә хөкүмәтенең һорауы буйынса Урта Азия төрки халыҡтарының тарихы буйынса 12 лекция яҙа һәм Төркиәгә сәйәхәткә бара. Истанбул университетында уның исеменән был лекцияларҙы Рәғиб Холоси исемле бер йәш ғалим уҡый. Бартольд лекцияларының тәүге өлөшөн — Әхмәтзәки Вәлиди, ә икенсе өлөшөн Р. Холоси төрөк теленә тәржемә итә. 1963—1977 йылдарҙа академик В. В. Бартольд хеҙмәттәренең 9 томлыҡ йыйынтығын төҙөгәндә уның «Урта Азия халыҡтарының тарихы буйынса ун ике лекция» исемле әҫәре Истанбул университеты профессоры Әхмәтзәки Вәлиди Туғанда һаҡланған ҡулъяҙма буйынса алына. Бынан тыш, ул. В. Бартольдтың ошо әҫәренең Т. Менцель эшләгән немец телендәге тәржемәһенә 1937 йылда рецензия яҙа.

1939 йылда Ә. Вәлиди «Ибн Фадландың «Сәйәхәт намәһе» исемле докторлыҡ диссертацияһын уҡытыусыһы һәм дуҫы В. Бартольд иҫтәлегенә бағышлап сығара. Әлбиттә, улар, ғалим кешеләр булараҡ, бер-береһенең ҡараштарына объектив тәнҡит күҙлеге аша ҡарарға тырышҡан.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең «Профессор Бартольдтың беҙҙең арабыҙҙа булыуы мөнәсәбәте менән» исемле хеҙмәте уның Ә. Диуаев, Ф. Корш, Ш. Мәржәни, Хәлфиндәр, А. Вамбери тураһындағы мәҡәләләре рәтенә инә.

Текст китапҡа тулы килеш алынды. Библиографияларға ул «Академик Бартольдтың ғилми әҫәрҙәре хаҡында» тигән исем менән ингән.— *84.*

**10. Фирғәнә ҡатындары тураһында Наливкин.**

Ә. Вәлидиҙең был мәҡәләһе Урта Азия тарихына ҡағыла. Хеҙмәттең барлыҡҡа килеүе авторҙың Фирғәнә өлкәһенә боронғо яҙма ҡомартҡылар эҙләү сәбәбе менән фәнни эш сәйәхәтенә бәйле. 1912 йылда Әхмәтзәки Вәлидиҙең «Төрк вә татар тарихы» исемле беренсе китабы сыға. Бынан тыш байтаҡ мәҡәләләре матбуғатта донъя күрә. Шул хеҙмәттәре өсөн 1913 йылдың 23 апрелендә уны Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең ысын ағзаһы итеп һайлайҙар. Икенсе йыл

хакас сығышлы профессор Николай Федорович Ҡатанов ярҙамында йәмғиәт исеменән Төркөстанға ебәрелә. Уның һөҙөмтәләре уңышлы була: йәш тарихсы боронғо ҡулъяҙмалар тураһында бай мәғлүмәт алып ҡайта. Бер йылдан һуң ул Россия Фәндәр академияһы тәғәйенләүе буйынса Бохара ханлығына сәйәхәт яһай. Һөҙөмтәлә революцияға тиклем уның Урта Азия хаҡында унға яҡын мәҡәләһе нәшер ителгән. «Сөйөмбикә» журналының 6, 9-сы һандарында баҫылған «Фирғәнә ҡатындары тураһында Наливкин» — шуларҙың береһе.

Мәҡәләлә автор башта үҙенең күҙәтеүҙәре, үзбәк ҡатын-ҡыҙҙарының «чимбәт» кейеүҙәренә ҡарашы менән ураҡлаша. Әммә был өлкәлә белгес булмағанлыҡтан, ул Төркөстан тормошо-көнкүрешен, тарихын, телдәрен һәйбәт белеүсе Владимир Петрович һәм уның ҡатыны Мария Владимировна Наливкиндарҙың «Очерк быта оседлого туземного населения Ферганы» исемле китаптарына мөрәжәғәт итә. Ҡазанда 1886 йылда баҫылып сыҡҡан был хеҙмәт Россия география йәмғиәтенең алтын миҙалына лайыҡ була. Көнсығышты өйрәнеүсе билдәле ғалим Василий Владимирович Бартольд баһаһынса, ул «үзбәктәр көнкүреше тураһында бик һәйбәт китап». Ә. Вәлиди үҙенең мәҡәләһендә телгә алынған «Урындағы халыҡтарҙың холоҡтары, ғәҙәттәре, донъяға мөнәсәбәте» исемле бүлеген ҡыҫҡартып, тәржемә итергә вәғәҙә бирә. Тик уның хеҙмәте ни өсөндөр Наливкиндың үҙе һәм хеҙмәттәре хаҡында бер-ике һүҙ әйтеү менән тамамлана.

Йыйынтыҡҡа текст тулыһынса алынды. Библиографияларға (Р. Әмирхановтыҡынан тыш) был хеҙмәт инмәгән. Мәҡәлә Ә х м ә т з ә к и имзаһы менән баҫылған. — *95*.

**11. Мөхәррирҙең үҙ исеменә яҙылған бер мәктүб.**

Былар ошондай исем аҫтында 1913 һәм 1914 йылдарҙа «Шура» журналының 23-сө һәм 1-се һандарында Ә. Вәлидиҙең Урта Азияға ғилми сәйәхәттәр яһаған ваҡытында яҙылған хаттар. Улар береһе лә библиографияларға инмәгән. Йыйынтыҡҡа хаттарҙың текстарын тулы көйө алдыҡ. Тәүге хаты Ә х м ә т з ә к и, икенсеһе Ә х м ә т з ә к и В ә л и д и тип имзаланған.— *100*.

**12. Лотфи һәм уның диуаны.**

1914 йылда «Йондоҙ» газетаһының 1320-се, 1322-се, 1326-сы, 1335-се һандарында баҫылған. Һуңынан ул, газета мәҡәләләренән тупланып, ошо уҡ йылда Ҡазанда айырым китап булып донъя күрә. Йыйынтыҡҡа әҫәрҙән өҙөктәр генә алынды.

Библиографияларға ул «Сығатай шағиры Лотфи һәм уның диуаны» исеме менән ингән һәм уларҙа Ә. Вәлиди-

ҙең был әҫәренең бер мәртәбә баҫылыуы ғына теркәлгән, сыҡҡан йылы яңылыш, 1913 йыл тип күрһәтелгән.— *103.*

**13. Мәржәни.**

Ә. Вәлидиҙең был мәҡәләһе 1914 йылда «Шура» журналының 9-сы һанында бер баш аҫтында бирелгән төрлө авторҙар мәҡәләләре араһында баҫылған.

Шиһабетдин Мәржәни — күренекле татар тарихсыһы, мәғрифәтсеһе. Ул 1818 йылдың 16 ғинуарында Ҡазанға яҡын Ябынсы ауылында донъяға килә. Һуңынан уның атаһы Ташкисеү ауылына имам булып күсә һәм шунда мәҙрәсә аса. Ш. Мәржәни шул мәҙрәсәлә белем ала. 17 йәше тулғас, атаһына уҡытыу эшендә ярҙам итә башлай. Һуңынан ул Бохара һәм Сәмәрҡәндтә уҡыуын дауам итә.

1849 йылда ул тыуған яҡтарына ҡайта һәм Ҡазанда уҡытыу эштәре менән шөғөлләнә. Тарих буйынса байтаҡ китаптар яҙа. Уның ижады әлеге көндә лә тулыһынса өйрәнеп бөтөлмәгән.

Әйтергә кәрәк, Ә. Вәлиди илдә саҡта Ш. Мәржәнигә күп кенә мәҡәләләр бағышлай. Үҙенең «Хәтирәләр»ендә лә уны иҫкә ала. Ул Мәржәниҙе бала саҡтан уҡ олатаһы Хәбибназар Үтәки аша белә һәм ныҡ ихтирам итә. Уның олатаһы Мәржәниҙең уҡыусыһы була. Ул 1862 йылдың 12 сентябрендә Үтәк ауылында (хәҙер Башҡортостандың Ғафури районына ҡарай) указлы мулла Һатлыҡов Мөхәмәтҡафи ғаиләһендә тыуған. Ҡазан ҡалаһында имам булып йөрөгән ауылдашы Әмирхан улы Әхмәтхан саҡырыуы буйынса Х. Үтәки ҡалаға китеп, Ш. Мәржәни мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Аҙаҡтан остазына ярҙамсы булып эшләй. Һуңынан тыуған ауылына ҡайтып, мәҙрәсә аса. Уның ҡулында Ә. Вәлиди ҙә белем ала. Хәбибназар Үтәки «Мифтах-әт-тәуарих», «Мәжмуғаи-мөһиммә», «Науадир тәржемәһе» исемле китаптар баҫтырып сығара. Былярҙан тыш, ул Шиһабетдин Мәржәниҙең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы баҫтырылған «Мәржәни» исемле йыйынтыҡта «Мәржәни хаҡында» тигән мәҡәлә баҫтыра. Был йыйынтыҡта Ә. Вәлидиҙең һәм Р. Фәхретдиновтың мәҡәләләре лә бар. Улар үҙҙәренең хеҙмәттәрендә Х. Үтәкиҙе телгә ала. Ошонан бер нисә йыл элек «Шура» журналында Х. Үтәкиҙең «Мәржәни хаҡында яуабым» исемле мәҡәләһе донъя күрә (1911, № 27). Шул ваҡыттағы газета биттәрендә ул яҙған хәбәрҙәр йыш осрай. Хәбибназар Үтәки 1921 йылда вафат була.

Мәҡәләнең тексы йыйынтыҡҡа тулыһынса алынды. Библиографияларға был әҫәр инмәгән.— *107.*

**14. Рус тарихи әҙәбиәтендә Мәржәни.**

Ә. Вәлидиҙең был һәм «Мәржәниҙең бер әҫәре тураһын-

да Ҡәйүм Насыри» исемле икенсе мәҡәләһе 1915 йылда Ҡазанда сыҡҡан «Шиһабетдин Мәржәниҙең тәржемәи хәле» исемле йыйынтыҡта баҫылған. Мәржәни тураһында яҙғанда ҡайһы саҡта Ә. Вәлиди олатаһының һөйләгәндәренә таяна.

Библиографияларға был әҫәрҙәр үҙ исемдәре менән ингән. Тик баҫылған йылы (Р. Әмирхановтыҡынан тыш) яңылыш — 1914 тип күрһәтелгән. Мәҡәләнең тексы тулы килеш алынды.— *110.*

**15. Академик Ҡорш хәтирәһе.**

Мәҡәлә 1915 йылда «Ваҡыт» газетаһының 1710-сы һанында баҫылған.

Библиографияларға был әҫәр инмәгән. Тексы бында тулы көйө алынды.— *124.*

**16. «Аҡ юл» журналы хаҡында.**

1915 йылда «Ваҡыт»тың 1765-се һанында баҫылған. Библиографияларға индерелмәгән. Тексы тулы килеш алынды.— *129.*

**17. Башҡорттарға ғаид яңы әҫәр.**

1915 йылда Өфөлә сыҡҡан «Тормош» газетаһында баҫылған. Ул Өфө ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһының рус теле һәм педагогика уҡытыусыһы Виктор Иосифович Филоненконың (1884—1977) 1914 йылда ошо уҡ ҡалала сыҡҡан «Башкиры: Историко-этнографические очерки» тигән китабына тәнҡит. Был мәҡәлә, «Бөрйән башҡорттары араһында» исемле мәҡәләһе кеүек үк, Ә. Вәлидиҙең башҡорт тарихы тураһындағы фекерҙәрен сағылдыра.

Библиографияларға ул «Филоненконың башҡорт тарихына бағышланған әҫәрен тикшереү» тип алынған. Тексы китапҡа тулыһынса инде. — *133.*

**18. Мәржәниҙең бер әҫәре тураһында Ҡәйүм Насыри.**

Шиһабетдин Мәржәниҙең тыуыуына һижри календары буйынса 100 йыл тулыу айҡанлы 1915 йылда Ҡазанда сығарылған «Шиһабетдин Мәржәниҙең тәржемәи хәле» исемле йыйынтыҡта донъя күргән. Шул уҡ йыйынтыҡта «Рус тарихи әҙәбиәтендә Мәржәни» тигән мәҡәләһе лә баҫылған. Йыйынтыҡҡа тексың баш өлөшө генә алынды.

Был әҫәр бөтә библиографияларға ла индерелгән.— *137.*

**19. Мәржәни хаҡында кескенәлегемдә яҙған бәғзе нәмәләр мөнәсәбәте менән.**

1915 йылда «Сөйөмбикә» журналының 6-сы һанында баҫылған. Текст тулы көйө алынды. Был хеҙмәт — Әхмәтзәки Вәлидиҙең тормошон өйрәнеү өсөн бик ҡиммәтле сығанаҡ, сөнки бында уның үҙе һәм бала саҡтағы мөхите хаҡында байтаҡ мәғлүмәт осратабыҙ. Ә. Вәлидиҙең был әҫәрен уның тәүге «Хәтирәләр»е тип атап булыр ине.

Р. Әмирханов библиографияһынан башҡаларына был мәҡәлә инмәгән.— *139*.

**20. Хәлфиндәр (Сәғит. Исхаҡ. Ибраһим).**

Был әҫәр 1913 йылда «Шура»ның 3—5-се һандарында баҫыла. Октябргә тиклемге осорҙа Ә. Вәлиди хеҙмәттәренең бер ни ҡәҙәрен мәғрифәтселәргә бағышлай. Был мәҡәлә шундай әҫәрҙәр рәтенә инә. Ул Сәғит, Исхаҡ һәм Ибраһим Хәлфиндәргә арнап яҙылған. Хәлфиндәр нәҫеле XVIII быуат уртаһынан алып XIX быуат урталарына ҡәҙәр Рәсәй дәүләте мәғарифы өлкәһендә күренекле роль уйнаған.

Был хеҙмәт Рәсәй ғалимдарының хеҙмәттәренә, Ҡазан университеты һәм беренсе Ҡазан гимназияһы архивы материалдарына нигеҙләнеп яҙылған. Ә. Вәлиди: «Хәлфиндәрҙең тәржемәи хәлен тәфтиш итәсәк кемселәргә ынғай булһын өсөн, мәҡәләнең аҙағында дарелфәнүн вә гимназия архивтарындағы материалдарҙың йыл вә номерҙарын дәрж итәбеҙ»,— тип архив документтарының номерҙарын күрһәтә. Хәлфиндәрҙең биографияһын өйрәнеү өсөн, тағы ҡәрҙәштәренең хәтирәләрен йәлеп итеп була, тип тә әйтә. «Ләкин быларҙы мин эшләй алманым», — тип белдерә.

Ә. Вәлиди Хәлфиндәрҙең эшмәкәрлеген Рәсәйҙә көнсығыш телдәрҙе өйрәнеүгә бәйләп тикшерә. Ул Рәсәйҙә был телдәргә ҡарата иғтибар Петр I заманында тыуғанын дөрөҫ билдәләй. Был ҡыҙыҡһыныу Рәсәйҙең Көнсығышҡа йүнәлтелгән сәйәсәтенә бәйле. Ә. Вәлиди әйтмешләй: «Беренсе сәбәп — миссионерлыҡ, икенсеһе — администрация эштәре». Уның фекеренсә, шул уҡ сәбәптәр Екатерина II-не лә Рәсәйҙә көнсығыш телдәрҙе ғилми өйрәнеүҙе башлатырға мәжбүр иткән.

Ә. Вәлидиҙең хәбәр итеүенсә, ул Ибраһим Хәлфиндең «Как просветить татар?» исемле хеҙмәтен тәржемә итергә йыйынған. Әлегә уның тәржемә итеү-итмәүе хаҡында башҡа мәғлүмәтебеҙ юҡ. Хәлфиндәр хаҡындағы мәҡәләһен ул: «1928 йылдың 13 ғинуарында Ибраһим Хәлфиндең вафатына 100 йыл тула. Булһа, хоҙа насип итһә, бәлки, ул ваҡытта бер-бер эш күрермен»,— тип тамамлай. Үкенескә ҡаршы, донъялар үҙгәреп китә. Ә. Вәлидиҙең был һүҙҙәре матур бер теләк кенә булып ҡала.

Уның был мәҡәләһенә ҡарата замандаштары «Шура» журналына байтаҡ рәхмәт хаттары яҙа. Мәхмүт бин Ғатаулла әл-Мөслими исемле берәү: «Әхмәтзәки әфәнде был мәҡәләһе һәм бынан элек нәшер итмеш «Төрк вә татар тарихы» исемле олуғ китабы менән тарих ғашиҡтарына бөйөк һәҙиә эшләне... Милләтебеҙгә бының кеүек хеҙмәт-

тәрен дауам иттерһә ине»,— тигән теләк белдерә. «Хөсәиниә» мәҙрәсәһе шәкерте Ғәбделхәмит әл-Мөслими авторға һәм журнал идараһына рәхмәттәр яҙа. Тағы бер ҡыҙыҡлы хат Әстрхан губернаһы Ямали ауылы уҡытыусыһы Ғөмәр Алашиҙан килә. Ул үҙенең хатында: «Ибраһим Хәлфин йәнәптәренең әҫәре булған «Дастани Сыңғыҙ хан» йәки «Сыңғыҙ намә» рисаләһенең бер нөсхәһе был көндә минең китапханамда бар... Фәҡәт... Вәлиди йәнәптәренең яҙыуынан башҡалығы бар»,— тип хәбәр итә. Бик мөһим информация. Бында, әлбиттә, хаттың авторы ҡулъяҙманың авторы хаҡында яңылышҡан. Ибраһим Хәлфин был әҫәрҙең баҫтырыусыһы ғына. Әммә Ғ. Алашиҙың ҡулындағы нөсхә «фәҡәт ...Вәлиди йәнәптәренең яҙыуынан башҡалығы бар»лығы менән мөһим.

Р. Әмирханов библиографияһынан бүтәндәренә был мәҡәлә «Ҡазан гимназияһы һәм университетында уҡытҡан Хәлфиндәр ғаиләһенең ғилми һәм мәҙәни тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында тикшеренеү» исеме менән ингән.— *145.*

**21. Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы.**

Был — ғөмүми төркиҙәр тарихына бағышланған китап. Ул 1915 йылда баҫылып сыҡҡан. Йыйынтыҡҡа ингән текст шунан алынды. Ә. Вәлидиҙең дөйөм төрки тарихы буйынса китаптары заманында киң танылыу тапҡан. Уның китаптары буйынса мәҙрәсәләрҙә уҡыу программалары төҙөлгән. Мәҫәлән, Ғәйн фи имзалы бер кеше «Мәктәп» журналында баҫылған (1913 йыл, № 12) «Мәшһүр мәҙрәсәләребеҙ хәленән: Ҡазандағы «Мәҙрәсәи Мөхәммәдиә»нең сани ҡыҫымының программаһы» исемле мәҡәләһендә, уның программаһы «Зәки әфәнде Вәлиди китабы буйынса яһалғанға оҡшай, әммә программала был хаҡта һүҙ юҡ» тип әйтеп үтә.

Алыҫ Алма-Ата ҡалаһында уҡытыусы булып эшләгән яҡташыбыҙ, әлегә аҙ билдәле башҡорт Сабирйән әл-Ҡормаши ҙа Ә. Вәлидиҙең был китабына баһа биргән. Әйтергә кәрәк, Сабирйән әл-Ҡормашиҙың «Шура»ла байтаҡ мәҡәләләре донъя күргән. Уларҙың береһе «Милли тарих кәрәк» тип атала. Ул 1914 йылда «Шура» журналының 19-сы һанында баҫылған. Мәҡәләһендә Ҡормаши былай тип яҙа: «Ҡала мәктәптәренең ҡайһы берҙәрендә милли тарихтар уҡытылһа ла, ауыл мәктәптәрендә уның нимә икәнен дә белмәйҙәр. Һәм мәктәптәрҙә дәрес программаһына индереп уҡытырлыҡ тарих китабы үҙе лә майҙанға сыҡҡаны юҡ әле. Хәсән Ғата хәҙрәттәренең тарихы балаларға уҡытып төшөндөрөрлөк түгел. Баттал әфәнденең тарихы ғөмүми төрктөкө түгел. Йәш мөәррих Зәки Вәлиди әфәнденең тарихы яҡшы ғына, күп мәғлүмәтте эсенә ала, ғөмүми

төрктө һөйләгән, рөшди һуңғы синыфтарға яраһа ла, ибтидан дүртенсегә ауыр булыр».

1916 йылда «Шура» журналында (№ 13—14) Ғәлимйән Шәрәфтең «Төрк-татар тарихы. Зәки Вәлиди әҫәре. 1915 йылда Ҡазанда баҫылған» исемле тәнҡит мәҡәләһе донъя күрә. Был бик ентекле яҙылған тәнҡит. Мәҡәләлә Ғ. Шәрәф Ә. Вәлидиҙең хеҙмәтен төрки тарихы буйынса материалдарҙы ғилми ысулдар менән бер системаға килтереүҙең тәүге тәжрибәһе тип атай. Ул Әхмәтзәки Вәлидиҙең Көнсығыш һәм Көнбайыштың тарихи материалдарын берләштереүен ихлас ҡабул итә.

Р. Әмирханов библиографияһынан башҡаларына «Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы»ның 1915 йылғы баҫмаһы ғына ингән. — *169.*



وقت

١٣٢٤ سنه ١١ محرم ده چقا باشلادی.

اورنبورغده چقا تورغان کوندهلك سیاسی و ادبی غزته‌در.

غزته‌نك بهاسی:

يللق ٥ صوم، آلتی آيلق ٢ صوم ٦٠ ت.

اوچ آيلق ١ صوم ٣٥ ت، بر آيلق ٤٥ ت.

بر عدد ٥ تين.

آدریس آلماشدرو ٢٨ تين.

«شورا» مجموعه‌سی

ایله برلکده و بو غزته بیللق ٩ صوم.

آلتی آيلق ٤ صوم ٦٠ تين.

اوچ آيلق ٢ صوم ٤٠ ت، بر آيلق ٨٥ ت.

«شورا» نك بر نومری ٢٥ تين.

چیت مملکت ایچون «وقت» یللق ١٠ صوم. «شورا» ٦ صوملر.

ОБЪЯВЛЕНІЯ впер. текста на 3 квадрата за строку петита 40 к., позади—20 к

Редакція газеты „ВАКТЪ" Оренбургъ.

REDACTION „VAKT" ORENBOURG. RUSSIE.

Ә. Вәлидиҙең «Аҡ юл» журналы хаҡында», «Академик Корш хәтирәһе» исемле мәҡәләләре баҫылған «Ваҡыт» газетаһының беренсе бите.

# بورجان باشقردلری آراسنده

( باشی ۲۰ نچی عددده ).

« باشقرد جرچیلری آراسنده ایك کوبسی بیك کوتارنکی طاوشلی باریتون بولالر. تینورلر دخی کوبره‌ك بولا. بوندای جرچیلر ایگ آغر وفوق العاده یوغاری نوطالرنی بیك ییگل هم طبیعی صورتده آلا آلالر حتی تیمبر جهتندن بالالر طاوشینه یاقنلاشالر.

« باس» اولغان جرچیلر بیك سیره‌ك. جرلاغان وقتده صوگغی نوطانی بیك اوزون ایتوب بیك اعتبار ایله طاوشلرن سلکتوب صوزالر. بو خصوصیتکه یگره‌ك اوزون جرلرنی جرلاغانده دقت ایته‌لر.

« بو باشقردلرنگ جرلرنده کویلرنده مثلا روس جرلرنده اولغان کبی ترقی ایتکان هم تیره‌ن حسیات هم زور لیریزم اثرلری یوق. مونده جرلاوچی بتونله‌ی بر چیتده بی طرف طورا. هم طبیعی موزیقه‌نی طش یاقدن‌غنه قوزغاتقان کبك کورینه. یعنی اول جرلرنگ اوزلرنده‌ده ئاله نیندی تیره‌ن حسیات کورلمگان کبك، جرلاوچیلری‌ده تیره‌ن حسیات آستنده جرلامیلر. بولاردده ئلی چنلاب روحدن چغا طورغان طاوشلر یوق یاکه بولسه‌ده بز آ گلای آلمیمز بولسه کیره‌ك.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең «Шура» журналында баҫылған «Бөрйән башҡорттары араһында» тигән мәҡәләһенән өҙөк.

# ЗАПИСКИ

# ВОСТОЧНАГО ОТДѢЛЕНІЯ

## ИМПЕРАТОРСКАГО

# РУССКАГО АРХЕОЛОГИЧЕСКАГО ОБЩЕСТВА

Основаны барономъ В. Р. Розеномъ.

---

## ТОМЪ ДВАДЦАТЬ ВТОРОЙ.

## 1913—1914.

(СЪ ПРИЛОЖЕНІЕМЪ ДВУХЪ ТАБЛИЦЪ И СЪ ДВУМЯ РИСУНКАМИ ВЪ ТЕКСТѢ).

ПЕТРОГРАДЪ.

ТИПОГРАФІЯ ИМПЕРАТОРСКОЙ АКАДЕМІИ НАУКЪ.

Вас. Остр., 9 лин., № 12.

1915.

Был йыйынтыктың ике һанында Ә. Вәлидиҙең «Восточные рукописи Ферганской области», «О собраниях рукописей в Бухарском ханстве» тигән мәҡәләләре донъя күргән.



## دیوان مختوم قلی

